

# ИЗГЕ ЯҘМА СӘХИФӘЛӘРЕ

# Изге Яҙма сәхифәләре

Изге Яҙманы тәржемә итеү институты
Мәскәү, 2025

**Изге Яҙма сәхифәләре**

Тәржемә өҫтөндә эшләнеләр:

Изге Яҙма текстарының башҡорт
телендәге электрон
һәм аудио яҙмаларын Изге Яҙманы
тәржемә итеү
институты сайтынан алырға була
https://ibt.org.ru/bashkirskiy

ISBN 978-5-93943-370-9

Географик карталар:
©UBS, 1994; ©UBS, 1999; Horace Knowles
© The British & Foreign Bible Society 1954, 1967, 1972

Иллюстрации использованы с разрешения Classic Bible Art, LLC.

© Институт перевода Библии, 2025

# Инеш һүҙ

Ҡәҙерле дуҫым!

Һинең алдыңда – «Балалар өсөн Изге Яҙма» китабының башҡорт теленә тәржемәһе. Китап 1983 йылдан алып 50-нән ашыу телгә ауҙарылып, туғыҙ миллиондан артыҡ дана тираж менән баҫылып сыҡҡан да инде.

Иң тәүҙә «Нимә ул Изге Яҙма?» тигән һорауға асыҡлыҡ индереп китеү урынлы булыр. Уны йыш ҡына Китаптарҙың китабы тип тә әйтәләр. Ни өсөн?

Беренсенән, һәм был иң мөһиме, Тәүрат, Зәбүр, Инжил китаптарын үҙенә туплаған Изге Яҙма ябай ғына китап түгел, ул – кешеләргә төбәлгән Алла Һүҙе. Әммә был Изге Яҙманың барлыҡҡа килеүендә кешенең ҡатнашлығы юҡ тигәнде аңлатмай. Уны Изге Рух тәьҫиренән илһамланған пәйғәмбәрҙәр, мәҙхиәселәр, илселәр яҙған... Уларҙың яҙмалары беҙгә белемебеҙҙе тәрәнәйтергә, сал тарихыбыҙ, боронғо донъяның бөйөк шәхестәре, ғибрәтле хәл-ваҡиғалар менән танышырға ярҙам итә. Изге Яҙмала бөтә һорауҙарға ла әҙер яуаптар юҡ, ләкин унда Алла менән кеше араһындағы рухи мөнәсәбәт, гонаһҡа батҡан әҙәмдең дә Алланан ярлыҡау, күңел тыныслығы таба алыу мөмкинлеге һүрәтләнә, Уға килер юлдар күрһәтелә.

Икенсенән, Изге Яҙманы бар донъяла уҡыйҙар һәм ул бөтә китаптарға ҡарағанда ла күберәк тәржемә ителә. Китап баҫыу станогы уйлап табылғас та, унда беренсе булып нәҡ Изге Яҙма баҫыла. Уның тураһында бер нәмә лә белмәгән, ишетмәгән кешене ер йөҙөнөң иң төпкөл урындарында ғына тап итергә мөмкиндер. Изге Яҙма йә уның айырым китаптары бик күп телдәргә тәржемә ителгән. Мәсихселәр Изге Яҙмала иман сығанағын һәм рухи тормошоноң етәксеһен күрә. Имандан алыҫ торған кешеләр ҙә һәр ваҡыт ундағы сюжеттарға һәм образдарға мөрәжәғәт итә. Музейҙарҙа Изге Яҙмалағы Ибраһим, Дауыт, Мәрйәм, Ғайса Мәсих образдарын һүрәтләгән картина һәм скульптураларҙы осратырға мөмкин.

Өсөнсөнән, төрлө ваҡытта төрлө авторҙар тарафынан яҙылған – Изге Яҙма үҙ эсенә бер нисә тиҫтә китапты алған. Ул ике ҙур өлөштән: Иҫке Ғәһедтән һәм Яңы Ғәһедтән тора.

ИҪКЕ ҒӘҺЕД китаптары иҫке йәһүд һәм өлөшләтә арами телдәрендә яҙылған. Был китаптарҙа һүҙ Ерҙә тормош яралыуын, Алланың донъяны һәм тәүге кешеләрҙе яратыуын хикәйәләүҙән башлана. Әммә әҙәм заты Раббынан баш тартып, Унһыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Шуға ҡарамаҫтан, Аллаһы Тәғәлә кешене Үҙенең һөйөүенән һәм ярҙамынан мәхрүм итмәй, Уға мөрәжәғәт иткәндәрҙе бер ваҡытта ла яуапһыҙ ҡалдырмай. Ерҙәге бөтә халыҡтар араһынан Ул Исраилды һайлап ала, Үҙ халҡы тип иғлан итә һәм уның менән мәңгелек килешеү төҙөй. Исраил халҡының тарихы Иҫке Ғәһед китабының төп темаһы булып тора.

Иҫке Ғәһедкә төрлө китаптар ингән. Был китаптарҙың берәүҙәре Исраил дәүләтенең тарихы, уның батшалары һәм пәйғәмбәрҙәре, башҡа халыҡтарға бәйле хәл-ваҡиғалар тураһында бәйән итә. Уларҙы тарихи китаптар тип йөрөтәләр. Пәйғәмбәрҙәр китаптарында пәйғәмбәрҙәрҙең ялҡынлы фаш итеүҙәре һәм алдан күреп белеүҙәре урын алған: улар халыҡты үҙ Аллаларына тоғролоҡ һаҡларға саҡыра һәм киләсәктә буласаҡ серле хәлдәр тураһында бәйән итә. Иҫке Ғәһедтә шиғри китаптар ҙа урын алған, мәҫәлән, Зәбүр – мәҙхиәләр һәм доғалар китабы; шулай уҡ боронғо аҡыл эйәләренең хикмәтле (тәрән мәғәнәле) һүҙҙәрен еткергән китаптар ҙа бар, миҫалға Сөләймәндең хикмәттәрен килтерергә мөмкин.

Иҫке Ғәһед йөҙәр йылдар һуҙымында төрлө авторҙар тарафынан яҙылғанға, күп ваҡыт ундағы китаптар бер-береһен ҡабатламай. Әммә уларҙың оҡшашлығы шунда: кеше Алланан баш тартҡан осраҡта ла, Алла кешенән йөҙ бормай.

ЯҢЫ ҒӘҺЕД (Инжил тип тә әйтәләр) йыйынтығы хәҙерге йыл иҫәбе менән, йәғни Ғайса Мәсих тыуған йылдан һанағанда, беҙҙең эраның I быуатының икенсе яртыһында боронғо грек телендә яҙылған. Ул Алла Улы Ғайса Мәсихтең тыуыуы, хеҙмәт итеүе, үлеүе һәм яңынан терелеүе кеүек уға тиклем дә, унан һуң да тиңе булмаған хәл-ваҡиғаларҙы, Ғайса нигеҙ һалған имандаштар берҙәмлегенең тәүге аҙымдарын һүрәтләй. Был ваҡиғаларҙың төп әһәмиәте хаҡында Яхъя: «Алла донъяны шул тиклем яратты, хатта Улына инанған бер кем дә һәләк булмаһын, ә мәңгелек тормошҡа эйә булһын өсөн, Ул Үҙенең берҙән-бер Улын бирҙе», – тип белдерә *(Яхъя 3:16)*.

Илсенең был һүҙҙәре ысын мәғәнәһендә һөйөнөслө хәбәр булараҡ ҡабул ителә. Яңы Ғәһедтең беренсе дүрт китабы нәҡ

«Һөйөнөслө Хәбәр» («Инжил» һүҙе шуны аңлата) тип атала һәм донъялағы бөтә мәсихселәрҙең төп китаптары булып һанала, сөнки унда Ғайса Мәсихтең ерҙәге тормошо һүрәтләнә, Уның өйрәтеүҙәре (тәғлимәте) тасуирлана. Был китаптарҙы илселәр Маҫҫайос, Маркус, Лукас һәм Яхъя яҙған. Лукас тарафынан яҙылған «Илселәрҙең ғәмәлдәре» китабында беренсе мәсихселәр тураһында, мәсихселәрҙең төрлө илдәрҙә һәм ҡалаларҙа, имандаштар берҙәмлектәрен булдырып, Һөйөнөслө Хәбәрҙе таратыуҙары, Ғайса Мәсихкә инаныу орлоғон сәсеүҙәре хаҡындағы мәғлүмәт бирелгән.

Инжилгә шулай уҡ Паулустың һәм ҡайһы бер башҡа илселәрҙең (йәғни Ғайса Мәсихтең Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләргә ебәргән шәкерттәре) беренсе мәсихселәргә тәғәйенләп яҙған хаттары ингән. Уларҙа иманлы булыу тураһындағы өгөт-нәсихәттәр бирелгән, мәсихсенең ниндәй тормош алып барырға тейешлеге хаҡындағы вәғәз тупланған. Әле лә, ике мең йылдан һуң да, хаттар үҙ әһәмиәтен юғалтмаған, бөгөнгө йәш кешене күп нәмәгә өйрәтергә һәләтле.

Яңы Ғәһедтең һуңғы өлөшө – Яхъя яҙған «Асылыш» китабында ахыры заман, тарихтың тамамланыуы тураһында бәйән ителә. Был китап өмөт менән тулы: әҙәм башына ниндәй генә бәлә-ҡазалар төшмәһен, улар ҡасан да булһа бер туҡтаясаҡ. Был донъя юҡҡа сығасаҡ, ә уның урынына мәңгелек донъя киләсәк, Изге Яҙмала ул «яңы күк һәм яңы ер» *(Асылыш 21:1)* тип бирелә.

Был китапта Изге Яҙманан өҙөктәр килтерелә һәм ундағы ваҡиғалар тасуирлана. Һәр өҙөктөң аҙағында уларҙың Изге Яҙмалағы ниндәй китаптарҙан алыныуы күрһәтелгән.

Был китап тәү сиратта бәләкәс дуҫтарыбыҙға тәғәйенләнһә лә, уны өлкәндәр ҙә яратып ҡабул итте, шуға ла хәҙер китап тулыландырылды, текстар ҡайтанан мөхәррирләнде. Әлбиттә, был китап Изге Яҙманың бәләкәй генә бер өлөшө, шуға ла Изге Яҙманың бөтә гәүһәрҙәре лә унда инмәгән. Балаларға тәғәйенләнгән «Изге Яҙма сәхифәләре» барыбыҙ өсөн дә Алла Һүҙенә табан беренсе аҙым булыр тип ышанабыҙ. Ә был юл – һис ҡасан тайпылмайынса ғүмер буйы атларға мөмкин булған юл.

*Изге Яҙманы тәржемә итеү институты хеҙмәткәрҙәре*

# ИҪКЕ ҒӘҺЕД

# Донъяның яратылыуы

Иң тәүҙә бер нәмә лә булмаған – күкте ҡара болоттар ҡаплап алғандағылай, бөтә ер йөҙө дөм ҡараңғы булған, яҡтылыҡ әҫәре бөтөнләй күренмәгән. Ул мәлдә күк тә, яҡтылыҡ та, үҫемлек һәм хайуандар ҙа, ошо ҡараңғылыҡты күрер кешеләр ҙә булмаған. Әммә Алла әйләнә-тирәнең ошо килеш ҡалыуын теләмәгән һәм әлеге донъяны бар ҡылған. Бер нәмә лә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәй: беҙҙе уратып алған иҫ китмәле матур донъя Бар ҡылыусының бөйөклөгө һәм аҡылы тураһында һөйләмәйме ни?! Изге Яҙмала Алланың нисек итеп Үҙ Һүҙе менән донъяны бар иткәне һүрәтләнә.

Иң башта Алла күк менән ерҙе ярата.

Ер йөҙө рәүешһеҙ һәм буп-буш була, ә ә ҡараңғыға сумған икһеҙ-сикһеҙ даръя һыуҙары өҫтөндә Алланың рухы һиҙелә.

«Яҡтылыҡ булһын», – ти Алла, һәм яҡтылыҡ була.

Алла яҡтылыҡтың яҡшы икәнен күрә һәм уны ҡараңғылыҡтан айыра.

Алла яҡтылыҡты – «көн», ҡараңғылыҡты «төн» тип атай. Кис етә, таң ата: беренсе көн була.

«Һыуҙар уртаһында көмбәҙ хасил булһын да һыуҙарҙы бер-береһенән айырһын», – ти Алла.

Нәҡ шулай була: Алла көмбәҙҙе бар ҡыла, көмбәҙ аҫтындағы һыуҙарҙы көмбәҙ өҫтөндәгеһенән айыра.

Алла көмбәҙҙе «күк» тип атай. Кис етә, таң ата: икенсе көн була.

«Күк аҫтындағы һыу бер урынға йыйылһын да ҡоро тупраҡ күренһен», – ти Алла, һәм нәҡ шулай була.

Алла ҡоро урынды – «ер», ә йыйылған һыуҙарҙы «диңгеҙ» тип атай. Алла быының яҡшы икәнен күрә.

«Ерҙән үҫемлектәр – орлоҡ бирә торған үләндәр һәм емешендә орлоғо булған ағастар үҫеп сыҡһын», – ти Алла, һәм нәҡ шулай була.

Ер үҫемлектәр – орлоҡ бирә торған үләндәр һәм емешендә орлоғо булған ағастар үҫтерә. Алла быының яҡшы икәнен күрә.

Кис етә, таң ата: өсөнсө көн була.

*БАШЛАНМЫШ 1:1–13*



# Донъяның яратылыуы (дауамы)

«Күк көмбәҙендә көндө төндән айырған яҡтыртҡыстар булһын, улар байрамдарҙы, көндәрҙе һәм йылдарҙы күрһәтһен.
Әйҙә улар күк көмбәҙенән нур һибеп, ер өҫтөн яҡтыртып торһон», – ти Алла, һәм нәҡ шулай була.
Ҙурыраҡы – көн, бәләкәйерәге төн менән идара итһен өсөн, Алла ике ҙур яҡтыртҡыс ярата һәм йондоҙҙарҙы хасил итә.
Ер йөҙөн яҡтыртһын, көн һәм төн менән идара итһен һәм яҡтылыҡты ҡараңғылыҡтан айырып торһон өсөн, уларҙы күк көмбәҙенә урынлаштыра. Алла бының яҡшы икәнен күрә.
Кис етә, таң ата: дүртенсе көн була.
«Һыу тере йән эйәләре менән тулһын, ә ер өҫтөндә күк йөҙө буйлап ҡоштар осоп йөрөһөн», – ти Алла.
Алла һыуҙа балыҡтарҙы һәм мыжғып торған һәр төрлө йән эйәләрен, күктә ҡанатлы ҡоштарҙы бар ҡыла. Алла бының яҡшы икәнен күрә.
«Үрсегеҙ, ишәйегеҙ, диңгеҙ һыуҙарында тулып-мыжғып тороғоҙ; ә ер йөҙөндә ҡош-ҡорт күбәйгәндән-күбәйһен», – тип, Алла уларҙың барыһына ла фатихаһын бирә.
Кис етә, таң ата: бишенсе көн була.
«Ер үҙендә һәр төрлө йән эйәләрен – мал-тыуар, һөйрәлеүсе йәнлектәр һәм кейек-януарҙар барлыҡҡа килтерһен», – ти Алла, һәм нәҡ шулай була.
Алла төрлө кейек-януарҙар, мал-тыуар һәм һөйрәлеүсе йәнлектәр хасил итә. Алла бының яҡшы икәнен күрә.

Бар ҡылыусының ҡөҙрәтле һүҙе менән булдырылған ерҙә тыныслыҡ хөкөм һөрә һәм ер иҫ китмәле матурлыҡҡа күмелә. Әммә яратылмыш тамамланмай әле. Ошо гүзәл донъяла Үҙе менән аралашып йәшәһендәр өсөн, Алла кешеләрҙе бар ҡылырға ҡарар итә.

*БАШЛАНМЫШ 1:14–25*



## Беренсе кешеләрҙең яратылыуы

«Үҙ ҡиәфәтебеҙҙә, Үҙебеҙгә оҡшатып кешене бар ҡылайыҡ. Ул диңгеҙҙәге балыҡтарға, һауалағы ҡоштарға, мал-тыуарға, бөтә ер йөҙөнә һәм ер өҫтөндәге барлыҡ тереклек һәм һөйрәлеүселәргә хаким булһын», – ти Алла.

Шулай ти ҙә Үҙ ҡиәфәтендә, Үҙенә оҡшатып кешене ярата – уларҙы ир менән ҡатын итеп бар ҡыла.

«Үрсегеҙ, ишәйегеҙ, ер өҫтөнә таралығыҙ һәм уға хужа булығыҙ. Диңгеҙҙәрҙәге балыҡтар, һауалағы ҡоштар һәм ерҙәге бөтә йәнлектәр өҫтөнән хакимлыҡ итегеҙ», – тип Алла уларға фатихаһын бирә. «Ер йөҙөндә үҫкән барлыҡ үләндәрҙе, бөтә ағастарҙың емештәрен Мин һеҙгә ризыҡ итеп бирәм. Ә кейектәргә, ҡош-ҡортҡа һәм ерҙәге бөтә йәнлектәргә – эсендә йәне булған һәр нәмәгә – аҙыҡ итеп йәшел үлән бирәм», – тип тә әйтә Алла. Барыһы ла нәҡ Ул әйткәнсә була.

Алла Үҙе бар ҡылған нәмәләрҙең бик яҡшы икәнен күрә. Кис етә, таң ата: алтынсы көн була.

Күк, ер һәм ундағы бөтә нәмә бына шулай яратыла. Етенсе көнгә Алла Үҙенең бар эшен йомғаҡлай. Эшен тамамлағас, етенсе көндә Ул ял итә.

Алла кешеләрҙе күркәм һәм бәхетле итеп ярата. Улар үҙҙәрен Бар ҡылыусыға ла, бер-береһенә лә һөйөү менән баға. Ир кешенең исеме – Әҙәм, ә ҡатындыҡы Һауа була.

Тәрбиәләп алһындар тип, Алла уларға Үҙе бар ҡылған ерҙе тапшыра. Раббы көнсығышта, Ғедән ерендә, ожмах баҡсаһы булдыра һәм, фатихаһын биргәс, Әҙәм менән Һауаны шунда урынлаштыра. Уларға баҡсаны ҡәҙерләргә һәм эшкәртергә ҡуша.

*БАШЛАНМЫШ 1:26–31; 2:7–22*



## Әҙәм менән Һауаның ожмахтан ҡыуылыуы

Әммә Әҙәм менән Һауа Алла һүҙенә ҡолаҡ һалмай, шуға Алла уларҙы ожмахтан ҡыуып сығара. Хәл былай була.

Раббы уларҙы баҡсалағы ағастарҙың емештәрен ашауҙан тыймай, тик яҡшылыҡ менән яуызлыҡты танып белеү ағасынан ғына емеш өҙмәҫкә ҡуша. «Бойороғомдо боҙһағыҙ, үләсәкһегеҙ», – тип киҫәтә Алла ир менән ҡатынды.

Иблис – Аллаға ҡаршы тороусы рух – Әҙәм менән Һауаны харап итергә ниәтләй. Бер көндө ул йылан ҡиәфәтендә Һауа янына килә лә: «Алла һеҙгә ысынлап та ожмах баҡсаһындағы бер ағастың да емешен ашарға рөхсәт итмәнеме?» – тип һорай. «Теләгән ағастың емешен ашай алабыҙ, тик ожмах уртаһында үҫкән ағастыҡын ғына ашауҙан тыйҙы, хатта емештәренә ҡағылырға ла ҡушманы. Юғиһә, үлерһегеҙ, тине», – тип яуаплай уға Һауа. «Юҡ, үлмәйһегеҙ, – ти Иблис. – Әммә Алла шуны белә: был емеште ауыҙ иткән көндө күҙегеҙ асылыр һәм яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың ни икәнен белерһегеҙ, Алланың Үҙе кеүек булырһығыҙ».

Һауа ағастың емештәрен ашағы килеп тороуын, күрер күҙгә күркәм икәндәрен күрә, өҫтәүенә, улар аң-белем биреүе менән дә ҡыҙыҡтыра. Ул ағастан емеш өҙөп ашай, ире Әҙәмгә лә бирә, ул да ашай. Алла Әҙәмгә былай ти: «Ҡатыныңды тыңлап, Мин ашарға ҡушмаған ағастың емешен ауыҙ иткәнең өсөн ер йөҙөнә ҡәһәр һалам; ғүмерең буйы яфаланып табасаҡһың ашар ризығыңды. Үҙең яратылған тупраҡҡа кире ҡайтҡанға тиклем, ашар икмәгеңде тир түгеп табырһың, сөнки һин – тупраҡ һәм яңынан тупраҡҡа әйләнерһең». Раббы Әҙәм менән Һауаны ожмах баҡсаһынан ҡыуа, һәм улар башҡаса унда әйләнеп ҡайта алмай.

Беренсе кешеләрҙең гонаһҡа төшөүе бына шулай була.

*БАШЛАНМЫШ 3:1–23*



## Ҡабил менән Һабил

Әҙәм менән Һауаның ике улы була. Һабил исемлеһе һарыҡ көтә, ә уның ағаһы Ҡабил ер эшкәртә.

Бер ваҡыт Ҡабил үҫтереп алған уңышынан Раббыға бүләк килтерә. Һабил да үҙенең көтөүендәге беренсе тыуған һарыҡ бәрәстәрен Раббыға бүләк итеп алып килә. Раббы Һабилдың бүләген хуш күрә, ә Ҡабилды һәм уның бүләген ҡабул итмәй. Асыуҙан Ҡабилдың йөҙөн һөрөм баҫа. Быны күреп Раббы: «Нимәгә асыуландың? Ниңә улай йөҙөң ҡара янды? – тип һорай. – Әгәр ҡылғаның яҡшылыҡ икән, башыңды юғары тот. Әммә ҡылғаның яҡшы булмаһа, гонаһ, ишек төбөндә боҫоп, һине һағалар. Әммә-ләкин һин уға хужа бул». Әммә Ҡабилдың күңелендә ҡустыһына ҡарата көнсөллөк хисе уяна. Бер көндө улар икәүләп яланға сыға. Шунда Ҡабил Һабилға ташлана һәм уны үлтерә. Ер Һабилдың ҡанынан ҡара-ҡыҙыл төҫкә инә.

Ҡылған гонаһы өсөн Раббы Ҡабилды язаға тарттыра: уға ер йөҙө буйлап берәҙәк һәм ҡасаҡ булып ҡыуылып йөрөү өлөшө төшә.

*БАШЛАНМЫШ 4:2–12*



## Алланың Нухҡа көплө кәмә яһарға ҡушыуы

Йөҙәрләгән йылдар уҙа. Ер йөҙөндә Әҙәм менән Һауаның нәҫеле үрсегәндән-үрсей. Тәүҙә уларҙың күптәре Алланан ҡурҡа, Уның һүҙенән сыҡмай, әммә тора-бара Алла ихтыярына буйһонмай башлайҙар. Нух исемле кеше генә үҙен Бар ҡылыусыға тоғро ҡала, Уның юлында йөрөй. Илсе Петрус Нухты «тәҡүә тормошто вәғәзләүсе» тип атай *(2 Петрус 2:5)*. Нухтың йөрәгендә Алла Рухы йәшәй.

Раббы ер йөҙөндәге кешеләрҙең аҙып киткәнен, бар уйҙары яуызлыҡта булғанын һәм береһененең дә Аллаға тоғролоҡ һаҡламағанын күрә. «Бөтә кешене ер йөҙөнән юҡ итәм, сөнки уларҙы бар ҡылғаныма үкенәм», – ти шул саҡ Раббы.

Бары Нух ҡына Раббының күңеленә хуш килә. Алла Нухҡа былай ти: «Ер йөҙөн кешеләрҙең яуызлығы баҫты, шуға күрә Мин бөтә кешелек донъяһын юҡ итеп, барыһын да ҡырып бөтөрәм. Үҙеңә гөфәр ағасынан көплө кәмә яһа; уны бүлмәләргә бүлеп, эсе-тышына ыҫмала һөртөп сыҡ. Шунан, ерҙәге бөтә тере йәнде юҡ итер өсөн, ергә туфан ҡалҡытырмын. Әммә һинең менән Мин килешеү төҙөйөм: улдарың, ҡатының, килендәрең менән көплө кәмәгә ин».

*БАШЛАНМЫШ 6:5–18*



## Туфан ҡалҡыуы

Нух барыһын да Алла ҡушҡанса эшләй. Кәмә әҙер булғас, Раббы уға былай ти: «Бөтә ғаиләң менән кәмәгә ин, сөнки күрәм: һин генә Минең алда тоғро булдың. Ер йөҙөндә тоҡомдары һаҡланһын өсөн, хәләл хайуандарҙың һәр төрөнән аталы-инәле етешәрҙе, хәрәм хайуандарҙың һәр төрөнән аталы-инәле берәрҙе, шулай уҡ ҡоштарҙан аталы-инәле етешәрҙе үҙең менән ал. Ете көндән һуң Мин ергә ҡырҡ көн, ҡырҡ төн буйына ямғыр яуҙырырмын; Үҙем бар ҡылған бөтә нәмәне ер йөҙөнән юҡ итермен».

Нух барыһын да Раббы ҡушҡанса эшләй. Ҡатыны, улдары һәм килендәре менән бергә кәмәгә инә, үҙе менән аталы-инәле етешәр хәләл, аталы-инәле икешәр хәрәм йән эйәһен ала. Барыһы ла урынлашҡас, улар артынан ишекте Раббы Үҙе ябып ҡуя. Ете көндән ҡойма ямғыр башлана, ул ҡырҡ көн, ҡырҡ төн дауам итә. Һыу шул тиклем ныҡ күтәрелә, кәмә һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөй башлай, бейек тауҙар даръя аҫтында ҡала. Ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәһе – кешеләр ҙә, мал-тыуар ҙа, һәр төрлө тереклек, ҡош-ҡорт – барыһы ла ҡырыла, ерҙәге бөтә нәмә юҡҡа сыға. Нух һәм уның менән кәмәлә булғандар ғына иҫән ҡала.

*БАШЛАНМЫШ 7:1–23*



## Туфандың баҫылыуы

Туфан йөҙ илле көн дауам итә. Алла Нухты һәм уның менән кәмәлә булған хайуандарҙы онотмай, Ул ергә ел ебәрә. Ямғыр туҡтай, һыу әкренләп ҡайта башлай. Нухтың кәмәһе Арарат тауҙарының түбәһенә килеп терәлә. Ҡырҡ көндән һуң Нух, ерҙә һыу ҡайтҡанмы икәнен белергә, кәмәнең тәҙрәһенән ҡоҙғондо осороп ебәрә. Ер өҫтөндәге һыу ҡороғанға тиклем, ҡоҙғон бер килеп, бер китеп осоп йөрөй. Унан һуң Нух күгәрсенде осора. Әммә күгәрсен дә әйләнеп ҡайта – ер һаман һыу аҫтында була әле. Ете көн үткәс, Нух күгәрсенде яңынан осороп ебәрә. Был юлы күгәрсен кәмәгә суҡышына зәйтүн япрағы эләктереп ҡайта. Нух туфандың баҫылыуын шулай аңлай.

Нух тағы ете көн көтә лә күгәрсенде йәнә сығарып ебәрә. Был юлы ҡош кәмәгә әйләнеп ҡайтмай. Шунан инде Нух ишекте аса һәм ер өҫтөнөң ҡоро икәнен күрә. «Ҡатының, улдарың һәм килендәрең менән кәмәнән сыҡ; үҙең менән булған бөтә тере йән эйәләрен дә сығар. Улар ер йөҙөндә таралһын, үрсеһен һәм ишәйһен», – ти Алла Нухҡа.

*БАШЛАНМЫШ 7:24 – 8:17*



## Йәйғор – төҙөлгән килешеү билдәһе

Нух ғаиләһе менән кәмәнән сыға. Үҙе менән булған тере йән эйәләрен дә сығара. Хайуандар бөтә ер буйлап тарала, ҡоштар ҙа тирә-яҡҡа осоп китә.

Нух таштарҙан ҡорбан усағы эшләй. Хәләл һаналған хайуан һәм ҡоштарҙың бөтә төрөнән Аллаға ҡорбан килтерә. Уның ҡорбаны Раббының күңеленә хуш килә, шуға ла: «Башҡаса кешеләр арҡаһында ерҙе ҡәһәрләмәм. Кеше күңелендә яуызлыҡ бала сағынан уҡ була, тереклекте бүтәнсә юҡҡа сығармам. Бынан ары сәсеү менән ураҡ, һыуыҡ менән эҫе, йәй менән ҡыш, көн менән төн һәр ваҡыт булыр», – тип хәл итә.

Алла Нухҡа һәм уның улдарына фатихаһын бирә: «Мин һеҙҙең менән, киләсәк быуындарығыҙ һәм кәмәнән сыҡҡан бөтә тере йән эйәләре менән килешеү төҙөйөм: бынан һуң бар тереклек туфан һыуында һәләк булмаҫ; ер йөҙөн бушлыҡҡа әйләндергән туфан бер ваҡытта ла ҡабатланмаҫ. Болоттарға эленгән йәйғор һеҙҙең менән һәм ерҙәге йән эйәләре менән төҙөгән килешеүемдең билдәһе булып торор. Ергә ямғыр болоттары ебәрһәм, йәйғор ҡалҡыр, һәм тап шул мәлдә бөтәһе менән төҙөгән килешеүемде иҫемә төшөрөрмөн. Ер йөҙөндә йәшәгән бар тереклек менән төҙөгән килешеүемдең билдәһе бына ошо».

*БАШЛАНМЫШ 8:18–22; 9:8–17*



## Бабил манараһы

Туфан уҙғандан һуң, ерҙәге бөтә халыҡтар күп нәҫелле Нухтың улдарынан тармаҡлана. Әммә туфандан һуң да кешеләр яҡшы яҡҡа бик үҙгәрмәгән булып сыға.

Ул замандарҙа ер йөҙөндә барыһы ла бер телдә генә һөйләшә. Бер көндө улар, бергә йыйылышып, үҙ-ара: «Ер йөҙө буйлап таралышып бөтмәйек тиһәк, әйҙәгеҙ, үҙебеҙгә ҡала төҙөп, күккә олғашҡан манара күтәрәйек, шуның менән үҙебеҙҙе данға күмербеҙ», – тип һүҙ ҡуйыша. Әҙәм балалары төҙөп ятҡан ҡаланы һәм манараны ҡарарға тип, Раббы ергә төшә. «Былар барыһы ла бер халыҡ, телдәре лә бер; улар ниәттәрен тормошҡа ашырмайынса туҡтамаясаҡ! Шуға ергә төшәйек тә телдәрен бутайыҡ, һөйләшкәндә береһе әйткәнде икенсеһе аңламаһын», – ти Ул. Был урын нәҡ шулай – Бабил, йәғни «бутау» тип атала.

Раббы әҙәм балаларын бөтә ер йөҙө буйлап тарата һәм шул арҡала улар үҙҙәренең ҡалаһын төҙөп бөтә алмай.

*БАШЛАНМЫШ 11:1–9*



## Ибраһим

Был һүрәттә Ибрам төшөрөлгән. Һуңғараҡ Алла уға Ибраһим исемен бирә, был яңы исем «күп халыҡтарҙың атаһы» тигәнде аңлата. Ибраһим Раббыға ысын күңелдән ышана, Уға тоғро була һәм Уның һүҙенән сыҡмай. Алла уны «дуҫым» тип атай. Изге Яҙмала Раббы беҙгә лә: «Бойороҡтарымды үтәһәгеҙ, һеҙ – Минең дуҫтарым», – тигән *(Яхъя 15:14)*.

Бер ваҡыт Раббы Ибраһимға былай ти: «Ер-һыуыңды, туғандарыңды, атаң йортон ҡалдыр ҙа Мин күрһәткән ергә кит. Һинән бөйөк халыҡ тыуҙырырмын, фатихамды биреп, исемеңде шөһрәтле итермен; һиңә биргән фатиханы башҡалар ҙа уртаҡлашыр. Һиңә берәү фатихаһын бирһә, Мин дә уға фатихамды бирермен, һине яманлағандарға ҡәһәремде төшөрөрмөн. Ер йөҙөндәге барса халыҡтар һинең аша фатихамды алыр».

Ибраһим барыһын да Раббы ҡушҡанса эшләй. Ул ҡатыны Сараны, бер туған ҡустыһының улы Лутты, туплаған барлыҡ мөлкәтен ала ла, бөтә хеҙмәтселәрен эйәртеп, Раббы күрһәткән Ҡәнғән еренә юл тота.

Ҡәнғәнгә килеп етеп, Море имәнлеге янында туҡталалар. Һәм шунда Раббы Ибраһимға күренеп: «Был ерҙәрҙе Мин һинең тоҡомоңа бирермен», – тип әйтә.

*БАШЛАНМЫШ 12:1–7*



## Ибраһим менән Лут

Ибраһим һәм уның менән булған кешеләр, Раббы күрһәткән Ҡәнғән ере буйлап бара торғас, Бейт-Илгә килеп етә. Шул урында туҡтарға ҡарар итәләр.

Ибраһим бик байыға: алтын-көмөшө лә, мал-тыуары ла күп була. Бер туған ҡустыһының улы Луттың да үҙ сатырҙары, эре һәм ваҡ малы була. Уларҙың мал-мөлкәте шул тиклем ишәйә, бергә йәшәр өсөн ер етмәй башлай. Көтөүселәре араһында ығы-зығы тыуа. Быларҙың барыһын да күреп торған Ибраһим Лутҡа: «Беҙ бит туғандар, – тип әйтә. – Икебеҙ араһында ла, көтөүселәребеҙ араһында ла ыҙғыш-талаш булырға тейеш түгел. Бөтә ер алдыңда йәйрәп ята – айырылып кит һин минән. Әгәр һин һулға китһәң, мин – уңға, һин уңға йүнәлһәң, мин һулға китермен».

Лут, тирә-яҡты байҡап сыҡҡандан һуң, Иордан үҙәненең бик уңдырышлы һәм яҡшы һуғарыулы ер икәнен күрә. Ул үҙенә тап ошо ерҙәрҙе һайлай һәм, Ибраһимдан айырылып, Содом ҡалаһына тиклем үҙенең сатырҙарын ҡора. Был ерҙәрҙә боҙоҡ күңелле, Раббы ҡаршыһында бик гонаһлы кешеләр йәшәгән була.

*БАШЛАНМЫШ 13:1–18*



## Алланың Ибраһимға вәғәҙә биреүе

Лут айырылып киткәс, Раббы Ибраһимға былай ти: «Үҙең баҫып торған урындан төньяҡҡа һәм көньяҡҡа, көнсығышҡа һәм көнбайышҡа күҙ һал. Алдыңда йәйрәп ятҡан ошо ерҙәрҙе Мин һиңә һәм һинең киләсәк тоҡомдарыңа мәңгегә бирәм. Тоҡомондо ерҙәге ҡом һымаҡ иҫәпһеҙ-һанһыҙ итермен. Әгәр берәйһе ерҙәге ҡом бөртөктәрен һанап бөтөрә алһа, нәҫелеңдең һаны ла билдәле булыр».

Ибраһим Мамре имәнлеге тигән ергә килеп төпләнә һәм шул ерҙә Раббыға ҡорбан усағы яһай.

Күпмелер ваҡыттан һуң Алла Ибраһимға яңынан күренә. «Мин – һинең Ҡалҡаның; һиңә бүләгем мул булыр», – ти Ул. «Эй, Раббы Хакимым! Миңә нимә бирмәксеһең? Бала атаһы була алманым. Һин миңә нәҫел насип итмәгәс, өйөмдәге бер хеҙмәтсем вариҫ була инде», – ти Ибраһим Уға яуап итеп. «Юҡ, ул һинең вариҫың булмаясаҡ. Үҙ балаң вариҫың булыр, – ти ҙә Раббы, Ибраһимды сатырҙан алып сығып, былай ти: – Күк йөҙөнә ҡара ла, булдыра алһаң, ундағы йондоҙҙарҙы һана. Һинең нәҫелең дә шул тиклем күп булыр».

Ибраһим Раббының һүҙҙәренә ышана һәм Раббы быны тәҡүәлек тип ҡабул итә.

«Ҡатының Сараяны инде Сарая тимә, бынан һуң уның исеме Сара булыр. Мин уға фатихамды бирәм: унан һинең бер улың тыуыр. Уға фатиха ҡылам һәм ул халыҡтарҙың әсәһе булыр, уның нәҫеленән батшалар сығыр», – ти Алла Ибраһимға.

*БАШЛАНМЫШ 13:14–16; 15:1–6; 17:15–16*



## Алла фәрештәләренең Ибраһим янына килеүе

Бер көн көндөҙгө эҫелә Ибраһим үҙенең сатыры алдында ултыра. Ҡапыл ул ҡаршыһына килеп баҫҡан өс юлсыны күрә. Ибраһим уларҙың Раббы ебәргән фәрештәләр булыуын аңлай. Юлсыларҙы саҡырып индереп, ҡунаҡ итә. Ашап алғас, ирҙәрҙең береһе: «Киләһе йыл ошо уҡ ваҡытта мин һиңә тағы киләм. Ул мәлгә ҡатының Сараның улы тыуған булыр», – ти. Сара быны ишеткәс: «Ошо йәшемдә бындай һөйөнөскә ирешә буламмы?» – тип эстән генә көлөп ҡуя.

Әммә Раббы Ибраһимға: «Сара ниңә көлдө? Раббының ҡөҙрәтенән килмәҫ эш бармы? Икенсе йыл ошо уҡ ваҡытта мин һиңә тағы киләм. Ул мәлгә ҡатының Сараның улы тыуған булыр», – тип әйтә.

Билдәләнгән көн килеп еткәс, Раббы Үҙенең һүҙҙәрен бойомға ашыра, сөнки Ул биргән вәғәҙәләрен һәр ваҡыт үтәй һәм Уның ҡөҙрәтенән килмәгән бер эш тә юҡ.

*БАШЛАНМЫШ 18:1–19; 21:1–3*



## Содом һәм Ғамора ҡалаларының һәләкәте

Содом, Ғамора, Адма һәм Севоим ҡалаларын күктән яуған ут ямғыры тулыһынса юҡ итә. Ул хәл былай була. Был ҡала кешеләренең аҙғынлыҡҡа һәм гонаһҡа батыуы Алланың асыуын килтерә. Алла Содомды юҡҡа сығарасағын әйткәс, Ибраһим, гонаһлы был ҡаланы ярлыҡауын һорап, Аллаға ялбара башлай. Алла, унда ун ғына тоғролоҡло кеше табылһа ла, ҡаланы харап итмәҫкә һүҙ бирә. Әммә Содомда хатта ун тоғролоҡло кеше лә булмай сыға.

Һәм бына ни була. Содомда ҡатыны һәм ике ҡыҙы менән Лут исемле бик тоғролоҡло кеше йәшәй. Алла ике фәрештәһен кеше ҡиәфәтендә әлеге ҡалаға ебәрә. Был хәл кис көнө була. Ҡунаҡсыл Лут, фәрештә икәндәрен белмәйенсә, уларҙы өй түренә саҡыра.

Йоҡларға ятып та өлгөрмәйҙәр, Содомдоң бөтә төбәктәренән йыйылған халыҡ – йәше лә, ҡарты ла Луттың өйөн уратып ала. Хужаны тышҡа саҡырып: «Һиңә ҡунырға ингән кешеләр ҡайҙа? Уларҙы бында сығар», – тип талап итәләр. Лут, ишеген ябып, тупһаға сығып баҫа. «Ағай-эне, был әҙәмдәр – минең ҡунаҡтарым, уларға бер яуызлыҡ та ҡылмағыҙ», – тип үтенә ул халыҡтан. Әммә Содом кешеләре: «Һин, килмешәк, беҙгә аҡыл өйрәтмәксе булаһыңмы? Беҙ һинең үҙеңдең кәрәгеңде бирербеҙ», – тип, Лутты ҡыҫырыҡлап, ишекте емерергә уйлайҙар. Шул ваҡыт юлсылар Лутты өй эсенә тартып алалар ҙа ишекте бикләп ҡуялар, ә өй алдындағы кешеләрҙең күҙҙәрен һуҡырайталар. Юлсылар Лутҡа: «Беҙ был ҡаланы юҡ итәбеҙ, сөнки Раббы халыҡтың яуызлығы сиктән ашҡанын күрә», – тиҙәр. Улар Лутты, уның ҡатынын һәм ике ҡыҙын, үҙҙәре үк етәкләп, ҡаланан сығарып ебәрә. «Артыңа әйләнеп ҡарама, тауҙарға ҡарай йүгер, юҡһа һәләк булырһың», – тип ҡуша фәрештәләрҙең береһе.

Лут Соғарға килеп еткәндә, ер өҫтөнә ҡояш сыға. Шул мәлдә Раббы Содом менән Ғамораға ямғыр һымаҡ итеп утлы көкөрт яуҙыра. Был ҡалаларҙы һәм уның тирә-яғын юҡҡа сығарып, барлыҡ халҡын һәм бөтә үҫемлектәрен һәләк итә. Китеп барғанда Луттың ҡатыны артына әйләнеп ҡарай ҙа тоҙ бағанаһына әүерелә.

*БАШЛАНМЫШ 19:1–26; ҠАНУН 29:23*



## Ибраһимдың Исхаҡты ҡорбанға килтереүе

Ибраһимға Алланың өс фәрештәһе килгәнгә бер йыл үтеүгә Сараның улы тыуа. Ибраһим уға Исхаҡ тип исем ҡуша.

Исхаҡ үҫә төшкәс, Раббы Ибраһимдың Уға ни тиклем ышанғанын һәм тоғро булғанын һынап ҡарарға уйлай. «Исхаҡты, яратҡан берҙән-бер улыңды, ал да Морияһ еренә бар. Унда, Мин күрһәткән бер тауҙа, улыңды ҡорбанға килтер», – ти уға Алла.

Ибраһимға Алланың ҡушҡанын үтәү көс етмәҫлек эш була. Әммә Уға ҡаршы бер генә һүҙ ҙә әйтмәй. Иртәгәһен иртә менән тороп, ҡорбан усағы өсөн әҙерләгән утынын ишәгенә һалып ала; ике хеҙмәтсеһен, улы Исхаҡты эйәртеп, Раббы күрһәткән ергә юллана.

Атаһының ниндәй ҡорбан килтерергә тейешлеген белмәгән Исхаҡ: «Атай! Беҙҙең ҡуҙыбыҙ ҙа, утыныбыҙ ҙа бар, ә ҡорбан өсөн һарыҡ бәрәсе ҡайҙа һуң?» – тип һорай. «Ҡорбан өсөн бәрәсте Алла Үҙе хәстәрләр, улым», – тип яуаплай уға Ибраһим.

Алла күрһәткән урынға килеп еткәс, хеҙмәтселәрен аҫта ҡалдырып, Исхаҡ менән тауға менәләр. Унда Ибраһим ҡорбан усағы эшләй. Алып килгән утынын ҡорбан усағына теҙеп һалғас, аяҡ-ҡулын бәйләп, Исхаҡты шул утын өҫтөнә ятҡыра. Шул ваҡыт күктән Раббы фәрештәһе: «Ибраһим! Ибраһим! – тип өндәшә. – Раббы былай тине: улыңа ҡул күтәрмә, уға бер ни ҙә эшләмә. Хәҙер беләм: һин Алланан ҡурҡаһың; Минән берҙән-бер улыңды ла йәлләмәнең. Мин һиңә фатихамды бирәм һәм нәҫел-тоҡомоңдо күктәге йондоҙҙар, диңгеҙ буйындағы ҡом бөртөктәре ише ишәйтәм. Мине тыңлағаның өсөн ер йөҙөндәге бөтә халыҡтар һинең тоҡомоң аша фатиха алыр».

*БАШЛАНМЫШ 22:1–18*



## Рабиға

Күпмелер ваҡыт уҙа. Ибраһим ҡартая, улы Исхаҡ үҫеп буй еткерә. Бер көн Ибраһим тоғро бер хеҙмәтсеһен янына саҡырып ала ла: «Минең тыуған ерем Месопотамиялағы Арам-Наһараимға барып, Исхаҡҡа ҡатын алып ҡайт», – тип ҡуша. Хеҙмәтсе Месопотамияға, Ибраһимдың ҡустыһы Нахор йәшәгән ҡалаға юлға сыға.

Ҡалаға килеп еткәс ул, Исхаҡҡа тәғәйенләнгән ҡыҙҙы табырға ярҙам итеүен һорап, Раббыға доға ҡылырға тотона: «Йә Аллам! Бөгөн юлымды хәйерле ит, хужамды ярҙамыңдан ҡалдырма! Әле мин ҡала ҡыҙҙары һыуға йөрөгән ҡоҙоҡ янында торам. „Көршәгеңдән һыу эсергә рөхсәт итһәңсе“, – тигәнемә: „Эс. Ҡана, мин дөйәләреңде лә һуғарайым“, – тип яуаплаған ҡыҙ Һин ҡолоң Исхаҡҡа насип иткән ҡатын булһын. Хужама мәрхәмәтле булыуыңды ана шулай белермен».

Юлсы һүҙҙәрен әйтеп тә бөтмәй, ҡоҙоҡ янына Рабиға исемле бик һылыу ҡыҙ килә. Ул көршәгенә һыу ала ла кире борола. Шул саҡ Ибраһимдың хеҙмәтсеһе ҡыҙҙың ҡаршыһына йүгереп сыға ла: «Миңә көршәгеңдән һыу эсер әле!» – тип үтенә. «Эсә күр, әфәндем», – тип яуаплай ҡыҙ һәм, хеҙмәтсегә һыу биргәс: «Хәҙер мин дөйәләреңде лә һуғарам, әйҙә, туйғансы эсһендәр», – ти. Раббының үҙ юлын хәйерле иткәнме, юҡмы икәнен аңларға теләп, хеҙмәтсе ҡыҙҙың дөйәләргә һыу ташып эсергәнен һүҙһеҙ генә күҙәтеп тора башлай. Шунан һуң: «Кем ҡыҙы һин? – тип һорай. – Атаң йортонда ҡунып сығырлыҡ урын булмаҫмы икән?» Рабиға үҙенең Ибраһимдың ҡустыһы Нахорҙың улы Беҫуилдың ҡыҙы булыуын әйтә. Был һүҙҙәрҙе ишеткән хеҙмәтсе, тура Ибраһимдың ҡустыһының өйөнә алып килгәне өсөн ергә тиклем башын эйеп, Раббыны данлай.

Беҫуилдың өйөнә килгәс, барыһына ла Ибраһимдың уны берҙән-бер улына ҡатын алып ҡайтырға тип тыуған еренә, туғандары янына ебәреүен һөйләп бирә. Ҡыҙҙың атаһы менән әсәһе: «Ошо кеше менән китәһеңме?» – тип һорай. Рабиға ризалығын белдерә. Бүтән туғандары ла ҡаршы булмай һәм ҡыҙға фатиха биреп оҙатып ҡалалар.

*БАШЛАНМЫШ 24:1–60*



## Исхаҡ менән Рабиға

Рабиға менән Ибраһимдың хеҙмәтсеһе, дөйәләрҙә оҙон юл үткәндән һуң, ниһайәт, Исхаҡ йәшәгән илгә килеп етәләр.

Кисен яланда йөрөп йәтҡанда, Исхаҡ Рабиға ултырған дөйәләрҙең етеп килгәнен абайлай. Исхаҡты күреп, Рабиға ла дөйәһенән төшә. Хеҙмәтсенән: «Ялан буйлап ҡаршыбыҙға килгән кеше кем ул?» – тип һорай. «Был минең хужам», – тип яуаплай хеҙмәтсе. Ул Исхаҡҡа үҙенең сәфәре тураһында барыһын да һөйләп бирә.

Исхаҡ Рабиғаға өйләнә. Раббы уларға ике ул бүләк итә, малайҙарға Ғаяз менән Яҡуп тип исем ҡушалар. Игеҙәктәрҙең Ғаязы алданыраҡ тыуа, шуға ла беренсе бала булыу хоҡуғын ала.

Балалар үҫеп етә. Ғаяз гел ялан-ҡырҙар ҡыҙыра, мәргән һунарсы булып китә. Яҡуп иһә өйөнән сығып йөрөмәгән тыныс егет булып үҫә. Исхаҡ Ғаязды яҡыныраҡ күрә, улы тотоп алып ҡайтҡан ҡошҡорт менән һыйланырға ярата. Ә Рабиғаға Яҡуп ҡәҙерлерәк була.

*БАШЛАНМЫШ 24:63–67; 25:24–28*



## Яҡуптың атай фатихаһын алыуы

Ҡартайған көнөндә Исхаҡтың күҙҙәре күрмәй башлай. Үлер алдынан ул баш балаһы Ғаязға фатихаһын бирергә теләй. Шул ниәт менән улын янына саҡырып ала, ҡыр йәнлегенән яратҡан ризығын бешерергә ҡуша. Шунан һуң фатихаларға һүҙ бирә.

Быны Рабиға ишетеп тора һәм Яҡупҡа барыһын да һөйләп бирә. Атай фатихаһын Ғаяз түгел, ә Яҡуп алыуын теләй Рабиға. Шуға Исхаҡты алдарға уйлай. Ғаяз ҡыр йәнлеге ауларға киткәс, Яҡупты көтөүгә ебәрә, ике кәзә бәрәсе тотоп алып ҡайтырға ҡуша. Кәзә итенән Исхаҡтың яратҡан аҙығын бешерә. Шунан Ғаяздың иң яҡшы кейемдәрен алып, Яҡупҡа кейҙерә. Ғаяздың тәне йөнлө була, күҙе насар күргән атаһы Яҡупты тотоп ҡарай ҡалһа тип, унын ҡулдарын, муйынын кәзәнең тиреһе менән урай.

Рабиға әҙерләгән аҙыҡты алып, Яҡуп атаһы янына инә. «Атай, – ти ул. – Әйткәнеңде эшләнем. Мин аулаған йәнлек итенән ауыҙ ит, шунан миңә фатихаңды бирерһең». Атаһы уны яҡыныраҡ саҡыра: «Кил әле, улым, яҡыныраҡ, һин Ғаязмы, түгелме – һыйпап ҡарайым».

Исхаҡ улын ҡапшап: «Тауышы – Яҡуптыҡы, ә ҡулдары – Ғаяздыҡы», – тип аптырай. Исхаҡтың кәзә тиреһе менән уралған ҡулдары Ғаяздыҡына ныҡ оҡшаған була, шуға атай кеше уны танымай. Шунан һуң Исхаҡ ултырып ашай, ә аҙаҡ улына фатиха һүҙҙәрен әйтә.

Бына ошондай ялған юл менән Яҡуп Ғаязға тәғәйен атай фатихаһын ала. Ғаяздың ҡустыһына йәне көйә, шуға ла уны үлтерергә ниәтләй.

*БАШЛАНМЫШ 27:1–41*



## Яҡуптың төшө

Рабиға яратҡан улы Яҡупты Ғаяздың үлтерергә йыйынғанын белеп ҡала. Шунда уҡ был турала Яҡупҡа еткерә һәм уға Месопотамияла йәшәгән Лаван исемле ағаһы янына ҡасырға, Ғаяздың ярһыуы баҫылғансы шунда йәшәп торорға кәңәш итә.

Яҡуп китергә булғас, Исхаҡ уны янына саҡырып ала, үҙҙәре йәшәгән Ҡәнғән ҡыҙына өйләнмәҫкә, кәләште Месопотамияла, Рабиғаның тыуған илендә табырға бойора. Улына фатихаһын биреп: «Сикһеҙ ҡөҙрәт Эйәһе Алланың рәхмәте төшһөн һиңә! Ул Ибраһимға биргән фатихаһын һиңә һәм һинең тоҡомоңа ла бирһен – шул саҡта үҙең килмешәк булып йәшәгән ошо ергә, Алла Ибраһимға биргән ергә, хужа булырһың!», – ти. Шунан һуң Яҡуп Месопотамия ерҙәренә юлға сыға.

Яҡуптың юлы әллә нисә көндәргә һуҙыла. Бер көн ул төнгөлөккә асыҡ һауа аҫтында туҡтай. Баш аҫтына таш һалып, ҡаҡ ергә йоҡларға ята. Алла уға шундай матур төш ебәрә. Төшөндә ул күккә тиклем олғашҡан баҫҡыс күрә, Алла фәрештәләре уның буйлап менеп-төшөп йөрөй, имеш. Унда торған Раббы Яҡупҡа: «Мин һинең ата-бабаң Ибраһимдың Аллаһы, Исхаҡ Аллаһы. Әле үҙең ятҡан ерҙе Мин һиңә һәм һинең тоҡомоңа бирәм. Ҡайҙа ғына барһаң да, Мин һинең менән булырмын, һаҡлап йөрөтөрмөн», – ти, имеш.

Яҡуп уянғас: «Хаҡтыр бына, Раббы булған урын да баһа был, ә мин шуны белмәгәнмен дә! Был бит Алла йорто, күк ҡапҡаһы», – ти. Шунан яҫтап ятҡан ташты, үҙе менән булған хәл иҫтәлеге итеп, баҫтырып ҡуя, Раббыға нәҙер әйтә: «Әгәр Алла мине ташламаһа, юлда мине һаҡлап, икмәк һәм кейем бирһә, әгәр атам йортона иҫән-аман ҡайта алһам, Раббы минең Аллам булыр. Мин ҡуйған таш бағана Алла йортона әйләнер һәм Һин, Алла, миңә насип итәсәк бөтә нәмәнең унынсы өлөшөн Һиңә бирермен».

*БАШЛАНМЫШ 27:41–46; 28:1–5, 10–22*



## Яҡуптың Рәхиләне осратыуы

Яҡуп Месопотамияға табан юлын дауам итә һәм матур, иркен көтөүлектәр күп булған урынға барып сыға. Ул бер ҡоҙоҡ янында туҡтай, ҡоҙоҡтоң ауыҙы ҙур таш менән ябылған була. Бөтә көтөүҙәр йыйылғас, көтөүселәр был ташты шыуҙырып, һарыҡтарҙы һуғарған да ҡоҙоҡто яңынан ябып ҡуйған.

Ҡоҙоҡ янында һыулауға килгән өс һарыҡ көтөүе ята. Яҡуп көтөүселәрҙән: «Һеҙ Нахор улы Лаванды белмәйһегеҙме?» – тип һорай. «Беләбеҙ, – тип яуаплай тегеләр. – Ана уның ҡыҙы Рәхилә һарыҡтары менән килә». Ошо мәлдә үҙе көткән һарыҡтарын ҡыуып, Рәхилә килеп етә. Был көтөүҙәр Яҡуптың әсәһенең ағаһы Лавандыҡы була.

Яҡуп, ҡоҙоҡ ауыҙындағы ташты шыуҙырып, Рәхиләнең һарыҡтарын һуғара. Шунан ҡыҙҙы үбеп, ҡыуанысынан илап ебәрә, Лаван менән туған булыуҙарын әйтә. Быны ишеткәс, Рәхилә атаһына шатлыҡлы хәбәрҙе еткерергә өйөнә йүгереп ҡайтып китә. Яҡуп тураһында ишеткәс, Лаван уға ҡаршы йүгереп сыға, ҡосаҡлап үбеп ала һәм өйөнә алып инә.

Яҡуп ағаһының өйөндә йәшәй башлай һәм уның һарыҡтарын көтә. Ул Рәхиләне кәләш итеп алыр өсөн Лаванға ете йыл эшләй. Ҡыҙҙы шул тиклем ярата – хатта был ете йыл уға бер нисә көн кеүек кенә булып тойола. Лаван уға кейәүгә ике ҡыҙын да – Лиәне лә, Рәхиләне лә бирә. Ошонда, Месопотамия ерендә, Яҡуптың ун бер улы һәм бер ҡыҙы донъяға килә, аҙағыраҡ Ҡәнғәндә тағы бер улы тыуа.

Яҡуп байығып китә. Ҡатындары һәм балалары менән сатырҙа ғүмер итә. Уның ҡолдары һәм ҡолиәләре, шулай уҡ мал-тыуары – һарыҡтары, дөйәләре, ишәктәре бик күп була.

*БАШЛАНМЫШ 29:1–28*



## Яҡуптың Алла менән көрәшеүе

Бер ваҡыт Раббы Яҡупҡа Месопотамиянан китергә, үҙенең тыуған яҡтарына, Ҡәнғән иленә ҡайтырға бойора. Яҡуп ҡатындары менән балаларын, бөтә булған мөлкәтен алып, ҡайтыр юлға сыға. Ғаяз һаман уға асыу тотамы-юҡмы икәнен белмәгән Яҡуп, ағаһының күңелен йомшартыу ниәтенән, уға күп итеп бүләктәр ебәрергә ҡарар итә.

Ҡайтып барғанда Яҡуптың каруаны йылға буйына килеп сыға. Бөтә ғаиләһен йылға аша ҡаршы ярға күсергәс, был яҡта бер үҙе тороп ҡала. Уның менән Кемдер Берәү көрәшә башлай. Таңға хәтлем алышалар, ахырҙа Ул Яҡуптың янбаш быуынын ҡаймыҡтыра. Таң атып килгәндә әлеге Кемдер: «Ебәр Мине, таң атты инде», – ти. «Миңә фатихаңды бирмәйенсә, ебәрмәйем», – тип яуаплай Яҡуп. «Исемең кем?» – тип һорай Теге. «Яҡуп». «Ошо көндән башлап һинең исемең Яҡуп түгел, ә Исраил булыр, һин Алла менән дә, әҙәм балалары менән дә көрәштең һәм еңдең», – ти Яҡуп менән Көрәшеүсе.

«Үҙеңдең исемеңде әйтһәңсе?» – тип һорай Яҡуп. Әммә Теге: «Ни өсөн һин Минең исемемде һорайһың?» – тип, Үҙен атамай. Шунан һуң Яҡупҡа фатихаһын бирә.

*БАШЛАНМЫШ 32:9–31*



## Яҡуп менән Ғаяздың ярашыуы

Ҡәнғән еренә яҡынлашҡанда Яҡуп Ғаяздың дүрт йөҙ кеше менән ҡаршы килгәнен күрә. Шунда Яҡуп алға сыға ла туғаны алдында ете тапҡыр ергә тиклем баш эйә. Ғаяз йүгереп килеп уны ҡосаҡлап ала, икеһе лә илап ебәрә. Ул арала Яҡуптың ҡатындары, балалары, хеҙмәтселәре лә килеп етә, улар ҙа Ғаязға баш эйә.

Ғаяз Яҡуптан: «Ә миңә юлда осраған ниндәй көтөү-көтөү мал ине ул?» – тип һорай. «Был һинең мәрхәмәтеңә лайыҡ булыу өсөн», – ти Яҡуп. Ғаяз яуап итеп былай ти: «Минең бөтә нәмәм дә етә, ҡустым. Үҙ байлығың үҙеңдә ҡалһын». Яҡуп шунда уҡ: «Юҡ, әгәр ҙә күңелеңә хуш килһәм, килтергән бүләктәремде ҡабул итеп ал, сөнки Алла мине йомарт бүләкләне, бөтә нәмәм дә бар», – тип ҡаршы төшә һәм Ғаязды бүләктәрен ҡабул итеп алырға күндерә.

Шунан һуң Ғаяз өйөнә ҡайта, ә Яҡуп Ҡәнғән ерендәге Шәхәм ҡалаһы янында төйәкләнә. Ул, шундағы бер баҫыуҙан үҙенә өлөш һатып алып, сатырҙарын ҡора, Раббы Аллаға бағышлап ҡорбан усағы эшләп ҡуя.

Ағаһынан Месопотамияға ҡасып барғанда күргән ғәжәйеп төшөндә Алла уға биргән фатиха бына шулай тормошҡа аша. Раббы бөтә биргән вәғәҙәләрен үтәй, һәм Яҡуп быларҙың барыһы өсөн дә Уға рәхмәтен белдерергә онотмай.

*БАШЛАНМЫШ 33:1–20*



## Йософ – Яҡуптың яратҡан улы

Шулай итеп, Яҡуп яңынан Ҡәнғән ерендә төйәкләнә. Бында Рәхиләнән Бинйәмин исемле тағы бер улы тыуа. Хәҙер инде Яҡуптың балалары ун өс булып китә: Рәүвән, Шимғон, Леви, Йәһүҙә, Дан, Нафтали, Ғад, Ашер, Исасхар, Зевулун, Йософ, Бинйәмин (иң бәләкәйе) исемле ун ике улы һәм Динә исемле бер ҡыҙы. Яҡуп, олоғайып барған сағында тыуған бала булғанғамы, Йософто башҡа улдарына ҡарағанда нығыраҡ ярата.

Ун ете йәшендә Йософ ағалары менән көтөү көтә башлай. Ул ағаларының бөтә ҡырын эштәрен аталарына еткереп тора. Бер ваҡыт Яҡуп Йософҡа бик матур күлдәк бүләк итә. Аталарының төпсөк улын нығыраҡ яратыуын аңлағас, ағалары Йософто күрә алмай башлай.

*БАШЛАНМЫШ 37:1–4*



# Йософтоң төштәре

Бер ваҡыт Йософ төш күрә һәм был төшөн ағаларына ла һөйләй: «Тыңлағыҙ әле, бына мин ниндәй төш күрҙем! Имеш, беҙ баҫыуҙа көлтә бәйләйбеҙ, шунда мин бәйләгән көлтә турайып баҫты, ә һеҙҙең көлтәләр, уны уратып алып, баш эйҙе».

Ағалары: «Һин беҙҙең өҫтән батша булырға, хакимлыҡ итергә уйлайһыңмы ни әле?» – тип, Йософто тағы ла нығыраҡ күрә алмай башлай.

Йософ тағы бер төш күрә, уны ла ағаларына һөйләй: «Мин йәнә бер төш күрҙем: имеш, ай менән ҡояш та, улар янындағы ун бер йондоҙ ҙа миңә баш эйҙе».

Был төшөн атаһына ла һөйләгәс, атаһы уны әрләп ташлай: «Ниндәй төштәр күрәһең һин? Нимә, беҙ барыбыҙ ҙа – мин, әсәйең, ағайҙарың – килеп һинең аяғыңа йығылырға тейеш булабыҙмы ни?»

Ағаларының уға йәне көйә, ә атаһы был төштө хәтеренә һалып ҡуя.

Бер ваҡыт ағалары һарыҡтарҙы өйҙән алыҫта көтә. Яҡуп Йософто уларҙың хәл-әхүәлен белешеп ҡайтырға ебәрә. Йософ юлға сыға.

Көтөүлекте барып тапҡансы баҫыу буйлап оҙаҡ йөрөй ул. Ағалары уның килгәнен алыҫтан уҡ күрә. Етеп килгәндә уны үлтерергә һүҙ ҡуйышалар. «Ана беҙҙең төш күреүсе килә, – тиҙәр улар асыу менән. – Үлтереп берәй соҡорға ырғытайыҡ та, ҡырағай януар ашаған, тип әйтер ҙә ҡуйырбыҙ. Бына шунан ҡарарбыҙ, уның төштәре нисек юш килер икән!»

*БАШЛАНМЫШ 37:5–20*



## Ағаларының Йософто ҡоллоҡҡа һатыуы

Рәүвән, араларында иң өлкәне, ҡустыларының Йософҡа ҡаршы яуыз ниәт ҡороуҙарын ишеткәс, уны ҡотҡарып, атаһына ҡайтарып ебәрергә уйлай. Шул ниәт менән ул ҡалғандарҙы Йософто үлтермәҫкә, ә берәй соҡорға ғына ташларға ныҡыша башлай һәм күндерә. Йософ килеп еткәс, ағалары уның затлы кейемдәрен систереп алып, үҙен тәрән бер соҡорға ырғыталар.

Шул ваҡыт улар Мысырға тауар ташыған каруанды күрә. Ағайҙарҙың Йәһүҙә исемлеһе Йософто сауҙагәрҙәргә һатып ебәрергә тәҡдим итә. Быға барыһы ла шунда уҡ риза була. Каруан эргәләренә килеп еткәс, ҡустыларын һатып ебәрәләр.

Сауҙагәрҙәр Йософто Мысырға алып китә. Ә ағай кешеләр, кәзә бәрәсе салып, ҡанын егеттең кейеменә һөртәләр. Уны аталарына алып ҡайтып: «Бына беҙ нимә таптыҡ! Йософтоң кейеме түгелме, ҡара әле», – тиҙәр. Улының кейемен танығас, Яҡуп: «Эйе, был Йософ улымдыҡы! Уны йыртҡыс талаған!» – тип ҡысҡырып ебәрә. Улдарының алдағанын белмәгән Яҡуп яратҡан улы өсөн оҙаҡ ваҡыт ҡайғырып илап йөрөй.

*БАШЛАНМЫШ 37:21–35*



## Йософ – һарай түрәһе йортонда идарасы

Сауҙагәрҙәр Мысырға килеп етә. Бында улар Йософто һарай түрәләренең береһенә, фирғәүендең тән һаҡсылары башлығына, ҡоллоҡҡа һата. Раббы уны ярҙамынан ташламай. Шуға ҡоллоҡта ваҡытта ла Йософтоң, нимәгә тотонһа ла, эштәре гел уңай килеп тора.

Хужаһы Потифар, Йософ нимә генә эшләһә лә, Раббының уға ярҙам итеүен һиҙеп ҡала. Ул, Йософто йортона идарасы итеп ҡуйып, бар мөлкәтен ҡарауҙы уға тапшыра. Алла Йософ хаҡына һарай түрәһенең йортон фатихалы итә. Егет йорт менән шул тиклем аҡыллы идара итә, хужаһы бер ҡайғы-хәсрәт тә күрмәй.

Йософ төҫкә-башҡа, буй-һынға бик күркәм була. Шулай килеп сыға, Потифарҙың ҡатынының уға күҙе төшә һәм ул Йософто зина ҡылырға этәрә башлай. Әммә Йософ: «Хужам бар мал-мөлкәтен миңә ышанып тапшырҙы. Был йортта, һинән башҡа, минең өсөн тыйылған бер ни ҙә юҡ, сөнки һин уның ҡатыны. Нисек итеп мин Алла алдында шундай ҙур гонаһ ҡылайым?» – тип, зина ҡылыуҙан баш тарта.

Потифарҙың ситкә ҡағылған ҡатыны Йософтан үсен алмаҡ була. Иренә егетте яманлап һөйләй: «Һин өйгә алып ҡайтҡан еврей ҡолоң, мыҫҡыл итмәк булып, яныма килде. Әммә шау-шыу ҡуптарғайным, сығып ҡасты, кейеме ҡулымда тороп ҡалды». Быларҙы ишеткән хужа кешенең асыуы ҡабара, Йософто батша тотҡондары ултырған зинданға ташлай.

*БАШЛАНМЫШ 39:1–20*



# Йософ зинданда

Алла зинданда ла Йософто ярҙамынан ташламай. Ул зиндан башлығының күңелендә Йософҡа ҡарата яҡшы мөнәсәбәт уята, һәм зиндан башлығы уны бөтә тотҡондар өҫтөнән күҙәтсе итеп ҡуя. Уға тулыһынса ышанғанға, бер нәмәгә лә көймәй. Алла иһә, Йософ менән булып, һәр эшендә уңыш килтерә.

Йософ менән зинданда батшаның ике хеҙмәтсеһе лә ултыра. Уларҙың береһе – шарап ҡойоусы – быға тиклем батшаға шарап ҡойоп, уның табыны өсөн яуаплы булған. Икенсеһе – икмәксе – табынға ризыҡ ташыған. Батша алдында ғәйепкә ҡалып, икеһе лә зинданға эләккән.

Бер ваҡыт шарап ҡойоусы менән икмәксе төш күрә, тик уны бер нисек тә юрай алмайҙар. «Юрау Алла ихтыярында түгелме ни? Төшөгөҙҙө миңә һөйләгеҙ әле», – ти уларға Йософ. Беренсе булып төшөн шарап ҡойоусы бәйән итә. Ул төшөндә йөҙөм ағасын күрә. Унан өс үҫенте киткән, имеш. Бына улар сәскә ата, тиҙҙән емештәре лә өлгөрә. Шарап ҡойоусы был емештәрҙе йыйып ала ла, һуттарын һауытҡа һығып, фирғәүенгә бирә.

Йософ шунда уҡ уның төшөн юрап бирә: «Өс үҫенте – ул өс көн. Өс көндән һине фирғәүен элекке урыныңа кире ҡуйыр, һин яңынан шарап ҡойоусы булып, уға шараплы туҫтағын биреп торорһоң. Шул ваҡытта һин мине иҫеңә төшөр һәм мине бынан ҡотҡар».

Икмәксе лә үҙенең төшөн һөйләй. Ул башында өс кәрзин ултырғанын күрә. Йәнәһе, иң өҫкө кәрзин төрлө батша һыйы менән тулы һәм уларҙы ҡоштар килеп суҡый.

Уны тыңлағас, Йософ былай ти: «Өс кәрзин – ул өс көн. Өс көндән фирғәүен саҡырып алыр ҙа һине ағасҡа аҫырға ҡушыр. Ә тәнеңде ҡоштар суҡып өҙгөләр».

Өс көндән Йософтоң Раббы ихтыяры менән әйткәндәре теүәл тормошҡа аша. Шарап ҡойоусы ғына Йософто бер ҙә иҫенә төшөрмәй.

*БАШЛАНМЫШ 39:21–23; 40:1–22*



## Йософтоң фирғәүен төштәрен юрауы

Бер ваҡыт фирғәүен, йылға буйында торам икән, тип төш күрә. Ҡапыл йылғанан ете һимеҙ һыйыр килеп сыға ла яр буйындағы ҡамышлыҡта утлай башлай. Улар артынса йылғанан етеябыҡ һыйыр килеп сығып, һимеҙҙәрен ашай. Шул мәл фирғәүен йоҡонан уяна. Яңынан йоҡлап киткәс, икенсе төш күрә. Йәнәһе, бер һабаҡта ете туҡ башаҡ үҫеп сыҡҡан. Тик улар эргәһендә елгә ҡыуарып кипкән ете буш башаҡ үҫеп сыға ла туҡтарын ашап бөтөрә.

Уянғас, фирғәүен хафаға ҡала. Мысырҙың бөтә аҡыл эйәләрен йыйып, күргән төштәрен һөйләп бирә, әммә бер кем дә уларҙы юрай алмай.

Шунда шарап ҡойоусылар башлығы Йософто иҫенә төшөрә һәм фирғәүенгә Йософ исемле еврейҙың икмәксе менән икеһенең төштәрен юрауын, юрағанының юш килеүен һөйләп бирә. Фирғәүен шунда уҡ Йософ артынан кеше ебәрә. «Һин төш юрайһың тип ишеттем», – ти ул Йософ килеп еткәс. «Был минең ҡөҙрәтемдә түгел. Фирғәүенгә хәйерле яуапты Алла Үҙе бирер», – тип яуаплай Йософ. Фирғәүен уға ике төшөн дә һөйләп биргәс, Йософ: «Алла һиңә нимәләр эшләйәсәгең тураһында белдерә. Ете һимеҙ һыйыр һәм ете туҡ башаҡ – ул Мысыр ерендә ете йыл мул уңыш буласағын аңлата, ә ете ябыҡ һыйыр һәм ете буш башаҡ – ул ете йыл муллыҡтан һуң киләсәк ете йыл аслыҡты белдерә. Бер төштө ике тапҡыр күреүең был ысынлап та Алла һүҙе икәненә ишара, тиҙҙән Алла уны бойомға ашырасаҡ», – тип аңлатып бирә.

Шунан һуң Йософ фирғәүенгә, Мысырҙа ете йыл муллыҡ осоронда уңыш йыйып ҡалыр өсөн, зирәк аҡыллы идарасы ҡуйырға кәңәш итә.

*БАШЛАНМЫШ 41:1–36*



## Йософ – Мысыр етәксеһе

Йософтоң төштө юрап әйткән һүҙҙәренән фирғәүен ҡәнәғәт ҡала. «Үҙендә Алла Рухын йөрөткән Йософ кеүек башҡа кешене табып булырмы?» – ти ул хеҙмәтселәренә. Шунан Йософҡа өндәшә: «Быларҙы Алла һиңә асып биргән икән, тимәк, һинән дә зирәгерәк һәм аҡыллыраҡ башҡа кеше юҡ. Ошо көндән алып минең йортомда идарасы булырһың, халҡым әйткән һүҙең буйынса эш итер. Һине бөтә Мысырға етәксе итеп ҡуйям, тик тәхетем генә һинеке булмаç».

Шунан фирғәүен, бармағындағы йөҙөгөн сисеп, Йософҡа кейҙерә. Егетте затлы туҡыманан тегелгән кейемдәргә төрөндөрөп, муйынына алтын сылбыр таға. Уға үҙенекенән ҡала икенсе дәрәжәләге арбаһын бирҙерә. Йософ арбала барғанда унын алдынан: «Юл бирегеҙ!» – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгереп барырға тейеш булалар.

Дәрәжәле урынға ултырғас, Йософ үҙенә йөкмәтелгән эштәрҙе атҡарырға тотона. Аслыҡ башланғас, Мысыр халҡы үлмәһен өсөн, Йософ мул килгән йылдарҙа келәттәрҙе ашлыҡ менән тултырып ҡуя.

*БАШЛАНМЫШ 41:37–48*



## Ете йыл аслыҡ

Ете йылдан һуң ер йөҙөндә аслыҡ башлана. Йософ был мәлгә Мысырҙың бөтә ҡалаларында ла бойҙайҙы етерлек туплаған була, шуға ла, иген һатып алыр өсөн, Мысырға төрлө илдәрҙән халыҡ ағыла.

Мысырҙа иген бар икәнен белеп ҡалғас, Яҡуп та үҙенең ун улын шул тарафтарға ебәрә. Кесе улы Бинйәминде генә янында ҡалдыра.

Мысыр ерендә етәксе булып торғанға, игенде халыҡҡа Йософ үҙе һата. Ағалары килеп, уның алдында ергә саҡлы баш эйеп, иген һатыуын үтенәләр. Йософ уларҙы таныһа ла, ағалары уны танымай. Ни тиһәң дә, Йософто ҡоллоҡҡа һатып ебәргәндән һуң, уның тураһында бер нәмә лә ишеткәндәре булмай, юғары дәрәжә биләйҙер, тип баштарына ла килтермәйҙәр.

Йософ, ағаларын танымағанға һалышып, уларҙы шымсылар тип атай. Мысыр еренә ҡайҙан үтеп инергә йәтешлеген белергә килеүҙә ғәйепләй. Туғандар намыҫлы булыуҙарын, бер ата балалары икәндәрен һәм иң кеселәренең өйҙә ҡалғанын һөйләп бирәләр. Йософ уларҙы һаҡ аҫтына алырға бойора. Өс көндән ул ағаларына: «Әгәр һеҙ ысынлап та намыҫлы булһағыҙ, берегеҙ бында ҡалһын, ә ҡалғандарығыҙ аслыҡтан йонсоған ғаиләләрегеҙгә иген алып ҡайтығыҙ. Тик, һүҙҙәрегеҙҙең хаҡлығын раҫлар өсөн, төпсөк ҡустығыҙҙы алып килегеҙ. Шул ваҡытта мин һеҙҙең был илгә яуыз ниәт менән килмәгәнегеҙгә ышанырмын», – ти.

Быны ишеткән ағалары: «Был ҡасандыр ҡустыбыҙға ҡарата ҡылған гонаһ өсөн яза. Беҙ уның ыҙаланғанын күрҙек, әммә, нисек кенә ялынһа ла, уны йәлләмәнек. Шуның өсөн ҡайғыға тарыныҡ та инде», – тиҙәр. Улар Йософ менән тәржемәсе аша аралашҡан була, шуға, ул беҙҙе аңламай, тип уйлайҙар. Йософ, уларҙың һүҙҙәрен ишеткәс, күрше бүлмәгә сығып илап ала. Кире ингәс, Шимғондо Мысырҙа ҡалдырырға, ә ҡалғандарҙы, тоҡтарына иген тултырып, ҡайтарып ебәрергә ҡуша.

*БАШЛАНМЫШ 41:54–57; 42:1–25*



## Йософтоң ағаларына үҙен белдереүе

Өйгә ҡайтҡас, Йософтоң ағалары барыһын да аталарына һөйләп бирә. Яҡуп ҡарт көнөндә йыуанысы булған төпсөгө Бинйәминде улар менән Мысырға ебәреүгә ҡәтғи ҡаршы төшә.

Тиҙҙән уларҙың Мысырҙан алып ҡайтҡан игене бөтә. Яҡуп: «Барығыҙ, ашлыҡ һатып алып ҡайтығыҙ», – тип улдарын тағы ебәрмәксе була. «Мысыр идарасыһы ҡустыбыҙҙан башҡа килергә ҡушманы», – тип яуаплай улдары. Яҡуп төпсөгөн ебәргеһе килмәй оҙаҡ ҡырталаша. Әммә, аслыҡ көсәйгәс, улдарына юл фатихаһын биреп: «Сикһеҙ ҡөҙрәт Эйәһе Алла ярҙамы менән теге кеше мәрхәмәт күрһәтһен һәм унда ҡалған туғанығыҙҙы ла, Бинйәминде лә ебәрһен!» – ти.

Шулай итеп, Мысыр еренә улар Бинйәмин менән бергә килеп төшә. Йософ, ҡустыһын күргәс, күрше бүлмәгә сығып илап ала. Битен күҙ йәштәренән йыуып, хеҙмәтселәренә ҙур табын әҙерләргә ҡуша. Ағалары уның шулай ҙур хөрмәт күрһәтеүенән ҡаушап ҡала. Ә Йософ артабан тойғоларын тыйып тота алмай инде. Ҡысҡырып илап: «Мин – Йософ. Атайым иҫәнме әле?» – тип һораша. Был хәбәрҙән ағалары аптырашта ҡала, нимә тип әйтергә лә белмәйҙәр. «Яҡыныраҡ килегеҙ», – ти уларға Йософ. Тегеләр эргәһенә килеп баҫҡас, һүҙен дауам итә: «Мин – Йософ, һеҙ Мысырға һатҡан ҡустығыҙ. Мине һатҡанға ҡайғырмағыҙ ҙа, үкенмәгеҙ ҙә, сөнки Алла мине бында һеҙҙең ғүмерҙәрегеҙҙе һаҡлап ҡалыр өсөн ебәргән. Шулай итеп, мине бында һеҙ түгел, ә фирғәүендең баш вәзире итеп тәғәйенләп, бар мөлкәтенә хужа һәм бөтә Мысыр еренә идарасы итеп ҡуйған Алла ебәрҙе. Тиҙерәк атайым янына ҡайтып: „Йософ улың шуны еткерергә ҡушты: Алла мине бөтә Мысырҙың хакимы итте; һуҙма, миңә килеп ет. Бында тамағың туҡ булыр, сөнки аслыҡ тағы биш йылға һуҙыласаҡ әле“, – тип әйтегеҙ». Шуларҙы әйткәндән һуң Йософ тәүҙә Бинйәминде, аҙаҡ ағаларын да ҡосаҡлап, илай-илай барыһын да үбеп сыға.

*БАШЛАНМЫШ 42:36–38; 43:1–34; 45:1–15*



## Йософтоң атаһы менән осрашыуы

Фирғәүен, Йософҡа туғандары килеүен ишеткәс, уларҙы Мысырға күсереп алырға тәҡдим итә. Юлдарына бик мул итеп аҙыҡ-түлек, кейем тейәргә һәм үҙҙәре, балалары, аталары ултырып барһын өсөн арбалар әҙерләргә ҡуша.

Ҡайтҡас, туғандар Йософ тураһында аталарына барыһын да һөйләп бирә. Яратҡан улы Йософтоң тере булыуын һәм уны күрергә мөмкинлек бар икәнен ишеткән Яҡуп бик ныҡ ҡыуана, улы янына Мысырға йыйына. Төшөндә Алла Яҡупҡа: «Яҡуп! Мин Алла, атайыңдың Аллаһы. Ҡурҡма, бар Мысырға: унда Мин һинән бөйөк халыҡ бар ҡылырмын. Мысырҙа һинең менән булып, унан Үҙем үк алып сығырмын», – ти.

Яҡуп, бар мөлкәтен тейәп, балалары, ейәндәре менән Мысырға юллана. Йософ, арбаһын егеп, уларға ҡаршы сыға. Күрешкәс, атаһын ҡосаҡлап, шатлығынан оҙаҡ илай.

Фирғәүен, Йософтоң туғандары килеп етеүен ишеткәс, Йософто үҙенә саҡырып ала ла: «Бына атайың менән туғандарың һиңә килде. Алдыңда – тотош Мысыр ере, илдең иң яҡшы төбәктәренә урынлаштыр әйҙә», – тип әйтә.

Йософ туғандарына Мысыр еренең иң яҡшы өлөштәрен бүлеп бирә. Уларҙы икмәк һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә.

Яҡуп Ҡәнғән еренә ҡайтып тормай, Мысырҙа ҡала. Үлер алдынан ул Йософтоң улдары Менашше менән Әфраимға, аҙаҡ башҡа улдарына ла фатихаһын бирә. Үлгәс, үҙе әйтеп ҡалдырғанса, улдары Яҡуптың кәүҙәһен ата-бабалары ерләнгән Ҡәнғән ерендәге Махпела баҫыуындағы мәмерйәгә алып ҡайтып һала. Ибраһим менән Сара, Исхаҡ менән Рабиға ла шунда ерләнгән була.

*БАШЛАНМЫШ 45 – 50*



## Исраил халҡының Мысырҙа ҡоллоҡ кисереүе

Күп йылдар уҙа. Яҡуп вафат була, уның улдары ла үлә.

Месопотамиянан Ҡәнғән еренә ҡайтып барғанда Яҡуп Алла менән көрәшкән. Алла уны фатихалаған һәм Исраил («Алла менән көрәшеүсе» мәғәнәһендә) тигән яңы исем биргән. Шуға ла Яҡуп нәҫеле – йәһүд халҡы – әле һаман Исраил тип йөрөтөлә.

Ул арала Мысырҙа яңы фирғәүен етәкселек итә башлай, ул зирәк аҡыллы Йософ тураһында ла, ул башҡарған изге эштәр хаҡында ла бер нәмә лә белмәй. Яңы башлыҡ исраилдарҙың күбәйеп һәм ҡеүәтләнеп китеүенә иғтибар итә. «Был халыҡҡа ҡаршы берәй хәйлә уйлап табайыҡ, – тип белдерә ул үҙенең халҡына. – Юҡһа, һуғыш башланып китһә, дошмандарыбыҙ менән берләшеп, беҙгә ҡаршы баш күтәрерҙәр, еребеҙҙән китеп барырҙар».

Фирғәүен күҙәтеп эшләтеүселәр билдәләй, улар исраилдарҙы иң ауыр эштәргә тәғәйенләй. Әммә исраилдарҙы ғазаплаған һайын улары ишәйә генә бара. Шуға ла мысырҙар уларҙы аяу белмәй эш менән баҫа, тормоштарын түҙеп торғоһоҙ ауыр итергә тырыша.

Алла Үҙ халҡының ыңғыраш-һыҡтауҙарын ишетә һәм уларға ҡотҡарыусы ебәрә.

*СЫҒЫУ 1:6–14*



## Кәрзиндәге сабый

Фирғәүенгә Исраил халҡының ауыр эштән хәлһеҙләнеү урынына ишәйә һәм ҡеүәтләнә генә барыуы мәғлүм була. Ул исраилдарҙың яңы тыуған ир балаларын һыуға ташларға бойора.

Бер исраил ҡатынының улы тыуа. Ҡатын уны өс ай йәшереп тота. Йәшереп булмай башлағас, кәрзинде ыҫмалалап, унда сабыйҙы һала ла Нил йылғаһы буйында ҡамыштар араһына йәшерә. Ә ҡатындың оло ҡыҙы, сабый менән ни булырын белергә теләп, ситтән генә күҙәтеп тора.

*СЫҒЫУ 2:1–4*



## Мусаны фирғәүендең ҡыҙы табып алыуы

Тап ошо мәлдә фирғәүендең ҡыҙы хеҙмәтсе ҡыҙҙары менән һыу инергә төшә. Бына ул ҡамыш араһындағы кәрзинде күреп ҡала һәм ҡыҙҙарҙың береһенә уны алып килергә ҡуша.

Кәрзинде асҡас, илап ятҡан сабыйҙы күрә. Исраилдарҙың балаһы икәнен аңлай фирғәүен ҡыҙы. Малайҙы йәлләп, уны үҙенә уллыҡҡа алырға була. Шул мәл сабыйҙың апаһы килеп, балаға һөт әсәһе кәрәкмәйме икәнен белешә. Фирғәүендең ҡыҙы имеҙеүсе кәрәклеген әйткәс, ҡыҙ үҙенең әсәһен алып килә. «Бына был баланы миңә имеҙеп үҫтереп бир, хаҡын түләрмен», – ти уға фирғәүен ҡыҙы. Ҡатын сабыйын ҡарап үҫтерә. Малай ҙурая төшкәс, фирғәүен ҡыҙына ул итеп алып килеп бирә. Фирғәүен ҡыҙы уға Муса тип исем ҡуша.

Муса фирғәүен һарайында үҫә һәм мысыр тәрбиәһе ала, әммә бер ваҡытта ла үҙенең Исраил халҡынан икәнен онотмай. Ир ҡорона еткәс, Муса исраилдар араһына барып әләгә һәм уларҙы ни тиклем ыҙалатҡандарын төшөнә. Бер ваҡыт ул мысыр кешеһенең бер еврейҙы туҡмағанын күреп ҡала. Асыуы килгән Муса, мысырҙы үлтереп, кәүҙәһен ҡомға күмә.

Икенсе көнө ике еврейҙың талашҡанын күрә. «Ниңә ҡәрҙәшеңә һуғаһың?» – тип һорай ул береһенән. Теге: «Кем һине беҙҙең өҫтән түрә йә хөкөмдар итеп ҡуйҙы? Әллә мине лә анау мысыр кешеһен үлтергән шикелле үлтерергә йыйынаһыңмы?» – тип һорай. Муса ҡурҡып ҡала һәм эстән генә: «Ахырыһы, барыһын да белгәндәр», – тип уйлай. Фирғәүен, был хәл тураһында ишеткәс, Мусаны үлтермәк була, әммә Муса Мидйән еренә ҡасып китә. Унда Муса ҡаһин Реғуилды осрата һәм уның өйөндә йәшәргә ҡала. Реғуил үҙенең ҡыҙы Сиппораны уға кейәүгә бирә.

*СЫҒЫУ 2 – 3*



# Янып торған сәнскәкле ҡыуаҡ

Оҙаҡ йылдар Муса ҡайныһы Реғуилдың һарыҡтарын көтә. Бер ваҡыт ул көтөүен алыҫ сүллеккә алып китеп, Алла тауы Хоревҡа барып сыға. Унда Раббының фәрештәһе уға сәнскәкле ҡыуаҡ араһынан ялҡын булып күренә. Ул былай була. Муса ҡыуаҡтың ут эсендә булыуын, әммә янып бөтмәүен күрә. «Ниндәй сәйер күренеш булды был, ҡыуаҡ ниңә һаман янып бөтмәй?» – тип барып ҡарарға уйлай.

Муса, яҡыныраҡ килгәс, Алланың ялҡынлы ҡыуаҡ эсенән: «Муса! Муса! Яҡын килмә! Аяҡ кейемеңде сисеп ҡуй, сөнки һин торған урын – мөҡәддәс ер. Мин – атайыңдың Аллаһы, Ибраһимдың, Исхаҡтың һәм Яҡуптың Аллаһы», – тип өндәшә. Муса, Аллаға ҡарарға ҡурҡып, битен ҡаплай.

Алла уға былай ти: «Мин халҡымдың Мысыр ерендә ыҙа сиккәнен күрәм, уларҙың илағанын һәм күҙәтселәрҙең ҡыҫырыҡлауынан иңрәгәндәрен ишетәм. Халҡымдың тәрән ҡайғыға батҡанын беләм, шуға ла мысырҙарҙан ҡотҡарырға, уларҙы был илдән сығарып, һөт һәм бал аҡҡан иркен, күркәм ергә алып барырға йыйынам. Мин Исраил халҡының илағанын ишетәм һәм мысырҙарҙың уларҙы нисек иҙгәнен күрәм. Шуға ла, бар: Мин һине фирғәүен янына ебәрәм. Халҡым исраилдарҙы Мысырҙан алып сыҡ!»

Муса икеләнеп ҡала. Мин былдай бөйөк йомошто үтәргә лайыҡ түгелмен, тип уйлай. Ул Алланан: «Фирғәүенгә барырға, Исраил халҡын Мысырҙан алып сығырға мин кем һуң?» – тип һорай. Алла уға: «Мин һинең менән булырмын», – тип яуаплай.

*СЫҒЫУ 3:1–12*



## Муса менән Һарун фирғәүен янында

Алла Мусаны фирғәүенгә ебәрә. Фирғәүендән Алла халҡын ебәреүен талап итергә тейеш була ул. Әммә Муса: «Раббым! Мин һаҡау, матур итеп һөйләй белмәйем. Минең урынға икенсе кешене ебәр», – тип ялбара. Раббы уға: «Һарун һинең ағайың түгелме ни? Уның матур һөйләгәнен беләм. Ә Мин һеҙгә нимә әйтергә һәм нимә эшләргә өйрәтермен. Халыҡ менән һинең урынға ул һөйләшер, йәғни ағайың – һинең ауыҙың, ә һин уға Алла кеүек булырһың», – тип яуаплай.

Муса менән Һарун фирғәүенгә килеп: «Исраил Аллаһы Раббы былай ти: „Минең халҡымды ебәр. Улар сүллектә байрам яһаһын һәм Миңә ҡорбан килтерһен“», – тип хәбәр итәләр. Әммә фирғәүен: «Кем һуң ул Раббы? Ни өсөн мин Уны тыңлап, исраилдарҙы ебәрергә тейеш? Мин Раббыны белмәйем һәм Исраил халҡын да ебәрмәйем. Ниңә һеҙ, Муса, Һарун, халыҡты эштән айырып йөрөйһөгөҙ? Барығыҙ, үҙегеҙ ҙә эш менән булығыҙ», – тип яуаплай. Шунан һуң фирғәүен исраилдар менән тағы ла аяуһыҙыраҡ ҡылана башлай, күҙәтселәргә уларҙың эштәрен арттырырға ҡуша.

Раббы фирғәүен алдында бик күп хикмәттәр һәм мөғжизәләр ҡыла, әммә тегеһе тиҫкәреләнә генә, Алла халҡын ебәрергә теләмәй.

Мысыр халҡына Раббының туғыҙ ҡот осмалы ҡаты язаһы төшә: Нил һыуы ҡанға әйләнә, Мысыр ерен тәлмәрйендәр баҫа, туҙан себен-серәкәй менән алышына, әллә күпме күгәүен барлыҡҡа килә, кешеләр менән мал-тыуарҙы ике ҡурҡыныс ауырыу – ҡырғын һәм эренле шеш ҡыра, боҙлауыҡ яуа, саранча баҫып алып, Мысыр ерен яраҡһыҙға әйләндерә һәм, ниһайәт, тотош Мысыр дөм ҡараңғылыҡҡа сума. Әммә фирғәүендең күңеле һаман йомшармай. Был язаларҙан үҙе лә ыҙа сикһә лә, Исраил халҡына китергә рөхсәт бирмәй. Шунда Муса менән Һарун һуңғы, унынсы яза менән янай.

*СЫҒЫУ 4 – 10*



## Ҡотҡарылыу байрамы бәрәсенең ҡаны

Ҡылынған бөтә бөйөк мөғжизәләрҙе һәм Алла язаһын үҙ күҙҙәре менән күреүенә ҡарамаҫтан, фирғәүендең йөрәге барыбер йомшармай. Муса уға Раббының һүҙҙәрен еткерә: «Раббы былай ти: „Төн уртаһында Мин Мысыр ере буйлап үтәсәкмен. Мысыр ғаиләһендәге һәр тәүге ир бала – тәхеттә ултырған фирғәүендең баш балаһынан тирмән тартҡан ҡолиәнең баш балаһына тиклем – вафат буласаҡ. Шулай уҡ мал-тыуарҙың да тәүге түле үлер“».

Ә Исраил халҡына Раббы Муса аша ошо төндә һәр ғаиләлә һис бер кәмселекһеҙ, һау бәрәс һуйырға ҡуша. Утта ҡыҙҙырылған бәрәстең итен исраилдар ул төндә сөсө икмәккә һәм әскелт үләндәргә ҡушып ашарға тейеш була. Ҡорбан бәрәсенең ҡанын өйҙәренең ишек яңаҡтарына, ҡашағаһына һөртөргә кәрәк була. Раббы былай ти: «Өйөгөҙҙөң ишегенә һөртөлгән ҡан Минең өсөн билдә булып торор. Шул ҡанды күреп, һеҙҙе ситләтеп үтермен һәм Мысыр ерен язаға тарттырған сағымда һеҙгә ҡаза ҡағылмаҫ».

Исраил улдары Алла ҡушҡанса эшләй. Мысырҙар йоҡларғаятҡас, төн уртаһында бөтәһенең дә баш балалары үлә. Фирғәүен үҙе лә, хеҙмәтселәре лә, бөтә Мысыр халҡы уяна. Тотош Мысыр ерендә көслө иңрәү тора, сөнки үлем инмәгән бер генә өй ҙә ҡалмай.

Ошо мәлдән Раббы исраилдар өсөн Ҡотҡарылыу байрамын индерә. Ҡотҡарылыу байрамы (йәһүдсә «песах») «ситләтеп үтеү» тигәнде аңлата – мысырҙарҙы язалағанда, Раббы исраилдарҙың йортон ситләп үтә. Йыл һайын был байрам көнөндә, ҡотолоп ҡалыуҙарын иҫкә алып, исраилдар сөсө икмәк менән бәрәс ите ашарға тейеш була.

*СЫҒЫУ 11; 12:1–17, 30*



## Раббының исраилдарҙы Мысырҙан алып сығыуы

Шул уҡ төндә фирғәүен Муса менән Һарунды саҡырып ала ла: «Үҙегеҙ ҙә, бөтә Исраил халҡы ла илебеҙҙән китегеҙ. Барығыҙ, эре һәм ваҡ малығыҙҙы алығыҙ, үҙегеҙ әйткәнсә, Раббығыҙға ғибәҙәт ҡылығыҙ. Миңә фатихағыҙҙы биреп, бынан китегеҙ», – ти.

«Барыбыҙ ҙа һәләк булып ҡуйырбыҙ», – тип, мысырҙар исраилдарҙы илдән тиҙерәк китергә ашыҡтыра.

Исраил халҡы – балаларҙы һанамағанда, алты йөҙ меңләп йәйәүле ир-ат – Мысыр сигенә юллана. Улар менән бергә бик күп сит халыҡ, шулай уҡ көтөү-көтөү эреле-ваҡлы мал сыға.

Исраилдар Мысырҙан алып сыҡҡан ҡамырҙан сөсө икмәк бешерә: илдән ҡабалан китергә тура килгәнлектән, юлға башҡа төрлө аҙыҡ бешереп алырға ваҡыттары булмай.

Исраил халҡы Мысыр ерендә йәмғеһе дүрт йөҙ утыҙ йыл ғүмер итә.

Алла исраилдарҙы сүллек буйлап, Ҡамышлы диңгеҙгә илткән юлдан алып сыға. Халҡын ҡайҙа алып барғанын Раббы Үҙе генә белә. Шуға ла Ул көндөҙ юл күрһәтер өсөн болот бағанаһы эсендә, ә төндә ут бағанаһы эсендә юл яҡтыртып, уларҙың алдынан бара. Болот бағанаһы туҡтаһа, исраилдар, сатырҙарын ҡороп, ял итә, бағана ҡуҙғалһа, улар ҙа юлын дауам итә. Көндөҙ болот бағанаһы, төнөн ут бағанаһы Алланың халҡын ташламай.

*СЫҒЫУ 12:31–40; 13:20–22*



## Исраилдарҙың Ҡамышлы диңгеҙ аша сығыуы

Фирғәүен исраилдарҙың Мысырҙан үҙ Аллаһына ҡорбан килтерергә генә түгел, ә был ергә бер ҡасан да кире ҡайтмаҫҡа сыҡҡанын аңлай. Шуға ла һыбайлылары, яу арбалары һәм бөтә ғәскәре менән уларҙы ҡыуа төшә.

Исраилдар Ҡамышлы диңгеҙ ярына килеп етә лә ары китә алмайынса туҡтап ҡала, ә мысырҙар яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Алда диңгеҙ йәйрәп ятыуын, арттан мысырҙарҙың етеп килеүен күреп, Алла халҡы Мусаға ризаһыҙлыҡ белдерә башлай. Беҙ сүллектә һәләк булһын өсөн Мысырҙан алып сыҡтың, тип ғәйепләйҙәр. Әммә Муса уларҙы тынысландыра: «Ҡурҡмағыҙ! Ныҡ булһағыҙ, Раббының һеҙҙе нисек ҡотҡарғанын күрерһегеҙ. Әле эҙәрлекләп килгән мысырҙарҙы башҡаса бер ҡасан да күрмәҫһегеҙ. Һеҙҙең өсөн Раббы һуғышасаҡ, тыныс булығыҙ».

Алла Мусаға ҡулын диңгеҙ өҫтөнә һуҙырға ҡуша. Муса ҡулын һуҙғас, көнсығыштан көслө ел иҫтереп, Алла төнө буйы диңгеҙ һыуҙарын ҡыуа. Диңгеҙ төбөндә ҡоро ер күренә: һыу икегә айырыла. Исраилдар диңгеҙ төбөндәге ҡоро ерҙән атлай, һыуҙар уң яҡтан да, һул яҡтан да диуарҙай ҡалҡып тороп ҡала.

*СЫҒЫУ 14:5–22*



## Мысыр ғәскәренең Ҡамышлы диңгеҙҙә һәләк булыуы

Исраилдарҙы баҫтырып килгән мысырҙар ҙа икегә айырылған диңгеҙгә барып инә. Иртән Раббы, яу арбаларының тәгәрмәстәрен тығылдырып, мысырҙар араһында ығы-зығы тыуҙырған була, шуға ла улар ауырлыҡ менән бара. Быларҙың барыһын да күреп торған мысырҙар бер-береһе менән: «Әйҙәгеҙ, исраилдарҙан ҡасайыҡ, Алла бит улар яғында беҙгә ҡаршы һуғыша», – тип һөйләшәләр.

Алланың барлыҡ халҡы диңгеҙҙе ҡоро ерҙән барған һымаҡ кисеп сығып бөткәс, Раббы Мусаға: «Ҡулыңды диңгеҙ өҫтөнә һуҙ, мысырҙар бөтә яу арбалары һәм һыбайлылары менән һыу аҫтында ҡалһын», – ти. Муса Раббы ҡушҡанса эшләй, һәм диңгеҙҙәге һыу, үҙ урынына ҡайтып, мысырҙарҙы йота.

Ул көндө Раббы Үҙ халҡын шулай ҡотҡара. Исраилдар Мысыр халҡын еңгән Алла ҡөҙрәтенең шаһиты була. Кешеләрҙе ҡурҡыу тойғоһо биләп ала, улар Аллаға ла, Уның ҡоло Мусаға ла ышана. Шунан һуң Муса бөтә халыҡ менән бергә бөйөк Ҡотҡарыусыны данлап йырлай:

> Раббы – көс-ҡеүәтем, ҡотолоу әмәлем, сарам! Ул – Аллам, мин Уға дан йырлайым. Һинең уң ҡулың, Раббы, үҙенең көсө менән дан ҡаҙанды. Һинең уң ҡулың, Раббы, дошманды тар-мар итте. Бөйөк шөһрәтең менән Үҙеңә ҡаршы күтәрелгәндәрҙе ҡыйраттың. Йә Раббы, илаһтар араһында Һинең кеүек кем бар? Тағы кем Һинең һымаҡ мөғжизәләр ҡылырға һәләтле? Һинең изгелегең бөйөк, даның ҡурҡыу тыуҙыра. Раббы мәңге, даими батшалыҡ итер!

*СЫҒЫУ 14:23–31; 15:1–18*



## Күктән яуған икмәк

Исраилдарҙың Синай сүллеге буйлап оҙайлы сәйәхәте башлана. Уларҙы Раббы Үҙе әйҙәп алып бара. Әммә тиҙҙән халыҡ Муса менән Һарунға: «Был сүллектә астан үлгәнсе, Мысырҙа Раббы ҡулынан үлеү яҡшыраҡ булыр ине», – тип дәғүә белдерә башлай.

«Раббынан ризаһыҙ булыуығыҙҙы Ул ишетте. Ә беҙ кем генә инде? Һеҙ беҙгә түгел, Раббыға зарланаһығыҙ», – ти Муса халыҡҡа. Шунан Раббы уға: «Исраил улдарының зарланыуын ишеттем. Уларға: „Кистән ит ашарһығыҙ, иртәнсәк икмәк менән туҡланырһығыҙ. Шул сағында Минең Раббы – һеҙҙең Аллағыҙ икәнемде белерһегеҙ“, – тип әйт», – ти.

Кисен исраилдар туҡтаған урынға бөҙәнәләр тубы осоп төшә. Уларҙы тотоуы еңел була, шуға халыҡ тәмле ит ашап рәхәтләнә. Иртән барыһы ла туплам тирәләй ысыҡ төшкәнен күрә. Ысыҡ быу булып күтәрелгәс, ер өҫтөндә бәҫкә оҡшаған ярма ятып ҡала. Был Раббының Үҙ халҡына күктән биргән икмәк була. Исраилдар был икмәкте «майҙә*» тип атай. Тәме менән ул баллы көлсәне хәтерләтә. Раббы майҙәне бер көнгә генә етерлек итеп йыйырға ҡуша. Берәйһе күберәк йыйһа, артып ҡалғаны төн сыҡҡансы иҫкерә. Йома көн Раббы майҙәне ике тапҡыр күберәк йыйып алырға ҡуша, сөнки шәмбе Раббы тарафынан билдәләнгән ял итеү көнө була һәм ул көндө бер кем дә эш эшләмәй. Йома ике көнгә етерлек итеп йыйып алынған майҙә генә иҫкермәй.

*СЫҒЫУ 16:1–31*

* Майҙә – йәһүдсә «нимә ул» тигәнде аңлата.



## Мусаның ҡаянан һыу сығарыуы

Исраилдар Рефидим тип аталған ергә килеп етә, әммә унда эсер һыу булмай сыға. Халыҡ асыулана, Мусанан һыу таптыра башлай. Муса: «Һеҙ ниңә мине ғәйепләйһегеҙ? Ниңә Раббыны һынайһығыҙ?» – тип, Алланан ярҙам һорап, доға ҡыла башлай. Раббы уға юл таяғы менән ҡаяға һуғырға ҡуша. Муса Алла әйткәнде үтәгәс, ҡаянан һыу урғылып сыға һәм барыһы ла туйғансы һыу эсә.

Муса был урынды «Масса һәм Мерива»* тип атай, сөнки ошо ерҙә Исраил халҡы: «Раббы беҙҙең арабыҙҙамы, әллә юҡмы?» – тип, Мусаға ғәйеп ташлай һәм Раббыны һынап ҡарай.

*СЫҒЫУ 17:1–7*

* Масса – йәһүд телендә «һынау», Мерива – «дәғүәләшеү» тигәнде аңлата.



## Ун бойороҡ

Муса Алла тарафынан һайлап алынып, Уға тоғро һәм күндәм булғанға, Раббы халыҡ менән унын аша һөйләшә.

Исраил халҡы Синай тауы итәгендә туплам булып урынлашҡас, Муса тауға күтәрелә. Уға Раббы ҙур булмаған ике таҡташ бирә. Унда Алла халҡы үтәргә тейеш Ун бойороҡ яҙылған була:

Мин – Раббы, һине Мысыр еренән алып сығып, ҡоллоҡтан азат иткән Аллаң. Минән башҡа аллаларың булмаһын.

Үҙеңә күк йөҙөндәге, ерҙәге йә һыу аҫтындағы нәмәләргә оҡшатып һындар яһама, уларға табынма, хеҙмәт тә итмә.

Аллаң Раббыңдың исемен буштан юҡҡа телгә алма. Исемен тиктомалға телгә алғандарҙы Раббы язаһыҙ ҡалдырмаҫ.

Шәмбе – изге көн, шуны онотма. Алты көн буйы бөтә эштәреңде башҡар, ә етенсе көндө – шәмбене – Аллаң Раббыға бағышла.

Атайың менән әсәйеңде хөрмәт ит, шул ваҡытта Аллаң Раббы һиңә бирәсәк ерҙә ғүмерең оҙон булыр.

Кеше үлтермә.

Зина ҡылма.

Урлашма.

Яҡыныңа ҡаршы ялған шаһитлыҡ ҡылма.

Яҡыныңдың өйөн дә, уның ҡатынын да, ҡолон да, ҡолиәһен дә, үгеҙен дә, ишәген дә – бер нәмәһен дә көҫәмә.

*СЫҒЫУ 20*



## Алтын башмаҡ

Раббы Синай тауында Муса менән әллә нисә көн буйы һөйләшә. Исраилдар, Муса һаман ҡайтмағас, Һарунға килеп: «Беҙгә үҙ артынан эйәртер илаһ яһап бир, сөнки беҙҙе Мысырҙан алып сыҡҡан Муса менән ни булғанын белмәйбеҙ», – тиҙәр. Һарун уларға: «Ҡолаҡтарығыҙҙағы алтын алҡаларҙы сисеп, миңә алып килегеҙ», – тип бойора. Тегеләр алҡаларын алып килгәс, Һарун уларҙы иретә лә үгеҙ башмаҡ һыны ҡоя. Кешеләр үгеҙ һынын күргәс: «Эй Исраил, бына һине Мысырҙан алып сыҡҡан аллаң!» – тип ҡысҡырыша. Икенсе көнө таң менән торалар ҙа үгеҙ башмаҡҡа бағышлап ҡорбандар килтерәләр, уны үҙҙәренең аллаһы тип атайҙар. Шунан инде халыҡ ашап-эсергә, шау-гөр килеп күңел асырға тотона.

Раббы иһә тау башында Мусаға: «Тиҙерәк аҫҡа төш, юҡһа Мысырҙан алып сыҡҡан халҡың боҙолдо. Биргән бойороҡтарымдан ҡайһылай тиҙ баш тарттылар», – тип әйтә. Алла был тиҫкәре һәм буйһонмаҫ халыҡты ҡырып бөтөрөргә теләй, әммә Муса: «Раббым, ҡөҙрәтең һәм көслө ҡулың менән Мысырҙан алып сыҡҡан Үҙ халҡыңа асыуланмасы. Юҡһа Мысыр халҡы: „Ул Үҙ халҡын уҫал ниәт менән, тауҙарҙа үлтереп, ер йөҙөнән юҡ итер өсөн алып сыҡты“, – тиер. Асыуланма, шәфҡәтеңде күрһәт, Үҙ халҡыңды һәләк итмә!» – тип ялына башлай.

Раббы Мусаның ялыныуына ҡолаҡ һала һәм Үҙ халҡына бәлә килтереү ниәтенән кире ҡайта.

Муса иһә асыуынан ҡулындағы таҡтаташтарҙы ергә атып бәрә, улары селпәрәмә килеп ватыла. Шунан ул алтын башмаҡты утта яндыра, туҙанға әйләнгәнсе онтай. Онтағын һыуға һибеп, исраилдарҙы ошо һыуҙы эсергә мәжбүр итә.

*СЫҒЫУ 32:1–20*



## Осрашыу сатыры

Муса, исраилдарҙың тупламынан ситкәрәк китеп, сатыр ҡора, уны «осрашыу сатыры» тип атай. Бында Раббы менән осрашырға теләгән һәр кем килгән.

Муса сатырға табан йүнәлһә, ул инеп киткәнсе кешеләр үҙ сатырҙары алдында ҡарап тороп ҡалған. Ул инеп юғалыуға күктән болот бағанаһы төшкән һәм сатыр ауыҙы алдына торған. Ә был мәлдә Раббы Муса менән һөйләшкән. Барыһы ла сатыр алдындағы болот бағанаһын күргән, үҙ сатырҙары алдында тороп, баш эйгәндәр.

Раббы Муса менән йөҙгә-йөҙ ҡарап, дуҫтарса һөйләшкән. Тупламға ҡайтҡан мәлендә сатырҙа уның йәш ярҙамсыһы Нун улы Йушағ ҡала торған булған.

*СЫҒЫУ 33:7–11*



## Изге сатыр төҙөр өсөн килтерелгән ҡорбандар

Бер ваҡыт Раббы, исраилдар Аллаға ҡорбан килтерә алһын һәм Алла Үҙе һәр ваҡыт шунда булһын өсөн, Муса аша Үҙенең халҡына икенсе сатыр төҙөргә ҡуша.

Муса Исраил улдарына былай ти: «Бына Раббы нимә бойорҙо: һәр кем Раббыға хәленән килгән тиклем бүләк килтерһен – алтын, көмөш һәм баҡыр, зәңгәр, ҡарағусҡыл ҡыҙыл һәм ут-ҡыҙыл йөн еп, йоҡа туҡыма һәм кәзә дебете, ҡыҙылға һәм зәңгәргә буялған һарыҡ тиреһе, сәрүәр ағасы, майшәм өсөн зәйтүн майы, мәсех майы һәм төтәтеү майы өсөн хуш еҫле матдәләр, баш ҡаһиндың кейемен биҙәр өсөн оникс һәм башҡа аҫыл таштар. Раббы изге сатыр өсөн эшләргә ҡушҡанды оҫталарығыҙ башҡарһын».

Муса һүҙен тамамлағас, исраилдар кәрәкле әйберҙәрҙе килтерә башлай. Халыҡ Изге сатыр ҡорғанда һәм изге кейемдәр әҙерләгәндә ҡулланылған барлыҡ әйберҙәрҙе йөрәктәре ҡушҡанса Раббыға бүләккә алып килә. Ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа үҙ теләктәре менән алтын йөҙөктәр, алҡалар, мунсаҡтар һәм башҡа алтын әйберҙәрен Раббыға килтерә. Зәңгәр, ҡарағусҡыл ҡыҙыл һәм ут-ҡыҙыл йөн ебе, йоҡа туҡыма, кәзә дебете, ҡыҙылға һәм зәңгәргә буялған һарыҡ тиреһе булғандар шуларҙы алып килә. Күптәр көмөш йә баҡыр бүләк итә. Сәрүәр ағасы булған һәр кем төҙөлөштә файҙаланыу өсөн ағас килтерә.

*СЫҒЫУ 35:4–29*



## Осрашыу сатырын изгеләндереү

Осрашыу сатыры тирәләп оҙонлоғо 50 метр, киңлеге 25 метр булған ихата яһайҙар. Баҡыр менән көпләнгән бағаналар араһына шаршауҙар элеп, ихатаны уратып алалар. Изге сатыр үҙе тура мөйөшлө, 15 метр оҙонлоҡта, 5 метр киңлектә, 5 метр бейеклектә була. Ишеге көнсығышҡа ҡарай.

Сатырҙың эске яғы икегә бүленә. Тәүгеһе, Мөҡәддәс урын тип аталғаны, ҙурыраҡ була һәм унда хуш еҫле ыҫмала төтәтә торған алтын ҡорбан усағы урынлаштырыла. Ҡорбан усағы янында алтын өҫтәл тора, унда ун ике икмәк ята. Был икмәктәр Аллаға бағышланған, йәки изге икмәктәр тип атала. Шунда уҡ ете яҡтыртҡыслы алтын шәмдәл дә тора. Икенсе, төпкө бүлмәне беренсеһенән пәрҙә айырып тора. Унда ике алтын кируб* ҡуйылған алтындан яһалған Килешеү һандығы урынлаштырыла. Һандыҡта Ун бойороҡ яҙылған Килешеү таҡтаташтары һаҡлана. Килешеү һандығы торған әлеге бүлмә Иң мөҡәддәс урын тип атала.

Осрашыу сатырына – ҡаһиндарға, ә Иң мөҡәддәс урынға йылына бер тапҡыр баш ҡаһинға ғына инергә рөхсәт ителә.

Осрашыу сатыры ҡоролғас, Муса уны һәм унда хеҙмәт итәсәк ҡаһиндарҙы изгеләндерә. Шунан һуң Осрашыу сатырын болот ҡаплай, шулай итеп, Изге торлаҡҡа Раббы шөһрәтенең балҡышы тула. Болот сатырҙы һәр ваҡыт ҡаплап тора. Төндәрен ут кеүек яна. Ҡайһы берҙә ул сатыр өҫтөнә күтәрелә. Был Алланың уларға билдәһе була: шул билдә буйынса исраилдар гүзәл Ҡәнғән еренә табан юлға сыға, сөнки Раббы уларҙы Мысырҙан шул яҡтарға алып барған була.

Изге Яҙмала әлеге сатыр «килешеү сатыры» һәм «осрашыу сатыры» тип тә йөрөтөлә, сөнки халыҡ уның тирәләй ғибәҙәт ҡылыр өсөн йыйыла.

*СЫҒЫУ 40:17–38*

---

* Кируб – ҡанатлы илаһи йән эйәһе.



## Күҙәтселәрҙең Ҡәнғәнгә килеүе

Ниһайәт, исраилдар Ҡәнғән еренә яҡынлаша. Паран сүллегендә туҡтағас, Муса ун ике кешене Ҡәнғәнгә ебәреп, уларға былай ти: «Негев аша ул таулы илгә барып, ниндәй ер икәнен, ниндәй халыҡ йәшәгәнен, ҡеүәтлеме, түгелме, йәшәгән ҡалалары ниндәй икәнен ҡарап ҡайтығыҙ. Ҡайтҡанда шул ерҙең емештәрен үҙегеҙ менән алырға тырышығыҙ». Шулай итеп, ун ике күҙәтсе юлға сыға. Ҡырҡ көн буйы ҡарап, күҙәтеп йөрөй улар Ҡәнғән ерен. Ҡайтышлай үҙҙәре менән анар алмалары, инжир, башҡа төрлө емеш-еләк, ике кеше таяҡҡа аҫып, ҙур йөҙөм тәлгәше алып ҡайталар. Күҙәтселәр был илдең ысынлап та «һөт һәм бал аҡҡан» ер икәнен һөйләп бирә; халҡының ҡеүәтле булыуын, нығытылған ҙур ҡалаларҙа йәшәгәнен дә әйтә. «Беҙ уларға ҡаршы һуғыша алмаясаҡбыҙ, улар беҙгә ҡарағанда күпкә көслөрәк», – тиҙәр.

Күҙәтселәр, Алланың исраилдарға ярҙам вәғәҙә итеүен онотоп, Ҡәнғән ере тураһында ялған хәбәрҙәр тарата, халыҡтың күңеленә ҡурҡыу һала. Ерҙе ҡарап ҡайтҡандарҙан Нун улы Йушағ менән Калев ҡына Аллаға тоғролоҡ һаҡлай, халыҡты өркөткөһө килмәй. «Әйҙәгеҙ, барып һөжүм итәйек тә ул ерҙе яулап алайыҡ, көсөбөҙ етерлек», – ти Калев. Әммә халыҡ уны тыңларға теләмәй, бөтәһе бер юлы иларға, Мысырҙан алып сыҡҡандары өсөн Муса менән Һарунды битәрләргә тотона. «Үҙебеҙгә икенсе етәксе һайлап, Мысырға кире ҡайтайыҡ», – тиешәләр. Ә Нун улы Йушағ менән Калев, өҫтәрендәге кейемдәрен йыртҡыслап: «Әгәр Раббы беҙгә ҡарата миһырбанлы булһа, беҙҙе был ергә алып барыр, һөт һәм бал ағып ятҡан шул ерҙәрҙе беҙгә бирер. Тик Раббыға ҡаршы бармағыҙ. Ул илдең халҡынан да ҡурҡмағыҙ, улар беҙҙең ҡулға табыш булып төшәсәк, сөнки уларҙы һаҡлар көс юҡ. Ә беҙҙең менән – Раббы, шуға ҡурҡмағыҙ», – тиҙәр. Баш бирмәҫ халыҡтың хәбәрен ишетеп, Муса менән Һарун ҡайғыға ҡала. Исраилдарҙың ышанмауын һәм тиҫкәрелеген күреү ҡыйын була уларға. Шунда Раббы Мусаға: «Был халыҡ ҡасанға тиклем йәнемде талар? Араларында ҡылған билдә һәм мөғжизәләремде күрә тороп, ҡасанға тиклем Миңә ышанмаҫтар?» – ти һәм, уларҙы ҡыйратып, Мусанан яңы халыҡ булдырырға әҙерләгән белдерә. Әммә Муса Уға исраилдарҙың был ҙур гонаһын ярлыҡауын һорап ялбара. Алла уның хаҡына йәнә фетнәсел халыҡты ярлыҡай, әммә ышанмағандары



өсөн исраилдарҙың яңы быуыны ғына вәғәҙә ителгән Ҡәнғән ерендә йәшәйәсәген, ә хәҙерге быуындан Уға тоғро ҡалған Нун улы Йушағ менән Калев ҡына унда инә аласағын әйтә.

*ИҪӘП 13:1–34; 14:1–30*

## Ҡорах, Даҫан һәм Авирамдың язаға тарттырылыуы

Раббы Мусаны исраилдарға Үҙе баш итеп ҡуйғанға, халыҡҡа унының һүҙенән сыҡмаҫҡа һәм барыһын да ул әйткәнсә эшләргә ҡуша. Әммә бер көн исраилдар тупламында баш күтәрәләр. Ҡорах, Даҫан һәм Авирам етәкселегендә ике йөҙ илле кеше Мусаға ҡаршы сыға. Улар бынан ары Мусаға буйһонорға теләмәй һәм уны үҙен башҡаларҙан өҫтөн тотоуҙа ғәйепләй.

Быны ишетеп Муса, Раббы ҡушҡанса, Исраил халҡына Ҡорах, Даҫан һәм Авирамдың сатырҙарынан ситкә китергә, әйберҙәренә ҡағылмаҫҡа бойора ла былай ти: «Хәҙер эштәремде үҙ ихтыярым менән эшләмәгәнемде, уларҙы башҡарыр өсөн мине Раббы Үҙе ебәргәнен белерһегеҙ. Әгәр улар ҡәҙимге кеше шикелле үлеп китһә, улар менән ғәҙәттән тыш бер нәмә лә булмаһа, тимәк, мине Раббы ебәрмәгән. Әгәр инде Раббы мөғжизә ҡылып, ер уйылып китһә, шунан уларҙы барлыҡ мөлкәттәре менән бергә йотһа, тереләй үлеләр донъяһына эләкһәләр, белегеҙ, был кешеләр Раббынан ваз кискән».

Муса ошо һүҙҙәрҙе әйткәс тә, улар аҫтында ер уйылып китә, һәм Ҡорах яҡлы әҙәмдәрҙе ғаиләләре, мөлкәттәре менән бергә упҡын йота. Бөтә әйберҙәре менән улар тереләй үлеләр донъяһына олаға, ер баҫып, һәләк булалар. Яҡын торған исраилдар, уларҙың ҡысҡырған тауышын ишетеп, беҙҙе лә ер йотоп ҡуймаһын тип, ҡурҡыштарынан ҡаса башлай. Ҡалған ике йөҙ илле фетнәсегә Раббы күктән ут ебәрә, улар ҙа үлә.

*ИҪӘП 16:1–3, 23–35*



## Баҡыр йылан

Сүллек буйлап юлын дауам иткән халыҡ, түҙемлеген юғалтып, йәнә Алланан зарланырға тотона. «Беҙҙе ниңә Мысырҙан алып сыҡтығыҙ? Беҙ сүллектә үлһен типме? Бында ни икмәк, ни һыу юҡ, ашарға яраҡһыҙ аҙыҡ та ялҡытты», – тип, улар Мусаға ризаһыҙлыҡ белдерә. Уларҙың зарланыуын ишеткән Раббы исраилдарға ағыулы йыландар ебәрә. Йылан саҡҡан береһе үлә бара. Шунан һуң күптәр Мусаға килеп: «Аллаға һәм һиңә ризаһыҙлыҡ белдереп, гонаһ ҡылдыҡ. Раббынан ялбарып һора әле, беҙҙән йыландарҙы алһын», – тиҙәр.

Муса халыҡ өсөн доға ҡыла башлай. Раббы уға яуап итеп былай ти: «Баҡырҙан йылан эшлә лә уны оҙон бер таяҡҡа тағып ҡуй. Йыландан сағылған һәр кем, уға ҡарап, тере ҡалыр». Муса баҡыр йылан эшләй ҙә, уны барыһы алдында таяҡҡа тағып, күтәреп ҡуя. Шунан һуң йыландан сағылған кеше, ошо баҡыр йыланға ҡараһа, тере ҡала.

*ИҪӘП 21:4–9*



## Билғам пәйғәмбәр һәм фәрештә

Бер ваҡыт исраилдар туплам булып Йерихо ҡалаһы янында Иордан йылғаһы буйында туҡтай. Был тирәлә йәшәгән моавтар исраилдарҙың күплегенән ҡурҡып ҡала. Моавтар батшаһы Балаҡ илселәрҙе Билғам пәйғәмбәрҙе ярҙамға саҡырырға ебәрә. Пәйғәмбәргә былай тип әйтергә ҡуша: «Мысырҙан сыҡҡан бер халыҡ беҙҙең янға килеп төпләнде; шул тиклем күптәр, бөтә ер йөҙөн ҡапланылар. Беҙҙән көслөрәктәр ҙә, шуға был халыҡҡа килеп ҡарғыш яуҙыр. Исраилдарға ҡарғыш яуҙырһаң, бәлки, мин уларҙы еңеп, еребеҙҙән ҡыуып сығара алырмын. Һин фатихаңды биргән кешенең фатихалы булыуын, ҡарғыш яуған кешенең өҫтөнә ҡарғыш ятыуын мин беләм».

Билғам юлға сыға. Ул ишәгенә атлана, эргәһенән ике хеҙмәтсеһе йәйәү бара. Юл уртаһында ҡылыс тотоп торған фәрештәне күреп, ишәк ҡапыл баҫыуға ҡайырыла. Кире юлға төшөрәм тип, Билғам ишәгенә һуға башлай.

Фәрештә теге яғынан да, был яғынан да ҡойма менән кәртәләнгән ике йөҙөм баҡсаһы араһынан үткән юлдың иң тар еренә сығып баҫа. Ишәк, фәрештәне күреп, ҡоймаға һыйына, Билғамдың аяғын да ҡоймаға ҡуша ҡыҫа. Хужаһы ишәкте тағы ла һуҡҡыслай башлай.

Фәрештә бынан да тарыраҡ, уңға ла, һулға ла тайшанып булмаған урынға барып баҫа. Ишәк, уны күреп, ергә ята. Асыуы ҡабарған пәйғәмбәр ишәкте таяҡ менән туҡмай башлай.

Шунда Раббы ишәккә һөйләшер өсөн тел бирә. Ишәк: «Мине туҡмарлыҡ нимә эшләнем һуң?» – тип һорай. Раббы Билғамдың күҙҙәрен аса һәм ул да ҡылыс тотҡан фәрештәне күрә. Билғам йөҙтүбән ҡапланып уға баш эйә. «Ишәгеңде ни өсөн туҡманың? Барған юлың хаҡ булмағас, һине туҡтатырға тип сыҡҡайным», – ти уға фәрештә. Билғам: «Гонаһлымын, мине туҡтатырға тип юлда торғаныңды белмәнем бит. Башҡарырға йыйынған эшем күңелеңә ятмаһа, кире боролам», – тип яуаплай. «Был кешеләр менән бар, әммә Мин һиңә нимә әйтәм, уларға шуны ғына һөйлә», – ти уға фәрештә.

Моавтар, хәҙер Билғам килер ҙә исраилдарға ләғнәт уҡыр, уларға бәлә килтерер, тип көтә. Әммә Билғам ләғнәт уҡыр урынға: «Алла



Исраилды ҡарғамай икән, нисек мин ләғнәт уҡый алам?» – тип, Исраилды өс тапҡыр фатихалай.

*ИҪӘП 22:3–35; 23:7–20*

## Нун улы Йушағ – Мусаның алмашсыһы

Муса ҡартая, Алла ла уға тиҙҙән вафат буласағын иҫкәртә. Үлер алдынан ул Раббынан, Алла халҡына баш итеп ҡалдырыр өсөн, үҙенә алмашсы билдәләүен үтенә. Ул ваҡытта халыҡ көтөүсеһеҙ һарыҡтар кеүек булмаҫ ине, ти.

Раббы Мусаға былай ти: «Ул кеше Нун улы Йушағ булыр, унда Минең Рухым бар. Уны Әлғазар ҡаһиндың һәм бар халыҡтың ҡаршыһына баҫтыр ҙа, башына ҡулдарыңды ҡуйып, өгөт-нәсихәттәреңде бир. Йушағҡа хакимлыҡ ҡөҙрәтеңдән өлөш сығар: шулай бар исраилдар уға буйһонор. Ә Әлғазар урим* ярҙамында Йушағ өсөн Минең ихтыярымды белешер. Ҡаһин да, Исраил йәмғиәте лә уның һүҙе буйынса эш алып барыр». Муса Раббы ҡушҡанса эшләй.

Нун улы Йушағ Алланың Исраил халҡына Ҡәнғәнгә инергә ярҙам итеренә ышанған ике күҙәтсенең береһе була. «Был ерҙең халҡынан ҡурҡмағыҙ! Раббы беҙҙең менән», – тип, халыҡтың күңелен күтәргән улар. Ул мәлдәрҙән һуң бик күп йылдар уҙа. Ҡырҡ йыл буйы сүллек гиҙә Исраил халҡы. Мысырҙан сыҡҡан оло кешеләр, үҙҙәренә вәғәҙә ителгән Ҡәнғән ерен күрә алмайынса, үлеп бөтә. Барыһы ла Алланың: «Ошонда, сүллектә, егерме йәштән өлкәндәрҙең барыһы ла Миңә ризаһыҙлыҡ белдергән өсөн ятып ҡалыр. Һеҙҙе йәшәтергә ант иткән ергә Йефунне улы Калев менән Нун улы Йушағтан башҡа бер кем дә инмәҫ. Дошмандарға табыш булыр инде, тип һанаған балаларығыҙҙы Мин унда индерермен, шулай улар һеҙ баш тартҡан ерҙәрҙе күрер. Һеҙ, ерҙәрҙе ҡарап йөрөгән ҡырҡ көн иҫәбенән сығып, ҡырҡ йыл буйы гонаһтарығыҙ өсөн яза татырһығыҙ, бер көн өсөн – бер йыл. Минең һеҙҙән баш тартыуымдың ни икәнен шунда аңларһығыҙ», – тигән һүҙҙәре буйынса була.

*ИҪӘП 14:29–30, 34; 27:12–23*

* Урим – ҡаһиндың түшлегендә булып, Алланың ихтыярын белергә ярҙам иткән йәрәбә.



## Раббыны хәтерҙән сығармаҫҡа тигән нәҙер

Муса халыҡты былай тип өйрәтә: «Ҡарағыҙ уны, Аллағыҙ Раббы бойорғанса эшләгеҙ: уңға ла, һулға ла тайпылмағыҙ. Аллағыҙ Раббы ҡушҡан юлдан ғына йөрөгөҙ, шул саҡта ғына биләмә итеп аласаҡ ерегеҙҙә имен-аман оҙаҡ ғүмер итерһегеҙ. Тыңла, Исраил: Раббы Аллабыҙ – берҙән-бер Алла. Раббы Алланды бөтә йөрәгең, йәнең һәм бар көсөң менән ярат».

Муса исраилдарға Мысырҙа саҡтарында һәм сүллек буйлап гиҙгән мәлдәрендә улар өсөн Раббы ҡылған мөғжизә һәм хикмәттәр тураһында үҙҙәренең нәҫелдәренә һөйләргә нәҙер әйтә. Шулай уҡ ул балаларҙы Алланың бойороҡтарын, ҡанундарын һәм ҡушҡандарын үтәргә өйрәтергә, Раббыны, исраилдар сүлдә Уны һынаған кеүек, һынамаҫҡа ҡуша. Муса уларға былай ти: «Ҡарағыҙ уны, һеҙҙе Мысырҙан, ҡоллоҡ йортонан алып сыҡҡан Раббыны онотмағыҙ. Раббы Аллағыҙҙан ҡурҡығыҙ, Уға ғына хеҙмәт итегеҙ. Башҡа илаһтарға, эргә-тирәгеҙҙә йәшәгән халыҡтарҙың илаһтарына табынмағыҙ, Раббы Аллағыҙ, асыуынан ярһып, һеҙҙе ер йөҙөнән юҡ итеп ҡуймаһын. Раббы Аллағыҙҙың бойороҡтарын, һеҙгә биргән ҡағиҙәләрен, ҡушҡандарын теүәл үтәгеҙ. Раббы яҡшы һәм ғәҙел тип һанаған ғәмәлдәрҙе генә башҡарығыҙ».

*ҠАНУН 5:32–33; 6:4–25*



## Ҡорбан килтереү

Муса һәр Израил кешеһенә былай тип мөрәжәғәт итә: «Раббы Аллаң һеҙгә биләмәгә биргән ергә килеп төпләнгәс, ошо ерҙә үҫкән бөтә емештәрҙең дә тәүге уңышынан берәр өлөш йыйып алып, кәрзингә һал һәм Раббы Аллаң Үҙ исеме төйәкләнһен өсөн һайлаған урынға бар. Унда хеҙмәт итеп йөрөгән ҡаһинға кил дә: „Бөгөн мин Раббы ата-бабаларыбыҙға бирергә вәғәҙәләгән ергә аяҡ баҫҡанымды Раббы Аллама белдерәм. Бына мин, Раббы, Һин биргән ерҙең тәүге уңышының емештәрен алып килдем“, – тип әйт. Шунан һуң кәрзинеңде Раббы Аллаң алдына ҡуй ҙа Уға сәждә ҡыл.

Раббы Аллаң һиңә һәм ғаиләңә биргән барлыҡ бәрәкәткә Алланың Изге торлағында хеҙмәт итергә һайлап алынған левиҙәр һәм һиндә йәшәйәсәк килмешәктәр менән бергә ҡыуан. Ереңдән йыйып алған уңыштың ундан бер өлөшөн өс йылға бер тапҡыр левиҙәргә, килмешәктәргә, етемдәргә, тол ҡатындарға бир, улар ҙа туйғансы ашаһын.

Ошо көндән Раббы Аллаң бөтә ҡағиҙәләрҙе һәм ҡанундарҙы үтәргә бойора: уларҙы бөтә йөрәгеңде һалып, ихлас күңелдән үтә. Һин ошо көндә Раббының Аллаң булғанын, Уның юлынан йөрөйәсәгеңде, ҡағиҙәләрен, бойороҡ-ҡанундарын үтәйәсәгеңде, Уның әйткәндәрен тыңлаясағыңды белдерҙең. Раббы ла бөгөн, әгәр Уның барлыҡ бойороҡтарын үтәһәң, һеҙгә биргән вәғәҙәһе буйынса, Уның халҡы буласағығыҙҙы иғлан итте. Ул һиңә Үҙе донъяға яратҡан барлыҡ халыҡтарҙың береһендә лә булмаған хөрмәт, шөһрәт һәм күркәмлек бирәсәк. Һәм һин, биргән вәғәҙәһе буйынса, Раббы Аллаңдың һайлап алған изге халҡы булырһың».

*ҠАНУН 26:1–19*



## Мусаның вафаты

Раббы Мусаға Моав ерендә урынлашҡан Йерихо ҡаршыһындағы Нево тауына менергә ҡуша. Ул Мусаға, ошо тауҙа үләсәкһең, тип әйткән була. Муса тауға менгәс, Раббы уға «тоҡомоңа бирермен» тип Ибраһимға, Исхаҡҡа, Яҡупҡа вәғәҙә иткән ерҙәрҙе күрһәтә. «Бына ул ерҙәр. Уны үҙ күҙҙәрең менән күрергә мөмкинлек бирҙем, әммә һин унда инмәйәсәкһең», – ти Раббы.

Раббы ҡоло Муса, Раббы әйткәнсә, шунда вафат була. Ул Моав ерендә Бейт-Пеғор ҡаршыһындағы үҙәндә ерләнә, әммә уның ҡәберенең теүәл генә урынын әлегә тиклем бер кем дә белмәй. Муса үлгәндә уға йөҙ егерме йәш була, шулай ҙа күҙҙәренең нуры ҡайтмай, тәненең көсө кәмемәй. Муса өсөн ҡайғырып, Исраил халҡы Моав тигеҙлегендә утыҙ көн йәш түгә. Исраилдарҙың шунан һуң, Муса кеүек, Раббы йөҙгә-йөҙ танып-белгән, Раббы ҡушыуы буйынса Мысыр фирғәүене, уның хеҙмәтселәре, бөтә иле алдында төрлө хикмәттәр һәм мөғжизәләр ҡылған бер генә пәйғәмбәре лә булмай. Бер генә пәйғәмбәр ҙә Исраил халҡының күҙ алдында Муса кеүек бөйөк һәм ҡөҙрәтле ғәмәлдәр ҡылмай.

Муса ҡулдарын ҡуйғандан һуң, төплө аҡыл менән һуғарылған Нун улы Йушағ Мусаның эштәрен дауам итә. Исраил халҡы уға буйһоноп, һәр нәмәне Муса аша Раббы ҡушҡанса үтәй.

*ҠАНУН 34:1–12*



## Рахавтың шымсыларҙы ҡотҡарыуы

Муса үлгәндән һуң, Раббы Нун улы Йушағҡа былай ти: «Ҡолом Муса вафат булды; шулай булғас, тор ҙа бөтә халыҡ менән Иордан йылғаһы аша Мин һеҙгә, Исраил халҡына, биргән ергә бар. Мусаға вәғәҙә иткәнсә, аяғығыҙ баҫҡан бөтә ерҙәрҙе Мин һеҙгә бирәм. Һиңә бер кем, бер ҡасан ҡаршы тора алмаҫ. Мусаның юлдашы булған кеүек, һинең дә юлдашың булырмын, һине ҡалдырмам, ташлап китмәм. Ныҡ бул, ҡыйыу бул, ҡолом Муса һиңә биргән ҡанунды теүәл үтә. Ҡанундан уңға ла, һулға ла тайпылма – шул саҡта ҡылған ғәмәлдәрең һәм бөтә эштәрең уңышлы булыр».

Исраилдар үҙҙәре яулап аласаҡ Ҡәнғән еренә яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Тиҙҙән ҙур, нығытылған Йерихо ҡалаһының диуары күренә. Нун улы Йушағ ике Исраил кешеһен был ҡалаға шымсы итеп ебәрә. Улар Рахав исемле ҡатындың өйөнә ҡуна төшә. Йерихо батшаһына ҡалаға шымсылар килеүен, Рахав исемле ҡатындың өйөндә туҡтауҙарын еткерәләр. Батша уларҙы ҡулға алырға бойора.

Рахав Алланың исраилдарға ҡылған мөғжизәләре тураһында ишетеп белә, Йерихоны ла, исраилдарға вәғәҙә ителгән ерҙә ятҡанлыҡтан, уларға биреренә ышана. Шуға ла, Алла мәрхәмәтенә өмөт итеп, шымсыларҙы өйөндә йәшереп ҡалдыра, ә батша хеҙмәтселәренә, улар кис китте, тип әйтә. Хеҙмәтселәр Йерихонан Иорданға илткән юл буйлап шымсыларҙы ҡыуа төшә. Төн еткәс, Рахав исраилдарҙы йортоноң ҡала диуарында урынлашҡан тәҙрәһенән арҡан менән аҫҡа төшөрә. Ҡатын уларға, эҙәрлекләүселәренең ҡулына эләгеп ҡуймаҫ өсөн, тауҙарҙа өс көн йәшеренеп ятырға ҡуша.

*ЙУШАҒ 1:1-7; 2:1–16*



## Иордан аша сығыу

Йерихоға барған юлда Израил халҡына Иордан йылғаһын кисеп сығырға кәрәк була.

Шул ваҡыт Раббы Йушағҡа: «Бөгөн Мин Исраил халҡы алдында һинең абруйыңды күтәрәм. Улар, Мин Муса менән бергә булған кеүек, һинең менән дә бергә булыуымды аңлар. Килешеү һандығын күтәреп барған ҡаһиндарға Иордан йылғаһына аяҡ баҫыу менән туҡтарға ҡуш», – тип әйтә. Шунан Йушағ халыҡҡа былай ти: «Бында йәшәгән ҡәнғәни, хитти, хиууи, перизи, гиргаши, әмөри, йевусиҙәрҙе ерҙәренән ҡыуып ебәрәсәк Алланың һеҙҙең менән икәнен бына нисек аңларһығыҙ: ер йөҙөнөң Хужаһы Раббының Килешеү һандығын Иордан аша сыҡҡанда һеҙҙең алдан алып барырҙар. Уны күтәреп барған ҡаһиндар Иордан һыуына аяҡтарын тейҙереү менән йылға ағыуҙан туҡтар һәм диуар булып ҡалҡыр». Ысынлап та, Килешеү һандығын күтәреп барған ҡаһиндар йылғаға аяҡ тейҙергәс тә (ураҡҡа төшкән был көндәрҙә ғәҙәттә йылға мул һыулы була, ярҙарынан ташып сыға), йылға ағыуҙан туҡтай һәм Адам ҡалаһына тиклем йылғаның үрге өлөшөндә диуар булып ҡалҡа. Түбәнге өлөшөндәге һыуҙар диңгеҙгә ағып бөтә.

Шул мәл Исраил халҡы Иордан йылғаһының ҡоро ҡалған өлөшөнән сыға. Улар сыҡҡанда ҡаһиндар ҡороған йылғаның уртаһында, Килешеү һандығын күтәреп, баҫып тора. Нун улы Йушағ исраилдарҙың ун икеһенә ҡаһиндар баҫып торған ерҙән мөғжизәнең иҫтәлеге итеп берәр таш алырға ҡуша. Халыҡ Иордан йылғаһы аша сығып бөткәс, Раббы Йушағҡа: «Килешеү һандығын күтәреп барған ҡаһиндарға Иордандан сығырға ҡуш», – ти. Ҡаһиндар сыҡҡас, йылға яңынан үҙ хәленә ҡайта.

Иордандан алған ун ике ташты Нун улы Йушағ Гилгал тип аталған урынға ҡалҡытып ҡуя.

*ЙУШАҒ 3:7–17; 4:1–24*



## Йерихоны яулау

Исраилдар Йерихоға етеп килгәндә, батша ҡаланың бөтә ҡапҡаларын бикләргә ҡуша. Әммә Раббы Йушағҡа былай ти: «Йерихо, уның батшаһы, ғәскәриҙәре – барыһы ла һинеке булыр. Ҡоралланған бөтә ирҙәр көнөнә бер тапҡыр ҡаланы урап сыҡһын. Был алты көн буйына дауам итһен. Ете ҡаһин, ете мөгөҙ борғо тотоп, һандыҡ алдынан барһын. Етенсе көнгә ҡаланы ете тапҡыр урап сығығыҙ, ҡаһиндар борғо ҡысҡыртып барһын. Улар борғоно оҙон-оҙаҡ итеп ҡысҡыртып ебәреү менән, барса халыҡ ныҡ итеп хәрби оран һалһын: шул саҡ ҡала диуары нигеҙенә тиклем таралып төшөр ҙә бар халыҡ ҡалаға инер».

Төркөм алдынан – ҡоралланған ғәскәриҙәр, ә улар артынан, мөгөҙ борғоларын ҡысҡыртып, ҡаһиндар бара; төркөм һуңын ҡораллы ғәскәриҙәр биләй. Халыҡҡа Йушағ: «Шымығыҙ, бер ни ҙә өндәшмәгеҙ, өнөгөҙ ҙә сыҡмаһын. „Ҡысҡырығыҙ!“ – тигәс кенә ҡысҡырырһығыҙ», – тип бойора. Шулай итеп, Раббының Килешеү һандығы менән ҡаланы бер тапҡыр урап сығалар ҙа Исраил тупламына ҡайталар. Икенсе көнө лә һандыҡ менән ҡаланы бер тапҡыр урайҙар ҙа тупламға ҡайталар. Шулай алты көн ҡабатлайҙар. Етенсе көнгә ҡаланы һандыҡ менән ете тапҡыр урап, ҡаһиндар борғо ҡысҡыртҡас, Йушағ халыҡҡа: «Ҡысҡырығыҙ, сөнки Раббы ҡаланы һеҙгә бирә!» – ти. Мөгөҙ борғо тауышын ишеткәс, барыһы ла ҡысҡыра башлай, һәм ҡала диуары нигеҙенә тиклем таралып төшә. Халыҡ төрлө яҡлап ҡалаға инә, уны баҫып ала.

Йерихоға килгән ике шымсы үҙҙәрен эҙәрлекләүселәрҙән йәшереп алып ҡалған Рахавҡа, ҡаланы алғанда туғандарың менән бергә ҡотҡарырбыҙ, тип һүҙ биргән була. Исраилдар ҡалаға инеүгә, Рахав тәҙрәгә ҡыҙыл бау бәйләп ҡуйырға тейеш була. Исраилдар ҡалаға инеүгә, Рахав тәҙрәгә ҡыҙыл бау бәйләп ҡуйырға тейеш була. Ул шулай эшләй ҙә. Шул рәүешле Рахавты туғандары менән бергә Йерихонан сығаралар. Шунан һуң ҡала тулыһынса яндырыла.

*ЙУШАҒ 6:1–24*



## Әмөриҙәр менән алышыу

Бер ваҡыт Ғивғон тип аталған ерҙә исраилдар һәм уларҙың дошмандары әмөриҙәр араһында ҙур алыш була. Көрәш алдынан Раббы Нун улы Йушағҡа: «Уларҙан ҡурҡма, сөнки уларҙы Мин һинең ҡулдарыңа тапшырам: береһе лә һиңә ҡаршы тора алмаҫ», – тип әйтә. Исраилдар ғәскәре, Йушағ етәкселегендә тупламдан китеп, төн ҡараңғылығына юл ала. Улар әмөриҙәрҙе һиҙҙермәҫтән килеп баҫа. Исраилдарҙы күреп, улар араһында ығы-зығы ҡуба. Еңелгән әмөриҙәрҙе исраилдар Бейт-Хоронға күтәрелгән юл буйлап, Ғазыҡа менән Маҡҡыдаға тиклем ҡыуып бара.

Әммә был еңеү еңел генә бирелмәй: ул көндө алыш оҙаҡҡа һуҙыла. Йушағ Раббыға, ҡояш тиҙ генә байымаһын, көн оҙаҡҡараҡ һуҙылһын ине, тип ялбара башлай. Йушағ исраилдарҙың күҙ алдында: «Ҡояш, Ғивғон өҫтөндә тороп тор! Ай, Айялон үҙәне өҫтөндә туҡта!» – ти. Шул мәл ҡояш менән ай туҡтап ҡала ла, исраилдар дошмандарын тулыһынса тар-мар иткәнсе, урындарынан ҡуҙғалмай. Алыштан һуң Йушағтың ғәскәре тупламға еңеү менән әйләнеп ҡайта.

Кешенең ялбарыуын тыңлап, Раббы ҡушыуы буйынса көнбайышҡа барған ҡояштың күк йөҙөндә туҡтап тороуы ошо хәлгә тиклем дә, бынан һуң да булмай. Ул көндө халҡы өсөн Алла Үҙе көрәшә.

Алла Нун улы Йушағҡа әйткән һүҙҙәрҙе Үҙенә инанған һәр кешегә лә еткерә: «Һиңә шуны бойорам: ныҡ бул, ҡыйыу бул, бер нәмәнән дә ҡурҡма, сөнки, ҡайҙа ғына барһаң да, Раббы Аллаң һинең менән булыр».

*ЙУШАҒ 1:9; 10:6–15*



# Исраил хакимдары

Исраилдар килгәнсе, Ҡәнғәндә төрлө мәжүси халыҡтар: хиттиҙар, гиргашиҙар, әмөриҙәр, ҡәнғәниҙәр, периҙиҙәр, хиууиҙәр һәм йевусиҙәр йәшәй. Бөтә был халыҡтарҙы ҡайһы берҙә ҡәнғәниҙәр тип кенә атайҙар. Күп гонаһтары өсөн Раббы уларҙы ҡырып бөтөрөргә ҡарар итә. Ҡәнғәниҙәрҙең төп илаһтары Бәғел менән Ғаштареҫ була. Бәғелгә табыныу ғәҙәттә кәйеф-сафалы эскелек мәжлестәре менән оҙатыла. Табыныу ҡалҡыулыҡтарында ҡорбан килтереү йолалары башҡарыла. Ҡорбанға хатта кешеләрҙе килтерәләр.

Ҡәнғәндә исраилдар биләгән ер хәҙерге Фәләстинде (Исраил дәүләте) һәм Иордан йылғаһының көнсығышындағы ҡайһы бер төбәктәрҙе үҙ эсенә ала. Муса был ерҙәрҙе Исраилдың ун ике нәҫеле араһында, йәғни Яҡуптың ун ике улының ун беренә – Рәүвән, Шимғон, Йәһүҙә, Дан, Нафтали, Ғад, Ашер, Исасхар, Зевулун, Йософҡа (Йософтоң нәҫеле үҙ сиратында улдары Әфраим һәм Менашшенан таралған ике быуынға бүленә) һәм Бинйәмингә бүлеп бирә. Бер ырыуға – Леви нәҫеленә ерҙән өлөш теймәй: улар Алланың Изге йортонда хеҙмәт итергә һайлап алынып, башҡа Исраил ырыуҙарының ерҙәрендә урынлашҡан ҡалаларҙа йәшәй.

Ҡәнғәнгә килеп төпләнгәндән һуң, 300–400 йыл дауамында Исраилдың ун ике нәҫеленең берҙәм генә хакимлығы булмай әле. Уларҙы күкте һәм ерҙе яратҡан берҙән-бер Аллаға булған ышаныс берләштерә. Шуға ҡарамаҫтан, урындағы халыҡ ыңғайына уларҙың бот-һындарына табынып, Алла бойороҡтарын үтәүҙән баш тартҡандар ҙа була. Енәйәт ҡылғандары, ялған илаһтарға табынғандары өсөн Раббы Исраил халҡына асыулана, уларҙы язаға тарттыра: уларҙы дошмандары – моавтар, ғаммондар, ғәмәлектәр, пелештиҙәр, ҡәнғәниҙәр, мидйәндәр аяуһыҙ талай, үҙҙәренә буйһондора. Уларҙың иҙеүенән исраилдар ыҙа сигә, ҡотҡарыу һорап, Аллаға ялбара. Алла мәрхәмәт күрһәтә: араларынан хакимдар һайлап ҡуя, улары халҡын дошмандарының иҙеүенән ҡотҡара. Әммә, хакимдары үлгәс, халыҡ яңынан ялған илаһтарға табына башлай һәм элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡотора. Шуның менән үҙҙәренә Алла нәфрәтен яңынан йәлеп итәләр.

Алла һайлап ҡуйған Исраил хакимдары: Ғоҫниил, Эһуд, Шамгар, Девора пәйғәмбәр, Бараҡ, Гидғон, Авимәләх, Толағ, Яир, Ифтах,



Ивсан, Элон, Ғавдон, Шимшон һәм Шемуил. Был китапта беҙ уларҙың ҡайһы берҙәре тураһында ғына һөйләп үтәбеҙ.

Шулай итеп, ул ваҡыттарҙа Исраилда батша булмай, һәр кем үҙе дөрөҫ тип һанағанса эш итә.

*ХАКИМДАР*

# Гидғон

Нун улы Йушағ үлгәндән һуң, ялған илаһтарға табыныуҙары менән исраилдар әленән әле Алланы нәфрәтләндереп кенә тора. Бер ваҡыт Раббы уларҙы шуның өсөн язаға тарттыра. Исраил халҡы мидйәндәргә ҡоллоҡҡа төшә. Мидйәндәрҙең иҙеүе аҫтында йәшәү бик ауыр була, ете йылдан улар ҡотҡарыу һорап Аллаға мөрәжәғәт итә. Раббы аһ-зарҙарын ишетә, Гидғонды уларға башлыҡ итеп тәғәйенләй.

Гидғон үҙен көслөләр рәтенә ҡуймай, әммә Алла уға: «Мин һинең менән булырмын, шуға ла мидйәндәрҙе бер кешене еңгән кеүек кенә еңерһең», – ти. Уға атаһы табынған Бәғел илаһҡа ҡоролған ҡорбан усағын емерергә бойора. Гидғон, үҙенең ун хеҙмәтсеһе менән килеп, әлеге ҡорбан усағын емерә, уның эргәһендәге Ашера ҡолғаһын да ҡырҡып ташлайҙар. Гидғон, яңы ҡорбан усағы төҙөп, унда Аллаға ҡорбан килтерә. Гидғонды Раббы Рухы солғап ала. Шунан ул Исраил дошмандарына ҡаршы күп һанлы ғәскәр тупларға тотона. Көрәшкә сығыр алдынан, исраилдарҙы ҡотҡарыр өсөн ысынлап та уны һайлап алғанлығына ышанырға теләп, Гидғон Алланан билдә күрһәтеүен һорай. Раббы ул һораған билдәне күрһәтә: төнгөлөккә ырҙынға йәйеп ҡалдырылған һарыҡ йөнө иртәнгә ысыҡҡа мансыла, ә эргә-тирәһендәге ер ҡоп-ҡоро ҡала; икенсе төндә, киреһенсә, ергә ысыҡ төшһә лә, йөн ҡоп-ҡоро була.

Гидғон үҙенең ғәскәре менән мидйәндәрҙең тупламына ҡаршы урынлашҡас, Раббы уға әйтә: «Һинең менән халыҡ артыҡ күп. Мин уларҙың мидйәндәрҙе еңеүенә юл ҡуя алмайым, юҡһа исраилдар: „Уларҙы беҙ үҙебеҙ еңдек“, – тип маһайып китер. Шуға ла халҡыңа: „Кем ҡурҡаҡ-өркәк, кире әйләнеп ҡайтһын“, – тип иғлан ит». Гидғон тап шулай итә: ғәскәрҙән егерме ике мең кеше китә, ун меңе ҡала. Әммә Раббы, халыҡ әле һаман күп, тип Гидғонға уларҙы йылға буйына алып килергә, һыуҙы нисек эсеүҙәрен күҙәтергә ҡуша. Күптәре тубыҡланып, йылғанан эйелеп эсә. Өс йөҙ кеше генә һыуҙы усына алып эсә. «Бына ошо услап эскән өс йөҙ кеше һеҙҙе ҡотҡарасаҡ – Мин һеҙгә мидйәндәрҙе еңергә мөмкинлек бирәсәкмен», – ти Алла.



Шулай килеп сыға ла. Раббы оло мөғжизә ҡыла: өс йөҙ Исраил кешеһе мидйәндәрҙең һәм ғәмәлектәрҙең саранча кеүек ғәскәрен еңеп сыға.

*ХАКИМДАР 6 – 7*

## Ҡеүәтле Шимшон

Алланың мәрхәмәтенә һәм ярҙамына, күрһәткән мөғжизәләренә ҡарамай, исраилдар тағы Раббы юлынан тайпыла, Уның күңеле хушһынмаған эштәрҙе ҡыла башлай. Бының өсөн улар тағы ла әсир төшә һәм ҡырҡ йыл буйына пелештиҙәр ҡулы аҫтында йәшәй. Әсирлектә саҡтарында Раббы уларға Шимшон исемле кешене хаким итеп ҡуя. Был иҫ китмәле көслө кешенең ҡеүәте уның сәсендә тупланған була. Алла уның ата-әсәһенә: «Баланың сәсен ҡырҡмағыҙ, сөнки ул Алла нәзире (йәғни „Аллаға бағышланған“) тип аталыр, ул Исраилды пелештиҙәр ҡулынан ҡотҡара башлар», – тип улдары тыумаҫ борон уҡ әйтеп ҡуя.

Шимшон шул тиклем көслө була, хатта бер көн ҡаршы осраған арыҫланды кәзә бәрәселәй генә ботарлап ташлай. Икенсе юлы ишәктең яңаҡ һөйәге менән бер көн эсендә меңләгән пелештиҙе үлтерә. Иң ныҡ арҡандарҙы һәм бығауҙарҙы ла еңел генә итеп өҙгөсләй ул.

Бер ваҡыт Шимшон Газа ҡалаһында йоҡларға ҡала. Пелештиҙәр ҡала ҡапҡаларын бикләп, уны үлтерер өсөн йәшеренеп таңды көтә башлай. Шимшон төн уртаһында уянып китә лә ҡаланан сығып китергә уйлай. Ул бикле торған ҡала ҡапҡаһын бағана-элгестәре менән һурып ала ла, яурынына һалып, тау башына мендерә.

*ХАКИМДАР 13:1–5; 14:5, 6; 15:14, 15; 16:1–3*



# Шимшондың һәләк булыуы

Шимшон Исраилда егерме йыл хакимлыҡ итә. Халҡының дошмандары булған пелештиҙәргә ул әллә күпме мәшәҡәт тыуҙыра. Тегеләре уны үлтерергә teләһә лә, ҡеүәте ниҙән ғибәрәт икәнен белмәгәс, бер нәмә лә эшләтә алмайҙар.

Бер ваҡыт улар Шимшон яратып йөрөгән Делила исемле ҡатындан уның көсөнөң сере ниҙә икәнен белешеүен һорайҙар. Делила унан өс тапҡыр төпсөшөп ҡараһа ла, егеттең дөрөҫөн әйткеһе килмәй. Көн һайын серен уртаҡлашыуын инәлеп, ҡатын уның теңкәһенә тейеп бөтә. Ахырҙа, күңелендә урынлашҡан ауыр тойғоға түҙә алмай, Шимшон ҡатынға йөрәк серен сисә: «Әгәр сәсемде ҡырҡһалар, ҡеүәтем бөтөп, бүтән кешеләр кеүек булып ҡаласаҡмын».

Үҙенә кәрәк мәғлүмәтте алғас, Делила уны йоҡлата ла пелештиҙәрҙе саҡыра. Пелештиҙәр егеттең сәсен ҡырҡа һәм Шимшонды ҡеүәт ташлап китә. Алла уны мәрхәмәтенән айырғас, ул көсһөҙләнеп ҡала.

Пелештиҙәр уны ике баҡыр сылбыр менән бығаулай, күҙҙәрен соҡоп ала, ә үҙен зинданда тирмән ташы әйләндерергә ҡушып ҡуялар. Ваҡыт уҙыу менән ҡырҡылған сәс үҫә, Шимшонға әкренләп элекке ҡеүәте яңынан ҡайта.

Нисектер бер ваҡыт пелештиҙәр, үҙҙәренең илаһтарына ҡорбан килтерергә тип, бергә йыйыла. «Илаһыбыҙ күптәребеҙҙе харап иткән, еребеҙҙе бөлдөргән дошманыбыҙ Шимшонды ҡулыбыҙға тапшырҙы», – тип илаһтарын маҡтауға күмә башлайҙар. Кәйефләнеп алып: «Шимшонды саҡырығыҙ! Килеп, беҙҙең күңелде асһын!» – тип ҡысҡырырға тотоналар. Шимшонды алып килеп, йорт уртаһында ҡыйыҡты терәтеп торған ике бағана араһына баҫтыралар. Шул ваҡыт Шимшон Аллаға өндәшә: «Эй Раббым! Мине иҫеңә төшөр ҙә пелештиҙәрҙән ике күҙем өсөн бер юлы үс алырға көс-ғәйрәт бир». Йорт терәүе булған ике бағананы урынынан ҡуптарып ала ла: «Пелештиҙәр менән бергә мин дә үләйем!» – тип ҡысҡыра. Бөтә көсө менән бағанаға терәлеүгә йорт емерелә, ундағы кешеләрҙең барыһы ла һәләк була.

*ХАКИМДАР 16:14–30*



## Рут менән Ноғоми

Бер ваҡыт, хакимдар идара иткән заманда, Йәһүҙә еренә аслыҡ килә. Шул арҡала Әлимәләх исемле бер Исраил кешеһе ҡатыны һәм ике улы менән Бейт-Ләхәм ҡалаһынан Моав еренә күсеп ултыра (моавтар Үле диңгеҙҙән көнсығыштараҡ йәшәй). Ҡатынының исеме Ноғоми, улдарыныҡы Махлон менән Килйон була.

Әлимәләх мәрхүм булғас, Ноғоми ике улы менән тороп ҡала. Улдарының береһе Ғорпа, икенсеһе Рут исемле Моав ҡыҙҙарына өйләнә. Ун йыллап бергә йәшәгәндән һуң, Ноғомиҙың улдары үлеп китә һәм ҡатын япа-яңғыҙы ҡала. Ул, Йәһүҙә ерҙәрендә аслыҡ бөткәнен, Алла халыҡҡа яҡшы ғына уңыш биргәнен ишетеп, тыуған яҡтарына ҡайтырға ҡарар итә.

Ноғоми Моав еренән тыуған яғына юллана, ике килене лә уға эйәрә. Китеп барғанда ул: «Атай-әсәйҙәрегеҙгә ҡайтығыҙ. Миңә лә, улдарыма ла яҡшы мөнәсәбәттә булғанға Раббы мәрхәмәтенән айырмаһын үҙегеҙҙе. Икегеҙгә лә яңы ир йортонда рәхәтлек табырға насип итһен», – тип, хушлашып, килендәрен үбә. Улары: «Юҡ, беҙ һинең менән барабыҙ, һинең халҡың араһында йәшәйбеҙ», – тиҙәр илап. Әммә Ноғоми үҙ һүҙендә ҡаты тора: «Юҡ, ҡыҙҙарым, ҡайтығыҙ. Мин һеҙҙе йәлләйем, сөнки Раббы миңә бәлә артынан бәлә ебәрә». Йәнә бер аҙ илап алғас, Ғорпа ҡәйнәһе менән хушлаша, ә Рут уның менән ҡала. «Һине ташлап ҡайтып китергә өгөтләмә мине. Ҡайҙа барһаң, мин дә шунда барам, һин ҡайҙа төйәкләнһәң, мин дә шунда төйәкләнәм. Һинең халҡың – минең халҡым, Һинең Аллаң минең дә Аллам булыр. Һин ҡайҙа үлһәң, мин дә шунда үлермен һәм мине шунда уҡ ерләрҙәр. Раббы миңә ниндәй генә бәләләр ебәрмәһен, мине һинән үлем генә айырыр», – ти ул. Ноғоми, Руттың үҙе менән барырға ныҡлы ҡарарға килгәнен күреп, өгөтләүҙән туҡтай.

*РУТ 1:1–17*



## Рут – Боғаз баҫыуында

Ноғоми менән Рут Бейт-Ләхәмгә ҡайтҡас, бөтәһе лә: «Был ысынлап та Ноғомимы икән?» – тип бер-береһенән һораша башлай. «Бүтәнсә мине Ноғоми тип йөрөтмәгеҙ – ул „татлы“ тигәнде аңлата, миңә „әсе“ тигәнде белдергән Мара исеме менән өндәшегеҙ, сөнки сикһеҙ ҡөҙрәт Эйәһе миңә оло ҡайғы ебәрҙе. Бынан етеш донъя менән сығып китһәм дә, Раббы мине буш ҡул ҡайтарҙы», – тип яуаплай ҡатын.

Бер ваҡыт Рут, баҫыуға килеп, ураҡсылар артынан ҡалған башаҡтарҙы йыя башлай. Баҫыуҙың хужаһы Ноғомиҙың Боғаз исемле туғаны була.

Ул Руттың Ноғомиҙың килене икәнен, ҡәйнәһен ҡарарға тип, туғандарын ташлап, сит ерҙәргә килгәнен белгәс, янына саҡырып ала ла баҫыуға көн дә килергә рөхсәт итә. Ә хеҙмәтселәренә башаҡтарҙы юрамал ҡалдырып барырға һәм ҡыҙҙы ҡыйырһытмаҫҡа ҡуша.

Унан һуң Боғаз Рутҡа: «Атай-әсәйеңде, тыуған илеңде ташлап, бығаса үҙең белмәгән-күрмәгән халыҡ араһында ҡәйнәңә эйәреп йәшәргә килгәнең өсөн Раббы һиңә рәхмәтен бирһен! Исраил Аллаһы Раббының ҡанаты аҫтына һыйынырға тип килгән кешене Раббы Үҙе бүләкләһен», – тип әйтә.

Тыйнаҡ, изге күңелле ҡыҙ уға: «Әфәндем мине мәрхәмәтенән айырмаһын ине! Хеҙмәтсе ҡатындарыңдан түбәнерәк булһам да, яғымлы һүҙҙәрең менән күңелемде йыуаттың», – тип яуаплай.

Тиҙҙән Боғаз Рутты ҡатынлыҡҡа ала, уларҙың улдары тыуа. Бейт-Ләхәм ҡатындары Ноғомиға былай ти: «Һине нәҫелдән яҙҙырмаған Раббы мөбәрәк булһын, баланың исеме Исраилда дан ҡаҙанһын. Ул тормошоңдо яңыртыр, ҡартлығыңда үҙеңә терәк булыр! Сөнки уны һине яратҡан һәм бер үҙе ете улға торошло киленең табып бирҙе». Ноғоми сабыйҙы ҡулында ғына йөрөтөп, ҡарап үҫтерә, шуға ла күршеләре: «Ноғомиҙың улы тыуҙы», – тип әйтә торған булып китә. Сабыйға Ғовед тип исем ҡушалар. Ғовед – Ишайҙың, ә Ишай Дауыттың атаһы була. Дауыт аҙаҡ Исраилда бөйөк батша булып китә. Уның тураһында был китапта һүҙ буласаҡ әле.

*РУТ 1:19–21; 2:1–16; 4:13–17*



## Ханнаның доғаһы

Исраил ҡалаһы Рамала Әлҡана исемле бер кеше ғүмер итә. Ҡатынының исеме Ханна була. Балаһы булмағанға ул бик ҡайғыра. Улар йыл һайын тәғәйен көндәрҙә ҡорбан салып, Раббыға ғибәҙәт ҡылып ҡайтыу өсөн Шилоға бара. Раббы йортона барған һайын Ханна ҡайғырып илай. Әлҡана ҡатынын бик ярата, шуға уның ғазапланғанын күреп йәне әрней.

Бер ваҡыт, Шилолағы Раббы йортона килгәс, Ханна тағы илай башлай. Әлҡана: «Ханна, һин ниңә илайһың? Ни өсөн шул тиклем өҙгөләнәһең? Мин һинең өсөн ун улдан да яҡшыраҡ түгелме ни?» – тип һорай.

Раббы йортона килгәс, Ханна илай-илай Раббыға доға ҡыла һәм Уға ошондай нәҙер әйтә: «Эй күк ғәскәрҙәре Раббыһы! Мин ҡолоңдоң нисек ҡайғырғанын күреп тораһың. Иҫкә алып, мин ҡолоңа бер ир бала бирһәң, уны, сәсенә бәке лә тейҙермәйенсә, Раббыға бағышлар инем».

Ханна Раббыға оҙаҡ итеп доға ҡыла, ә был мәлдә Раббы йорто ишеге алдында ултырған Ғәли ҡаһин унан күҙен дә алмай. Ханна күңеленән генә ялбарғанлыҡтан, ирендәре генә ҡыбырлай, тауышы сыҡмай. Ғәли уны эсеп алған тип уйлап: «Иҫерек килеш оҙаҡ торорға уйлайһыңмы бында? Бар, айныға кил», – тип өндәшә. «Юҡ, хакимым, шарап эсмәнем мин, – ти яуап итеп Ханна. – Раббыма күңелемдәге аһ-зарымды бушата инем. Мин ҡолоңдо йүнһеҙ ҡатын тип уйлай күрмә: сикһеҙ һағышымды һәм ҡайғымды һөйләүем был». «Бар, иҫән-аман йөрө. Исраил Аллаһы һорағаныңды бирә күрһен» – ти уға Ғәли. «Мин ҡолоң күңеләңә хуш килһәм икән!», – тип Ханна үҙ юлы менән китә. Раббы йортонан ҡайтҡанда уның йөҙө элекке кеүек һағышлы булмай инде.

Раббы Ханнаның доғаһын ишетә, бер аҙҙан уның улы тыуа.

*1 БАТШАЛАР 1:1–18*



## Ханна Шемуилды Аллаға бағышлай

Ханна улына Шемуил тип исем ҡуша. Малай үҫкәс, уны ғибәҙәтханаға, Ғәли ҡаһинға алып килә. «Мин – ҡасандыр ошонда, янында тороп Раббыға доға ҡылған ҡатын. Раббы миңә ул бирһен тип ялбарғайным, Раббы теләгемде тормошҡа ашырҙы. Бына, ғүмере буйына Раббыныҡы булһын, тип улымды Уға тапшырам», – ти ҙә әсә, мәрхәмәтле Аллаға рәхмәттәр уҡып баш эйә, Уны данлап доға ҡыла:

> Раббы йөрәгемә шатлыҡ бирҙе, Унын менән көс-ҡеүәтем артты. Мине ҡотҡарғаның өсөн ҡыуанам. Раббым, Һинең кеүек изге бер кем юҡ һәм Һинән башҡа бер кем булмаҫ. Аллабыҙҙан бүтән һыйыныр урыныбыҙ ҙа юҡ. Эре һөйләшмәгеҙ, тәкәббер һүҙҙәр телегеҙҙән сыҡмаһын, сөнки Алла барыһын да белеп тора, барлыҡ эш-ғәмәлдәрҙе үлсәүгә һала. Ул Үҙенә тоғроларҙың һәр аҙымын ҡурсып тора, ә яуыздарҙы ҡараңғылыҡ убыр, сөнки кеше үҙ ғәйрәте менән көслө түгел. Раббы ҡаршы торғандарҙы тар-мар итер.

Ханна бәләкәй Шемуилды Раббы йортонда Ғәли ҡаһин янында ҡалдыра. Малай шунда үҫә; уны Раббы ла, кешеләр ҙә бик ярата. Әсәһе йыл һайын уға яңы кейемдәр алып килә, ул шуларҙы кейеп, Раббы алдында хеҙмәт итә.

*1 БАТШАЛАР 1:25–28; 2:1–10, 18, 19, 26*



## Шемуилды саҡырған тауыш

Шемуил үҫмер ҡорона инә, Алла йортонда хеҙмәт итә. Раббы был осорҙа кешеләргә һирәк мөрәжәғәт итә, илаһи күренмештәр ҙә йыш түгел.

Бер ваҡыт төндә Ғәли үҙенең урынында ята. Алланың шәме әле һүнмәгән. Ә Шемуил Раббы ҡорамында – Алланың Изге һандығы торған ерҙә ята. Раббы Шемуилды саҡыра. «Мин бында!» – ти үҫмер. Ул Ғәлигә йүгереп килә: «Мин бында! Саҡырғайныңмы?» Әммә: «Мин һине саҡырманым, бар, урыныңа ят», – тигән яуап ишетә. Шемуил урынына барып ята.

Раббы Шемуилды тағы саҡыра. Малай тора ла йәнә Ғәлигә килә: «Мин бында! Саҡырғайныңмы?» Ғәли был юлы ла: «Мин һине саҡырманым, улым, бар, ят», – тип әйтә. Шемуил ул ваҡытта Раббыны танып белмәй ине – уға Раббы һүҙе асылмағайны әле.

Раббы өсөнсөгә өндәшкәс, Шемуил тора ла Ғәлигә килә: «Мин бында! Саҡырғайныңмы?» Ғәли шунда Шемуилды Раббы Үҙе саҡырғанын аңлап ҡала, шуға ла: «Бар, урыныңа ят. Тағы ла саҡырһалар: „Һөйлә, Раббы, ҡолоң Һине тыңлай“, – тип әйтерһең», – ти. Шемуил урынына барып ята. Раббы йәнә баяғы кеүек малайға өндәшә. Шемуил Ғәли өйрәткәнсә яуап бирә: «Һөйлә, ҡолоң Һине тыңлай».

Шунда Раббы уға Ғәлиҙең ғаиләһе менән нимә эшләйәсәге тураһында һөйләргә тотона. Улдарының Алланы һанламағанын белә тороп, уларҙы туҡтатмағаны өсөн был ҡаһинды язаға тарттырасағын бәйән итә.

*1 БАТШАЛАР 3:1–14*



## Ғәли ҡаһиндың үлеме

Исраилдар пелештиҙәргә ҡаршы яуға сыҡҡас, Раббы Исраил халҡын еңелеүгә дусар итә, ошолай Ул был халыҡты ҡылған гонаһтары өсөн йәнә язаға тарттыра. Яуҙа исраилдар дүрт меңләгән кешеһен юғалта. Еңелгән ғәскәр үҙ тупламына әйләнеп ҡайтҡас, Исраил аҡһаҡалдары: «Ни өсөн Раббы бөгөн пелештиҙәргә беҙҙе еңергә юл ҡуйҙы? Әйҙәгеҙ Раббының Килешеү һандығын Шилонан бында алып киләйек. Ул беҙҙең менән булһа, дошмандарыбыҙҙың ҡулынан ҡотҡарыр», – тип, Шилоға кешеләр ебәрә. Күк ғәскәрҙәре Раббыһының һандығын алып килгәндә, уны Ғәлиҙең улдары – Хофни менән Пинхас оҙатып бара. Әммә пелештиҙәр менән киләһе алышта ла исраилдар еңелә. Был юлы утыҙ биш мең йәйәүле яугирын юғалтҡас, яу яланын ташлап ҡасалар. Ғәлиҙең ике улы ла һәләк була, ә Алла һандығы пелештиҙәр ҡулына төшә.

Яу яланынан ҡасҡан бер әҙәм Ғәли йәшәгән Шило ҡалаһына килеп, Исраил халҡының ҡот осҡос еңелеүе хаҡында хәбәр итә. Ҡайғылы хәбәрҙе ишеткән халыҡ ҡысҡырып иларға тотона. Был мәлдә Ғәли ҡаһин ҡала ҡапҡаһы төбөндә ултырған була. Ҡаланан килгән илау тауыштарын ишетеп, хәбәр еткереүсенән нимә булыуы хаҡында һораша. «Пелештиҙәр менән һуғышта исраилдар оло еңелеүгә дусар булды. Ике улың да үлеп ҡалды, Алла һандығын тартып алдылар», – тип һөйләп бирә хәбәр еткереүсе әҙәм.

Алла һандығы тураһында ишеткәс, Ғәли ултырған еренән салҡан йығыла ла йән бирә. Ғәли Исраилда ҡырҡ йыл хаким булып тора, туҡһан һигеҙ йәшендә үлә.

Раббының төндә Шемуилды беренсе тапҡыр саҡырып, Ғәли нәҫеле тураһында әйткән һүҙҙәре бына шулай тормошҡа аша.

*1 БАТШАЛАР 4:1–18*



## Шаул – Исраил батшаһы

Шемуил Исраилда бөйөк пәйғәмбәр булып китә. Ул халҡын, ят һын-аллаларға табыныуҙан туҡтап, тере Аллаға килергә саҡыра. Ҡартайғас, Исраилға хаким итеп үҙенең улдарын ҡуя. Әммә улдары атаһының юлынан китмәй: уларҙың күңелен ҡомһоҙлоҡ биләй. Халыҡтан бүләк-ришүәттәр алалар, сығарған хөкөмдәре лә ғәҙел булмай. Ахырҙа Исраилдың аҡһаҡалдары Шемуилға килеп: «Хаким булыр өсөн һин инде олоғайҙың, ә улдарың һинең юлдан китмәне. Шуға ла һин беҙгә батша ҡуй, ул беҙҙең менән башҡа халыҡтарҙағы кеүек идара итер ине», – тиҙәр. Шемуил уларҙың был үтенестәренең Раббыға оҡшамаҫын белә. Раббы уның доғаһына былай яуап бирә: «Был халыҡтың теләгән үтә. Улар һинән түгел, Минән баш тарта. Үҙҙәре өҫтөнән Минең батшалыҡ итеүемде теләмәй. Мысырҙан алып сыҡҡанымдан әлеге көнгә тиклем улар, Мине ташлап, башҡа илаһтарға табына. Минең менән нисек, һинең менән дә шулай ҡыланалар. Һин улар теләгәнсә эшлә, әммә уларға хаким буласаҡ батшаны Үҙем һайлап ҡуям. Һин халыҡҡа батшаның хоҡуҡтары тураһында ҡаты иҫкәрт».

Шемуил Раббының һүҙҙәрен халыҡҡа еткереп: «Һеҙҙең менән батша етәкселек итһә, тулыһынса үҙенә буйһондорор. Шул мәлдә үҙегеҙ һайлап алған батшанан ҡотҡарыуын һорап ялбарырһығыҙ, тик Раббы аһ-зарҙарығыҙға ҡолаҡ һалмаҫ», – ти. Әммә халыҡ Шемуилды тыңламай, батша таптырыуын дауам итә.

Бер ваҡыт Раббы Шемуилға оҙон буйлы, күркәм йөҙлө Шаул исемле бер егетте ебәрә. «Мин әйткән егет ошо була. Халҡым менән ул идара итер», – ти Ул. Шемуил зәйтүн майы һалынған һауытты ала ла Шаулдың башына май ҡоя. Уны үбеп: «Раббы һине батшалыҡҡа тәғәйенләне, бынан ары һин Уның халҡы менән идара итерһең», – тип белдерә. Шулай Шаул Исраилда хаким булып китә.

*1 БАТШАЛАР 8:1–22; 9:2, 17; 10:1*



## Көтөүсе Дауыт – буласаҡ батша

Шемуил башына май һөртөп батшалыҡҡа тәғәйенләгән Шаул бер ваҡыт ҙур гонаһ ҡыла. Пелештиҙәр менән алышҡа сығыр алдынан ул Шемуил пәйғәмбәрҙе көтә. Шемуил, килеп, Раббыға ҡорбан килтерергә тейеш була. Ете көн буйы көтһә лә, ул килмәй, Шаулдың ғәскәре тарала башлай. Шемуил һаман килмәгәс, ҡорбанды ҡаһин ғына килтерергә тейеш булһа ла, Шаул был эште үҙе атҡарырға тәүәккәллек итә. Шемуил килгәс уға: «Әгәр Алланың ҡушҡанын тыңлаған булһаң, нәҫелең Исраилда мәңге батшалыҡ итер ине. Инде һинең батшалығың оҙаҡҡа бармаясаҡ. Раббы, күңеленә хуш килгән башҡа кешене табып, халҡына башлыҡ итеп ҡуйыр, сөнки һин Раббы ҡушҡанды үтәмәнең», – ти.

Тиҙҙән Раббы Шемуилға биттәре янып торған, матур күҙле, мөләйем йөҙлө Дауыт исемле йәш егетте күрһәтә. Ул атаһының һарыҡтарын көтә, уларҙы яҡшы ҡарай, ҡырағай хайуандарҙан һаҡлай.

Шемуил Дауытты, Раббы ҡушыуы буйынса башына зәйтүн майы ҡойоп, батшалыҡҡа бағышлай – Дауыт Исраил халҡы менән етәкселек итергә тейеш була. Шул мәлдән Раббы рухы Дауытты ташламай. Ә Шаулдан Алла баш тарта һәм уны яуыз рух ыҙалатырға тотона. Шаул, моңло көй тынысландырмаҫмы тип, хеҙмәтселәренә лирала яҡшы уйнаған кешене табырға ҡуша. Хеҙмәтселәре уға Дауытты килтерә. Шулай ул батша һарайында йәшәй башлай. Шаулға Дауыт бик оҡшай, уны ул үҙенең ҡорал йөрөтөүсеһе итеп тәғәйенләй. Яуыз рух ыҙалата башлаһа, Дауыт лираһын ҡулына алып, уның өсөн уйнарға тотонған. Шул мәлдә Шаулдың хәле еңеләйеп, уға рәхәт булып китә, яуыз рух та ыҙалатыуҙан туҡтай.

*1 БАТШАЛАР 13:13–14; 16:11–33*



## Дауыт менән Голиаҫ

Бер ваҡыт пелештиҙәр, Исраил халҡына яу асмаҡ булып, ғәскәр йыя. Исраилдар ҙа Шаул батша етәкселегендә һуғышҡа әҙерләнә. Улар пелештиҙәрҙең ғәскәре торған тауҙың ҡаршыһына урынлаша. Дауыттың өс ағаһы Шаул ғәскәрендә хеҙмәт итә. Бер аҙҙан атаһы Дауытты ағаларына икмәк алып барырға, хәлдәрен белешеп, берәй нәмә кәрәкмәйме икәнен һорашырға исраилдар торған ергә ебәрә.

Дауыт, исраилдарҙың тупламына килеп, ағалары менән һөйләшеп торғанда, Голиаҫ исемле ғәйәт оҙон буйлы пелешти баһадирын күрә. Ул өҫтөнә баҡыр һарайта, башына баҡыр торҡа кейеп, ҡулына иҫ китмәле ҙур һөңгө менән ҡалҡан тотоп алған була. Голиаҫ Алланы хурлап, исраилдарҙан көлөп: «Берәй исраил мине еңеп сыҡһа, пелештиҙәр уларға ҡол булыр!» – тип белдерә. Береһе лә унын менән көрәшергә баҙнат итмәй: ҡиәфәте генә лә ҡурҡыу тыуҙыра. Голиаҫтың Алланы һәм исраилдарҙың ғәскәрен хурлағанын ишетеп торған Дауыт Шаул янына килә, көрәшергә рөхсәт һорай. Әммә Шаул: «Һин әле үҫмер генәһең, ул йәш сағынан алып һуғышсы», – тип ризалығын бирмәй. Дауыт уға һарыҡ көткән мәлендә арыҫландарҙы, айыуҙарҙы еңергә күп тапҡырҙар Алланың ярҙам иткәнен һөйләй. Шунда ғына Шаул уға көрәшергә рөхсәт бирә, баҡыр һарайта һәм торҡа кейҙерә. Дауытҡа хәрби кейемдә уңайһыҙ була, шуға ла уларҙы сисеп ташлай. Ҡулына таяғын ала, шишмәлә биш шыма таш һайлап, уларҙы көтөүсе муҡсаһына һала. Шунан таш ата торған һапҡыһын тотоп, пелештигә ҡаршы сыға.

Үҙенә табан килгән Дауытты күргәс, Голиаҫ: «Һин нимә, миңә ҡаршы таяҡ тотоп киләһеңме ни? Мин һиңә әллә этме?» – тигән һүҙҙәр менән көлөргә тотона. «Һин миңә ҡаршы ҡылыс тотоп, һөңгө һәм ҡыҫҡа һөңгө менән киләһең, ә мин Күк ғәскәрҙәре Раббыһы, һин хурлаған Исраил һуғышсыларының Аллаһы хаҡына киләм», – ти ҙә Дауыт, муҡсаһынан бер таш алып, таш ата торған һапҡыһына ҡуя ла уға төбәп атып ебәрә. Таш Голиаҫтың маңлай уртаһына ғына тура килә һәм тегеһе ергә ҡолай. Баһадирҙары үле икәнен белгәс, пелештиҙәр ҡаса башлай. Шулай Исраил ғәскәре был алышта еңеү яулай.

*1 БАТШАЛАР 17:1–53*



# Йонаҫан

Дауыт үҙе үлтергән Голиаҫтың башын килтергәс, Шаул унан: «Һин кемдең улы булаһың?» – тип һорай. «Мин Бейт-Ләхәмдә йәшәгән Ишайҙың улы», – тип яуаплай Дауыт. Улар һөйләшкәндә Шаул батшаның улы Йонаҫан да шунда тора. Ул көслө, ҡыйыу йөрәкле егет була. Дауытты Йонаҫан ысын күңелдән оҡшата, шуға ла уның менән дуҫ булырға вәғәҙәләшә. Ошо вәғәҙә билдәһе итеп Дауытҡа үҙенең кейемен, билбауын, ҡылысын һәм йәйәһен бүләк итә. Дауыт та Йонаҫанды үҙ итә.

Әммә Шаул уларҙың дуҫлығын өнәп етмәй. Пелештиҙәрҙе еңеп ҡайтып килгән яугирҙәргә ҡаршы сыҡҡан халыҡтың: «Шаул ҡырҙы меңдәрҙе, ә Дауыт ун меңдәрҙе», – тип йәш егетте данлағанын ишетеп, йәне көйә. Дауытты данға күмеүҙәре ҡыуандырмай уны. Шул мәлдән алып Дауыттан ныҡ көнләшә башлай, уны үлтерергә мөмкинлек эҙләй.

Бер ваҡыт, Шаулға яуыз рух инеп, Дауыт лирала уйнай башлағас, Шаул уға һөңгөһөн ырғыта. Дауыт ялтанып өлгөрә, һөңгө янынан ғына уҙып китә. Йонаҫан дуҫын гел атаһының асыуынан яҡлаша. Яуыз уйҙа булғаны өсөн уны: «Батша ҡоло Дауытҡа ҡаршы гонаһ ҡылмаһын, сөнки һиңә ҡарата ул бер насарлыҡ та эшләмәне. Киреһенсә, эшләгәне изгелек кенә. Үҙ ғүмерен үлем аҫтына ҡуйып, пелештиҙе үлтергәс, Раббы Израилға бөйөк еңеү бирҙе. Һин бит ул хәлдәрҙе күреп ҡыуанғайның. Ни өсөн хәҙер бер ғәйепһеҙ Дауытты сәбәпһеҙгә үлтереп, йәнеңә гонаһ алмаҡ булаһың?» – тип шелтәләй. Шаул тәүҙә улын тыңлай, Дауытты үлтермәҫкә һүҙ бирә.

*1 БАТШАЛАР 17:57–58; 18:1–11; 19:1–6*



## Дауыт йоҡлап ятҡан Шаул алдында

Шаулдың йөрәгендә Дауытҡа ҡарата нәфрәт үҫкәндән-үҫә һәм ул, улына һүҙ бирһә лә, уны үлтерергә ҡарар итә. Йонаҫан быны белеп ҡалғас, ғәзиз дуҫын иҫкәртеп ҡуя. Дауыт, ышанысллы кешеләрҙән төркөм туплап, тауҙарға ҡаса. Алла Дауыт менән була, шуға ла Шаул уны үҙенең ғәскәре менән күпме генә эҙәрлекләһә лә, эҙенә төшә алмай. Дауыттың үҙенә әллә нисә тапҡыр Шаулды үлтерергә мөмкинлек тыуа, тик, Алланы ятҡанға һәм Унан ҡурҡҡанға, насарлыҡ ҡылыуҙан тыйыла.

Бер ваҡыт Шаул өс мең Исраил кешеһенән торған ғәскәр туплай ҙа, Дауытты эҙләп, йәнә тауҙарға китә. Уның ғәскәре ҡалҡыулыҡтарҙың береһендә түнгәрәккә туплам ҡорғанын белгәс, Дауыт ҡәрҙәше Авишай менән барыһы ла йоҡлап ятҡан урынға китә. Йоҡолағы Шаулдың баш осонда ергә ҡаҙалған һөңгөнө күрәләр. «Бынау һөңгө менән Шаулды үлтерергә рөхсәт ит», – ти Авишай. Әммә Дауыт: «Билдәләнгән көндә уның йәнен Раббы Үҙе аласаҡ», – тип, Алланың батшалыҡҡа бағышланған улына ҡул күтәрергә рөхсәт бирмәй. Улар Шаулдың һөңгөһөн, һыу һауытын алалар ҙа тупламдан китәләр.

Дауыт, Шаулдың тупламы торған урындың ҡаршы яғына сығып, тау башына менеп баҫа ла Шаулға ҡысҡыра, уның әйберҙәрен күрһәтә. Күпме яуызлыҡ ҡылып та, Дауыттың шул яуызлыҡтар өсөн үс алмағанын күреп, Шаул: «Эйе, гонаһ эшләнем мин. Дауыт улым, миңә кире ҡайт, бынан ары бер яуызлыҡ та ҡылмам. Бөгөн йәнемдең һинең өсөн ғәзиз икәнен күрҙем. Аҡыл менән эш итмәй ныҡ яңылыштым шул», – тип әйтә. Ул Дауытты эҙәрлекләмәҫкә һүҙ бирә, әммә күңелендәге нәфрәт тойғоһонан ҡотола алмай.

*1 БАТШАЛАР 20:1–43; 26:2–21*



## Дауыттың Израилда батшалыҡ итә башлауы

Пелештиҙәр менән киләһе бәрелештә исраилдар еңелә. Шаул да, улдары ла яу яланында ятып ҡала. Батша ғәскәрендәге бер яугир һуғыш яланынан туп-тура Дауытҡа килә, Шаулдың һәм уның улы Йонаҫандың пелештиҙәр менән алышта үлеүе тураһында хәбәр итә. Дошманы Шаулдың үлгәнен ишеткәс, Дауыт ҡыуаныр инде, тип уйлай хәбәр еткереүсе. Әммә Дауыт, киреһенсә, Шаул менән Йонаҫандың үлеменә бик ҡайғыра, Шаулдың яуызлыҡтарын иҫенә төшөрмәй. Уларға бағышлап йыр сығара:

Шаул менән Йонаҫан ниндәй һөйкөмлө, ғәзиз, йәшәүҙә лә, үлемдә лә айырылмаҫ булды улар. Улар бөркөттән етеҙ, арыҫландан көслөрәк булды. Эй Исраил ҡыҙҙары! Һеҙҙе затлы кейемдәргә кейендергән, кейемегеҙҙе алтын биҙәүестәр менән биҙәгән Шаул өсөн ҡайғырып илағыҙ. Улар бит, көслө булһалар ҙа, яу яланында ятып ҡалды. Йонаҫан туғаным, һинең хаҡта хәсрәтем сикһеҙ. Һин миңә бик ҡәҙерле булдың; һинең яратыуың минең өсөн ҡатын-ҡыҙ һөйөүенән дә өҫтөнөрәк ине.

Дауыт уларҙың үлеменә шулай күҙ йәштәре түгеп ҡайғыра. Аҙаҡ, Раббы ҡушыуы буйынса, Хеврон ҡалаһында төпләнә. Тиҙҙән Йәһүҙә халҡы килеп, Дауыттың башына зәйтүн майы һөртөп, Исраилдың көньяғындағы Йәһүҙәгә батша итеп бағышлай. Ете йыл ярымдан Дауыт бөтә Исраилда батшалыҡ итә башлай. Шулай Алла Шемуил пәйғәмбәр аша биргән вәғәҙәһен тормошҡа ашыра.

*2 БАТШАЛАР 1:1–4, 23–27; 2:1–4*



## Килешеү һандығы – Йәрүсәлимдә

Исраилда батшалыҡ итә башлағас, Дауыт тәхетен Йәрүсәлимдә урынлаштыра. Алла Дауытты аҡыл һәм көс биреп фатихалай, шуға ла ул Исраилдың бөтә дошмандарын еңеүгә өлгәшә. Дауыт Алланы ратҡанға, Уның изге һандығы янында, үҙе йәшәгән ҡалала, тороуын теләй. Һандыҡты алыштарҙың береһендә пелештиҙәр үҙҙәре менән алып киткән була. Аҙаҡ уны исраилдарға кире ҡайтаралар һәм бына ошо Ҡырьяҫ-Еғарим тигән ерҙә Аминадав исемле кешенең өйөндә торған һандыҡты Дауыт Йәрүсәлимгә күсерергә ҡарар итә лә инде.

Утыҙ мең кешеһен эйәртеп, Дауыт һандыҡты алырға китә. Һандыҡты Йәрүсәлимгә алып килеп, Сион тауына мендереп ултыртыуҙары Дауыт өсөн ҙур бәхет була! Ул лирала уйнай-уйнай Алланы данлай, ҡыуанысынан Раббы алдында бейей. Халыҡ та мөгөҙ борғолар ҡысҡыртып, шау-гөр килеп Алланы данлай. Һандыҡ Дауыт махсус төҙөткән сатыр уртаһына урынлаштырыла. Шунан Дауыт Раббыға күп һанлы ҡорбандар килтерә. Ҡорбан килтергәс, Күк ғәскәрҙәре Раббыһы исеменән халҡына фатиха ҡыла һәм исраилдарҙың барыһына ла икмәк, көлсә, бешерелгән ит таратып сыға.

Дауыттың нәҫелен нығытырға вәғәҙә биреп, Раббы уның вариҫы тураһында былай ти: «Мин уға – Атай, ә ул Миңә улан булыр. Гонаһ ҡыла ҡалһа, ата улын язалағандай, Мин дә уны язалармын. Ләкин, Шаулды рәхмәтемдән мәхрүм иткән кеүек, уны мәрхәмәтемдән айырмам. Һинең нәҫел-ырыуың һис ҡаҡшамаҫ, батшалығың да мәңгелек булыр, тәхетең мәңге ҡаршымда торор». Раббының был һүҙҙәрен Дауытҡа Наҫан еткерә. Дауыт, Раббы ҡаршыһына килеп, Уға былай ти: «Былай ҙурларға ул тиклем мин кем һуң, Раббым? Нәҫелем-ырыуым да нимә генә инде? Һин ҡөҙрәтлеһең, Раббым. Һиңә тиңләшерлек бер кем юҡ һәм Һинән башҡа илаһ юҡ. Инде хәҙер, Раббы Аллам, ҡолоң һәм уның нәҫеле хаҡында әйткән һүҙҙәреңде мәңгегә нығытып ҡуй һәм, нимә әйткән булһаң, шуны тормошҡа ашыр».

*2 БАТШАЛАР 6:2–19; 7:14–16, 18–29*



## Дауыттың мәҙхиәһе

Көтөүсе сағынан Дауыт лирала уйнаған һәм үҙе сығарған мәҙхиәләрҙе йырларға ятаҡҡан. Бөйөк батша булып киткәс тә ул йырҙар сығарыуҙан туҡтамай. Изге Яҙмаға Дауыттың күп мәҙхиәләре ингән. Уларҙың барыһы ла Аллаға һөйөү менән һуғарылған һәм Алланың исемен данлай.

Һарыҡтарға яҡшы көтөүсе кәрәк икәнен яҡшы белгән Дауыт мәҙхиәләренең береһендә Раббы тураһында былай йырлай:

Раббы – көтөүсем минең,
мин һис тә мохтажлыҡ күрмәм.
Ул мине йәшел болондарҙа ял иттерер,
тымыҡ аҡҡан һыуҙарға алып барыр,
Ул ҡабаттан мине хәлләндерер,
Исеме хаҡына дөрөҫ-хаҡ юлдан етәкләр.
Үлем шәүләһе баҫҡан үҙәндән үткән саҡта ла,
хәүефтән ҡурҡмам, сөнки Һин – минең менән;
ҡулыңда – көтөүсе таяғың һәм суҡмарың, шуға ла йәнем тыныс.
Дошмандарым алдында миңә табын ҡорорһоң,
башыма зәйтүн майы һөртөрһөң,
туҫтағымды мөлдөрәмә тултырырһың.
Игелегең менән мөхәббәтең ғүмерем буйы оҙатып йөрөр,
көндәремдең ахырына тиклем Раббы йортонда төйәкләнермен.

*22-се МӘҘХИӘ*



## Наҫан пәйғәмбәр Дауыт ҡаршыһында

Дауыт Раббыны ярата, Унының һүҙенән сыҡмай. Әммә бер көндө ул ҙур гонаһ ҡыла. Кистәрҙең береһендә саф һауа һуларға тип һарайының башына сыға. Унда Баҫ-Шевағ исемле ҡатынды күреп ҡала һәм тәү ҡараштан ғашиҡ була. Тик Дауыт уны кәләш итеп ала алмай, сөнки ҡатындың ире бар. Дауыт хәйләгә бара: Баҫ-Шевағтың ире Урияһты һуғышҡа оҙата. Урияһтың яу яланында үлеп ҡалыуы тураһында хәбәр килгәс, ҡатынға өйләнә.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Раббы Дауытҡа Наҫан пәйғәмбәрҙе ебәрә. Ул шундай хәл-ваҡиғаны бәйән итә: «Бер ҡалала ике кеше йәшәй: уларҙың береһе бай була, икенсеһе – ярлы. Байҙың ваҡ малы ла, эре малы ла бик күп икән. Ә ярлының бәрәс килеш кенә һатып алып ҡарап үҫтергән һарығынан башҡа бер нәмәһе лә юҡ. Бәрәс унының балалары менән бергә үҫә, унының менән бер икмәкте ашай, һауытынан эсә, күкрәгенә ятып йоҡлай, ҡыҫҡаһы, ҡыҙы һымаҡ була. Көндәрҙән бер көндө байҙың йортона юлсы килеп инә. Ҡунағын һыйларға үҙенең көтөүенән һарыҡ йә үгеҙҙәренең береһен һуйырға йәлләп, бай кеше ярлының һарығын сала ла теге юлсыны һыйлай».

Хикәйәне тыңлап бөткәс, Дауыт: «Бындай эш ҡылған кеше үлергә тейеш! Һарыҡ өсөн дә дүртләтә түләһен, ул бик рәхимһеҙ эш ҡылған», – тип асыуланып ҡысҡырып ебәрә.

Шунда Наҫан Дауытҡа: «Ул кеше – һин», – тип, унының гонаһлы эшен фашлай. «Раббы алдында гонаһлымын», – тип Дауыт тәүбә итә. Унының тәүбәгә килгәнен күреп, Наҫан: «Раббы гонаһыңды ғәфү итте, һин үлмәҫһең. Әммә гонаһ ҡылыуың менән һин Раббыны һанламағаныңды күрһәттең, шуға күрә яңы тыуған улың үлер», – ти. Шулай Дауыттың гонаһы ярлыҡана, ләкин ул яҙаһыҙ ҙа ҡалмай. Тәүбәгә килгән Дауыт аҙағыраҡ ҡайғы йырын сығара, унда шундай һүҙҙәр бар: «Мөхәббәтең хаҡына, эй Алла, ҡыҙған мине, сикһеҙ рәхим-шәфҡәтеңә күрә яҙыҡ эштәремде юйып ташла... Паклаһаң, ҡарҙан да ағыраҡ булырмын... Эй Алла, булдыр миндә саф йөрәк, булмышымда ҡаҡшамаҫлыҡ рух яңырт.».

*2 БАТШАЛАР 11:2–17; 12:1–14; ЗӘБУР 50:9, 12*



## Авшаломдың үлеме

Дауыт улдарының береһе Авшалом төҫкә-башҡа күркәм, бик ғорур егет була. Айырыуса оҙон матур сәсе үҙенә килешеп тора. Авшалом атаһын яратмай, унының тәхетен баҫып алырға хыяллана. Ул алдаҡ, ике йөҙлөлөк, изге күңелле һәм хәстәрлекле булып ҡыланып, йөрәктәренә үтеп инеп, исраилдарҙың ихтирамын яулай, үҙен яраттыра. Улының эҙәрлекләүенән ҡасып ҡотолоу өсөн ғәскәр туплап, Дауытҡа Йәрүсәлимдәге һарайынан китергә тура килә.

Авшалом атаһының ҡайҙа туҡтағанын асыҡлағас, ҙур ғәскәр менән уға ҡаршы яуға сыға. Дауыт, был турала белеп ҡалып, уға ҡаршы үҙенең ғәскәрен ебәрә, әммә уларға Авшаломға зыян яһамаҫҡа, ғүмерен ҡыймаҫҡа бойора. Күпме генә ҡайғы килтерһә лә, улын яратыуҙан туҡтамай.

Алыш урманда була. Алла Дауыттың ғәскәренә ярҙам итә, шуға ла улар еңеүгә өлгәшә. Авшаломдың һуғышсылары яу яланын ташлап ҡаса. Ул үҙе, бер ҡасырҙы һыбай менеп ҡасып барғанда, сәсе менән ағас ботағына эләгә. Ҡасыры өркөп ҡасып китә, ә Авшалом эленеп тороп ҡала, аяҡтары ергә лә теймәй. Дауыт ғәскәренең башлығы, быны күреп ҡалғас, ҡулына ҡыҫҡа һаплы өс һөңгө алып, имәндә һаман тере көйөнсә аҫылынып торған Авшаломдың йөрәгенә ҡаҙай.

Быларҙы ишеткәс, Дауыт ныҡ ҡайғыра, оҙаҡ ваҡыт онота алмай илай: «Улыҡайым Авшалом! Улыҡайым минең Авшалом! Һин үлгәнсе үҙем генә үлһәмсе, улыҡайым!» Авшаломдың тынғыһыҙ ғүмере гөрләп сәскә атҡан ғына мәлдә Алла унының йәнен ҡыйып ҡуя.

Изге Яҙмала: «Атаһына һәм әсәһенә тел тейҙергән әҙәмдең сыраһы төн ҡараңғылығында ҡапыл һүнер», – тиелә.

*2 БАТШАЛАР 14:25–26; 15:1–6; 18:2–14, 32–33;*
*ХИКМӘТТӘР 20:20*



## Зирәк аҡыллы Сөләймән батша

Дауыттың вафатынан һуң Раббы Исраилға батша итеп уның улы Сөләймәнде ҡуя. Бер ваҡыт Алла, Сөләймәндең төшөнә инеп, нимә генә һораһаң да, бирермен, тип әйтә. Сөләймән унан күп һанлы халҡы менән етәкселек итеүҙә аҡыл һорай. Раббы уға былай тип яуап бирә: «Үҙеңә оҙон ғүмер ҙә, байлыҡ та һораманың, дошмандарыңа үлем дә теләмәнең, әммә ғәҙел идара итер өсөн аҡыл һәм зирәклек һораның. Барыһын да һин теләгәнсә эшләрмен. Һорамаһаң да, байлыҡ менән дан да бирермен. Үҙең иҫән саҡта батшалар араһында бер кем һиңә тиңләшә алмаҫ. Әгәр атайың кеүек Минең бойороҡтарымды һәм ҡушҡандарымды теүәл үтәп, Минең юлымдан тайпылмаһаң, оҙон ғүмер ҙә бирермен».

Бер көндө Сөләймән янына сабый күтәргән ике ҡатын килә. Икеһе лә: «Был минең балам», – ти һәм шуны иҫбат итергә тырыша. Дөрөҫлөктөң осона сығыу өсөн, Сөләймән баланың кәүҙәһен икегә бүлергә лә яртыһын береһенә, яртыһын икенсеһенә бирергә ҡуша. Ысынында ул сабыйҙы үлтерергә уйламай ҙа, ҡатындарҙы һынар өсөн генә әйтә. Ҡатындарҙың береһе шунда уҡ: «Икегә бүлегеҙ! Миңә лә, уға ла булмаһын әйҙә!» – ти. Икенсеһе: «Уға бирһәгеҙ, бирегеҙ, тик үлтерә күрмәгеҙ!» – тип ҡысҡырып ебәрә.

Шулай Сөләймән ҡатындарҙың ҡайһыныһы ысын әсәй икәнен аңлай, сөнки әсәй кеше генә балаһының йәнен ҡыйғансы, сит кеше ҡулына бирергә ризалашасаҡ.

*3 БАТШАЛАР 3:5–28*



## Алла ҡорамы

Алла Дауытҡа: «Улың Сөләймән Раббыға бағышлап йорт төҙөр, унда Алланың даны балҡып торор», – тип әйтә.

Сөләймән, Раббының бойороғон үтәп, Уға мөһабәт ҡорам төҙөй. Эс яҡтан йорттоң диуарҙары алтын менән көпләнгән була, яҡтыртҡыстар нурында ундағы бөтә нәмә йымылдап-ялтырап тора. Йорт тирәләй Сөләймән ихата төҙөй, уны таш ҡойма менән уратып ала. Ихатала ун ҙур баҡыр һауыт тора, унда ҡорбанға килтереләсәк малдарҙы йыуғандар. Ә бер һауыт, теге унауһынан ҙурыраҡ булып, ун ике баҡыр үгеҙ һынына урынлаштырылған. Уныһы ҡаһиндарҙы пакландырыу өсөн тәғәйенләнгән. Ихатала шулай уҡ ҙур баҡыр ҡорбан усағы торған. Алла ҡорамы эсендә, саф алтын менән көпләнгән Килешеү һандығын ҡуйыр өсөн, Иң мөҡәддәс урын булдырылған. Мөҡәддәс урындың ҡаршыһында алтын менән көпләнгән ҡорбан усағы торған. Унда хуш еҫле ыҫмала төтәҫләгәндәр. Алла ҡорамы эсенә зәйтүн ағасынан эшләнеп, алтын менән көпләнгән ике кируб һыны ҡуйылған. Кирубтар шул тиклем ҙур була, уларҙың һәр береһе бер ҡанаты менән диуарға етһә, икенсеһе менән икенсе кирубтың ҡанатына тейеп торған.

Алла ҡорамының диуарҙары кирубтар, хөрмә ағастары, сәскә һүрәттәре менән биҙәлгән була. Ҡорамдың иҙәне лә алтын менән ҡапланған.

*3 БАТШАЛАР 6:14–36*



## Сөләймәндең Алла ҡорамында доға ҡылыуы

Алла ҡорамы төҙөлөп бөткәс, ҡаһиндар Алла һандығын алып килеп, йорттоң түренә – Иң мөҡәддәс урынға урынлаштыралар. Бында иң баш ҡаһиндан башҡа бер кемгә лә инергә рөхсәт булмай. Ул йылына бер тапҡыр үҙе өсөн һәм Раббы алдында гонаһ ҡылған халҡы өсөн ҡорбан килтерә. Иң мөҡәддәс урынға инеү юлын ҙур пәрҙә ҡаплап тора.

Килешеү һандығын Алла ҡорамына индереп урынлаштырғас, ҡаһиндар менән йырсылар Раббыны данлай, ә Раббы Үҙе был мәлдә болотта килә һәм Уның даны йорт эсенә тула. Сөләймән йыйылған халыҡ ҡаршыһына, ҡорбан усағы алдына баҫа ла ҡулдарын күккә күтәреп доға ҡыла: «Раббым, Исраил Аллаһы! Күктәрҙә лә, ерҙә лә Һиңә тиңләшерлек алла юҡ; Һин әйткән һүҙҙәреңә тоғроһоң, ҡушҡандарыңды ихлас, ысын йөрәктән үтәгән ҡолдарыңды мәрхәмәтеңдән айырмайһың. Ысынын ғына әйткәндә, Алла ерҙә йәшәй буламы? Осһоҙ-ҡырыйһыҙ күктәр киңлеге лә Һине һыйҙырып бөтә алмағанды, мин һалған йорт ҡына нисек һыйҙырһын? Ҡолоңдоң доғаһына һәм үтенесенә ҡолаҡ һалсы, Раббы Аллам. Уның саҡырыуын һәм ялбарып һораған һүҙҙәрен ишетсе. „Исемем ошонда төйәкләнер“ тип Һин әйткән урын – Алла ҡорамы көндөҙ ҙә, төндә лә күҙ алдыңда торһа ине; ҡолоңдоң ошо урынға ҡарап ҡылған доғаһын ишетә күр. Мин ҡолоң, Үҙеңдең Исраил халҡың менән бергә бул һәм, улар ҡасан ғына Һиңә ялбарһа ла, доғаларын ишет».

*3 БАТШАЛАР 8:3–11, 22–52*



## Сөләймән менән Шева батшабикәһе

Алыҫ көньяҡта Шева батшабикәһенең биләмәләре урынлашҡан булған. Сөләймәндең даны һәм уның Раббы хаҡына ниндәй эштәр башҡарыуы тураһында ишетеп, Шева батшабикәһе уны күрергә, йомаҡ ҡойоп һынап ҡарарға уйлай. Йәрүсәлимгә затлы бүләктәр менән килеп төшә: дөйәләргә хуш еҫле майҙар, иҫ китмәле күп алтын һәм аҫылташтар тейәй ул. Сөләймән менән бик ихлас һөйләшә. Батша уның бөтә һорауҙарына ла яуап бирә, әңгәмә барышында ул аңлатып бирә алмаған йә белмәгән бер нәмә лә осрамай.

Сөләймәндең сикһеҙ аҡылын, ул һалған һарайҙы, өҫтәлендәге ризыҡты, ярандарының ни рәүешле ултырыуын, хеҙмәтселәренең һын-ҡиәфәтенең һәм өҫ-башының матурлығын, шарап ҡойоусыларҙы, Раббы ҡорамында батша килтергән тотош яндырыу ҡорбандарын күреп хайран ҡалған Шева батшабикәһе Сөләймәнгә былай ти: «Илемдә һинең башҡарған эштәрең, аҡылың тураһында күп ишеттем. Әммә ул хәбәрҙәрҙең береһенә лә ышанмағайным. Бына әле, килеп үҙ күҙҙәрем менән күргәс, дөрөҫлөгөнә ышандым, йәнә шуны белдем: миңә уларҙың яртыһын да һөйләмәгәндәр икән. Аҡылың да, байлығың да мин ишеткәндәрҙән күпкә күберәк. Халҡың да, һәр ваҡыт янында булған, аҡыллы һүҙҙәреңде тыңлап йөрөгән был хеҙмәтселәрең дә бәхетле. Һине Үҙ ихтыяры менән Израил тәхетенә ултыртҡан Раббы Аллаң мөбәрәк булһын! Израил еренә мөхәббәте мәңгелек булғанға, Раббы һине ғәҙеллек менән хөкөм ҡылырға батша итеп ҡуйған». Батшабикә Сөләймәнгә йөҙ егерме алтын талант, бик күп хуш еҫле майҙар, аҫылташтар бүләк итә. Йәрүсәлимдә бер ваҡытта ла Шева батшабикәһе килтергән хәтлем хуш еҫле майҙар булмаған әле. Сөләймән батша ла бүләктәргә йомарт була, ҡунағы һораған һәм йәне теләгән әйберҙәрҙең барыһын да бирә. Шунан һуң батшабикә хеҙмәтселәре менән үҙ иленә ҡайтып китә.

*3 БАТШАЛАР 10:1–13*



## Сөләймәндең Алланан ситләшеүе

Сөләймән ҡорам төҙөгән ваҡытта Алла уға былай ти: «Ҡануундарымды тотоп, ҡағиҙәләрем буйынса йәшәһәң, бойороҡтарымды үтәһәң, атаң Дауытҡа биргән вәғәҙәмде һинең аша үтәрмен: исраилдар араһында йәшәрмен, Исраил халҡымды бер ваҡытта ла ташламаҫмын». Сөләймән Алланың бөтә бойороҡтарын ысын йөрәктән башҡара.

Йылдар уҙа. Ҡартайған көнөндә Сөләймән Алланан ситләшә башлай. Уның бот-һындарға табынған, тере Алланы танырға теләмәгән мәжүси халыҡтарҙан алған ҡатындары күп була. Улар Сөләймән батшаны ла бот-һындарға табынырға әйҙәй. Ул, үҙ илаһтарына табынһындар өсөн, ҡатындарына табыныу ҡалҡыулыҡтары төҙөп бирә.

Алла Сөләймәнгә ялған илаһтарға табынмаҫҡа бойора, әммә Сөләймән Раббыны тыңламай, ике тапҡыр килеп иҫкәртеүенә ҡарамаҫтан, йөрәгендә Уға хыянат итә. Быға Алла бик асыулана һәм былай ти: «Минең килешеүҙе тотмағаның һәм ҡушҡандарымды үтәмәгәнең өсөн, һарайың эсендә шундай эштәр ҡылынған өсөн, батшалығыңды тартып алып, ҡолоңа бирәм. Әммә атаң Дауыт хаҡына Мин уны һин иҫән саҡта түгел, улыңдың ҡулынан тартып алырмын. Батшалығыңды тотош алмам – ҡолом Дауыт хаҡына һәм Үҙем һайлап алған Йәрүсәлим хаҡына улыңа бер ырыуҙы ҡалдырырмын».

Шулай була ла. Батшаның гонаһы арҡаһында ил ике өлөшкә бүленә һәм улар араһында ыҙғыш-тартыш башлана.

*3 БАТШАЛАР 6:12–13; 11:1–13*



## Батшалыҡтың бүленеүе

Данлыҡлы Исраил батшалығы 120 йыл йәшәп ҡала: Шаул, Дауыт һәм Сөләймән ҡырҡышар йыл хакимлыҡ итә. Сөләймәндең вафатынан һуң, батшалыҡ Исраил һәм Йәһүҙә батшалыҡтарына бүленә. Ул былай була: мәрхүм Сөләймәндең улы Рехавғамды үҙҙәренең батшаһы тип иғлан итер өсөн, исраилдар Шәхәмгә йыйыла. «Атайың иңебеҙгә көс етмәҫлек ауыр йөк һалды, ошо ауыр йөктө еңеләйтһәң, һиңә тоғро хеҙмәт итер инек», – ти килгән кешеләр.

Рехавғам атаһы Сөләймән батша заманында һарайҙа хеҙмәт иткән аҡһаҡалдар менән кәңәшләшкәс, улар: «Бөгөн был халыҡтың хеҙмәтсеһенә әйләнеп, теләктәрен үтәп, уларға ярарға тырышһаң, яҡшы һүҙеңде йәлләмәһәң, ғүмер буйы ҡолдарың булырҙар», – тип яуап бирә. Әммә Рехавғам аҡһаҡалдарҙың кәңәшен һанға һуҡмай, үҙе менән бергә үҫкән йәштәштәренең насар кәңәшенә ҡолаҡ һала. «Халыҡҡа былай тип әйт, – тиҙәр улар. – Минең сәтәкәй бармағым атайымдың биленән йыуаныраҡ. Әгәр атайым иңегеҙгә ауыр йөк һалып интектерһә, мин был йөктө тағы ла нығыраҡ арттырырмын. Атайым һеҙҙе сыбыртҡылап эшләткән булһа, мин һеҙҙе ҡамсы менән язалармын».

Исраил дәүләте Яҡуп улдарының һаны буйынса ун ике ырыуға бүленгән була. Исраилдар яңы ҡуйылған Рехавғам батшаның үҙҙәренең үтенесен кире ҡағыуын аңлағас, ун ырыу айырылып, уға ҡаршы сыға һәм батша итеп Рехавғамдың дошманы Яровғамды һайлай. Барлыҡҡа килгән батшалыҡ Изге Яҙмала Исраил батшалығы тип атала. Исраилдың төньяғында урынлашҡанға күрә, уны Төньяҡ батшалыҡ тип тә йөрөтәләр. Тәүҙә уның баш ҡалаһы итеп Шәхәм, аҙаҡ Тирса һәм, ниһайәт, Самария ҡалаһы һайлана. Исраил батшалығы 200 йылдан ашыу йәшәп, беҙҙең эраға тиклем 721 йылда Ашшур батшаһы Шалманасар тарафынан ҡыйратыла.

Сөләймән батшаның улы Рехавғамға Йәһүҙә менән Бинйәминдең ҙур булмаған ырыуҙары ғына тоғро ҡала. Йәһүҙә батшалығы ошо ике ырыуҙан тора. Исраилдың көньяғында урынлашҡанға күрә, уны Көньяҡ батшалыҡ тип тә йөрөтәләр. Уның баш ҡалаһы Йәрүсәлим була. Йәһүҙә батшалығы, 350 йыл тирәһе йәшәп, беҙҙең эраға тиклем 586 йылда Бабил тарафынан ҡыйратыла.

*3 БАТШАЛАР 12*



## Йәһүҙә – Көньяҡ батшалыҡ

Йәһүҙә, йәки Көньяҡ батшалыҡ, өс быуат ярым тирәһе йәшәй. Төньяҡ батшалыҡ ҡолатылып 135 йыл үткәндән һуң, Көньяҡ батшалыҡ та емерелә. Көньяҡ батшалыҡта 20 батша алышына: Рехавғам, Авияһ, Аса, Йеһошафат, Йеһорам, Ахазъяһ, Ғаҫалъяһ батшабикә, Йоаш, Амасъяһ, Ғуззияһ (Ғазаръяһ), Йоҫам, Ахаз, Хизкияһ, Менашше, Амон, Йошияһ, Йеһоахаз, Йеһояҡим, Йеһояхин һәм Сидкияһ.

Көньяҡ батшаларының күбеһе, Раббы юлынан тайпылып, илаһтарға табынһалар ҙа, гонаһлы тормош алып барһалар ҙа, араларында Аллаға тоғро ҡалғандар ҙа була. Мәҫәлән, Хизкияһ менән Йошияһ батшалыҡ иткән ваҡытта Көньяҡ батшалыҡ уяныу осоро кисерә: илаһтарға тип төҙөлгән табыныу ҡалҡыулыҡтарын емерәләр, халыҡтан Алла һүҙен хөрмәтләүҙе, яман эштәрҙән йыраҡ тороуҙы һәм Алланың бөтә ҡанундарын, бойороҡтарын, ҡушҡандарын һәм йолаларын тотоуҙы талап итәләр.

Йәһүҙә батшалығындағы халыҡ һаны Исраил батшалығынан яҡынса алты тапҡырға әҙерәк була. Әммә, әйләнә-тирәләге халыҡтар менән сағыштырғанда, был ике батшалыҡ та ҙур булмай. Улар үҙ-ара һуғышып йәшәһә лә, төп дошмандары булып мәжүси халыҡтар ҡала килә: төньяҡта – Сүриә (Арам), көнсығышта – көслө Ашшур менән Бабил дәүләттәре, көньяҡ-көнбайышта – пелештиҙәр һәм көньяҡ-көнсығышта – моавтар.

Йәһүҙә менән Исраил Раббыға тоғро саҡтарында алыштарҙа еңеп сыға, ә халҡы һәм батшалары ҡанунды һанға һуҡмай башлағас, Раббы уларҙы дошмандары ҡулына тапшырып, язаһын бирә.

*3 БАТШАЛАР 12*



## Исраил – Төньяҡ батшалыҡ

Был батшалыҡ ике йөҙ йылдан ашыуыраҡ йәшәй. Шул дәүер эсендә ун туғыҙ батша алышына: Яровғам, Надав, Бағша, Эла, Зимри, Ғомри, Ахав, Ахазъяһ, Йорам, Йеһу, Йеһоахаз, Йеһоаш, Яровғам II, Зәкәрьяһ, Шаллум, Менахем, Пеҡахъяһ, Пеҡах һәм Һошеяғ. Был батшалыҡтың тарихы ҡанға буялған. Ул Йәһүҙә батшалығы һәм башҡа халыҡтар менән туҡтауһыҙ һуғышып йәшәй. Тәхеткә ултырыр өсөн, батшаларҙы үҙҙәренең үк улдары, яҡындары үлтерә; батша булып алһалар, уларҙы ла шундай уҡ ниәт менән үлтерәләр. Төньяҡ батшалыҡ тәхетендә шулай туғыҙ нәҫел алышына. Ә Көньяҡ батшалыҡ менән бер генә нәҫел – Дауыт батша быуыны идара итә.

Төньяҡ батшалары Раббының күңеленә ятмаған эштәр ҡыла. Улар Алла юлынан тайпылып, динһеҙлек юлына баҫа, батшалыҡтарында әхлаҡһыҙлыҡ хөкөм һөрә, илаһтарға табыныу сәскә ата. Боҙолған Төньяҡ батшалары халҡын да гонаһҡа батыра. Беренсе батша – Яровғам ваҡытында уҡ халыҡ илаһтарға табына башлай. Бына нисек була был. Яровғам: «Батшалыҡтың ҡабаттан Дауыт нәҫеленә күсеүе ихтимал, – тигән уйға килә. – Әгәр халыҡ ҡорбан килтерергә Йәрүсәлимгә, Раббы ҡорамына йөрөүен дауам итһә, йөрәктәре менән Йәһүҙә батшаһы Рехавғамға ҡабат боролор. Шул сағында улар мине үлтерер ҙә үҙҙәренең хакимы Рехавғамға яңынан ҡайтыр». Шунан һуң Яровғам алтындан ике үгеҙ башмаҡ һыны ҡойорға ҡуша ла халыҡҡа: «Йәрүсәлимгә йөрөмәһәгеҙ ҙә була. Исраил, һине Мысыр еренән алып сыҡҡан илаһтарың бына ошолар», – ти. Бер һынды батша Бейт-Илдә, икенсеһен Данда ҡуйырға ҡуша. Гонаһтың башы ошо була: алтын үгеҙ башмаҡтан тыш, халыҡ мәжүсиҙәр аллаһы Бәғелгә табына башлай.

Был мәлдә Исраил батшалығында Ахияһ исемле Алла пәйғәмбәре йәшәй. Уның әйткәндәре Яровғамға һәм уның батшалығына ҡаршы була: «Исраил Аллаһы Раббы былай ти: һин яманлыҡта үҙеңдән алдағы батшаларҙың барыһынан да уҙҙырҙың. Үҙеңә илаһтар, бот-һындар яһап, нәфрәтемде уяттың, Минән баш тарттың. Шуның өсөн Мин Яровғам нәҫеленә бәлә-ҡаза килтерәм». Аҙаҡ барыһы ла пәйғәмбәр әйткәнсә була.

*3 БАТШАЛАР 12; 14*



## Ильяс пәйғәмбәр

Йылдар уҙа. Батшалар алышына. Исраил тәхетенә Ахав ултыра. Ул үҙенә тиклемге Исраил батшалары араһында иң боҙоғо була. Ҡатыны Изевел мәжүси була, Ахавты ла ялған илаһ Бәғелгә табынырға, уға ҡорам төҙөргә күндерә, ә үҙе ысын Аллаға тоғро ҡалғандарҙың барыһын да ҡырып бөтөрөргә ынтыла.

Исраилда, Ахав батшалыҡ иткән дәүерҙә, Алланың тоғро пәйғәмбәре Ильяс йәшәй, ул барыһын да Алла юлына баҫырға саҡыра. Ул ваҡытта исраилдар, Раббы юлынан ситләшеп, илаһтарға хеҙмәт итә башлаған була. Бының өсөн Алла уларға язаһын бирә: Ильяс пәйғәмбәр иғлан иткәнсә, өс йыл ярым буйына Исраил еренә бер тамсы ямғыр төшмәй, илдә ҡоролоҡ башлана. Раббы Ильясҡа Ахавтың эҙәрлекләүҙәренән аулаҡ урында – шишмә буйында йәшеренергә ҡуша. Алла пәйғәмбәргә иртәле-кисле икмәк һәм ит алып барырға ҡоҙғондарҙы ебәрә, ә һыуҙы ул шишмәнән эсә.

*3 БАТШАЛАР 16:29 – 17:6*



## Ильястың тол ҡатынға ярҙам итеүе

Бер ни тиклем ваҡыттан Ильяс һыу эсеп йөрөгән шишмә ҡорой. Алла уға Сидон өлкәһендәге Сарефаҫ ҡалаһына барып, бер тол ҡатында туҡталырға ҡуша. Был өйгә килгәс, Ильяс ҡатындан һыу менән бер телем икмәк һорай. Ҡатын улы менән генә йәшәй һәм бик ярлы була. Бер ус он менән көршәгендәге саҡ ҡына майҙан башҡа бер нәмәһе лә юҡ. Ҡатын был турала әйткәс, Ильяс: «Ҡурҡма. Раббы ергә ямғыр яуҙырғансы, тәпәнеңдә он, көршәгеңдә май бөтмәҫ», – тип яуап бирә.

Ильяс пәйғәмбәр тол ҡатындың өйөндә йәшәй башлай. Раббы мөғжизә ҡыла: улар көн дә икмәк бешерһә лә, Ильяс әйткәнсә, май ҙа, он да кәмемәй.

Уйламағанда ҡатындың улы ауырып, тын алыуҙан туҡтай. Ҡайғынан ни эшләргә белмәгән ҡатын, гонаһтарым өсөн Раббы язаға тарттырҙы тип уйлап, улының үле кәүҙәһен күтәреп, пәйғәмбәргә килә. «Улыңды бир әле», – тип Ильяс уның ҡулынан малайҙың үле кәүҙәһен ала ла бүлмәһенә инеп китә. Малайҙы түшәккә һалғас, доғаһында Раббыға мөрәжәғәт итә: «Эй Раббым Аллам! Улының йәнен алып, мине йортона һыйындырған ошо тол ҡатындың башына бәлә килтерерһеңме икән ни?» Малайҙың өҫтөнә өс тапҡыр эйелеп торғандан һуң йәнә Аллаға өндәшә: «Эй Раббым Аллам! Был баланың йәне үҙенә кире әйләнеп ҡайтһын!» Раббы тоғро пәйғәмбәренең доғаһын ишетә һәм тол ҡатындың улына йәнен ҡайтара. Ильяс улын әсәһенә алып килеп: «Бына, улың тере», – ти. Әсә кеше: «Һинең Алла бәндәһе икәнеңде лә, телеңдә ысын Раббы һүҙе булғанын да хәҙер беләм инде!» – ти шатланып.

*3 БАТШАЛАР 17:7–24*



## Ильяс һәм Бәғел пәйғәмбәрҙәре

Бер ваҡыт Раббы Ильясҡа Ахав батшаға барып: «Бәғел илаһтың пәйғәмбәрҙәрен һәм башҡа мәжүси пәйғәмбәрҙәрҙе, шулай уҡ барлыҡ халыҡты Кармәл тауына йый», – тип әйтергә ҡуша. Ахав батша тауға барыһын да йыйғас, Ильяс уларға былай ти: «Һеҙ әле оҙаҡ икеләнерһегеҙме икән? Ысын Алла – ул Раббы тип һанаһағыҙ, Уның юлынан барығыҙ. Бәғел, тиһәгеҙ, Бәғел артынан китегеҙ». Бер кем дә яуап ҡайтармағас, Ильяс һүҙен дауам итә: «Мин – Раббының берҙән-бер тороп ҡалған пәйғәмбәре, ә Бәғелдең пәйғәмбәрҙәре – дүрт йөҙ илле. Беҙгә ике үгеҙ башмаҡ килтерһендәр. Уларҙың береһен Бәғел пәйғәмбәрҙәре салһын да утын өҫтөнә һалһын, тик ут тоҡандырмаһындар. Икенсе үгеҙ бызауҙы мин әҙерләрмен. Шулай уҡ утын өҫтөнә һалырмын, әммә ут тоҡандырмам. Һеҙ үҙегеҙҙең илаһығыҙҙы әйтеп саҡырығыҙ, ә мин доғамда Раббы Алламды саҡырырмын. Доғабыҙҙы ишетеүен белдереп, утты яндырып ебәргәне – ысын Алла була ла инде». Халыҡ ризалығын белдерә.

Бәғел пәйғәмбәрҙәре үгеҙ быҙауҙы утын өҫтөнә һала ла: «Эй Бәғел! Яуап бир беҙгә!» – тип ҡысҡыра башлай. Улар шулай көнө буйы иҫәрҙәрсә ҡысҡырһа ла, бер ниндәй ҙә яуап булмай. Ахырҙа Ильяс халыҡҡа үҙенең янына килергә ҡуша. Исраилдарҙың ун ике ырыуы буйынса ун ике таш алып, ҡорбан усағы яһай, усаҡҡа утын теҙә. Үгеҙ быҙауҙы һуйып, утын өҫтөнә һала. Шунан һуң ҡорбан усағына өс тапҡыр дүртәр көршәк һыу ҡойҙора – тирә-яғынан ҡаҙылған соҡор һыу менән тула. Ильяс доға ҡыла башлай: «Эй Раббы, Ибраһим, Исхаҡ һәм Исраил Аллаһы! Бөгөн барыһы ла Исраилда Һин берҙән-бер Алла, ә мин Һинең ҡолоң икәнде һәм барыһын да Һинең ҡушыуың буйынса эшләгәнемде белһен. Яуап ҡайтар миңә, йә Раббы, яуап бир! Был халыҡ, Раббы, Һинең Алла булыуыңды аңлаһын, шул сағында күңелдәре ҡабаттан Һиңә әйләнеп ҡайтыр». Раббы Ильястың доғаһын ишетә: күктән төшкән ут ҡорбанды ла, утын һәм эргә-тирәләге таштарҙы ла яндыра, хатта соҡорҙағы һыуҙы ла ялмап йота. Ошоларҙы күреп торған халыҡ: «Раббы – Алла, Раббы ысын Алла!» – тип ҡысҡырып, йөҙтүбән ергә ҡаплана. Шулай Раббы Үҙенең берҙән-бер Алла булыуын, ә Бәғел пәйғәмбәрҙәренең ялғансы икәнен раҫлай.

*3 БАТШАЛАР 18:18–39*



## Һыу һәм май менән ҡылынған мөғжизә

Ильяс урынына ҡалған Ильясиғинды бөйөк пәйғәмбәр яһап, Алла уның аша күп мөғжизәләр ҡыла. Бер ваҡыт, Йерихола булғанында, уға ошо ҡаланың халҡы килә. «Ҡалабыҙ һәйбәт ерҙә урынлашһа ла, һыуы насар, шуға тупрағы ла уңдырышһыҙ», – тип зарлана улар. Ильясиғин сеүәтәгә тоҙ һалдырып ала ла йылғаның инешенә килә. «Раббы һүҙе менән был һыуҙы паклайым. Инде үлем дә килмәҫ, түлһеҙлек тә булмаҫ», – ти ҙә тоҙҙо һыуға һибә. Ошонан һуң инештәге һыу ысынлап та яҡшыра.

Икенсе тапҡыр Ильясиғинға тол ҡатын килә, илай-илай ҡайғыһын һөйләй. Иренең вафатынан һуң ул бурыстарын түләй алмаған икән. Бурысҡа биреп торған кеше хәҙер ҡатындың ике улын да ҡоллоҡҡа алып китергә килгән. Ильясиғин уға ярҙам итергә теләп: «Өйөңдә нимә бар?» – тип һорай. «Зәйтүн майы һалынған һауыт ҡына», – ти ҡатын. Пәйғәмбәр уға былай ти: «Бөтә күршеләреңдән дә буш һауыттар һорап ал. Ҡайтҡас, өйөңдөң ишеген биклә лә үҙеңдә булған майҙы улдарың менән буш һауыттарға тултырып ҡуй».

Ҡатын Ильясиғин әйткәнсә эшләй. Күршеләренән буш һауыттар һорап ала ла, ишеген бикләп, улдары менән үҙенең һауытындағы майҙы шул һауыттарға ҡоя башлай. Артабанғы һауытты май менән тултырғас, тағы буш һауыт һорай. Улы, буш һауыттар ҡалманы, тигәс, ҡатын үҙенең һауытында ла май бөткәнен күреп ҡала.

Бөтә һауыттарҙы ла май менән тултырғас, ҡатын Ильясиғинға килеп әлеге мөғжизә тураһында һөйләп бирә. «Бар, был майҙарҙы һат та бурысыңды түлә. Артып ҡалған аҡса улдарыңа ла, һиңә лә йәшәргә етер».

*4 БАТШАЛАР 2:19–22; 4:1–7*



## Сүриә ғәскәре башлығы Нағаман

Сүриә батшаһының Нағаман исемле ғәскәр башлығы була. Уны барыһы ла белә, хөрмәт итә, ләкин ул махау тигән тире ауырыуынан интегә.

Исраилдар менән алыштарҙың береһендә сүриәләр бәләкәй бер ҡыҙҙы әсирлеккә ала, ул Нағамандың ҡатынына хеҙмәт итә башлай. Ҡыҙ Раббының Ильясиғин аша күрһәткән мөғжизәләре тураһында белгән була. Бер ваҡыт ул хужабикәһенә: «Хакимым Самарияла йәшәгән пәйғәмбәр янына барһа, пәйғәмбәр уны махауынан һауыҡтырыр ине», – ти. Исраил ҡыҙынан ишеткән һүҙҙәрҙе Нағаман үҙенең батшаһына барып һөйләй. Сүриә батшаһы Нағаманға: «Исраилға юлға сыҡ, ә мин һинең аша батшаға хат яҙып ебәрермен», – ти.

Нағаман Исраилға юллана. Килеп еткәс, батшаға хатты бирә. Унда: «Хатымды тапшырған кеше – хеҙмәтсем Нағаман. Уны махау сиренән ҡотолдорһаң ине», тип яҙылған була. Хатты уҡығас Исраил батшаһы: «Үлтерергә йә терелтергә мин Алламы ни? Махауҙан ҡотолдор, тип ниңә миңә кеше ебәрә ул? Хәҙер күрҙегеҙме инде, ул минең менән дошманлашырға сәбәп эҙләй», – тип кейемдәрен йыртҡыслап ташлай.

Был турала ишеткән Ильясиғин: «Кейемдәреңде ни өсөн йыртаһың? Ул кешене миңә ебәр, Исраилда пәйғәмбәр бар икәнен белһен», – тип әйтергә батшаға хеҙмәтсеһен ебәрә.

*4 БАТШАЛАР 5:1–8*



## Нағамандың һауығыуы

Нағаман яу арбаларында Ильясиғиндың ишек төбөнә килеп туҡтай. Ильясиғин хеҙмәтсеһен ҡаршы сығарып: «Бар, Иорданда ете тапҡыр йыуын, тәнең сәләмәтләнер һәм таҙа булырһың», – тип әйтергә ҡуша. Быны ишеткән Нағаман асыуланып китә. «Мин, хәҙер Ильясиғин пәйғәмбәр сығыр ҙа Раббы Аллаһының исеме менән ауыртҡан урыным өҫтөнән ҡулдарын йөрөтөр, махауҙан дауалар, тип уйлағайным. Дамаск йылғалары Авана менән Парпар Исраилдың бөтә йылғаларына ҡарағанда ла яҡшыраҡ түгелме ни? Мин шул һыуҙарҙа йыуынып таҙарына алмай инемме ни?» – тип, йәне көйөп, Ильясиғиндың өйө янынан ҡуҙғалып китә.

Әммә шул ваҡыт уға ярандары: «Хакимыбыҙ, әгәр пәйғәмбәр ҡыйын эш ҡушһа, үтәмәҫ инеңме ни? Ул бит һиңә ни бары: „Йыуын, таҙарынырһың“, – тине», – тип әйтәләр. Нағаман пәйғәмбәр әйткәнсә эшләргә була. Иордан йылғаһына барып ете тапҡыр сумып сыҡҡандан һуң, тәне сабый баланыҡы кеүек шымарып, таҙарып китә.

Нағаман Алла бәндәһе Ильясиғинға әйләнеп килә: «Ерҙәге бөтә халыҡтарҙан Исраил халҡының ғына Алланы танығанын хәҙер белдем. Инде ҡолоңдоң бүләген ҡабул итеп ал», – ти. Әммә, Нағаман күпме ҡыҫтаһа ла, Ильясиғин уның бүләктәрен алмай. Хушлашҡанда Нағаман мәжүси илаһтарға тотош яндырыу ҡорбаны ла, башҡа төр ҡорбандар ҙа килтермәҫкә, Раббыға ғына табынырға һүҙ бирә.

*4 БАТШАЛАР 5:9–17*



## Баҫҡынсыларҙың күҙҙән яҙыуы

Сүриә менән Исраил араһында барған һуғыш мәлендә Ильясиғин Исраил батшаһына Сүриә ғәскәрҙәренең ҡайҙа торғанын әйтә, был турала уға Алла аңғарта. Шулай Исраил еңеү артынан еңеү яулай. Яугирҙәр араһында исраилдарға хәрби серҙе еткереп торған һатлыҡ йән бар, тигән хафаға төшә Сүриә батшаһы. Әммә хеҙмәтселәренең береһе: «Батшабыҙ, хакимым минең, беҙҙең арала хыянатсы юҡ, әммә Исраилда йәшәгән Ильясиғин пәйғәмбәр үҙенең батшаһына барыһын да, хатта һин йоҡо бүлмәңдә әйткән һүҙҙәрҙе лә һүҙмә-һүҙ еткереп тора», – ти.

Ильясиғиндың ҡайҙа йәшәгәнен белеп, уны әсирлеккә төшөрөргә Сүриә батшаһы ҙур ғәскәрен ебәрә. Төндә килеп етеп, улар был ҡаланы уратып ала. Үҙенә яҡынлашҡандарын күреп, Ильясиғин доғаһында Раббыға мөрәжәғәт итә: «Уларҙың күҙҙәре күрмәҫ булһын». Ильясиғиндың әйткәне буйынса Раббы сүриәләрҙе һуҡырайта. Ильясиғин пәйғәмбәр, һуҡырайған яугирҙәрҙе үҙенең ҡалаһынан алып сығып, ул ваҡытта Төньяҡ батшалыҡтың баш ҡалаһы булған Самарияға алып китә. Килеп еткәс, Ильясиғин: «Раббы! Быларҙың күҙҙәре яңынан күрә башлаһын!» – ти. Раббы яугирҙәрҙең күҙҙәрен аса. Сүриә яугирҙәре Самария уртаһында тороуҙарын аңлай. Исраил батшаһы Ильясиғиндан: «Атам, бәлки уларҙы үлтерергәләр?» – тип һорай. «Үлтермә, – ти уға Ильясиғин. – Ҡылыс менән әсирлеккә алған яугирҙәрҙе үлтерәләрме ни? Уларға һыу, икмәк бир. Ашаһындар-эсһендәр ҙә хакимдары янына ҡайтһындар». Батша уларға мул табын әҙерләй, тегеләр ашай-эсә. Батша ебәргәс, улар үҙҙәренә ҡайтып китә. Бынан ары Сүриә ғәскәрҙәре Исраил еренә баҫып инеүҙән туҡтай.

*4 БАТШАЛАР 6:8–23*



## Йоаштың тәхеткә ултырыуы

Ахазъяһ Йәһүҙә батшаларының береһе була. Ул яу мәлендә үлеп ҡала. Уның иманһыҙ һәм яуыз уйлы әсәһе Ғаҫалъяһ, батша тоҡомонан булғандарҙың барыһын да ҡырып, тәхеткә үҙе ултырырға ниәтләй. Әммә Йеһошевағ – Ахазъяһтың апаһы – ҡустыһының улы Йоашты йәшереп алып ҡала. Шулай Йоаш тере ҡала. Йеһошевағ уны алты йыл буйы Раббы ҡорамында йәшереп йәшәтә. Ғаҫалъяһ ошо алты йылда Йәһүҙәгә батшалыҡ итә.

Йоашҡа ете йәш тулғанда Йеһоядағ ҡаһин Раббы ҡорамына бөтә яугирҙәрҙе, йөҙ башыларҙы, етеҙ аяҡлы сабышсыларын, батшаның тән һаҡсыларын саҡыртып ала. Ҡаһин уларға батша улын күрһәтә һәм улар уны тәхеткә ултыртырға һүҙ беркетә. Яугирҙәр, ҡорамды бөтә яҡлап уратып, һаҡҡа баҫа. Йеһоядағ ҡаһин, Йоашты алып сығып, башына батша тажы кейҙерә, батшалыҡҡа бағышлап, май һөртә. «Йәшәһен батша!» – тип барыһы ла уны сәләмләп ҡысҡыра башлай. Был бөтә Исраил халҡы өсөн ҡыуанысλы хәбәр була. Батшабикә Ғаҫалъяһ иһә ҡылыстан үткәрелә.

Йәш батша Йоаш Йеһоядағ ҡаһин тәрбиәһендә үҫә һәм Раббы күңеленә ятҡан эштәр ҡыла. Егет ҡорона ингәс, Йоаш элек Алла ҡорамында ҡыйратылған нәмәләрҙе йүнәтергә ҡуша. Әммә Йеһоядағ үлгәндән һуң, йәш батша алама кәңәштәргә ҡолаҡ һала башлай, тере Алланан йөҙ бороп, илаһтарға табынырға булып китә. Шулай ул Алла ихтыярына ҡаршы эштәр ҡыла.

Бер ваҡыт Йеһоядағтың улы Зәкәрьяһ халыҡ ҡылған гонаһтарҙы фаш итә. Был турала ишеткән Йоаш уны ҡорам ихатаһы уртаһында үлтерергә бойора. Был хәлдән һуң илгә бәлә килә: сүриәләр Исраилды бөлгөнлөккә төшөрөп, ҡорамдағы байлыҡты үҙҙәре менән алып китә. Йоаш батша ауырып түшәктә ятҡанда, уны ике хеҙмәтсе инеп үлтереп сыға.

*4 БАТШАЛАР 11; 12; 2 ЙЫЛЪЯҘМА 24:1–25*



## Ғуззияһ батшаның маһайып китеүе һәм язаға тарттырылыуы

Ғуззияһ Йәһүҙә батшалығының унынсы батшаһы була. Тәхеткә ул 16 йәшендә ултыра. Йәрүсәлимдә 52 йыл батшалыҡ итә.

Ғуззияһ Раббының күңеленә хуш килгән ғәмәлдәр ҡыла. Ҡаһин Зәкәрьяһ Алланан ҡурҡырға өйрәткәндә ул Раббыға ынтыла һәм ундай саҡтарҙа Алла уны ярҙамынан айырмай. Ғуззияһ Йәрүсәлимдә лә, сүллектә лә нығытмалар төҙөтә. Тау итәгендә һәм тигеҙлектә йөрөгән бихисап мал көтөүҙәренә бик күп һыу соҡорҙары эшләтә. Ғуззияһ ер эшен яратҡанға, уның баҫыуҙарында, тау биттәрендәге һәм тигеҙ ерҙәрҙәге йөҙөм баҡсаларында күп кешеләр эшләй. Ғуззияһтың өс йөҙ ете мең биш йөҙ кешенән торған ғәскәре була. Ул бөтә ғәскәренә етерлек ҡалҡандар һәм һөңгөләр, торҡа һәм һарайталар, уҡ-һаҙаҡ һәм һапҡы таштары әҙерләтә. Йәрүсәлимдә уҡ һәм ҙур таш яуҙыра торған ҡулайламалар эшләтә. Улар ҡәлғә манараларына һәм мөйөштәренә ҡуйыла. Ғуззияһ, батшалығын нығытып, ҡеүәтле булып китә, уның даны Йәһүҙәнең тирә-яғына тарала.

Әммә Ғуззияһ ошо ҡөҙрәткә эйә була барған һайын, йөрәген маһайыу биләй һәм ошо мин-минлеге уны харап итә: ул Раббы Аллаһының ҡанунын боҙа. Маһайып китеп, Раббы ҡорамына инә, хуш еҫ төтәтергә ниәтләй. Уның артынан Ғазаръяһ ҡаһин һәм Раббының һикһән ҡаһины эйәрә. «Ғуззияһ, Раббы хөрмәтенә хуш еҫ төтәтеү һинең эшең түгел. Был – Һарун нәҫеленән булған, Алла тарафынан төтәтергә бағышланған ҡаһиндарҙың эше. Изге торлаҡтан сыҡ, юғиһә һин хилаф эш ҡылған булып һаналырһың һәм Раббы Алла бының өсөн һине маҡтамаҫ», – тиҙәр улар, Ғуззияһты туҡтатмаҡ булып. Ғуззияһтың уларға асыуы килә: төтәҫләгес уның ҡулында бит инде. Нәҡ асыуланған сағында, Раббы ҡорамы эсендә, бөтә ҡаһиндар алдында, хуш еҫ төтәтеү усағы янында битенә махау ауырыуы сыға. Батшаның битендәге махауҙы күргәс, Ғазаръяһ һәм башҡа ҡаһиндар уны ҡорамдан сығырға мәжбүр итә. Ғуззияһ Раббының язаһы төшкәнен аңлай, шуға үҙе лә ҡарышмай, тиҙерәк сыға һала. Ғүмеренең һуңғы көндәренәсә Ғуззияһ махау



сиренән арына алмай, айырым йортта йәшәй. Раббы ҡорамына ла башҡаса аяғын баҫтыртмайҙар. Батша һарайы һәм халыҡ менән улы Йоҫам идара итә.

*2 ЙЫЛЪЯҘМА 26*

## Исраилдың Алланан баш тартыуы

Исраил халҡы, үҙҙәрен Мысыр еренән алып сығып, фирғәүен ҡулынан ҡотҡарған Раббы Аллалары алдында гонаһлы эштәр ҡыла башлай. Улар башҡа илаһтарға табына, Раббы был ерҙән ҡыуып ебәргән мәжүси халыҡтарҙың йолаларына эйәрә. Исраилдар, Алла хушһынмаған эштәр ҡылған батшаларына эйәреп, үҙҙәре йәшәгән бөтә ауыл-ҡалаларҙа илаһтар хөрмәтенә ҡорбан усаҡтары төҙөйҙәр, табыныу бағаналары ҡуялар, һәр ҡалҡыулыҡта, һәр суҡ ботаҡлы ағас аҫтында мәжүсиҙәр алиһәһе Ашера хөрмәтенә ҡолғалар урынлаштыралар. Унда улар, Раббы араларынан ҡыуып ебәргән халыҡтар ише, хуш еҫ төтәтәләр. Раббы: «Улай эшләмәгеҙ», – тип торған килеш, исраилдар илаһтарға табыныуҙарын дауам итә, был Раббының асыуын ҡабарта.

Шунан Раббы, бөтә пәйғәмбәрҙәре һәм әүлиәләре аша Исраил менән Йәһүҙә халҡын киҫәтеп, былай ти: «Яман юлдан барыуығыҙҙан туҡтап, Мин ата-бабаларығыҙға биргән һәм ҡолдарым – пәйғәмбәрҙәрем аша һеҙгә еткергән бойороҡтарым менән ҡағиҙәләремде, ҡанунымды үтәгеҙ». Әммә улар тыңламай, Раббы Аллаларына инанмай тиҫкәреләнгән аталары кеүек, киреләнә бирәләр. Алланың ҡушҡандарын да, ата-бабалары менән төҙөгән килешеүҙе лә, әйтә килгән иҫкәртеүҙәрен дә һанға һуҡмайҙар. Буш нәмәләр артынан ҡыуа торғас, үҙҙәре лә буш, мәғәнәһеҙ кешеләргә әйләнәләр. Раббы, улар кеүек булмағыҙ, тип бойорһа ла, эргә-тирәләге халыҡтарҙың ҡылыҡтарын ҡабатлайҙар. Раббы Аллаларының бойороғон үтәүҙән баш тартып, үҙҙәренә табыныу өсөн ике башмаҡ һыны ҡойоп алалар, Ашера алиһәгә бағышлап, ҡолға төҙөйҙәр. Шулай уҡ йондоҙҙарға табыналар, Бәғелгә хеҙмәт итәләр, ҡыҙҙарын һәм улдарын ҡорбанға килтереп, утта яндыралар, күрәҙәлек ҡылалар, сихыр менән шөғөлләнәләр, Раббы хушһынмаған эштәр ҡылып, нәфрәтен уяталар.

Асыуынан ярһыған Алла исраилдарҙан йөҙ бора. Йәһүд ырыуынан башҡа Уның бер кеме лә ҡалмай, әммә улары ла Раббы Аллаларының бойороҡтарын тотмай.

*4 БАТШАЛАР 17:7–18*



## Ашшурҙың Исраилды баҫып алыуы

Һошеяғ Төньяҡ батшалыҡтың – Исраилдың һуңғы батшаһы була. Ул туғыҙ йыл дауамында – беҙҙең эраға тиклем 730-721 йылдарҙа башталыҡ итә һәм Раббының күңеленә ятмаған яман эштәр ҡыла. Исраилдың төньяҡ көнсығышында баш ҡалаһы Ниневе булған Ашшур батшалығы урынлашҡан. Ашшур башында торған етәкселәр ҡанһыҙ, хакимлыҡ яратҡан бәндәләр була. 724 йылда Шалманасар етәкселек иткән бөйөк Ашшур ғәскәре Исраилды баҫып ала. Исраил батшаһы Һошеяғ Шалманасар хакимлығы аҫтында ҡала һәм уға яһаҡ түләп тора башлай.

Бер ваҡыт Ашшур батшаһы Һошеяғтың Мысыр батшаһы Соға ярҙам һорап сапҡынсылар ебәреүен, ә уға, Шалманасарға, яһаҡты йыл да түләп бармауын белеп ҡала. Ул, Һошеяғты ҡулға алып, зинданға яба ла Исраилға яу менән китә. Самарияны өс йыл ҡамауҙа тота. Һошеяғтың батшалыҡ итеүенең туғыҙынсы йылында Ашшур батшаһы Самарияны баҫып ала һәм исраилдарҙы Ашшурға һөргөнгә ҡыуа. Уларҙы Халахҡа, Хавор йылғаһы буйындағы Гозан төбәгенә, шулай уҡ Мадай ҡалаларына күсереп ултырта. Был Төньяҡ батшалыҡтың тарҡалыуы була.

Шулай Раббы Үҙенең халҡын ҡанунды һанға һуҡмағаны өсөн язаға тарттыра. Был хәл беҙҙең эраға тиклем 721 йылда була. Ике йөҙ йылдан һуң ғына исраилдарҙың бик аҙы Ашшурҙан Исраилға ҡайта. Шул ваҡыттарҙа йәһүдтәр, йәғни Көньяҡ батшалыҡ еврейҙары ла, Ашшур әсирлегенән үҙ илдәренә әйләнеп ҡайта.

*4 БАТШАЛАР 17:2–6*



## Самария халҡы

Төньяҡ батшалыҡтағы исраилдар әсирлеккә төшөп, алыҫ Ашшур еренә һөрөлгәс, уларҙың иле бушап ҡала. Ашшур батшаһы Исраил ҡалаларына Бабилдан һәм башҡа илдәрҙән халыҡтарҙы күсереп ултырта. Улар Самарияға хужа булып, уның ҡалаларында йәшәй башлай. Тәүге мәлдә Раббыны һанға һуҡмайҙар, шуға ла Раббы өҫтәренә арыҫландар ебәреп, ҡайһы берҙәрен үлтертә. Был турала Ашшур батшаһына еткерәләр: «Һин Самария ҡалаларына күсереп ултыртҡан халыҡтар ул ерҙәге Алла ҡанунын белмәй. Шуға ла Алла уларҙы үлтерергә тип арыҫландар ебәрә». Унда йәшәп, халыҡты Алла ҡанунына өйрәтһен өсөн, Ашшур батшаһы Самариянан һөрөлгән ҡаһиндарҙың береһен унда кире ҡайтара.

Был ҡаһин Бейт-Илгә килеп урынлаша һәм кешеләрҙе Раббыны ололарға өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта һәр халыҡ үҙенең илаһ-һындарын да эшләп, ҡасандыр Самария халҡы өсөн төҙөлгән мәжүси ғибәҙәтханаларға ҡуя. Шулай итеп, улар Раббыны ла ололай, бында күсеп килгәнгә тиклем халҡы тотҡан йолалар буйынса үҙ илаһтарына ла хеҙмәт итә.

Еврейҙар Инжилдә телгә алынған Самария халҡын был ҡәүемдең тоҡомо тип һанай. Инжил заманында Самария кешеләре, мәжүси аллаларға табыныуҙан туҡтап, бер Раббыны ғына ололай, әммә күп нәмәлә еврейҙарҙан айырыла, улар менән дошмандарса мөнәсәбәттә йәшәй. Уларҙың үҙ ҡаһиндары була, үҙҙәренең йолаларын тоталар. Хатта Геризим тауында үҙҙәренә айырым ғибәҙәтхана төҙөп алалар. Ләкин уны аҙаҡ еврейҙар емерә.

*4 БАТШАЛАР 17:24–33*



# Хизкияһ батшаның доғаһы

**721** йылда ашшурҙар Төньяҡ батшалыҡты баҫып алып, ундағы исраилдарҙы Ашшурға күсереп ултыртҡандан һуң, Йәһүҙә тағы 130 йыл йәшәгән әле.

Хизкияһ Йәһүҙә батшаларының береһе була. Йәрүсәлимдә егерме туғыҙ йыл хакимлыҡ итә. Ул – йәһүд батшалары араһында иң яҡшыһы, сөнки Раббы юлынан тайпылмай, Муса аша бирелгән бөтә бойороҡтарҙы ла үтәп килә. Хизкияһ ялған илаһтарға табыныуға ҡаршы көрәш башлай. Бөтә илаһтарҙың һындарын ҡыйратып, тере Аллаға өмөт бағларға саҡыра. Ул, Ашшур батшаһы хакимлығынан сығып, уға хеҙмәт итеүен туҡтата.

Быға асыуы килгән Ашшур батшаһы Санхерив, бирелеүен талап итеп, Хизкияһҡа янай башлай. Батша Хизкияһҡа хат ебәрә, унда Йәһүҙә батшаһының Аллаға өмөт бағлауынан көлә һәм бер һүҙһеҙ үҙенә буйһоноуын талап итә, сөнки эргә-тирәләге батшаларҙың барыһы ла уның хакимлығы аҫтында була, бер ниндәй илаһтар ҙа Санхеривтың ҡеүәтенә ҡаршы тора алмай.

Хатты алғас, Хизкияһ Алла ҡорамына йүнәлә. Раббы алдына хатты йәйеп һала ла доға ҡыла башлай: «Эй Раббы, кирубтар араһында тәхет ҡорған Исраил Аллаһы! Ерҙәге бөтә батшалыҡтарҙың Аллаһы бер Һин генә. Күк һәм ерҙе Һин яраттың. Ҡолағыңды ҡуйып, Раббым, ишет; күҙҙәреңде асып, Раббым, күр. Һине, Тере Алланы, хурлап хат ебәргән Санхеривтың һүҙҙәрен ишет! Эй Раббым, Ашшур батшалары халыҡтарҙы һәм уларҙың ерҙәрен туҙҙырып, илаһтарын утҡа ташланы-ташлауын, ләкин был илаһтар Алла түгел, ә ағастан һәм таштан кеше ҡулы менән яһалған һындар ине. Шуға улар юҡ ителде. Бынан ары, Раббы Аллабыҙ, беҙҙе Санхеривтың ҡулынан ҡотҡар, ер йөҙөндәге бөтә батшалыҡтар Һинең, Раббы, берҙән-бер Алла икәнеңде белһендәр».

Раббы Хизкияһ батшаның иман доғаһын ишетә, ашшурҙарҙы Үҙенең изге исеменә ҡарата ҡылған яманлыҡтары өсөн язаға тарттыра. Төндә Раббы фәрештәһе Ашшур тупламында йөҙ ҙә һикһән биш мең кешене тар-мар итә.

*4 БАТШАЛАР 18:1–7; 19:9–19*



## Йошияһ батшаның анты

Йошияһ та Йәһүҙә батшаларының береһе. Һигеҙ йәшендә тәхеткә ултырып, Йәрүсәлимдә утыҙ бер йыл батшалыҡ итә. Йошияһ Раббы күңеленә ятҡан ғәмәлдәр ҡыла, уңға ла, һулға ла тайпылмайынса ата-бабаһы Дауыт юлынан бара, ғүмере буйына Аллаға тоғро ҡала.

Ун алты йәшендә Йошияһ бөтә йөрәге менән Раббыға тартыла. Дүрт йылдан, батшалыҡ итеүенең ун икенсе йылында, ул Йәһүҙә менән Йәрүсәлимде илаһтарҙан, уларҙың ҡорбан усаҡтарынан арындыра башлай. Йәһүҙә ерендәге бөтә бот-һындарҙы көл-туҙанға әйләндерә. Батшалыҡ итеүенең ун һигеҙенсе йылында Раббы ҡорамын яңыртыу-тергеҙеү буйынса эш башларға бойороҡ бирә. Был эшкә халыҡ бик күп көмөш йыйып тапшыра.

Раббы йортон яңыртыу барышында, Хилҡияһ ҡаһин Раббының Муса аша биргән ҡанун китабын табып ала. Ҡаһин был китапты Шафан кәтипкә бирә, ул уны батшаға алып бара. Йошияһ батша китапта яҙылғандарҙы уҡырға ҡуша. Табылған китаптағы һүҙҙәрҙе ишеткәс, батшаның иҫе китә: унда бит ҡанун һүҙҙәре яҙылған, ә уларҙы халыҡ күптән үтәмәй.

Йошияһ ысын йөрәктән ҡайғыра, Раббының ярлыҡауын һорап, илап ялбара башлай. Ул, Алла ҡорамына килеп, бөтә халыҡты йыйып ала һәм уларға Раббы йортонда табылған ҡанун китабындағы һүҙҙәрҙе уҡып ишеттерә. Шунан һуң Раббы алдында Уның юлынан йөрөргә, бөтә бойороҡтарын, күрһәтмәләрен һәм ҡағиҙәләрен ихлас үтәргә һүҙ бирә. Шулай уҡ бөтә халыҡҡа ошо китапта яҙылған Алла килешеүенә тоғро булырға ант итергә бойора.

Йошияһ мәжүсиҙәрҙең Исраил халҡы ерендә тороп ҡалған бөтә әшәке бот-һындарын юҡ итә. Барыһы ла, ул тере саҡта биргән анттарына тоғро ҡалып, Раббы юлынан тайпылмай.

*2 ЙЫЛЪЯҘМА 34:1–8, 14–19, 29–33*



# Йермеяһ пәйғәмбәр

Йермеяһ пәйғәмбәр һәр ваҡыт Алла тураһында һөйләй. Бер ваҡыт ул Йәрүсәлим халҡын, тегеләр сит-ят илаһтарға табына һәм уларға ҡорбан килтерә тип, ғәйепләп сыға. Тәүҙә был хаҡта Төфәстә һөйләй, аҙаҡ Йәрүсәлимгә килә. Алла ҡорамы ихатаһына инеп баҫа ла ундағы халыҡҡа: «Исраил Аллаһы, Күк ғәскәрҙәре Раббыһы былай ти: „Мин был ҡаланы һәм уның эргәтирәһендәге ҡалаларҙы алдан әйткән бөтә бәлә-ҡазаларға дусар итәм, сөнки улар, тиҫкәреләнеп, әйткәндәремә ҡолаҡ һалмайҙар“», – тип иғлан итә.

Йермеяһтың пәйғәмбәрлек итеп әйткән һүҙҙәрен ишетеп торған Раббы йортондағы ҡаһин йәне көйөп Йермеяһ пәйғәмбәргә һуғып ебәрә, аяҡтарына ҡалып кейҙереп ултырта. Икенсе көнөнә ҡалыптан сығарта. Йермеяһ йәнә Исраил ҡалаларын, барса халыҡты һәм Раббыға тоғро булмаған ҡаһинды ниндәй яҙмыш көткәнен һөйләргә тотона. Шунан һуң Йермеяһ Аллаға шундай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә: «Мине артыңдан әйҙәнең, Раббы – мин эйәрҙем, Һин минән көслөрәк – мине еңдең; көн дә әҙәм мәсхәрәһенә ҡалам, һәр береһе минән көлә. Ҡасан һөйләй башлаһам да: „Йәбер-золом! Ҡыйралыш!“ тип ҡысҡырырға тейешмен. Раббы һүҙе мине кәмһетеүгә һәм минән көлөүгә сәбәп булды. Шул мәл: „Раббы хаҡында иҫтәренә төшөрөп тормам һәм бынан ары Уның исеменән һөйләмәм“ тип уйланым, әммә йөрәгемдә ялҡын ине, һөйәктәрем дә ут ялҡынында ҡалды. Уны баҫырға теләп хәлдән тайҙым, әммә баҫа алманым».

Тоғро пәйғәмбәрҙе йәберләүселәр күп була, әммә Алла һәр ваҡыт уға көс биреп тора. Шуға ла Йермеяһ былай ти: «Раббы, ғәйрәтле яугирҙәй, минең менән, шуға мине эҙәрлекләүселәр абынып йығылыр, еңә алмайынса, аҡылһыҙ ғәмәлдәре арҡаһында оятҡа ҡалыр. Ҡөҙрәтле Раббы! Һин тоғро юлдағыны һынайһың, Һин уның йәнен һәм йөрәген күрәһең. Раббыға дан йырлағыҙ, Уға маҡтауҙар яуҙырығыҙ, сөнки Ул бисара бәндәнең йәнен залимдар ҡулынан ҡотҡара».

*ЙЕРМЕЯҺ 19:13–15; 20:1–13*



## Йермеяһтың пәйғәмбәрлек һүҙҙәрен Барухтың яҙып алыуы

Бер ваҡыт Раббы Йермеяһҡа былай ти: «Төргәк китапты ал да, Исраил, Йәһүҙә һәм башҡа халыҡтар тураһында әйткәндәремде, уларға бәлә-ҡаза ебәрергә йыйыныуымды яҙып ҡуй. Бәлки, Мине ишетеп, Йәһүҙә халҡы яман юлда йөрөүҙән туҡтар. Шул мәлдә Мин уларҙың яуыз эштәрен һәм гонаһтарын ярлыҡармын».

Йермеяһ Барух исемле кешене саҡырып ала ла Раббының пәйғәмбәр аша әйткән бөтә һүҙҙәрен яҙып барырға ҡуша. Барух барыһын да төргәк китапҡа яҙғас, Йермеяһ уға: «Миңә Раббы йортона инергә рөхсәт юҡ. Һин ураҙа көнөндә унда бар. Минең аша Раббы әйткән һүҙҙәрҙе – үҙең ошо төргәккә яҙып алғандарҙы – бөтә Йәрүсәлим халҡы һәм башҡа ҡалаларҙан килгән бөтә йәһүҙиҙәр алдында ҡысҡырып уҡы. Бәлки, улар Раббыға доғаларын еткерер ҙә яуыз юлда йөрөүҙән туҡтар, сөнки Раббының был халыҡҡа асыуы һәм нәфрәте ҙур», – ти.

Нерияһтың улы Барух Йермеяһ пәйғәмбәр ҡушҡандарҙың барыһын да үтәй. Йәһүҙә батшаһы Йошияһ улы Йеһояҡимдың батшалыҡ итеүенең бишенсе йылы, туғыҙынсы айында Йәрүсәлимдә йәшәгән һәм Йәһүҙәнең башҡа ҡалаларынан килгән кешеләргә Раббы хөрмәтенә ураҙа иғлан ителә. Барух ошо көндә Раббы йортонда Йермеяһтың төргәк китапҡа яҙылған һүҙҙәрен уҡып ишеттерә.

*ЙЕРМЕЯҺ 36:1–10*



## Йеһояҡим батшаның төргәк китапты яндырыуы

Барух Раббы йортонда Йермеяһ пәйғәмбәрҙең төргәккә яҙылған бөтә һүҙҙәрен уҡып ишеттергәс, Йәһүҙә һарай түрәләренең ҡоттары оса һәм улар тиҙ арала был турала Йеһояҡим батшаға хәбәр итә. Батша, әлеге төргәкте алып килеп уҡып бирергә ҡуша. Батша үҙенең һарайында ултыра, ә алдында ҡуҙлы йылытҡыс янып тора. Төргәк китапты алып килеп, уҡый башлайҙар. Ул уҡылған өлөштәрҙе бысаҡ менән ҡырҡып, утҡа ташлай бара. Шулай төргәк тулыһынса утта янып юҡҡа сыға. Йеһояҡим батша ла, хеҙмәтселәре лә Алланың һүҙҙәренә ышанмай. Раббыға буйһонмағандары өсөн йәһүҙиҙәрҙең тиҙҙән Бабил батшаһы ҡулына төшәсәктәре тураһындағы Йермеяһтың пәйғәмбәрлек һүҙҙәре уларҙы ҡурҡытмай. Йеһояҡим Барух кәтип менән Йермеяһты ҡулға алырға бойора, әммә Раббы уларҙы эҙәрлекләп сығыусыларҙың күҙенән йәшерә.

Батша төргәкте яндырғандан һуң, Раббы Йермеяһҡа шундай уҡ икенсе төргәк китап алырға һәм Йәһүҙә батшаһы Йеһояҡим яндырған беренсе төргәктәге һүҙҙәрҙең барыһын да яңынан яҙырға ҡуша. Ә Йеһояҡимға былай тип әйтергә бойора: «Раббы бына нимә ти. Һин был төргәкте яндырғанда: „Ни өсөн бында, мотлаҡ Бабил батшаһы килеп был ерҙе бөлгөнлөккә төшөрөр, ундағы бар халыҡты, бар мал-тыуарҙы ҡырып бөтөрөр, тип яҙҙың?“ – тигән һүҙҙәрҙе әйттең. Раббы Йәһүҙә батшаһы Йеһояҡим тураһында былай ти: бының өсөн уның нәҫеленән Дауыт тәхетендә һис кем ултырмаясаҡ, мәйете көндөҙгө эҫелә лә, төнгө һалҡында ла ерләнмәйенсә ятасаҡ. Ҡылған яуызлыҡтары өсөн уның үҙен дә, тоҡомон да, хеҙмәтселәрен дә язаға тарттырам. Мин уларға ла, Йәрүсәлимдә йәшәгәндәргә лә, Йәһүҙә халҡына ла алдан әйткән бөтә бәлә-ҡазаларҙы ебәрәм, сөнки киҫәтеүҙәремде ишетеүсе булманы».

Йермеяһ төргәк китапты Нерияһ улы Барух кәтипкә бирә. Барух Йеһояҡим батша утҡа яҡҡан төргәк китапта булған һүҙҙәрҙе ҡабаттан теркәп ҡуя. Был яңы төргәк китапҡа алдан яҙылғандарға оҡшаған күп кенә яңы һүҙҙәр өҫтәлә.

*ЙЕРМЕЯҺ 36:14–32*



## Бабилдың Йәһүҙәне яулап алыуы

Раббының Йермеяһ пәйғәмбәр аша алдан әйткәндәре барыһы ла бойомға аша: Бабил батшаһы Навуходоносор йәһүҙиҙәрҙе әсирлеккә ала. Был язаны улар, фаш итеүҙәргә һәм иҫкәртеүҙәргә ҡарамай, Алла алдында тәүбә итмәгәндәре һәм ялған илаһтарға табыныуҙан, яуызлыҡ һәм гонаһтан баш тартмағандары өсөн ала. Көньяҡ батшалыҡта йәшәгәндәр Раббының Төньяҡ батшалыҡты нисек язаға тарттырыуының шаһиты була, шулай ҙа насар ғәмәл ҡылыуҙан туҡтамай. 130 йыл элек Исраилды язаға тарттырған кеүек, Раббы, Бабил ғәскәрҙәрен ебәреп, Көньяҡ батшалыҡты ла ҡыйратырға була.

Йәрүсәлимгә батша булып ултырғанда Йеһояҡим улы Йеһояхинға ун һигеҙ йәш була. Атаһы һымаҡ, ул да Раббы хушһынмаған яман эштәр ҡыла. Өс ай батшалыҡ итеүгә, Йәрүсәлимде Бабил батшаһы ғәскәрҙәре ҡамап ала. Ҡала ҡамауҙа саҡта Бабил батшаһы Навуходоносор үҙе килә. Йәһүҙә батшаһы Йеһояхин, үҙенең әсәһе, хеҙмәтселәре, түрәләре һәм һарай әһелдәре менән Бабил батшаһына ҡаршы сығып, уға әсирлеккә бирелә. Раббы алдан әйткәнсә, Навуходоносор Раббы йортондағы һәм батша һарайындағы бөтә хазинаны Йәрүсәлимдән алып китә. Исраил батшаһы Сөләймән Раббы ҡорамы өсөн эшләткән бөтә алтын һауыттарҙы киҫәктәргә тураҡлай. Бөтә Исраил халҡын, түрәләрҙе, яугирҙәрҙе, балта оҫталарын һәм тимерселәрҙе – барлығы ун мең кешене Бабилға күсерә. Йәһүҙәлә ярлы ер эшкәртеүселәр генә тороп ҡала.

Йеһояхин урынына Бабил батшаһы унын ағаһы Маттанъяһты, исемен Сидкияһ тип үҙгәртеп, батша итеп ҡуя. Сидкияһ егерме бер йәшендә тәхеткә ултыра һәм Йәрүсәлимдә ун бер йыл хакимлыҡ итә. Ул да, Йеһояҡим батша кеүек, Раббы хушһынмаған эштәр ҡыла. Раббының Йәрүсәлим менән Йәһүҙәгә асыуы ныҡ көслө була, хатта уларҙан йөҙөн бора.

*4 БАТШАЛАР 24:8–20*



## Йәрүсәлимдең һәм Алла ҡорамының ҡыйратылыуы

Исраил батшаһы Сөләймәндең Алла бойороғо буйынса Йәрүсәлимдә мөһабәт Раббы ҡорамы төҙөп ултыртыуы тураһында уҡығайныҡ инде. Әммә, Йәрүсәлимде беренсе яулағандан һуң ун бер йыл үткәс, Бабил ғәскәрҙәре был ҡалаға яңынан инә, Сөләймән төҙөгән Алла ҡорамын ҡыйрата. Изге Яҙмала был турала бына нимә яҙылған.

Батшалыҡ итеүенең туғыҙынсы йылында Навуходоносор батша үҙенең ғәскәре менән килеп Йәрүсәлимде ҡамап ала ла уратып уба ҡора. Йыл ярым ҡамауҙа булған ҡалала аслыҡ башлана: халыҡтың бер тәғәм ризығы ҡалмай. Шул мәлдә инде ҡаланы баҫып алалар. Йәһүҙә ғәскәре төндә батша баҡсаһы янындағы ике диуар араһында урынлашҡан ҡапҡаға табан йүгерә. Халдейҙар (бабилдар) ҡаланы ҡамауҙа тотһа ла, Сидкияһ батша тигеҙлеккә илткән юл буйлап ҡасып китә. Халдейҙар ғәскәре уның артынан ҡыуа төшә һәм Йерихо тигеҙлегендә ҡыуып тота. Йәһүҙәнең бөтә ғәскәре батшаны ташлап ҡасып бөтә. Сидкияһты әсирлеккә алып, Ривлаға Бабил батшаһына алып баралар һәм шунда хөкөм итәләр. Улдарын Сидкияһтың күҙ алдында үлтерәләр, ә үҙенең күҙҙәрен соҡоп алалар, сынйыр менән бығаулап, Бабилға алып китәләр.

Навуходоносорҙың тәнһаҡсылары башлығы Невузарадан һәм халдейҙар ғәскәре, Йәрүсәлимгә килеп, Раббы ҡорамын, батша һарайын һәм Йәрүсәлимдәге бөтә йорттарҙы яндыра, Йәрүсәлимде уратып алған диуарҙарҙы емерә. Ҡалала тороп ҡалған барса халыҡты һәм Бабил батшаһы яғына ауғандарҙы Невузарадан һөргөнгә оҙата. Бер ни тиклем ярлыларҙы ғына баҫыуҙа һәм йөҙөм баҡсаларында эшләргә ҡалдыра. Раббы ҡорамындағы баҡыр бағаналарҙы һәм ғибәҙәт хеҙмәтендә ҡулланылған барлыҡ баҡыр кәрәк-яраҡты халдейҙар тураҡлап, баҡырын Бабилға алып китә. Улар хеҙмәттә ҡулланылған бөтә баҡыр һауыттарҙы, төтәсләгестәрҙе, алтын-көмөш нәмәләрҙе ала.

Был беҙҙең эраға тиклем 587–586 йылдарҙа була. Сөләймәндең ҡорамы 400 йыл тирәһе тора.

*4 БАТШАЛАР 25:1–16*



## Даниил һәм уның өс дуҫы

Бабил батшаһы Навуходоносор һарай хеҙмәтселәре башлығына әсиргә алынған исраилдар һәм йәһүҙиҙәр араһынан батша һарайында хеҙмәт итергә егеттәр һайлап алырға ҡуша. Улар батша йә юғары ҡатлам нәҫеленән сыҡҡан, ағзалары теүәл, төҫ-башҡа күркәм, аң-белемгә һәләтле, зирәк һәм аҡыллы булырға тейеш. Ҡушылғандар үтәлгәс, һарайында хеҙмәт итергә һайлап алынған егеттәрҙе батша үҙ табынынан ашатырға, шарап бирергә ҡуша. Шулай уҡ уларҙы төрлө ғилемгә һәм халдей теленә өйрәтергә бойора. Шул рәүешле был үҫмерҙәр өс йыл тәрбиәләнергә тейеш була.

Һайлап алынғандар араһында Йәһүҙә ырыуынан Даниил, Хананъяһ, Мишаил һәм Ғазаръяһ исемле үҫмерҙәр була. Бабил һарайында Даниилды – Белтешассар, Хананъяһты – Шадрах, Мишаилды – Мешах, Ғазаръяһты Ғавед-Него тип йөрөтә башлайҙар. Даниил батша табынындағы ризыҡтарҙы һәм шарапты ауыҙына алмаҫҡа була: ризыҡтар Муса ҡануны буйынса еврейҙарға ашарға тыйылған мал йәки ҡош итенән әҙерләнеүе ихтимал бит. Шуға ла Даниил хеҙмәтселәр башлығынан йәшелсә һәм эсергә һыу ғына биреүҙәрен һорай. Тәүҙә хеҙмәтселәр башлығы риза булмай. Егеттәр ябығыр ҙа уға батша алдында үҙ башы менән яуап бирергә тура килер тип ҡурҡа. Әммә Даниил ун көн буйы йәшелсә һәм һыу менән генә һынап ҡарарға күндерә. Ун көндән һуң батша табынынан ашамаған дүрт йәһүд егетенең ҡиәфәте күркәмерәк, тәндәре лә сәләмәтерәк булып сыға.

Алла Даниилға, Хананъяһҡа, Мишаилға һәм Ғазаръяһҡа аң-белем, аҡыл бирә. Даниилды күренмештәрҙе, төштәрҙе юрау һәләте менән дә бүләкләй.

Өс йылдан батша һарайҙа хеҙмәт итергә һайлап алынған егеттәрҙе үҙе янына саҡыра. Батша һәр береһе менән әңгәмәләшеп сыҡҡандан һуң, улар араһында Даниилға, Хананъяһҡа, Мишаилға һәм Ғазаръяһҡа тиңләшеүсе юҡ, тигән һығымтаға килә. Шуға ла улар батша янында хеҙмәткә ҡалдырыла. Батша уларҙан нимә тураһында ғына һораһа ла, егеттәрҙең яуабы бөтә халдей тылсым һәм аҡыл эйәләренән ун тапҡырға аҡыллыраҡ булып сыға.

*ДАНИИЛ 1:3–20*



## Алтын һәйкәл һәм өс ҡыйыу ир

Бабил батшаһы Навуходоносор буйы утыҙ метр, киңлеге өс метр булған алтын һәйкәл яһатып, уны Дура үҙәненә ҡуйырға ҡуша. Шунан һуң батша бойороҡтарын еткереүсе көслө тауыш менән: «Төрлө телдә һөйләшкән халыҡтар һәм ҡәүемдәр, һеҙгә иғлан итәм: мөгөҙ борғо йә башҡа музыка ҡоралдары тауышын ишеткәс тә йөҙтүбән ҡапланығыҙ һәм Навуходоносор батша ҡуйған алтын һәйкәлгә баш эйегеҙ. Йөҙтүбән ҡапланып, хөрмәт күрһәтмәгәндәр шунда уҡ ҡыҙған мейескә ташланасаҡ», – тип ҡысҡыра.

Халдейҙарҙың береһе батшаға килеп йәһүдтәрҙе ошаҡлай: «Батша, Йәһүҙә улдары Шадрах, Мешах һәм Ғавед-Него бойороғоңа буйһонмай, илаһтарыңа табынмай һәм һин ҡуйған алтын һәйкәлгә баш эймәй». Асыуынан ярһыған Навуходоносор Шадрах, Мешах һәм Ғавед-Негоны килтертә лә: «Минең илаһтарыма табынмаһағыҙ, хәҙер үк ҡыҙыу усаҡҡа ташланасаҡһығыҙ. Ул ваҡытта һеҙҙе ниндәй илаһ ҡотҡарыр икән?» – ти. Тегеләр: «Беҙҙе ҡыҙған мейестән һәм һинең ҡулыңдан, батша, табынған Аллабыҙ ҡотҡара ала. Ҡотҡармаған хәлдә лә, батша, бел, беҙ барыбер һинең илаһтарыңа һәм үҙең ҡуйған алтын һәйкәлгә табынмаясаҡбыҙ», – тип яуаплайҙар. Быны ишеткәс, ярһыған Навуходоносор иң көслө яугирҙәренә баш бирмәҫ йәһүдтәрҙе бәйләргә лә ҡыҙған мейескә ташларға бойора.

Өс үҫмер егетте бәйләп, мейескә ташлайҙар. Мейес ғәҙәттәгенән ете тапҡырға нығыраҡ ҡыҙған була, шуға ла егеттәрҙе ырғытҡан яугирҙәр үҙҙәре ялҡындан һәләк була. Мейескә текәлгән Навуходоносор, аптырауҙан һикереп тороп, ярандарына: «Беҙ бит утҡа өс егетте бәйләп ташлағайныҡ! Мин ут эсендә имен-аман йөрөп ятҡан, аяҡ-ҡулдары бәйләнмәгән дүрт кешене күрәм. Дүртенсеһе ҡиәфәте менән илаһҡа оҡшаған», – тип әйтә.

Батша мейес янына килеп: «Шадрах, Мешах, Ғавед-Него, Юғарыларҙан юғары Алланың ҡолдары! Сығығыҙ унан, минең яныма килегеҙ!» – тип саҡыра. Егеттәр ялҡын эсенән сыға ла уның эргәһенә килә. Барыһы ла уттың уларға ҡағылмағанын күрә: сәстәре утҡа өтөлмәгән, кейемдәре лә бөтөн, хатта уларҙан төтөн еҫе лә сыҡмай. Шул саҡ Навуходоносор былай ти: «Шадрах, Мешах һәм Ғавед-Негоның Аллаһына рәхмәттәр яуһын! Уның ҡылған хикмәттәре бөйөк, күрһәткән мөғжизәләре ҡөҙрәтле! Уның бат-



шалығы – мәңгелек батшалыҡ, хакимлығы быуындан-быуынға ҡаласаҡ». Ошо ваҡиғанан һуң батша Шадрахты, Мешахты һәм Ғавед-Негоны Бабил өлкәһендә бейектәргә күтәрә.

*ДАНИИЛ 3*

## Даниилдың аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыуы

Навуходоносорҙан һуң Бабилда Белшассар батшалыҡ итә. Бер ваҡыт ул үҙенең меңләгән вәзир-бәге өсөн мәжлес ҡора. Бының өсөн Белшассар хеҙмәтселәренә ҡасандыр Навуходоносор Йәрүсәлимдәге Раббы ҡорамынан талап алып ҡайтҡан алтын һәм көмөш һауыттарҙы килтерергә ҡуша. Батша, уның дәрәжәле ҡунаҡтары һәм Белшассарҙың ҡатындары шул һауыттарҙан шарап эсә-эсә үҙҙәренең алтын, көмөш, баҡыр, тимер, ағас һәм таштан яһалған илаһ-һындарын маҡтай башлайҙар.

Ҡапыл шул мәлдә мәжлес барған батша һарайында кеше ҡулы килеп сыға ла шәмдәл ҡаршыһындағы диуарға яҙа башлай. Быны күргән батшаның ҡурҡыштан йөҙө үҙгәреп китә, тубыҡтары ҡалтырай. Ул, ҡысҡырып, Бабилдағы бөтә аҡыл эйәләрен килтерергә ҡуша. Яҙылғанды аңлатып биргән кешене үҙенең батшалығында өсөнсө дәрәжәләге хөкөмдар итергә вәғәҙәләй. Әммә килгән аҡыл эйәләренең береһе лә диуарҙа яҙылған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлата алмай.

Был турала белеп ҡалған батшабикә, мәжлес барған бүлмәгә инеп, батшаға Даниил тураһында, уның илаһи рухы менән һуғарылыуы, белем һәм аҡылға эйә, төштәр юрауға һәләтле булыуы, серле әйберҙәрҙе аңлатып һәм буталсыҡ нәмәләрҙе сисеп бирә алыуы тураһында һөйләй. Даниилды килтерәләр. Батша аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙе аңлатып биреүен һорай.

Даниил Белшассарға батшаның тәкәббер булыуына, шарап эсер өсөн изге һауыттарҙы алыуына, үҙҙәренең илаһтарын данлауына Алланың асыуланғанын, әлеге яҙыуҙы шуның өсөн ебәргәнен әйтеп бирә. Шунан һуң Даниил былай ти: «Бына нимә тип яҙылған: МЕНЕ, МЕНЕ, ТЕКЕЛ, У-ПАРСИН. Ул һүҙҙәр шуны аңлата: МЕНЕ – Алла, һинең ҡасанға тиклем батшалыҡ итеүеңде иҫәпләп сығарып, сик билдәләгән; ТЕКЕЛ – һин үлсәүҙә үлсәнгәнең һәм үтә еңел тип табылдың; У-ПАРСИН – һинең батшалығың бүлгеләнеп, мадайҙар менән фарсыларға бирелде». Шунан һуң Белшассарҙың ҡушыуы буйынса Даниилға ҡарағусҡыл ҡыҙыл кейем кейҙерәләр, муйынына алтын сылбыр тағалар һәм батшалыҡ эсендә уны



дәрәжә буйынса өсөнсө кеше тип иғлан итәләр. Шул төндө үк уның пәйғәмбәрлеге тормошҡа аша: Белшассар үлтерелә, ә уның батшалығына мадайҙар батшаһы Дарий эйә була.

*ДАНИИЛ 5:1–31*

## Даниилдың доғаһы

Белшассарҙың тәхетен алған Дарий батша ла тәкәббер була, илаһтарға табына. Әммә ул Даниилды аҡылы һәм юғары рухлы булғаны өсөн ярата.

Ил менән идара итергә Дарий батшалыҡтың бөтә өлкәләренә йөҙ ҙә егерме идарасы тәғәйенләй. Улар өҫтөнән күҙ-колаҡ булырға өс вәзирен ҡуя. Батшаны мағаһыҙламаҫ өсөн, идарасылар вәзирҙәргә иҫәп-хисап биреп торорға тейеш була. Шул өс вәзирҙең береһе Даниил башҡа идарасы һәм вәзирҙәрҙән үҙенең аҡылы һәм намыҫлылығы менән айырылып тора, шуға ла батша уны бар батшалыҡҡа баш итеп ҡуйырға ниәтләй. Даниилды батшалыҡ менән идара итә алмауҙа ғәйепләр өсөн, идарасы һәм вәзирҙәр сәбәп эҙләй башлай. Ләкин бөтә нәмәлә батшаға тоғро Даниилды ғәйепләрлек бер кәмселек тә тапмайҙар.

Шулай ҙа, Даниилға батша алдында ҡара яғыр өсөн, һарай әһелдәре хәйлә уйлап таба. Даниилдың үҙ Аллаһына йыш доға ҡылғанын улар белә. Шуға улар, батшаға килеп, утыҙ көн буйы Дарий батшанан тыш берәй илаһҡа йә кешегә үтенес менән мөрәжәғәт итеүҙе тыйған фарман сығарырға тәҡдим итә. Фарманды боҙған кеше арыҫландар торған соҡорға ташланырға тейеш була. Был үтенестең ысын сәбәбен белмәгән батша фарманға ҡул ҡуйырға ризалаша.

Яңы ҡанун тураһында ишетһә лә, Даниил Раббыһына доға ҡылыуҙан туҡтамай. Ул көнөнә өс тапҡыр, теҙләнеп, үҙенең бүлмәһендә Аллаһына доға ҡыла, Уны данлай. Был ваҡытта тыуған ҡалаһы Йәрүсәлимгә ҡараған тәҙрәләр асыҡ тора, сөнки Алла данының балҡышы булған Алла йорто (емерелгәнгә тиклем) Йәрүсәлимдә ине.

Даниилды күрә алмаған яуыз кешеләр уның үҙенең Аллаһына доға ҡылғанын, Унан мәрхәмәт һорағанын тыңлап тора ла йәһәтерәк батшаға барып ошаҡларға була.

*ДАНИИЛ 6:1–11*



## Даниил арыҫландар соҡоронда

Даниилды һөйһөнмәгән һарай әһелдәре, Дарий батшаға килеп, уның батша фарманын һанға һуҡмауын, көнөнә өс тапҡыр үҙенең Аллаһына доға ҡылыуын хәбәр итә. Быны ишеткән батша ныҡ ҡайғыра, Даниилды ҡотҡарырға ҡарар итә. Әммә идарасы һәм вәзирҙәр: «Мадай һәм фарсылар ҡануны буйынса, батша ҡул ҡуйған бер фарман да үҙгәртелергә тейеш түгел», – тиҙәр. Ахырҙа батша Даниилды арыҫландар торған соҡорға ташларға бойора. Үҙе Даниилға: «Аллаң, арымай-талмай һин хеҙмәт иткән Аллаң ҡотҡарыр!» – ти. Шунан һуң батша үҙенең һарайына ҡайта, ашап та тормайынса йоҡларға ята, әммә төнө буйы күҙен дә йоммай. Таң һарыһы менән арыҫландар соҡорона ашыға. Килеп еткәс, ҡыҙғаныс тауыш менән: «Даниил, тере Алланың ҡоло! Арымай-талмай хеҙмәт иткән Аллаң һине арыҫландарҙан ҡотҡара алдымы?» – тип өндәшә. «Аллам Үҙенең фәрештәһен ебәреп, арыҫландарҙың ауыҙын йомдорҙо, шуға улар миңә зыян эшләй алманы, сөнки Алла алдында гонаһым юҡ, шулай уҡ һинең алдыңда ла, батша, бер енәйәт ҡылғаным юҡ», – тип яуап бирә Даниил.

Даниилды иҫән-һау күреп, Дарий ныҡ ҡыуана, уны соҡорҙан сығарырға ҡуша. Соҡорҙан күтәреп алғас, арыҫландарҙың уны йәрәхәтләмәүе асыҡлана. Батша бойороғо буйынса Даниилды ошаҡлаған кешеләрҙе алып килеп соҡорға ташлайҙар. Соҡор төбөнә төшөп тә етмәҫ борон уларҙы арыҫландар эләктереп алып, өҙгөсләп ташлай.

Шунан һуң Дарий батша хат яҙа ла батшалығының бөтә төбәктәренә ебәрә. Хатында бар халыҡтарға ла Даниилдың Аллаһын данларға ҡуша, сөнки Ул табынған Алла – мәңгелек Алла, Уның хакимлығының сиге юҡ. «Ул бәләләрҙән ҡотҡара һәм аралай, күктә лә, ерҙә лә мөғжизәләр һәм хикмәттәр ҡыла. Даниилды арыҫландарҙан ҡотҡарҙы!» тип яҙылған була әлеге хатта.

*ДАНИИЛ 6:12–27*



## Йәһүҙиҙәрҙең әсирлектән ҡайтыуы

Уҡып белеүебеҙсә, Ашшур ғәскәрҙәре Төньяҡ батшалыҡты – Исраилды баҫып алып, халҡын әсирлеккә ҡыуып алып китә. Был ваҡиғаларҙың барыһы ла Мәсих тыуғанға тиклем ете быуат элек була. Йөҙ йыллап һуңыраҡ мадайҙар менән бабил ғәскәрҙәре берләшеп, ике йыл ҡамауҙа тотҡандан һуң, Ниневе ҡалаһын ҡыйраталар. Көслө дәүләткә әүерелгән Бабил күрше ерҙәрҙе талай, улар араһында Көньяҡ батшалыҡ – Йәһүҙә лә була. Йәһүҙиҙәрҙе иһә Бабилға әсир итеп алып китәләр.

Әммә ҡеүәтле Бабил империяһының да ахыры етә. Уны мадайҙар һәм фарсылар баҫып ала. Фарсы батшаһы Кир йәһүҙиҙәргә тыуған ерҙәренә ҡайтырға рөхсәт бирә. Батшалығында ул ошондай фарман иғлан итә: «Фарсы батшаһы Кир былай ти: ерҙәге бөтә батшалыҡтарҙы миңә Раббы – Күк Аллаһы бирҙе. Йәһүҙәләге Йәрүсәлим ҡалаһында Уға йорт һалырға ҡушты. Уның халҡы араһынан булғандар – Аллаһы үҙҙәре менән булһын – Йәһүҙәләге Йәрүсәлимгә барып, Исраил Аллаһы Раббыға ҡорам төҙөһөндәр». Исраилдың ун ике ырыуынан ҡырҡ меңдән ашыу еврей үҙ иренә әйләнеп ҡайта. Башлыса йәһүҙиҙәр, йәғни Йәһүҙә ырыуы еврейҙәре була улар. Әммә Фарсы ерендә лә күп еврейҙәр ҡала.

Тыуған илдәренә ҡайтҡандың икенсе йылына халыҡ Йәрүсәлимдә йыйыла. Улар төҙөлөш башларға ниәтләй һәм яңы ҡорамға нигеҙ һала. Элекке Алла йортон хәтерендә һаҡлаған оло йәштәге ҡаһиндар, левиҙәр, нәҫел башлыҡтары, яңы Раббы йортона нисек нигеҙ һалынғанын күреп, ҡысҡырып илай, икенселәр иһә бар көстәренә шатланып ҡысҡырыша. Уларҙың шатлыҡ ауаздары илау тауышына ҡушылып, алыҫтарға китеп яңғырай.

Яңы ҡорамды күтәреүгә Йәһүҙә батшаһы Йеһояхиндың ейәне Зеруббавел етәкселек итә. Әммә элек йәһүдтәр йәшәгән ергә килеп төпләнгән халыҡтар йәһүдтәрҙе күрә алмай башлай, уларҙы ҡурҡыта, фарсы батшаһы Ахашверош алдында төрлөсә ғәйепләйҙәр, ҡорамды төҙөүҙә аяҡ салалар. Шулай улар төҙөлөштө ун биш йылға – Дарий исемле икенсе бер фарсы батшалыҡ итә башлағанға тиклем тотҡарлауға өлгәшәләр.



Дарий батша Кир батшаның бойороғон раҫлап, ҡорам төҙөлөшөн тамамлау хаҡындағы хатты Йәрүсәлимгә ебәрә. Яңы ҡорам адар айының өсөнсө көнөнә, Дарий батшаның хакимлыҡ итеүенең алтынсы йылында төҙөлөп бөтә.

*ҒӨЗӘЙЕР 1 – 6*

## Эстер батшабикә

Фарсы батшаһы Ахашверош өйләнергә уйлай. Ул, иң сибәр ҡыҙҙарҙы һайлап алып, баш ҡала Шушанға килтерергә ҡушып, батшалығының бөтә төбәктәренә сапҡынсылар ебәрә. Шушанда ҡыҙҙарҙы ун ике ай буйы батшаға алып килергә әҙерләйҙәр. Ул ваҡытта Фарсы ерендә үҙ мәлендә Ашшур һәм Бабил ғәскәрҙәре әсиргә алған йәһүдтәр йәшәгән була әле. Шушанда Мордехай исемле шундай бер кеше йәшәгән. Ул ағаһының Эстер исемле ҡыҙын тәрбиәләгән. Ҡыҙҙың атаһы менән әсәһе үлеп ҡалғас, Мордехай уны үҙ тәрбиәһенә ала. Зифа буйлы, бик сибәр була ҡыҙ. Бөтә ил буйлап гүзәл ҡыҙҙарҙы Шушан ҡалаһына йыйыу башланғас, Эстер ҙа батша йортона саҡырыла. Батша бөтә һылыуҙарға ҡарағанда ла Эстерҙы нығыраҡ оҡшата. Ҡыҙҙың башына батша тажы кейҙереп, уны батшабикә итә. Ҡыҙ хөрмәтенә үҙенең бөтә вәзирҙәре, һарай әһелдәре өсөн оло мәжлес ҡора, бөтә өлкәләрҙә байрам иғлан итә һәм батшаларға хас йомартлыҡ менән бүләктәр тарата. Эстер, Мордехай өйрәткәнсә, бер кемгә лә үҙенең халҡы тураһында һөйләмәй.

Күпмелер ваҡыттан һуң Ахашверош батша үҙенең түрәләренең береһе булған Һаманды башҡа түрәләрҙән өҫтөнөрәк күрә башлай. Һарайҙағы бөтә һарай әһелдәре, батша ҡушҡанса, Һаман алдында баш эйеп, йөҙҙәре менән ергә ҡаплана. Мордехай ғына баш эймәй, ергә лә ҡапланмай. Һаман быға асыуланып, Ахашверош батшалығындағы барлыҡ йәһүдтәрҙе ҡырып юҡ итергә ниәтләй.

Ул Ахашверош батшаға былай ти: «Батшалығыңдың бөтә өлкәләре буйлап башҡа халыҡтар араһына таралған бер халыҡ бар. Уларҙың ҡанундары бүтән халыҡтарҙыҡынан айырыла, батша ҡанунын да үтәмәйҙәр». Батша Һаманға был халыҡ менән ни теләһә, шуны эшләргә рөхсәт итә. Сапҡынсылар ошо бойороҡ яҙылған хатты Ахашверош батшалыҡ иткән бөтә төбәктәргә тарата. Хатта ун икенсе айҙың, йәғни адар айының ун өсөнсө көнөндә, бөтә йәһүдтәрҙе – йәше-ҡартын, бала-саға һәм ҡатын-ҡыҙын бер көндә үлтереп юҡ итергә, ә мөлкәттәрен талап алырға ҡушыла. Батша фарманы барып еткән ерҙә йәһүдтәр оло ҡайғы кисерә: бөтә ерҙә ураҙа тоталар, илаша-һыҡташалар.

*ЭСТЕР 1 – 3*



## Эстер батшабикә
## (дауамы)

Был хаҡта белгәс, Мордехай Эстерға батша фарманы тураһында хәбәр итә, батшаға барырға, үҙ халҡы өсөн ялбарырға, мәрхәмәтен һорап үтенергә ҡуша. Эстер Мордехайға хеҙмәтсеһе аша хәбәр ебәрә: «Батшаның эске ихатаһына саҡырыуһыҙ ингән һәр кемгә хөкөм бер – үлем язаһы. Батша үҙенең алтын таяғы менән төртөп күрһәткән кеше генә иҫән ҡала. Минең бына утыҙ көн инде батша янына саҡырылғаным юҡ». Мордехай Эстерға былай тип яуаплай: «Батша йортонда барлыҡ йәһүдтәрҙән бер һин генә ҡотолормон тип уйлама. Кем белә, бәлки, тап ошо мәл өсөн батшабикә дәрәжәһенә өлгәшкәнһеңдер?» Эстер яуап итеп былай ти: «Бар, Шушанда булған барлыҡ йәһүдтәрҙе йыйып, минең хаҡыма ураҙа тотоғоҙ: өс көн, өс төн ашамағыҙ ҙа, эсмәгеҙ ҙә. Мин дә хеҙмәтсе ҡыҙҙарым менән ураҙа тотормон. Шунан һуң, был ҡанунға ҡаршы булһа ла, батша янына барырмын һәм, миңә әгәр үлергә яҙған булһа, үлермен». Ул арала яуыз Һаман Мордехайҙы аҫыр өсөн егерме биш метр бейеклегендәге дар ағасы яһатып ҡуя.

Өсөнсө көн Эстер, үҙенең батшабикә кейемдәрен кейеп, эске ихатаға, батша ҡаршыһына килә. Батша уға табан алтын таяғын һуҙа. Эстер, яҡыныраҡ килеп, таяҡҡа ҡағыла һәм батша менән Һаманды мәжлескә саҡыра. Мәжлескә килеп, шарап эсеп ултырғанда батша: «Ниндәй теләгең бар ине, Эстер батшабикә? Ниндәй үтенесең бар?» – тип һораша. «Теләгем – миңә ғүмер бирелһен ине, үтенесем – халҡыма ғүмер бирелһен. Сөнки беҙ, мин һәм минең халҡым, ҡырылыр, юҡ ителер, һәләкәткә дусар булыр өсөн һатылғанбыҙ». Шулай батша ҡатынының йәһүд икәнен белә һәм Һамандың мәкерле ниәтен аңлай. Батша бойороғо буйынса, Һаман Мордехай өсөн үҙе эшләткән дар ағасында аҫыла.

Әммә Фарсы батшалығында йәшәгән йәһүдтәрҙе ҡырыу тураһындағы фарманды үҙгәртеү йә ғәмәлдән сығарыу мөмкин булмай, сөнки фармандар батша исеменән яҙылып, батша йөҙөгө менән мөһөр һуғылған. Ахырҙа батша ҡушыуы буйынса кәтиптәр яңы фарман яҙып ҡуя: унда батша барлыҡ ҡалаларҙағы йәһүдтәргә бергә йыйылып, үҙ ғүмерҙәрен яҡлап сығырға рөхсәт бирә. Сап-



ҡындар был фарман яҙылған хаттарҙы Һиндостандан Эфиопияға тиклем, батшалыҡтың йөҙ ҙә егерме ете өлкәһенең башлыҡтарына тапшыра. Мордехай йәһүдтәрҙең ҡотолоуы хөрмәтенә йыл да үткәрелә торған Пурим байрамын иғлан итә.

*ЭСТЕР 4 – 10*

## Нөхәмияһтың Йәрүсәлим диуарын төҙөүе

Нөхәмияһ Шушан ҡалаһындағы Фарсы батшаһы Артахшаста һарайында абруйлы түрә була.

Унының туғандарының береһе Йәрүсәлимдән Фарсыға килгән була. Нөхәмияһ унан Йәрүсәлим, унда ҡалған йәһүдтәр тураһында һораша башлағас, ул быны нимәләр һөйләй: «Әсирлектән ҡотолоп, тыуған илдәрендә тороп ҡалған йәһүдтәр ныҡ ыҙалап, түбәнһетелеп йәшәй. Йәрүсәлимдең диуарҙары емерелгән, ҡапҡалары яндырылған». Быларҙы ишеткән Нөхәмияһ илап ебәрә. Ул бер нисә көн буйы ҡайғырып йөрөй, Артахшаста батша миңә Йәрүсәлимгә барырға, ҡала диуарҙарын торғоҙорға рөхсәт бирһен ине, тип доға ҡыла, ураҙа тота.

Артахшаста батша Нөхәмияһты Йәрүсәлимгә ебәрә. Нөхәмияһ йәһүдтәр менән бергә ҡаланың ҡыйратылған диуарҙарын, ҡапҡаларын торғоҙорға тотона. Был хаҡта йәһүдтәрҙең дошмандарына барып ишетелә. Улар төрлө янауҙар менән төҙөлөшкә ҡамасауларға тырыша. Әммә Нөхәмияһ үҙенең кешеләрен ҡоралландырып ҡуя. Диуарға тип йөк ташыған кешеләр бер ҡулы менән эшләһә, икенсеһендә ҡоралын әҙер тота. Төҙөүселәрҙең бөтәһендә лә ҡылыс була. Төҙөлөш көндөҙ ҙә, төндә лә туҡтамай дауам итә. Алла Үҙе уларҙы ҡурсалап тора һәм, Бабил ғәскәрҙәре Йәрүсәлимде ҡыйратып, яндырғанға йөҙ ҡырҡ йыл үткәс, ҡала диуары төҙөлөп бөтә.

Етенсе ай тыуғас, халыҡ майҙанға йыйыла. Ғөзәйер ҡаһинға Алла Исраил халҡына биргән Муса ҡануны китабын килтерергә ҡушалар. Ғөзәйер ҡанун китабын алып килә. Майҙанға йыйылған ир-ат, ҡатын-ҡыҙ – уҡығанды аңлаған барыһы алдында ошо китапты ҡара таңдан төш еткәнсе уҡый. Халыҡтың бөтә иғтибары ҡанун китабындағы һүҙҙәрҙә була. Ғөзәйер бөйөк Алла Раббыға дан йырлай, ә халыҡ ҡулдарын күккә күтәреп: «Амин, амин*», – тип тора. Унан барыһы ла йөҙтүбән ергә ҡапланып, Раббыға баш эйә.

*НӨХӘМИЯҺ 1 – 8*

* Амин – боронғо йәһүд телендә был һүҙ «ысынлап та хаҡ, шулай булһын» тигән мәғәнәне аңлата.



## Халыҡтың Аллаға мөрәжәғәт итеүе

Шул айҙың егерме дүртенсе көнөндә Исраил халҡы бергә йыйыла. Улар ураҙа тотоп, ҡыл туҡыманан тегелгән матәм кейеме кейеп килә. Йола буйынса, баштарына саң-тупраҡ һибелә. Исраилдар бөтә сит халыҡтарҙан айырылып, үҙҙәре ҡылған гонаһтар һәм ата-бабаларының енәйәттәре өсөн тәүбә итә. Бер урында торған килеш улар көндөң дүрттән бер өлөшөн Раббы Аллаларының ҡанун китабын уҡып уҙғара, дүрттән бер өлөшөндә Раббы Аллаларына сәждә ҡылып, гонаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Ҡалҡыу урынға менеп баҫҡан левиҙәр Йешуағ Бани, Кадмиел, Шеванъяһ, Бунни, Шеревъяһ, Бани, Хенани көслө тауыш менән Аллалары Раббыға мөрәжәғәт итәләр. «Тороғоҙ! – ти левиҙәр. – Мәңгелектән мәңгелеккә булған Аллабыҙ Раббыға дан йырлағыҙ! Эй Раббы, тел менән әйтеп бөткөһөҙ изгеләрҙән-изге маҡтаулы исемең данға күмелһен! Һин, Раббы, берҙән-бер һәм Һинән башҡа бүтән алла юҡ. Һин күктәрҙең-күген һәм унда булған бар нәмәне, ерҙе һәм ундағы бар нәмәне, диңгеҙҙәрҙе һәм ундағы бар нәмәне бар ҡылдың; уларҙың барыһына ла йән өрҙөң һәм күк есемдәре Һиңә буйһона».

Халыҡ ҡылған гонаһтары, Раббынан баш тартҡандары өсөн тәүбә итеп, доға ҡыла: «Аллабыҙ, бөйөк, ҡөҙрәтле, дәһшәтле, килешеүенә тоғро һәм мөхәббәтле Аллабыҙ! Ашшур батшалары хакимлыҡ иткән дәүерҙән алып ошо көнгә тиклем беҙ – батшаларыбыҙ, түрәләребеҙ, ҡаһиндарыбыҙ, пәйғәмбәрҙәребеҙ, ата-бабаларыбыҙ һәм барлыҡ Һинең халҡың – Һиңә әҙ ыҙа сиккән кеүек тойолмаһын ине. Һин тарыҡҡан яҙаларҙың барыһы ла ғәҙел булды; Һин тоғроһоң, ә беҙ ғәйепле. Шуға ла беҙ Алла ҡануны буйынса эш итергә һәм уның бар күрһәтмәләрен һәм ҡушҡандарын үтәргә яҙма рәүештә вәғәҙә бирәбеҙ. Беҙ уға ҡултамғабыҙҙы ҡуябыҙ, ҡултамға башлыҡтарыбыҙ, левиҙәребеҙ, ҡаһиндарыбыҙҙың мисәте менән нығытылһын». Түрә кешеләр был килешеүгә ҡул ҡуйып, мисәттәре менән нығытып ҡуя. Бөтә башҡа халыҡ, ҡаһиндар, левиҙәр, ҡапҡа һаҡсылары, йырсылар, ҡорам хеҙмәтселәре һәм Алла ҡануны хаҡына сит халыҡтарҙан айырылған һәммә әҙәм, уларҙың ҡатындары, улдары, ҡыҙҙары, бөтә аңлы кешеләр халыҡтың иң хөрмәт ҡаҙанған заттарына ҡушыла һәм, анттар биреп, әлеге йөкләмәне ҡабул итә.

*НӨХӘМИЯҺ 9:1–6; 9:32 – 10:29*



## Әйүптең ғазап сигеүе

Ғус илендә Әйүп исемле диндар, бик бай бер кеше йәшәгән. Ул Алланан ҡурҡҡан, яуызлыҡтан йыраҡ торған, камил, ғәҙел әҙәм икән. Уның ете улы һәм өс ҡыҙы була.

Бер ваҡыт Аллаға шайтан килә. «Ҡайҙан килдең?» – тип һорай унан Раббы. «Мин ер йөҙөнөң иңен-буйын йөрөп сыҡтым», – тип яуаплай шайтан. Раббы: «Ҡолом Әйүпкә иғтибар иттеңме? – тип һорай. – Уның кеүек Алланан ҡурҡҡан һәм яуызлыҡтан йыраҡ торған камил, ғәҙел бер кем юҡ ер йөҙөндә». Шайтан Раббыға: «Әйүп Алланан буштан-юҡҡа ҡурҡамы ни? Уның үҙен, ғаиләһен, бар мөлкәтен ҡурсып тормайһыңмы ни? Ҡылған һәр эшенә фатиха бирәһең, мал-тыуары бөтә ил буйлап таралған. Әммә, ҡулыңды һуҙып, бөтә нәмәһен тартып ал әле – йөҙөңә ҡарап Һиңә ҡарғыш яуҙырасаҡ», – тип яуаплай. «Уның бар булғаны – һинең хакимлығында», – ти Алла шайтанға.

Шайтан, шундай рөхсәт алғас, мөмкин булған бөтә ысулдарҙы ҡулланып, Әйүпкә этлек ҡыла башлай. Уның бөтә балаларын һәләк итә, бар мөлкәтен юҡҡа сығара. Аллаға асыуланып, яманлар урынға Әйүп: «Биргән дә Раббы, алған да Раббы, Раббы исеменә шөкөрана булһын! – ти ҙә ҡатынына әйтә: – беҙ Алланан яҡшыны ҡабул итәбеҙ, ә насарын алмаҫбыҙмы икән ни?» Әйүп Алла ҡаршыһында бер генә гонаһлы һүҙ ҙә әйтмәй. Шунан шайтан уны ҡот осҡос сиргә дусар итә – уның тәнен башынан аяғына тиклем ҡутыр ҡаплай. Әйүп ныҡ ғазапланғандан һуң өмөтһөҙлөккә бирелә.

Әйүптең ҡайғыһын ишетеп, өс дуҫы уның хәлен белергә, күңелен күтәрергә тип килә. Әммә уларҙың йыуатыуы әкренләп Әйүпте ғәйепләүгә күсә. Алла хаҡ-ғәҙел кешеләргә язаһын бирмәй, тимәк, һинең үҙеңдең берәй ғәйебең бар, ти улар. Әммә Әйүп үҙенең хаҡ булыуында ныҡ тора. Дуҫтарын тыңлауҙан тыш, Алланы ла ишеткеһе килә. Әйүп был ғазаптар ни өсөн бирелгәнен һорай, ә үҙе ҡотолоуға өмөтөн юғалтмай: «Йолоп алыусымдың тере булғанын беләм, Ул миңә һуңғы көнөмдә йән өрөр һәм шул мәлдә Алламды күрермен».

*ӘЙҮП 1; 2; 4; 5; 19:25–26*



## Әйүп һынауҙарҙан һуң

Әйүп өс дуҫы менән һөйләшеп ултырғанда ҡапыл көслө ғәрәсәт ҡуба һәм дауыл эсендә Раббының тауышы яңғырай. Алла Әйүпкә әҙәм балаһы яуап ҡайтара алмаҫлыҡ һорауҙарын бирә башлай. Әйүп Раббынан хисап талап итергә ярамағанлығын аңлай. Алла беҙ Уны күҙ алдына килтергәндән юғарыраҡ. Шуға ла Раббы һөйләп бөткәс, Әйүп: «Беләм: бөтәһе лә Һинең ихтыярҙа; ниәтеңдән Һине бер нәмә лә туҡтата алмай», – тип яуаплай.

Әйүпте һынағас, Алла уның бар юғалтҡанын элеккегә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк ҡайтарып бирә. Ә насар йыуатыусы булып сыҡҡан дуҫтарына, Әйүптән айырмалы Уның тураһында дөрөҫтө һөйләмәгәндәре өсөн, Алла бик ныҡ асыулана. Шуға ла Алла уларға үҙҙәре өсөн ҡорбан килтерергә, ә Әйүпкә улар өсөн доға ҡылырға ҡуша, сөнки уның ғына доғаһын ҡабул итәсәген белдерә. Дуҫтары Раббының бойороғон үтәй һәм Әйүптең доғаһы буйынса Алланан ярлыҡау ала.

Бөтә һынауҙарҙан һуң Әйүпкә ир һәм ҡыҙ туғандары, таныш-белештәре бүләктәр тотоп килә. Алла Әйүптең һуңғы көндәрен элеккеләренә ҡарағанда нығыраҡ фатихалай. Күргән бәлә-ҡазаларҙан һуң ул оҙон-оҙаҡ ғүмер кисерә, ете улы, өс ҡыҙы тыуа. Был донъяла уның ҡыҙҙарынан да сибәрерәк ҡыҙҙар булмай.

Әйүп, йәшәрен йәшәп, ҡартайғас ҡына донъя ҡуя.

*ӘЙҮП 38 – 42*



## Зәбүр

Зәбүр – Изге Яҙмалағы иң уҡымлы китаптарҙың береһе. Ул көйгә һалып йырланған йөҙ илле мәҙхиәнән, йәғни шиғри әҫәрҙән тора. Был мәҙхиәләр Аллаға тоғролоҡ һаҡлағандарҙың йөрәктәрен борсоған һорауҙарҙы сағылдыра: ерҙәге ҡанунһыҙлыҡҡа хәсрәтләнеү, яҡтылыҡтың ҡараңғылыҡты еңеүенә өмөт, гонаһтарҙан тәүбә итеү һәм Алла бүләк итәсәк ҡотолоуҙы өмөтләнеп көтөү. Илһамлыраҡ йырҙарҙа хатта Мәсихтең килеүе тураһында алдан әйтелә.

Мәҙхиәләр тураһында һүҙ сыҡҡанда, ғәҙәттә Дауыттың йырҙарын күҙ уңында тоталар, сөнки уларҙың күптәре Дауыт тарафынан яҙылған. Әммә Зәбүрҙә бүтән ижадсылар Алланан илһам алып яҙған йырҙар ҙа бар. Мәсихселәрҙең күп кенә доғаларына Зәбүр йырҙарынан өҙөктәр килеп ингән. Был китапта беҙ миҫал итеп ике мәҙхиә килтерәбеҙ.

### 1-се мәҙхиә

Яуыздарҙың ҡотҡоһона бирелмәгән, гонаһлылар һуҡмағынан йөрөмәгән, хурлаусылар йыйынында ултырмаған кеше бәхетле! Уның ихтыяры Раббы ҡанунында, көн-төн ул шул хаҡта уйланыр. Ағын һыу буйына ултыртылған, үҙ мәлендә емеш биргән, япрағы шиңмәҫ-һулымаҫ ағасҡа оҡшар. Һәр эшендә уңышҡа өлгәшер. Ә яуыздар ундай түгел, ел осорған кәбәк кеүек улар. Ямандар хөкөмдә аҡлана алмаҫ, хаҡ булғандар йыйынында гонаһлылар урын тапмаҫ. Сөнки Раббы хаҡлыҡ юлындағыларҙы һаҡлар, ә яуыздарҙың юлы һәләкәткә илтер.

### 150-се мәҙхиә

Алланы мөҡәддәс торлағында данлағыҙ! Уны ҡәлғәһе күк көмбәҙендә данлағыҙ! Мөһабәт ғәмәлдәре өсөн данлағыҙ! Тиңһеҙ бөйөклөгөн данлағыҙ! Мөгөҙ борғолар ҡысҡыртып данлағыҙ! Лира, арфа ҡылдары сиртеп данлағыҙ! Дөңгөр ҡағып, бейей-бейей данлағыҙ! Ҡыллы уйын ҡоралдарында, һыбыҙғыла уйнап данлағыҙ! Зыңғылдауыҡ тәрилкәләр һуғып данлағыҙ! Яңғырауыҡ тәрилкәләр сыңлатып данлағыҙ! Барса йән эйәләре, Раббыны данлағыҙ! Раббыны данлағыҙ!



## Зәбүр шиғырҙарын иҫтә ҡалдырайыҡ

Исемеңде белгәндәр Һиңә өмөт бағлар, сөнки Һин, Раббы, Үҙеңде эҙләгәндәрҙе ташламайһың *(9:11)*.

Күктәр Алланың шөһрәтен һөйләй, күк көмбәҙе ҡулдарының эшен иғлан итә *(18:2)*.

Раббынан бөтөн донъя ҡурҡһын, ер йөҙөндә йәшәгәндәр Уның алдында ҡалтырап торһон *(32:8)*.

Татып ҡарағыҙ һәм Раббының ниндәй яҡшы икәнен күрерһегеҙ; Уға һыйынған әҙәм бәхетле! *(33:9)*.

Тормош юлыңды Раббыға тапшыр, Уға ышан – барыһын да Ул Үҙе башҡарыр *(36:5)*.

Хәсрәтле көнөңдә Мине саҡыр, ҡотҡарырмын, шунда һин Мине данларһың *(49:15)*.

Эй Алла, миндә саф йөрәк булдыр, булмышымда ҡаҡшамаҫлыҡ рух яңырт *(50:12)*.

Эй халыҡ, һәр ваҡыт Уға өмөт бағла, эс-бауырыңдағын Уға бушат, сөнки Алла беҙҙең ышығыбыҙ *(61:9)*.

Шул саҡ ерҙә юлыңды танып-белерҙәр, бар халыҡтар араһында ҡотҡарыуың билдәле булыр *(66:3)*.

Тауҙар бар булғандан әүәл, ер менән донъяны яратҡаныңа тиклем, мәңгелектән мәңгелеккә ҡәҙәр Алла – Һинһең *(89:3)*.

Әммә Раббы – ҡәлғәм, Алла ышыҡланыр ҡаям булды *(93:22)*.

Шөкөрана ҡыл Раббыға, йәнем! Ҡылған яҡшылыҡтарын онотма! *(102:2)*.

Күктәр ерҙән ни ҡәҙәрле бейек булһа, Үҙенән ҡурҡҡандарға Раббының мөхәббәте шулай ҙур *(102:11)*.

Аҡылдың башы – Раббынан ҡурҡыу *(110:10)*.

Раббы минең менән, шуға ла ҡурҡмайым; әҙәм миңә нимә ҡыла ала? *(117:6)*.

Нисек юлын пак килеш һаҡлар йәш кеше? Бары Һинең һүҙҙәреңде тотоп ҡына *(118:9)*.

Мин – Һинеке, мине ҡотҡар *(118:94)*.

Күҙ йәше менән орлоҡ сәскәндәр шатланышып уңыш урыр *(125:5)*.

Раббы Үҙен саҡырғандарға, саф күңелдән Үҙенә ялбарғандарға яҡын *(144:18)*.

**Һинең һүҙең аҙымдарым**
**өсөн сыраҡ,**
**Юлыма нур сәскән**
**яҡтылыҡ.**

***Зәбур 118:105***

# Хикмәттәр китабы

Изге Яҙманың бер китабы Сөләймәндең хикмәттәре тип атала. Ул йәштәргә өгөт-нәсихәт биргән ҡыҫҡа әйтемдәрҙән тора, уларҙың күп өлөшө тәрән аҡыллы Сөләймән батша тарафынан яҙылған. Хикмәттәр китабын аҡыл-зирәклек, хаҡлыҡ, Алланан ҡурҡыу, аң-белем, әхлаҡлылыҡ, үҙеңде тыя белеү, тырышлыҡ, үҙ-үҙеңә хужа булыу, Аллаға өмөт бағлау, фәҡирҙәргә ярҙам итеү, дошмандарға ҡарата мәрхәмәтле булыу, балаларҙы тәрбиәләү, ғәҙеллек, намыҫлы булыу, айыҡ аҡыл кеүек темалар тәшкил итә. Хикмәттәр китабынан бер нисә өгөт-нәсихәт килтерәбеҙ.

Ғилемдең башы – Раббынан ҡурҡыу. Ахмаҡ ҡына аҡыл һәм тәрбиәне һанға һуҡмай *(1:7)*.

Улым, атайыңдың биргән нәсихәтен тыңла, әсәйеңдең өгөттәрен кире ҡаҡма *(1:8)*.

Улым, боҙоҡ әҙәмдәр аҙҙырырға маташһа, улар артынан эйәрә күрмә *(1:10)*.

Үҙ белдегеңә таянма, бөтә йөрәгең менән Раббыңа инан. Ниндәй юлдан барһаң да, Раббыңды таны, Ул һинең һуҡмағыңды турайтыр *(3:5-6)*.

Улым, Раббының һабағын кире ҡаҡма, Уның шелтәһенә йәнең көймәһен. Атай кеше ғәзиз балаһын нисек шелтәләһә, Раббы ла яратҡан бәндәһен шулай тәрбиәләй *(3:11-12)*.

Ярлыны рәнйеткән – уның Яратыусыһын хурлаған, хәйерсене хәстәрләгән – Раббыны данлаған *(14:31)*.

Тәҡүәлек халыҡ өсөн – ҙурлыҡ, ә гонаһ – халыҡ өсөн хурлыҡ *(14:34)*.

Кеше үҙ юлын үҙе һайлай, әммә аҙымдарын Раббы йүнәлтә *(16:9)*.

Атаһын бөлдөргән, әсәһен өйҙән ҡыуған улан оят һәм хурлыҡ килтерә *(19:26)*.

Балаңа лайыҡлы юлды йәштән өйрәт – ҡартайғас та был юлдан тайпылмаҫ *(22:6)*.

Дошманың ас булһа, тамағын туйҙыр, һыуһаған булһа, һыуһынын ҡандыр *(25:21)*.



# Вәғәзсе китабы

Сөләймәндең хикмәттәре китабынан һуң Вәғәзсе китабы килә. Ул Хикмәттәр китабындағы өгөт-нәсихәттәргә оҡшаған аҡыллы әйтемдәрҙән тора. Бына уларҙың бер нисәһе.

Буш мәшәҡәт, – тине Вәғәзсе, – бөтәһе лә буш мәшәҡәт кенә! *(1:2)*.

Хәсрәт көлөүҙән яҡшыраҡ, сөнки йөҙ моңһоулығы күңелде йомшарта *(7:3)*.

Аҡыл хәрби ҡоралдан яҡшыраҡ; ләкин гонаһлы бер әҙәм күп яҡшылыҡты юҡҡа сығара ала *(9:18)*.

Соҡор ҡаҙған кешенең уға үҙе йығылып төшөүе, диуарҙы ҡутарғанды иһә йылан сағыуы ихтимал *(10:8)*.

Икмәгеңде һыуға ағыҙ, күп көндәр үткәндән һуң һин уны ҡабат табырһың *(11:1)*.

Эй егет, йәш сағыңда күңел ас, шатлан һәм көл; йөрәгең нимә ҡуша, шуны эшлә, күҙең ҡайҙа әйҙәй, шунда йөрө; тик бел: быларҙың барыһы өсөн дә һиңә Алла алдында хисап тоторға тура килер *(11:9)*.

Йәш сағыңда, яман көндәрең килеп еткәнсе, «Улар миңә бер ниндәй рәхәтлек килтермәй», – тип әйтер йылдарың яҡынлашҡансы, ҡояш һәм яҡтылыҡ, ай һәм йондоҙҙар тоноҡланмаҫ, ямғыр артынан йәнә болоттар әйләнеп ҡайтмаҫ элек, Бар ҡылыусыңды иҫеңдә тот. Ул көндө өйҙө һаҡлағандар ҡалтырар, көслөләр хәлһеҙләнер, тирмәнселәр тирмән тартыуҙан туҡтар, сөнки улар аҙ ҡалған; тәҙрәнән ҡарағандарҙың күҙ алдары ҡараңғыланыр, урамға сыға торған ишектәр томаланыр; тирмән тауышы тыныр, кешене ҡоштарҙың һайрауы уятыр, йырлаусылар ишетелмәҫ. Бейек урындарҙан ҡурҡырһың, юлдағы дәһшәттән хафаланырһың. Баҙам ағасы сәскә атыр; сиңерткәләрҙең кәүҙәһе ауырайыр; каперс ҡыуағы ҡойолоп төшөр. Кеше мәңгелек йортона китер һәм һыҡтап оҙатыусылар урамдарҙа өйөрөлөр. Көмөш сылбыр өҙөлгәнсе, алтын кәсә йәмшәйгәнсе, инеш янындағы көршәк ярылғансы, ҡоҙоҡ өҫтөндәге сығыр емерелгәнсе Бар ҡылыусыңды иҫтә тот. Тупраҡтан яралған тәнең ҡабат тупраҡҡа ҡайтыр. Алла биргән йәнең кире Эйәһенә ҡайтыр *(12:1-7)*.



# Пәйғәмбәрҙәр

Иҫке Ғәһедтең байтаҡ өлөшөн Ишағыяһ, Йермеяһ (уға Барух ярҙам иткән), Зөлкифел, Даниил һәм тағы ун ике пәйғәмбәрҙең – Һошеяғ, Йоил, Ғамос, Ғовадъяһ, Юныс, Миха, Нахум, Хаваҡкуҡ, Сефанъяһ, Хаггай, Зәкәрьяһ һәм Малахи китаптары тәшкил итә. Һуңғы ун икеһен, китаптары бәләкәй күләмле булғанға, «кесе пәйғәмбәр китаптары» тип йөрөтәләр.

Изге Яҙмала һүрәтләнгән пәйғәмбәрҙәр алдан күреп әйтә белеү һәләтенә эйә булһалар ҙа, башҡарған хеҙмәттәренең әһәмиәте икенсе нәмәлә: улар, әйләнә-тирәләге кешеләргә үткән, хәҙерге һәм буласаҡ ваҡиғаларҙың ысын мәғәнәһен аңлатып, күҙҙәрен асҡан. Хәтере ҡыҫҡа исраилдарға уның ер йөҙөндәге бөтән халыҡтар кеүек булмағанын иҫенә төшөрөп торған. Исраил – ул Алла Үҙенеке тип атаған һәм улар менән килешеү төҙөгән халыҡ. Уның киләсәге төрлө хәл-ваҡиғалар һәм яҙмыш кирелектәренән түгел, ә үҙ Раббыһына ни тиклем тоғро булыуында. Пәйғәмбәрҙәрҙең китабында әсе фаш итеү һүҙҙәре халыҡтың Раббы Аллаға боролоп, Аллала ҡотолоу табыуҙарына яҡты өмөт, ныҡлы ышаныс менән сиратлашып килә.

Пәйғәмбәрҙәр Исраил халҡына үҙ исеменән мөрәжәғәт итмәгән – улар кешеләргә Алла тарафынан үҙҙәренә асылған һүҙҙәрҙе еткергән. Телмәрҙәре төрлө билдәләр, серле һүҙҙәр менән тулы, был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү һәр ваҡыт еңел генә булмай. Әммә быуаттар уҙыуға халыҡ әүлиәлек итеп әйтелгән һүҙҙәрҙең хаҡ икәненә төшөнә һәм күп кенә ваҡиғаларҙа пәйғәмбәрҙәр әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрҙе таный. Шулай, пәйғәмбәрҙәр кешелекте гонаһ һәм үлем хакимлығынан ҡотолдорған, мәңгелеккә Үҙенең батшалығын урынлаштырған Ҡотҡарыусының донъяға киләсәген дә Мәсих тыуғансы уҡ хәбәр иткәндәр.

Бөгөн дә, пәйғәмбәрҙәр китаптарын уҡып, тарихи хәлдәр һәм инде әүлиәлек итеп әйтелгән һүҙҙәрҙең тормошҡа ашыуы менән генә түгел, ә кешенең Алла ҡаршыһына ниндәй юлдар менән килеүе тураһындағы мәңге иҫкермәҫ хикәйәләр менән дә танышабыҙ.



## Ишағыяһ пәйғәмбәр

Ишағыяһ пәйғәмбәр Исраилда Мәсих тыуғанға тиклем һигеҙ быуат элек йәшәй. Ул Алла данын ихлас вәғәзләй, Раббынан ситләшкән Исраил халҡының ике йөҙлө диндарлығын фашлай, гонаһлыларҙы тәүбәгә килергә саҡыра. Күп ҡалаларҙы һәм халыҡтарҙы ниндәй яҙмыш көткәнен әйтеп бирә.

Ишағыяһ халыҡты Аллаға өмөт бағларға саҡыра. Бына шундай саҡырыу-өндәүҙәренең береһе: «Белмәйһеңме ни? Ишетмәнең дәме? Раббы – мәңгелек Алла, ерҙең бөтә тарафтарын Бар ҡылыусы. Арыуҙы ла, талыуҙы ла белмәй! Уның аҡылын аңлап бөтә алмаҫлыҡ. Ул арығанға көс бирер, хәлдән тайғандың ҡеүәтен арттырыр. Хатта йәштәр ҙә арый, талсыға; егеттәр абынып йығыла, ә Раббыға өмөт бағлағандар яңы көс алыр, бөркөт кеүек ҡанат йәйеп осор, күтәрелер; йүгерерҙәр – һис арыу белмәҫтәр, йөрөрҙәр һәм бер ҙә талсыҡмаҫтар».

Ишағыяһ Мәсихтең – кешелекте Ҡотҡарыусы Ғайсаның тыуыуын да алдан хәбәр иткән. Ул Ғайса Мәсихтең тыуыуы, Уның тормошо, кисергән ғазаптары, үлеүе һәм терелеүе – йөҙәр йыл үткәндән һуң нимәләр булған һәм Инжил китаптарында ниҙәр яҙылған – барыһын да алдан күреп әйтә.

Ишағыяһ пәйғәмбәр Мәсих тураһында бына нимә ти: «Ул сирҙәребеҙҙе өҫтөнә алды, ғазаптарыбыҙҙы үҙенә йөкмәне. Ә беҙ уны Алла тарафынан язаланған, туҡмалып йәберләнгән тип иҫәпләнек. Ул иһә беҙҙең енәйәттәребеҙ арҡаһында тәненә йәрәхәт алған; беҙҙең ғәйептәребеҙ өсөн иҙелгән. Уның язаланыуы беҙгә именлек килтергән, яралары сихәт биргән. Бөтәбеҙ ҙә һарыҡ һымаҡ аҙашҡайныҡ; һәр беребеҙ үҙенең юлына боролғайны. Ә Раббы беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы уға йөкмәтте. Уны иҙҙеләр, Ул ғазап сикте, әммә ауыҙын асманы. Салырға килтерелгән бәрәс шикелле, йөнөн ҡырҡыусы алдында өнһөҙ торған һарыҡ кеүек, Ул да ауыҙын асманы».

*ИШАҒЫЯҺ 40:28–31; 53:4–7*



## «Ҡылыстарын һуҡа итеп ҡойорҙар...»

Ишағыяһ пәйғәмбәр китабында заман ахыры һәм Алла вәғәҙә иткән Ҡотҡарыусы һәм донъяның Хөкөмдары, көтөп алынған Мәсихтең батшалығы тураһында пәйғәмбәрлек итеп әйтелгән һүҙҙәр бар:

Ахырҙа шундай көндәр килер:
Раббының ҡорамы торған тау
Бөтә тауҙарға баш булыр,түбәләрҙән
юғарыраҡ ҡалҡып торор,
бөтә ҡәүемдәр уға ағылыр.
Бихисап халыҡтар килеп бер-береһенә:
«Әйҙәгеҙ Раббы тауына,
Яҡуп Аллаһының йортона менәйек, – тиер. –
Ул беҙгә Үҙ юлдарын өйрәтһен,
беҙ Уның һуҡмағынан йөрөрбөҙ».
Сөнки ҡанун – Сиондан,
Раббы һүҙе Йәрүсәлимдән килер.
Ҡәүемдәр араһында Раббы хөкөм ҡылыр,
күп халыҡтарҙың дәғүәһен хәл итер.
Улар ҡылыстарынан һуҡа,
һөңгө башаҡтарынан ураҡ ҡойор.
Халыҡ халыҡҡа ҡылыс күтәрмәç,
яу һөнәренә башҡа өйрәнмәç.

*ИШАҒЫЯҺ 2:2–4*



## «Яуызлыҡ ҡылмаясаҡтар...»

Раббы Ишағыяһ пәйғәмбәргә Алла Улы Ғайса Мәсих батшалығы урынлашҡас, ер йөҙөндә яуызлыҡ та, ҡайғы-хәсрәт тә булмаясағын асып һала.

Ярлыларҙы ғәҙеллектә хөкөм итер,
ерҙәге мохтаждарҙың дәғүәһен хаҡлыҡ менән хәл итер.
Донъяны һүҙе-таяғы менән язалар,
залимдарҙы ауыҙының һулышы менән үлтерер.
Дөрөҫлөк уның билендә билбау булыр,
тоғролоҡ булыр билендәге ҡайышы.
Ул саҡта бүре менән бәрәс бер ерҙә йәшәр,
ҡаплан менән кәзә бәрәсе бергә ятыр,
быҙау менән йәш арыҫлан бергә ашар,
уларҙы бәләкәй генә бала көтөр.
Һыйыр менән айыу бергә утлап йөрөр,
уларҙың балалары йәнәшә ятыр,
арыҫлан да үгеҙ һымаҡ һалам ашар.
Сабый бала йылан ояһы янында уйнар,
бәпес ҡара йыландың өңөнә ҡулын һуҙыр.
Изге тауымдың һәр тарафында
һис кем яуызлыҡ һәм зыян ҡылмаҫ.
Ер йөҙө Раббыны танып белеү менән тулыр,
эйе, һыуҙар диңгеҙҙе тултырған һымаҡ.

*ИШАҒЫЯҺ 11:4–9*



## Һошеяғ пәйғәмбәр

Беҙ Төньяҡ батшалыҡ булған Исраилдың Раббынан баш тартыуы, ундағы тәртипһеҙлек, халыҡтың төрлө һындарға табыныуы тураһында уҡығайныҡ инде. Раббы пәйғәмбәрҙәре аша халыҡҡа мөрәжәғәт итә, Исраил халҡын һәм батшаларын хаҡ юлға ҡайтарырға теләп, кешеләргә яза артынан яза ебәрә, әммә барыһы ла бушҡа була. Батшалар ҙа, кешеләр ҙә Алланы белмәй йәшәүен, һындарға табыныуын дауам итә. Шуға ла Раббы был батшалыҡты ҡыйратырға, ә халҡын баҫҡынсылар ҡулына бирергә ҡарар итә. Төньяҡ батшалыҡ тар-мар ителгәнгә тиклем Исраил халҡына Һошеяғ пәйғәмбәр мөрәжәғәт итә. Һошеяғ пәйғәмбәр китабында Алла менән Исраил халҡы араһындағы мөнәсәбәт – ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы никах кеүек, ә халыҡтың тоғро булмауы ҡатындың иренә булған хыянаты кеүек һүрәтләнә. Был хаҡта Һошеяғ пәйғәмбәр бына нимә ти:

> Эй исраилдар, Раббы һүҙен тыңлағыҙ: Раббы ошо ерҙәге кешеләр менән дәғүәләшә, сөнки был ерҙә тоғролоҡ та, мөхәббәт тә, Алланы танып белеү ҙә юҡ. Ант боҙоу, алдау һәм үлтереш, уғрылыҡ һәм аҙғынлыҡ хөкөм һөрә. Ҡан өҫтөнә ҡан түгелә. Халҡым белекһеҙлектән һәләк булды. Һин белемде кире ҡаҡҡан өсөн Мин һине кире ҡағам – башҡа Миңә ҡаһинлыҡ итмәҫһең. Һин Аллаңдың ҡанунын оноттоң – Мин һинең балаларыңды онотормон. Ҡыуанма, Исраил, бүтән халыҡтар һымаҡ шатланма – Үҙ Аллаңдан ситләшеп, һин зина ҡылдың, игенле һәр ырҙында фәхешлек итеп, хаҡ алырға ратаһың.

Әммә пәйғәмбәр, халыҡ Раббыға кире ҡайтһа һәм Раббы алдында тәүбә итһә, Алланың Үҙ халҡына фатихаһын бирәсәге тураһында әйтә: «Исраил, Аллаң Раббыға әйләнеп ҡайт – яуызлығың арҡаһында абындың һин. Мин уларҙы хыянаттан дауалармын, ихлас һөйөү менән яратырмын, сөнки уларға булған асыуым ҡайтты инде. Мин Исраилға ысыҡ һымаҡ булырмын, ул лилиә кеүек сәскә атыр, Ливан ағастары һымаҡ тамыр йәйер».

Тәүбәгә килгән халыҡтың киләсәге тураһында Һошеяғ былай тип әүлиәлек ҡыла: «Әммә Исраил халҡы диңгеҙ ҡомо һымаҡ



үлсәп тә, һанап та бөтөрә алмаҫлыҡ күп булыр. „Һеҙ Минең халҡым түгел“, – тип әйтелгән урында уларға: „Һеҙ – тере Алланың балалары“, – тиерҙәр».

*ҺОШЕЯҒ 1:10; 4:1–2, 6; 9:1; 14:2, 5–6*

## Йоил пәйғәмбәр

Йоил пәйғәмбәрҙең ҡасан йәшәгәне билдәһеҙ, әммә ул Йәһүҙәләге пәйғәмбәрҙәрҙең береһе булған тип һанала. Ул башлыса алыҫ киләсәк, Раббының килер көнө тураһында әүлиәлек итә:

«О, ул көн! Раббы көнө яҡын! Сикһеҙ ҡөҙрәт Эйәһе күндергән һәләкәт булып килә ул! Мөгөҙ борғолар ҡысҡыртығыҙ Сионда, изге тауымда хәүеф иғлан итегеҙ. Илдә йәшәгән һәр кем тетрәнһен! Сөнки Раббы көнө килә, ул бик яҡын. Бынан һуң Мин барлыҡ кешеләргә Үҙемдең Рухымды түгермен. Улдарығыҙ, ҡыҙҙарығыҙ пәйғәмбәрлек ҡылыр, ҡарттарығыҙ әүлиә төштәр күрер, йәштәрегеҙгә илаһи күренмештәр килер. Ул көндәрҙә Үҙ Рухымды хатта ир һәм ҡатын ҡолдарға ла түгермен. Күктә һәм ер йөҙөндә хикмәтле билдәләр күрһәтермен: ҡан, ут һәм төтөн бағаналары күренер. Раббының бөйөк һәм дәһшәтле көнө килерҙән алда ҡояш – ҡараңғылыҡҡа, ай ҡанға әйләнер! Ул заманда Раббыны исеме менән саҡырғандар барыһы ла ҡотолор, сөнки, Раббы әйткәнсә, Сион тауында һәм Йәрүсәлимдә ҡотолоп иҫән ҡалыусылар һәм улар араһында Раббы Үҙе саҡырғандар булыр».

Йөҙәр йылдарҙан һуң Петрус, халыҡҡа Раббы Ғайса Мәсих тураһында шаһитлыҡ ҡылғанда, ошо һүҙҙәрҙе миҫалға килтерә.

Йоил шулай уҡ Исраилдың аяҡҡа баҫыуы тураһында ла һөйләп ҡалдыра: «Шул көндәрҙә, Йәһүҙә һәм Йәрүсәлимгә әүәлге имен-мул тормошон кире ҡайтарам. Бөтә халыҡтарҙы йыйып, Йеһошафат үҙәненә килтерәм. Үҙемдең халҡым, биләмәм Исраилға ҡаршы ҡылған ғәмәлдәре өсөн уларҙы хөкөмгә тарттырам. Сөнки халҡымды башҡа ҡәүемдәр араһына тараттылар, еремде үҙ-ара бүлешеп алдылар. Раббы Сиондан күкрәр, Йәрүсәлимдән гөрһөлдәр. Күк менән ер тетрәп торор. Әммә Раббы Үҙ халҡы өсөн – ышыҡ, исраилдар өсөн ҡәлғә булыр. Шунда Минең Раббы, мөҡәддәс тауым Сионда төйәкләнгән Аллағыҙ, икәнемде белерһегеҙ. Йәрүсәлим изге урын булыр».

*ЙОИЛ 1:15; 2:1, 28–32; 3:1–2, 16–17*



# Юныс пәйғәмбәр

Бер көндө Раббы Юныс пәйғәмбәргә: «Бар, юлға сыҡ! Бөйөк Ниневе ҡалаһына бар ҙа уның халҡын фашла, сөнки уларҙың яуызлыҡтары хаҡында хәбәр Миңә килеп етте», – тип әйтә. Юныс Уны тыңларға теләмәй, Таршиш ҡалаһына ҡасып китергә була. Яфо ҡалаһына килеп, Таршишҡа китә торған карапҡа ултыра. Юлда Раббы көслө ел ебәрә, диңгеҙҙә дауыл башлана һәм карап саҡ ҡыйралмай ҡала. Ҡоттары осҡан диңгеҙселәрҙең һәр береһе үҙенең аллаһын саҡыра башлай. Карапты әҙ булһа ла еңеләйтер өсөн, ундағы йөктө диңгеҙгә ташлайҙар. Ә был мәлдә Юныс карап төбөндәге бүлмәлә бер нәмә лә белмәй йоҡлап ята. «Нисек йоҡлап ята алаһың? Тор! Үҙеңдең аллаңа ялбар, бәлки, Ул беҙҙе ҡотҡарыр», – тип уята уны карап башлығы. «Был бәлә кем арҡаһында килгәнен белер өсөн, әйҙәгеҙ, йәрәбә һалайыҡ», – ти диңгеҙселәр. Йәрәбә Юнысҡа төшә. «Мине диңгеҙгә ташлағыҙ, шулай итһәгеҙ, диңгеҙ тынып, – ти Юныс уларға. – Был ғәрәсәт минең арҡала ҡупҡанын беләм». Юнысты ташлағас та диңгеҙ тынысланa. Шул мәл караптағыларҙың бөтәһе лә ҡурҡыуҙарынан Раббы хөрмәтенә ҡорбан килтерә, Уның алдында нәҙерҙәрен әйтә. Алла ҙур бер балыҡҡа Юнысты йоторға бойора. Балыҡтың ҡарынында Юныс өс көн, өс төн буйы Аллаһы Раббыға туҡтауһыҙ доға ҡыла. Шунан Раббы балыҡҡа Юнысты ҡоро ергә ҡоҫорға ҡуша.

Раббы Юныс пәйғәмбәргә икенсе тапҡыр: «Тор, бөйөк Ниневе ҡалаһына барып, Мин һиңә әйткәндәрҙе халыҡҡа иғлан ит», – тип әйтә. Был юлы Юныс Алла һүҙен йығырға ҡыймай, Ниневегә китә. Унда барғас: «Ҡырҡ көндән Ниневенең аҫты өҫкә әйләнәсәк!» – тип, ҡала урамдары буйлап һөйләп йөрөй башлай. Был хәбәр Ниневе батшаһына барып ишетелә. Ул, тәхетенән тороп, батша кейемдәрен сисә лә ҡыл туҡымаға урана. Башҡаларға ла ҡыл туҡыманан кейенергә, ураҙа тотоп, ҡылған бөтә гонаһтарынан ярлыҡау һорап, Аллаға ялбарырға ҡуша. Ҡалалағы халыҡ Аллаға һәм Уның пәйғәмбәренә ышана. Алла уларҙың яуызлыҡ ҡылыуҙан туҡтағандарын, яман юлдан тайпылғандарын күреп, уларҙы йәлләй, баштағы ниәтенән ҡайтып, уларға ебәрергә янаған бәләне ебәрмәй.

*ЮНЫС 1 – 4*



## Миха пәйғәмбәр

Миха пәйғәмбәр сығышы менән Йәһүҙәлә урынлашҡан Морешеҫ ҡалаһынан була. Ул Йәһүҙә батшалары Йоҫам, Ахаз, Хизкияһ һәм Исраил батшалары Менахем, Пеҡахъяһ, Пеҡах, Һошеяғ батшалыҡ иткән көндәрҙә Мәсих тыуғанға тиклем 740-700 йылдарҙа пәйғәмбәрлек итә. Миха халыҡтың Алла юлынан тайпылыуы, халыҡ башлыҡтары өҫтөнән хөкөм буласағы, Самария менән Йәрүсәлимдең юҡҡа сығасағы, шулай уҡ киләсәктә батшалыҡ итәсәк Сион Батшаһы, Мәсих һәм Уның батшалығы хаҡында ла әүлиәлек ҡыла:

Ахырҙа шундай көндәр килер: Раббының йорто торған тау бөтә тауҙарға баш булыр, түбәләрҙән юғарыраҡ ҡалҡып торор, халыҡтар уға ағылыр. «Ул көндө, – тип белдерә Раббы, – аҡһағын да йыйырмын, ҡыуылғанын, Үҙем бәләгә ҡалдырғанын да туплармын. Аҡһағын иҫән ҡалған өлөш итермен, аҙашҡанын ҡеүәтле халыҡҡа әйләндерермен. Ошо көндән башлап мәңгелеккә Мин Раббығыҙ Сион тауында уларға хакимлыҡ ҡылырмын. Ә һин, эй көтөүҙе күҙәтә торған манара, Сион-ҡыҙҙың нығытмаһы булған Йәрүсәлим, хакимлығың һиңә кире ҡайтыр, Йәрүсәлим батшалығын кире алыр».

Яҡуп нәҫеленең иҫән ҡалғандары бихисап халыҡтар араһында Раббы ебәргән ысыҡ, һис кем уйламағанда-көтмәгәндә килеп яуған ҡойма ямғыр кеүек булыр.

*МИХА 4:1–8; 5:7*



## Мәсихтең килеүе тураһында пәйғәмбәрҙәрҙең һүҙҙәре

Был китап Алланың нисек итеп кешене Үҙенең ҡиәфәтендә, Үҙенә оҡшатып яратыуы тураһында бәйән итеү менән асыла. Алла кешенең Үҙе кеүек үк шәфҡәтле, ғәҙел, гонаһһыҙ булыуын теләй. Әммә беренсе кешеләр үк – Әҙәм менән Һауа – гонаһ алдында көсһөҙ булып сыға. Өлкән улдары Ҡабил да ҡустыһы Һабилды үлтерә. Тиҙҙән ер йөҙө шул тиклем гонаһҡа бата, хатта быны күреп Раббы: «Барыһы ла юлдан яҙған, берҙәй боҙолған; яҡшылыҡ ҡылған әҙәм юҡ, исмаһам, берәү ҡалмаған!» – ти.

Раббы Алла ер йөҙөндәге бер халыҡты – исраилдарҙы һайлап ала һәм уларҙың Үҙенә, хаҡ Аллаға, тоғролоҡ һаҡлауын һәм Уның әмерҙәре буйынса йәшәүен теләй. Алла Үҙенең илселәре аша Исраил халҡына донъяға Ҡотҡарыусының – май һөртөлгән Заттың (йәһүд телендә «май һөртөлгән Зат» – «Мәсих» тип әйтелә, ә грекса – «Христос») килеүе тураһында хәбәр итә. Шулай, Ишағыяһ пәйғәмбәр Ғайса Мәсих тыуғанға тиклем ете йөҙ йыл элек: «Сөнки сабый тыуҙы; беҙгә бер улан бирелде; хакимлыҡ уның яурынында булыр, Уның исеме Ғәжәйеп Кәңәшсе, Ҡөҙрәтле Алла, Мәңгелек Ата, Именлек Хакимы тип аталыр», – тип алдан әйткән. Миха пәйғәмбәр иһә Мәсихтең ҡайҙа тыуырына тиклем әйткән: «Эй һин, Әфраçалағы Бейт-Ләхәм, Йәһүҙә нәçелдәренең иң бәләкәсе булһаң да, Исраилға юлбашсы буласаҡ зат һинән сығыр. Уның тамыры әүәлдән, борон-борондан уҡ килә».

Ишағыяһ пәйғәмбәрҙең китабынан беҙ Мәсихтең донъяға килеүенең төп маҡсатын beләбеҙ – Ул кешелекте гонаһ хакимлығынан ҡотҡарырға, халыҡты Аллаға табан борорға һәм, әҙәм балаларының гонаһы өсөн үлем ҡабул итеп, уларҙы ҡотҡарырға тип килә. Пәйғәмбәр теле менән Раббы былай ти: «Минең тоғро ҡолом бик күптәрҙе аҡлаясаҡ, сөнки уларҙың ғәйептәрен үҙ өçтөнә аласаҡ».

Әүлиәлек итеп әйтелгән бөтә был һүҙҙәр Ғайса Мәсих ергә килгәндән һуң тормошҡа аша. Артабан китапта Ғайсаның тыуыуы, Уның тормошо һәм өйрәтеүҙәре, Уның үлеме һәм терелеп тороуы тураһында бәйән ителә.

*ЗӘБУР 13:3; ИШАҒЫЯҺ 9:6; 53:4–12; МИХА 5:2*



# ЯҢЫ ҒӘҺЕД

## Фәрештәнең Зәкәрьяһҡа һөйөнөслө хәбәре

Иҫке Ғәһедтә һүрәтләнгән иң һуңғы ваҡиғалар менән Инжилдәге ваҡиғалар араһында йөҙәрләгән йылдар ята. Ғайса Мәсих донъяға килгән ваҡытҡа еврейҙар, сәйәси үҙаллылығын тамам юғалтып, римдар хакимлығы аҫтында ҡала. Шулай ҙа халыҡ донъяға Ҡотҡарыусы киләсәгенә өмөтләнеп йәшәй, сөнки пәйғәмбәрҙәр был хаҡта борон үҙҙәренең китаптарында яҙып ҡалдырған була. Көптәр Уның еврейҙарҙы римдарҙың хакимлығынан азат итеп, Израилдың элекке бөйөклөгөн аяҡҡа баҫтырырына ышанған. Әммә Алла Үҙенең халҡына унан да ҙурыраҡ һәм яҡшыраҡ нәмә әҙерләп ҡуйған була, һәм әлеге Ҡотҡарыусының, йәғни Мәсихтең килеүе тураһында халыҡҡа беренсе булып һыуға сумдырыу йолаһын атҡарған Яхъя хәбәр итә.

Яхъяның донъяға килеүе бик ҡыҙыҡ. Уның атаһы Зәкәрьяһ ҡаһин була. Ҡатыны Әлисабет менән Йәһүҙиәнең таулы өлөшөндә ғүмер итәләр. Тәҡүәлектә йәшәгән ирле-ҡатынлы был икәү Раббының бөтә ҡушҡандарын теүәл үтәй. Үкенескә күрә, улар бала һөйөүҙән мәхрүм була һәм инде икеһе лә оло йәшкә етә.

Бер ваҡыт Зәкәрьяһ Йәрүсәлимдәге Алла йортонда ҡаһин хеҙмәтен башҡара, ә халыҡ был мәлдә Алла йортоноң тыш яғында доға ҡыла. Сайыр яндырып торған сағында уның янында Раббы фәрештәһе пәйҙә була. Уны күргәс, Зәкәрьяһ ҡурҡып китә. Фәрештә уға: «Ҡурҡма, Зәкәрьяһ! – ти. – Ҡылған доғаң ишетелде: ҡатының Әлисабет ир бала табыр һәм һин уға Яхъя тип исем ҡушырһың. Йөрәгең һөйөнөс һәм шатлыҡ менән тулыр, башҡалар ҙа уның тыуыуына ҡыуаныр, сөнки ул Раббы алдында бөйөк булыр. Ул иҫерткес эсемлектәр эсмәҫ, әсәһенең ҡарынында ятҡанда уҡ Изге Рух менән һуғарылыр, Израил халҡының күбеһен Раббыға, үҙҙәренең Аллаһына, кире ҡайтарыр». Әммә Зәкәрьяһтың күңелендә фәрештәнең һүҙҙәре шик тыуҙыра. «Тап шулай булырын мин нисек белермен һуң? – тип һорай ул. – Ҡартайҙым бит инде, ҡатыным да оло йәштә». Фәрештә: «Мин Алла тәхете алдында тороусы Ябраил. Һиңә ошо ҡыуаныслы хәбәрҙе еткерергә тип килдем. Ә бына миңә ышанмағаның өсөн, һүҙҙәрем бойомға ашҡанға тиклем, һин телдән яҙырһың һәм һөйләшә алмаҫһың», – тип яуаплай.

*ЛУКАС 1:5–21*



## Сумдырыусы Яхъяның тыуыуы

Барыһы ла нәҡ фәрештә әйткәнсә була. Билдәләнгән ваҡытта Зәкәрьяһ менән Әлисабеттың улы тыуа. Быға сикһеҙ шатлана әсәй менән атай. Улар менән бергә туғандары һәм күршеләре лә ҡыуана. Ни өсөн тигәндә, ул замандарҙа ир менән ҡатындың балаһы булмауы (Зәкәрьяһ менән Әлисабет осрағындағы кеүек) иң ҙур бәхетһеҙлек һәм хурлыҡ һаналған.

Донъяға килеүенең һигеҙенсе көнөндә сабый Муса ҡануны буйынса сөннәткә ултыртылырға тейеш була. Ғәҙәттә, яңы тыуған балаға ата-әсәһенең йә туғандарының исемен ҡушҡандар. Шуға күрә йола башҡарыуҙа ҡатнашырға йыйылған кешеләр сабыйҙы атаһының исеме менән Зәкәрьяһ тип атарға уйлай. Әммә быға әсә кеше: «Юҡ, уның исеме Яхъя булырға тейеш», – тип ҡаршы төшә. «Туғандарың араһында был исем бер кемдә лә юҡ бит», – тиҙәр Әлисабетҡа һәм, ым-ишара менән баланың атаһынан ниндәй исем ҡушырға теләүен һорайҙар. Зәкәрьяһ яҙыу таҡтаһы һорап ала ла барыһын да хайран ҡалдырып: «Уның исеме – Яхъя» тип яҙып ҡуя. Тап шул мәлдә Зәкәрьяһтың теле асыла һәм ул Алланы данлап һөйләй башлай. Яҡын-тирәлә йәшәгән кешеләрҙе ҡурҡыу ялмап ала, ә Йәһүҙиәнең таулы ерҙәре буйлап әлеге ваҡиға тураһында хәбәр тарала. Был хаҡта ишеткән һәр кем: «Был бала кем булыр икән?» – тип аптырай, сөнки Раббының ҡөҙрәте бала менән була. Яхъяның атаһы Зәкәрьяһ, Изге Рухҡа һуғарылып, былай тип пәйғәмбәрлек итә: «Раббыны, Исраилдың Аллаһын данлайыҡ! Ул халҡына ярҙамға килде һәм уға ҡотолоу бирҙе, Дауыт нәҫеленән булған ҡеүәтле Ҡотҡарыусыны ебәрҙе. Был турала Ул бик күп йылдар элек Үҙенең изге пәйғәмбәрҙәре аша әйткәйне. Һәм һин, сабый, Юғарыларҙан Юғарының пәйғәмбәре тип аталырһың, сөнки Раббыға юл әҙерләп, Уның алдынан барырһың. Һин Уның халҡына, гонаһтарығыҙ кисерелеү аша ҡотолорһоғоҙ, тип иғлан итерһең. Алланың шәфҡәте мул, шуға күрә беҙгә юғарынан таң ҡояшы ҡалҡыр. Был ут ҡараңғыла һәм үлем күләгәһендә ултырған әҙәмдәргә яҡтылыҡ нуры һибер, беҙҙе тыныслыҡ юлына йүнәлтер».

Бәләкәй Яхъя үҫкән һәм рухи яҡтан нығынған. Ул Исраилға күренер көнгәсә сүллектә йәшәгән.

*ЛУКАС 1:22–25, 57–80*



# Ғайсаның тыуыуы тураһында һөйөнөслө хәбәр

Кешелекте гонаһ һәм үлем хакимлығынан ҡотҡарыу өсөн Алла был донъяға Үҙенең Улы Ғайса Мәсихте ебәрә. Ул тыуған мәлдән ер йөҙөндә яңы дәүер башлана. Хатта беҙҙең йыл иҫәбе лә Ғайса Мәсих тыуған ваҡыттан башлап һанала.

Ғайсаның донъяға килеү тарихы хайран ҡалырлыҡ. Ул, Алла Улы булһа ла, мал аҙбарында тыуған. Ғайса тыуып күпмелер ваҡыт үткәс, Һируд батша Уны үлтерергә ҡарар ҡыла...

Барыһын да баштан башлайыҡ әле. Исраилдың төньяғында урынлашҡан бәләкәй генә Назара ҡалаһында Мәрйәм исемле бер ҡыҙ йәшәй. Ул Алланы ысын күңелдән ярата. Бер көндө Алла уның янына Ябраил исемле фәрештәһен ебәрә. «Именлек һиңә, Алланың мәрхәмәтен алған ҡыҙ! Раббы һинең менән: ҡатын-ҡыҙҙар араһында һин фатихалы!» – ти фәрештә. Мәрйәм, уны күргәс, ҡаушап ҡала. «Ҡурҡма, Мәрйәм, – тип һүҙен дауам итә фәрештә. – Алла һиңә мәрхәмәт күрһәтте. Ауырға ҡалырһың һәм Ул табырһың. Уға Ғайса* тип исем ҡушырһың. Ул бик бөйөк булыр һәм Юғарыларҙан Юғарының Улы тип аталыр. Раббы Алла Уға ата-бабаһы Дауыттың тәхетен бирер. Ул Яҡуп нәҫеле өҫтөнән мәңге батшалыҡ итер һәм Уның батшалығының аҙағы булмаҫ».

Мәрйәм был мәлдә Йософ исемле иманлы бер егет менән йәрәшелгән була. «Нисек инде, мин кейәүҙә түгел бит әле?» – тип һорай ул фәрештәнән. «Һиңә Изге Рух төшөр һәм Юғарыларҙан Юғары һине ҡөҙрәтенең күләгәһе менән солғап алыр, шуның өсөн дә һин тыуҙырыр Бала изге булыр һәм Алла Улы тип аталыр», – тип яуаплай Ябраил. Мәрйәм: «Мин – Раббының хеҙмәтсеһе, нисек әйтһәң, шулай булһын!» – ти. Шунан һуң фәрештә уның янынан китеп бара.

Йософ, Мәрйәмдең бала көткәнен белеп ҡалғас, йәрәшеүҙе йәшерен генә өҙөргә ниәтләй. Әммә төшөндә уға Раббы фәрештәһе: «Йософ, Дауыт улы! Мәрйәмде кәләш итеп алырға ҡурҡма! – тип әйтә. – Уның ҡарынындағы Бала Изге Рухтан яралды. Мәрйәм Ир Бала табыр һәм һин Уға Ғайса тип исем ҡушырһың, сөнки Ул Үҙенең халҡын гонаһтарҙан ҡотҡарасаҡ».

*МАҪҪАЙОС 1:19–21; ЛУКАС 1:26–35, 38*

* Ғайса – «Раббы ҡотҡара» тигән мәғәнәлә.



## Ғайса Мәсихтең тыуыуы

Ауырлы ваҡытында Мәрйәмгә Йософ менән бергә алыҫ юлға сығырға тура килә, сөнки ул көндәрҙә Рим хакимы Августың, тотош Рим империяһында халыҡ иҫәбен алырға, тигән бойороғо сыға. Иҫәпкә алынып өсөн һәр кем ата-бабаһының тыуған ҡалаһына барырға тейеш була. Йософ иһә Ғайса тыуғанға тиклем мең йыл элек Израилға идара иткән Дауыт батша нәҫеленән ине.

Шулай итеп, Йософ менән Мәрйәм Бейт-Ләхәмгә, Дауыт батшаның тыуған ҡалаһына, юллана. Назаранан Бейт-Ләхәмгә тиклем ике йөҙ саҡрымдан ашыуыраҡ. Ул ваҡыттарҙа хәҙерге кеүек поездар ҙа, машиналар ҙа йөрөп тормай, шуға күрә уларҙың сәйәхәте әллә нисә көнгә һуҙыла. Назара Израилдың төньяғында, Галилеяла, ә Бейт-Ләхәм көньяҡта, Йәһүҙиәлә урынлашҡан. Галилеянан Йәһүҙиәгә барғанда Самария аша уҙырға тура килә, ә Самария менән Йәһүҙиә таулы ерҙәр була.

Ниһайәт, улар Бейт-Ләхәмгә килеп етә, әммә ҡунаҡ йортонда урындар булмай сыға. Мәрйәмдең бала табыр мәле лә етә. Инжилдә: «Мәрйәм үҙенең баш балаһын – Улын тыуҙырҙы. Ул Уны, йүргәккә төрөп, мал утлыҡсаһына һалды», – тип яҙылған. Был иһә уларҙың мал аҙбарына урынлашыуын, ә яңы тыуған Сабыйҙы мал утлыҡсаһына һалыуҙарын аңлата. Боронғо риүәйәттәр буйынса был аҙбар тау ҡыуышында урынлашҡан була. Ул яҡтарҙа көтөүселәр бындай тау ҡыуыштарына төнгөлөккә һарыҡтарын ҡыуып индергән.

*ЛУКАС 2:1–7*



## Фәрештәләрҙең көтөүселәргә Ғайса Мәсихтең тыуыуы тураһындағы хәбәрҙе еткереүе

Был мәлдә Бейт-Ләхәм эргәһендәге бер яланда көтөүселәр һарыҡ көткән. Ғайса тыуған төндә бер нисә көтөүсе, көтөүен ҡарауыллап, йоҡламаған. Ҡапыл улар алдында Раббының бер фәрештәһе пәйҙә була һәм тирә-яҡ Раббының шөһрәтенән яҡтырып китә. Көтөүселәрҙе ҡурҡыу солғап ала. «Ҡурҡмағыҙ, – ти уларға фәрештә. – Мин бөтә халыҡ шатланырлыҡ һөйөнөслө хәбәр алып килдем: бөгөн Дауыттың ҡалаһында һеҙҙең өсөн Ҡотҡарыусы тыуҙы, Ул – Мәсих, Хаким. Сабый мал утлыҡсаһында биләүҙә ята – ошо билдә буйынса һеҙ Уны танырһығыҙ». Ҡапыл фәрештә янында күк ғәскәре – күп һанлы фәрештәләр пәйҙә була. Улар Алланы данлап: «Бейек күктәрҙәге Аллаға дан! Алла Үҙе һайлап алған һәм яратҡан кешеләргә ерҙә именлек булһын!» – тип ҡысҡыра.

*ЛУКАС 2:9–14*



## Көтөүселәр Ғайса янында

Фәрештәләрҙе күреп, көтөүселәрҙең нисек ҡоттары осҡанын һәм Ҡотҡарыусының – Раббы Ғайса Мәсихтең тыуғанын ишетеп ғәжәпкә ҡалғанын күҙ алдына килтерә алабыҙ. Шуға ла улар, көтөүҙәрен ташлап, Бейт-Ләхәмгә китә. Был турала Инжилдә былай тип яҙылған: «Фәрештәләр күккә күтәрелгәс, көтөүселәр бер-береһенә: „Әйҙәгеҙ Бейт-Ләхәмгә барайыҡ, Раббы әйткән урында булып, был хәлде күрәйек“, – тинеләр. Улар ашығып Бейт-Ләхәмгә килде, унда Мәрйәм менән Йософто һәм мал утлыҡсаһында ятҡан Баланы тапты. Сабыйҙы күргәс, Уның тураһында ишеткәндәрен һөйләп бирҙеләр. Көтөүселәрҙе тыңлап торған кешеләр хайран ҡалды. Мәрйәм иһә был һүҙҙәрҙең бөтәһен дә йөрәгенә һалып ҡуйҙы һәм уйланып йөрөнө. Көтөүселәр, ишеткән һәм күргәндәренең бөтәһе өсөн дә Алланы данлап һәм маҡтап, көтөүҙәре янына ҡайтты. Барыһы ла фәрештә әйткәнсә булды».

*ЛУКАС 2:15–20*



## Аллаға тоғро Шимғон

Тыуыуына һигеҙ көн тулғас, ҡаһин Сабыйҙы сөннәткә ултырта. Уға Ғайса тип исем ҡушалар. Тыумаҫ борон уҡ Уға фәрештә ҡушҡан был исем «Раббы ҡотҡара» тигәнде аңлата.

Раббы ҡануны буйынса ғаиләләге беренсе тыуған ир бала Аллаға бағышланырға тейеш булған. Шуға күрә, Ғайсаға алты аҙна тулғас, Уны Раббыға бағышлау һәм, Раббы ҡанунында әйтелгәнсә, ике алатубаны йәки ике күгәрсен балаһын ҡорбанға килтереү өсөн, Йәрүсәлимдәге Алла йортона алып киләләр.

Ул ваҡытта Йәрүсәлимдә Шимғон исемле Аллаға тоғролоҡло бер ҡарт йәшәгән. Ул Исраил халҡына ҡотолоу килерен көтөп ғүмер иткән, Изге Рух менән һуғарылған булған. Изге Рух уға, Мәсихте – Ҡотҡарыусыны күрмәйенсә, үлмәйәсәкһең, тип алдан әйтеп ҡуйған. Ҡанун буйынса йола башҡарырға тип ата-әсәһе бәләкәс Ғайсаны Алла йортона алып килгәс, Изге Рух ҡушыуы буйынса Шимғон да килеп етә. Ул Ғайсаны ҡулына ала ла: «Хәҙер инде, бөйөк Хаким, Һинең ҡолоң был донъянан тыныс күңел менән китә ала, сөнки вәғәҙәңде үтәнең. Һин бөтә халыҡтар алдында әҙерләгән ҡотолоуҙы мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Был Бала – мәжүсиҙәргә асылыш алып килеүсе яҡтылыҡ һәм халҡың Исраилдың Даны», – тип Аллаға дан йырлай. Йософ менән Мәрйәм Шимғондоң Бала тураһында әйткәндәрен хайран ҡалып тыңлай.

Шимғон, уларға фатихаһын биреп, Мәрйәмгә: «Был Бала Исраилда күптәрҙең түбән төшөүенә һәм күтәрелеүенә сәбәп булыр һәм Алланан бирелгән илаһи билдә булып торор; ә һинең үҙеңдең йөрәгеңде ҡылыс сәнсеп үтер», – ти.

*ЛУКАС 2:21–35*



## Аҡыл эйәләренең сәждә ҡылырға килеүе

Ғайса Йәһүҙиә ерендәге Бейт-Ләхәм ҡалаһында, Һируд батша идара иткән заманда тыуа. Йәрүсәлимгә Көнсығыштан аҡыл эйәләре килеп: «Йәһүдтәрҙең яңы тыуған Батшаһы ҡайҙа? – тип һораша. – Беҙ көнсығышта Уның йондоҙо ҡалҡҡанын күрҙек, әле Уға сәждә ҡылып, хөрмәт күрһәтергә килдек».

Быны ишеткәс, Һируд батша хафаға ҡала. Бөтә булған баш ҡаһиндарҙы һәм ҡанун белгестәрен йыйып алып, уларҙан: «Мәсих ҡайҙа тыуырға тейеш?» – тип белешә. «Йәһүҙиә ерендәге Бейт-Ләхәм ҡалаһында, – тиҙәр уға. – Сөнки пәйғәмбәр аша Алла былай тигән: „Эй, Йәһүҙәләге Бейт-Ләхәм, һин Йәһүҙә хакимдары араһында һис тә иң бәләкәсе түгел, сөнки һинән Юлбашсы сығасаҡ. Ул Минең халҡым Исраилдың Көтөүсеһе буласаҡ“». Шунан һуң Һируд, йәшерен рәүештә аҡыл эйәләрен саҡыртып алып, йондоҙҙоң теүәл ҡалҡҡан ваҡытын белешә, уларҙы Бейт-Ләхәмгә ебәреп: «Барығыҙ, Бала тураһында барыһын да ентекләп һорашығыҙ. Тапҡас, миңә хәбәр итерһегеҙ. Мин дә барып Уға сәждә ҡылып ҡайтам», – ти. Ысынында Һируд батша Баланы үлтерергә уйлай, сөнки ваҡыт үтеү менән тәхетен алып ҡуйыуынан шөрләй.

Батшаны тыңлап бөткәндән һуң, аҡыл эйәләре юлға сыға. Улар көнсығышта күргән йондоҙ алдарынан бара һәм, ниһайәт, Бала булған урын өҫтөндә туҡтай. Йондоҙҙо күреп, аҡыл эйәләре сикһеҙ ҡыуана.

*МАҪҪАЙОС 2:1–10*



## Аҡыл эйәләренең бүләге. Сабыйҙарҙы үлтереү

Бейт-Ләхәмгә килгәс, аҡыл эйәләре йондоҙ туҡталған өйгә инә. Баланы һәм Уның әсәһе Мәрйәмде күргәс, Балаға сәждә ҡылып, хөрмәт күрһәтәләр. Хазина ҡумталарын асып, Уға алтын, ладан һәм мирра тигән хуш еҫле ыҫмалалар бүләк итәләр.

Төштәрендә, Һируд янына ҡабат бармаҫҡа, тигән киҫәтеү алалар һәм башҡа юл менән үҙ илдәренә ҡайтып китәләр. Был турала белеп ҡалған Һируд батша бик ныҡ ярһый. Аҡыл эйәләренең һүҙе буйынса Балаға нисә йәш икәнен билдәләгәс, Бейт-Ләхәмдәге һәм уның тирәһендәге бөтә ике йәшкә тиклемге ир балаларҙы үлтерергә үҙенең кешеләрен ебәрә. Улар, Бейт-Ләхәмгә килеп, бер ғәйепһеҙ балаларҙы үлтереп сыға.

*МАҪҪАЙОС 2:10–12, 16*



## Мысырға ҡасыу

Һируд, үлтерелгән сабыйҙар араһында Исраилдың буласаҡ Батшаһы тип нарыҡланған Бала ла барҙыр, тип уйлай. Әммә ул уйлағанса булмай. Аҡыл эйәләре киткәс, Йософтоң төшөнә Раббы фәрештәһе инә һәм: «Тор, Бала менән Уның әсәһен ал да Мысырға ҡас. Мин һиңә хәбәр биргәнгә тиклем шунда булып тор. Һируд, Баланы эҙләп табып, үлтерергә йыйына», – ти. Йософ төн уртаһында тора ла, Бала менән Уның әсәһен алып, Мысырға юллана. Һируд үлгәнгә тиклем шунда йәшәй. Шулай итеп, Раббының пәйғәмбәр аша: «Мин Улымды Мысырҙан саҡырып алдым», – тигән һүҙҙәре ғәмәлгә аша.

Бейт-Ләхәмдән Мысырға саҡлы – йөҙәрләгән саҡрым. Йософ менән Мәрйәмгә бәләкәй Бала менән бындай оҙон юлды үтеүе еңелдән булмай.

*МАҪҪАЙОС 2:13–15*



## Ғайсаның Назарала үткән бала сағы

Йософ, Мәрйәм һәм бәләкәй Ғайса Һируд батша үлгәнгә тиклем Мысырҙа йәшәй. Һируд үлгәс, Раббының фәрештәһе йәнә Йософтоң төшөнә инеп: «Тор, Бала менән Уның әсәһен ал да Исраил еренә ҡайт. Баланың ғүмеренә ҡул һуҙыусылар үлде инде», – ти.

Йософ, фәрештәне тыңлап, Исраилға килә. Әммә, Йәһүҙиәлә Һирудтың улы Архелайос батшалыҡ итеүен ишетеп, унда барырға ҡурҡа. Төшөндә йәнә бер иҫкәртеү алғас, Йософ Галилеяға, элек Мәрйәм йәшәгән Назара ҡалаһына китә.

Ғайсаның Назаралағы тормошо тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ. Уның атаһы Йософ балта оҫтаһы булған, Ғайса ла, уға эшендә ярҙам итеп, был һөнәргә өйрәнгән. Инжилдә Ғайсаның малай һәм үҫмер сағы тураһында аҙ яҙылған. Әммә беҙ уҡыған был юлдар бик күпте һөйләй: «Бала үҫте, нығынды, зирәк аҡыл тупланы һәм Алла фатихаһында булды». Йәнә: «Ғайса үҫте, аҡыл тупланы, Алланың да, кешеләрҙең дә ихтирамын ҡаҙанды».

Ошо урында Ғайсаның ата-әсә һүҙенән сыҡмауын да телгә алып китеү урынлы булыр. Инжилдә был хаҡта: «...бар нәмәлә уларҙы тыңланы», – тип әйтелә. Алла балаларҙың ата-әсәһен яратыуын һәм уларҙы тыңлауын теләй. Алланың Ун бойороғоноң береһе былай яңғырай: «Атайың менән әсәйеңде хөрмәт ит. Шулай эшләһәң, Аллаң Раббы һиңә бирәсәк ерҙә ғүмерең оҙон булыр».

*МАҪҪАЙОС 2:19–23; ЛУКАС 2:40, 50–52; СЫҒЫУ 20:12*



## Ғайса Алла йортонда

Шулай итеп, Ғайса Назара ҡалаһында йәшәй һәм тәрбиә ала. Ул үҫә, рухи яҡтан ныҒына, зирәк аҡыл туплай һәм Алла фатихаһында була.

Йыл һайын Уның атаһы менән әсәһе Йәрүсәлимгә Ҡотҡарылыу байрамына йөрөгән була. Ғайсаға ун ике йәш тулғас, уны ла үҙҙәре менән Йәрүсәлимгә байрамға алып китәләр.

Байрам көндәре тамамланғас, барыһы ла ҡайтыр юлға сыға, ә үҫмер Ғайса Йәрүсәлимдә тороп ҡала. Мәрйәм менән Йософ быны һиҙмәй, туғандары һәм таныштары менән ҡайтып киләлер тип уйлайҙар. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң Уның юҡ икәнен һиҙеп ҡалалар һәм эҙләй башлайҙар. Таба алмағас, Йәрүсәлимгә кире киләләр. Өсөнсө көнгә Ғайсаны Алла йортонда табып алалар. Ул ҡанун уҡытыусылары араһында, уларҙы тыңлап, һорауҙарын биреп ултырған була. Ундағыларҙың барыһы ла Ғайсаның аҡылына һәм биргән яуаптарына хайран ҡала.

«Улым, – ти Ғайсаға әсәһе. – Ни өсөн беҙҙең менән улай иттең? Атайың менән борсолоп, һине эҙләп бөттөк». Ғайса уларға: «Мине ниңә эҙләнегеҙ? Атам Йортонда булырға тейешлегемде белмәнегеҙме ни?» – тип яуаплай. Йософ менән Мәрйәм Улдарының һүҙҙәренә төшөнмәй, ләкин әсәһе Уның әйткәндәрен йөрәгенә һалып ҡуя.

Ғайса ата-әсәһе менән Назараға ҡайта һәм бар нәмәлә уларҙы тыңлай. Үҫкән һайын Ул аҡыл туплай, Алланың да, кешеләрҙең дә ихтирамын ҡаҙана.

*ЛУКАС 2:40–52*



## Яхъяның вәғәз әйтеүе һәм һыуға сумдырыуы

Ҡаһин Зәкәрьяһтың улы Яхъя сүллектә йәшәгән. Раббы уны айырым бер хеҙмәткә әҙерләй – ул халыҡҡа тиҙҙән Мәсихтең килеүе тураһында хәбәр итергә һәм халыҡты тәүбәгә саҡырырға тейеш була. Былар тураһында Яхъя тыуғансы йөҙ йыл элек үк пәйғәмбәрҙәр яҙып ҡалдырған: «Бына, Мин Һинең алдыңдан хәбәрсемде ебәрәм, ул Һиңә юл әҙерләр». Йәнә: «Сүлдә тауыш яңғырай: Раббыға юл әҙерләгеҙ, Уның барыр һуҡмаҡтарын турайтығыҙ».

Яхъя дөйә йөнөнән кейем кейеп, биленә күн ҡайыш быуып йөрөй, сиңерткә һәм солоҡ балы менән туҡлана. Алла уға Үҙенең ихтыярын асып биргәс, халыҡҡа өгөт-нәсихәт бирергә тотона. Ул, Иордан йылғаһы буйлап уҙғанда, гонаһтары ғәфү ителһен өсөн кешеләрҙе тәүбәгә килергә саҡырып йөрөй, ә тәүбәгә килеү билдәһе – һыуға сумдырылыу йолаһын үтәү була. Уға бөтә Йәһүҙиә халҡы һәм Йәрүсәлимдә йәшәүселәр килә. Улар үҙҙәренең гонаһтарын асыҡтан-асыҡ таный, ә Яхъя уларҙы Иордан йылғаһына сумдыра.

Халыҡ унан: «Беҙ нимә эшләйек һуң?» – тип һораған. Яхъя: «Ике күлдәге булған кеше береһен күлдәге бөтөнләй булмағанына бирһен. Ризығы булғаны ашарына булмаған кеше менән ризығын уртаҡлашһын», – тип яуаплаған. Һыуға сумдырылыр өсөн һалым йыйыусылар ҙа килгән: «Остаз! Ә беҙгә нимә эшләргә?» – тигән улар ҙа. Яхъя яуап итеп: «Тейешенән артығын талап итмәгеҙ», – ти. Ғәскәриҙәр ҙә уға һорау менән мөрәжәғәт итә: «Ә беҙгә нимә эшләргә?» «Бер кемдән дә көсләп, ялған шаһитлыҡ ҡылып әйбер алмағыҙ һәм хеҙмәт хаҡы менән ҡәнәғәт булығыҙ», – ти уларға Яхъя.

*МАРКУС 1:1–8; ЛУКАС 3:2–14*



## Ғайса Мәсихтең һыуға сумдырылыуы

Халыҡ Мәсихтең килерен көткән, шуға күрә күптәр: «Вәғәҙә ителгән Мәсих – Ҡотҡарыусы Яхъямы икән әллә?» – тип һорашҡан. Яхъя уларҙың был һорауына: «Мин, тәүбә итеүегеҙҙе раҫлап, һеҙҙе һыуға сумдырам. Әммә минән һуң Килгән Зат күпкә ҡөҙрәтлерәк; мин Уның аяҡ кейемен күтәреп йөрөргә лә лайыҡ түгел. Ул һеҙҙе Изге Рухҡа һәм утҡа сумдырыр», – тип яуаплаған. Шулай тип ул Ғайса Мәсих тураһында әйткән.

Һәм бына һыуға сумдырылырға тип, Ғайса Яхъяға килә. Яхъя: «Һыуға мине Һин Үҙең сумдырырға тейешһең, ә Һин миңә килгәнһең», – тип Уны туҡтатырға тырыша. «Әлегә ошолай булһын, сөнки беҙ Алланың ғәҙел ихтыярын үтәргә тейешбеҙ», – ти уға Ғайса. Яхъя Уны һыуға сумдырырға риза була. Ғайса һыуҙан сыҡҡас, күктәр асылып китә лә Ул Үҙенең өҫтөнә күгәрсен рәүешендә Алла Рухының төшкәнен күрә. Күктән: «Был — Минең һөйөклө Улым. Ул — Минең ҡыуанысым!» – тигән тауыш ишетелә.

*МАҪҪАЙОС 3:11–17*



## Ғайсаның сүллектә һынау үтеүе

Һыуға сумдырылғандан һуң, Ғайсаны Изге Рух сүллеккә алып китә, унда Ул Иблис тарафынан һынау үтергә тейеш була. Ғайса тәғәм ризыҡ ҡапмайынса ҡырҡ көн һәм ҡырҡ төн үткәрә, ахырҙа бик ныҡ асыға. Шул саҡ ҡотҡосо Иблис Уның янына килеп: «Әгәр ҙә Һин Алла Улы булһаң, бынау таштарға икмәккә әйләнергә ҡуш», – ти. Ғайса уға Изге Яҙмалағы һүҙҙәр менән яуап бирә: «Кеше икмәк менән генә түгел, Алла әйткән һәр бер һүҙ менән дә йәшәр».

Шунан һуң Иблис Уны Йәрүсәлимдәге Алла йортоноң иң бейек урынына алып килеп баҫтыра ла былай ти: «Әгәр ҙә Һин Алла Улы булһаң, түбәнгә ташлан. Изге Яҙмала әйтелгән бит: „Алла Үҙенең фәрештәләренә бойороҡ бирер: аяҡтарыңды ташҡа бәрҙертмәй, улар Һине ҡулдарына күтәреп йөрөр“». Ғайса иһә уға: «Унда: „Раббы Аллаңды һынама“, – тип тә яҙылған», – тип яуаплай.

Бынан һуң Иблис Ғайсаны бейек тау башына алып менеп, Уға донъялағы барлыҡ батшалыҡтарҙы уларҙың бөтә гүзәллегендә күрһәтә лә: «Әгәр алдыма йөҙтүбән ятып миңә табынһаң, быларҙың барыһын да Һиңә бирәм», – ти. «Кит, Иблис, – ти Ғайса. – „Аллаң Раббыға табын һәм бары Уға ғына хеҙмәт ит“, — тип яҙылған». Шунан Иблис Уның эргәһенән китә, ә Ғайса янына фәрештәләр төшөп, Уға хеҙмәт итә.

*МАҪҪАЙОС 4:1–11*



## Ғайса Мәсихтең ун ике шәкерте

Ғайса үҫеп, егет ҡорона ингәс, Назаранан китеп Галилеялағы Геннисарет күле буйындағы Капернаум ҡалаһына барып төпләнә. Ул ваҡыттарҙа был күлде шулай уҡ Галилея күле тип тә йөрөткәндәр. Шул рәүешле Ишағыяһ пәйғәмбәр әйткәндәр тормошҡа аша: «Эй Зевулун ере, Нафтали ере, диңгеҙ юлы һәм Иордан аръяғындағы ерҙәр! Эй һин, сит ҡәүемдәр иле Галилея! Ҡараңғылыҡта йәшәгән халҡың бөйөк бер яҡтылыҡты күрҙе. Үлем күләгәһендә йәшәгәндәр өсөн нур балҡыны».

Шул ваҡыттан алып Ғайса: «Тәүбәгә килегеҙ, сөнки Күктәр Батшалығы яҡынлашты!» – тип иғлан итеп йөрөй башлай. Уның артынан төрлө төбәктәрҙән килгән әллә күпме халыҡ эйәрә, Ғайса уларҙы аң-белемгә өйрәтә, ауырыуҙарҙы һауыҡтыра.

Бер ваҡыт ағалы-ҡустылы Әндриас менән Петрус (уны Шимғон тип тә атағандар) Галилея күлендә балыҡ тотоп йөрөгән була. Ғайса уларҙы күргәс: «Миңә эйәрегеҙ! Мин һеҙҙе кеше аулаусылар итермен», – ти. Был Уның, кешеләр һеҙҙе тыңлап, хәҡиҡәтте танып белһендәр өсөн, Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләргә ебәрәм, тиеүе була. Ауҙарын ташлап, Әндриас менән Петрус Ғайсаға эйәреп китә. Бер аҙ барғас, Ғайса тағы ағалы-ҡустылы Яҡуп менән Яхъяны күрә. Улар аталары Зәбәҙәйос менән бергә кәмәлә ауҙарын ямап ултырған була. Ғайса уларҙы ла Үҙенә эйәрергә саҡыра. Туғандар, аталарын һәм кәмәләрен ҡалдырып, Уның артынан китә. Ҡалған шәкерттәр ҙә, Ғайса саҡырғас, Уның артынан эйәрәләр. Ғайса уларға кешеләрҙе сир-сырхауҙарҙан һауыҡтырыу, эстәренән ендәрҙе ҡыуып сығарыу вәкәләтен бирә.

Шулай Ғайса һәр ваҡыт Үҙе менән бергә булһындар өсөн ун ике шәкертте һайлап ала һәм уларҙы махсус өйрәтә. Бына ул шәкерттәрҙең исеме: Шимғон, Әндриас, Зәбәҙәйостың улдары Яхъя менән Яҡуп, Филиппус, Барҫоломай, Маҫҫайос, Томас, Алфай улы Яҡуп, Таддай, Көрәшсе Шимғон һәм Ғайсаға аҙаҡ хыянат итәсәк Йәһүҙә Искариот. Ғайсаның бөтә шәкерттәре лә ғәҙәти ябай кешеләр, әммә Алла уларға Ғайса Мәсихтең – Алла Улының дуҫтары һәм шәкерттәре булыу бәхетен бирә.

*МАҪҪАЙОС 4:12–22; МАРКУС 3:13–19*



## Ғайса ҡылған беренсе мөғжизә

Бер ваҡыт Раббы шәкерттәре менән Галилеялағы Кана ҡалаһына туй тантанаһына саҡырыла. Шулай килеп сыға: мәжлес ваҡытында шарап бөтә. Ғайсаға әсәһе (ул да туйға килгән була): «Быларҙың шарабы бөткән», – ти. Әммә Ул, Минең әлегә ваҡытым етмәгән, тип яуаплай. Шунан Мәрйәм, Ғайсаға күрһәтеп, табын хеҙмәтселәренә: «Ул нимә әйтә, шуны эшләгеҙ», – тип ҡуша.

Эргәләрендә алты ҙур таш һыу киҫмәге торған була. Ғайса хеҙмәтселәргә: «Киҫмәктәргә һыу тултырығыҙ», – ти. Һауыттар мөлдөрәмә тулғас, Ғайса уларҙан һыу һоҫоп алып, туй башлығына алып барырға ҡуша.

Туй башлығы, килтерелгән эсемлекте тәмләп ҡарағас, кейәүҙе саҡырып ала: «Ғәҙәттә тәүҙә яҡшы шарап бирелә, аҙаҡ, бөтәһе лә эсеп иҫергәс, насарырағын алып киләләр; ә һин яҡшы шарапты иң аҙаҡҡа ҡалдырғанһың». Туй башлығы был шараптың ҡайҙан икәнлеген белмәгән – был киҫмәктәрҙән һыу һоҫоп алған хеҙмәтселәргә генә мәғлүм була.

Шулай Ғайса Галилеялағы Кана ҡалаһында мөғжизәле эштәрен башлап ебәреп, Үҙенең бөйөклөгөн күрһәтә һәм шәкерттәре Уға инана.

*ЯХЪЯ 2:1–11*



## Ғайсаның Алла йортонан һатыусыларҙы ҡыуып сығарыуы

Ҡотҡарылыу байрамы яҡынлашҡан. Ғайса Йәрүсәлимгә килә. Алла йортоноң ихатаһына ингәс, унда үгеҙ, һарыҡ, күгәрсен һатып тороуҙарын күрә; шунда уҡ аҡса алмаштырыусылар ҙа ултыра. Бауҙан сыбыртҡы ишеп алып, Ғайса барыһын да үгеҙ-һарыҡтары менән бергә Алла йортонан ҡыуып сығара; аҡса алмаштырыусыларҙың өҫтәлдәрен ауҙарып, аҡсаларын сәсеп ебәрә. Шунан күгәрсен һатыусыларға өндәшә: «Быларҙы бынан алып китегеҙ! Минең Атамдың йортон баҙарға әйләндермәгеҙ!» Шунда Уның шәкерттәре Изге Яҙмалағы: «Һинең йортоң өсөн йән атып, янып-көйәм мин», – тигән һүҙҙәрҙе хәтерләй.

Ғайса Алла йортонда ошоларҙы ҡылғандан һуң йәһүд башлыҡтары Унан: «Бындай эшкә вәкәләтең барлығын Һин беҙгә ниндәй мөғжизә аша иҫбат итә алаһың?» – тип һорай. «Бынау Алла йортон емереп ташлағыҙ, Мин уны өс көндә торғоҙасаҡмын», – ти Ғайса яуап итеп. Быға йәһүдтәр: «Был Йорт ҡырҡ алты йыл буйы төҙөлдө, Һин уны өс көндә генә торғоҙмаҡсы булаһыңмы?» – тиҙәр. Ғайса «бынау Алла йортон» тигәндә Үҙенең тәнен күҙ уңында тотҡан була. Ул үленән терелеп торғандан һуң, шәкерттәре Уның ошо хаҡта әйткәнен иҫтәренә төшөрә һәм Изге Яҙмаға ла, Ғайсаның әйткән һүҙҙәренә лә ышана.

Йәрүсәлимдәге Ҡотҡарылыу байрамында Ғайсаның ҡылған мөғжизәләрен күреп, күптәр Уға инана.

*ЯХЪЯ 2:13–23*



## Ғайса менән Никодемустың әңгәмәһе

Никодемус исемле фарисей* йәһүдтәр араһында дәрәжәле кешеләрҙең береһе була. Төнөн ул йәшертен генә Ғайса янына килеп: «Остаз! Беҙ Һинең Алла тарафынан ебәрелгәнеңде беләбеҙ; Һин ҡылған мөғжизәләрҙе, Алланың ярҙамы булмаһа, бер кем дә эшләй алмаҫ ине бит», – ти. Ғайса: «Һиңә хаҡ һүҙ әйтәм: кеше юғарынан тыумаһа, Алла Батшалығын күрә алмаҫ», – тип яуаплай. «Кеше, ҡартайып бөткәс, нисек итеп яңынан тыуа алһын? – тип аптырай Никодемус. – Ул әсәһе ҡарынына ҡабат инеп, икенсе тапҡыр тыуа аламы ни?» Ғайса уға: «Һиңә хаҡ һүҙ әйтәм: кеше һыуҙан һәм Рухтан тыумаһа, Алла Батшалығына инә алмаҫ! Тәндән тыуған – тән, Рухтан тыуған – рух. Минең һиңә: „Һеҙ юғарынан тыуырға тейеш“ тип әйтеүемә ғәжәпләнмә», – ти. Никодемус Уның әйткәндәрен аңламайынса: «Нисек улай була алһын?» – тип һорай. «Әҙәм Улына** инанған һәр кем мәңгелек тормошҡа эйә булһын өсөн, Муса сүлдә баҡыр йыланды ҡолға башында күтәргән кеүек, Әҙәм Улы ла шулай күтәрелергә тейеш. Алла донъяны шул тиклем яратты, хатта Улына инанған бер кем дә һәләк булмаһын, ә мәңгелек тормошҡа эйә булһын өсөн, Ул Үҙенең берҙән-бер Улын бирҙе. Алла Үҙенең Улын донъяны хөкөм итергә тип түгел, ә донъя Уның аша ҡотолһон өсөн донъяға ебәрҙе. Улына инаныусы хөкөм ителмәй, ә инанмаусы хөкөм ителде инде, сөнки ул Алланың берҙән-бер Улына ышанманы. Ә хөкөм бына шул: донъяға яҡтылыҡ килде, әммә кешеләр, эштәре яман булғанлыҡтан, яҡтылыҡ урынына ҡараңғылыҡты яратты. Яуызлыҡ ҡылған һәр кем яҡтылыҡҡа нәфрәтле һәм, үҙенең яман эштәре асылыуҙан ҡурҡып, яҡтылыҡҡа килмәй. Ә дөрөҫлөк буйынса эш итеүсе, эштәренең Алла аша башҡарылғаны күренеп торһон өсөн, яҡтылыҡҡа килә».

*ЯХЪЯ 3:1–21*

* Фарисейлыҡ – Йәһүҙиәләге дини ағымдарҙың береһе. Был ағым яҡлылар дини ҡанунға яҙылған ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәп йәшәгән.

** Әҙәм Улы – Мәсихтең Иҫке Ғәһедтәге исемдәренең береһе.



## Ғайса һәм Самария ҡатыны

Бер ваҡыт Ғайса Израилдың көньяҡ өлөшөндәге Йәһүҙиәнән Галилеяға китеп барған. Йәһүҙиә менән Галилея араһында Самария өлкәһе урынлашҡан. Самария халҡы, йәһүдтәр кеүек үк, ер һәм күкте Бар ҡылыусы берҙән-бер Аллаға ышанып йәшәгән. Әммә уларҙың үҙ йолалары, үҙ ҡаһиндары булған, улар хатта ҡасандыр үҙҙәренең ғибәҙәтханаларына ла йөрөгән, тик уны йәһүдтәр емереп киткән. Йәһүҙиә һәм Самария халҡы һәр ваҡыт дошманлашып көн күргән.

Ғайса Үҙенең шәкерттәре менән Самариялағы Сүхәр ҡалаһына килә. Оҙон юлдан арып, Ул ҡоҙоҡ янына барып ултыра, ә шәкерттәре аҙыҡ-түлек һатып алырға китә. Төш ваҡыты була. Бер Самария ҡатыны һыу алырға килә. «Миңә эсергә һыу бир әле», – ти уға Ғайса. Ҡатын аптырап китә: «Нисек итеп Һин, йәһүд була тороп, минән, Самария ҡатынынан, һыу һорайһың?» Ғайса уға: «Әгәр ҙә һин Алла бүләгенең нимә икәнен һәм: „Миңә эсергә һыу бир әле“, – тип һорап торған кешенең кем икәнен белһәң, үҙең Унан һорар инең һәм Ул һиңә тере һыу бирер ине», – тип яуаплай. «Әфәндем! – ти ҡатын. – Һинең бит һоҫоп алырға һауытың да юҡ, ә ҡоҙоҡ тәрән. Тере һыуҙы ҡайҙан алырһың икән?» Ғайса уға былай ти: «Был һыуҙы эскән һәр кем йәнә һыуһар, ә Мин биргән һыуҙы эскән кеше бер ҡасан да һыуһамаҫ. Мин биргән һыу ул кешелә мәңгелек тормошҡа аға торған шишмәгә әүереләсәк». Ҡатын Унан, Аллаға самарияларҙың ата-бабалары табынған тауҙа табынайыҡмы, әллә Йәрүсәлимдәме, тип һорай. Ғайса уға: «Алла Ул – Рух, һәм Уға табынғандар рух һәм хәҡиҡәт менән табынырға тейеш», – тип яуаплай. Ҡатын Уға: «Мәсихтең килерен беләм. Килгәс, Ул беҙгә бөтәһен дә аңлатып бирер», – ти. «Һинең менән һөйләшкән Мин – ул Үҙе», – ти Ғайса уға.

Шунан һуң ҡатын һауытын ташлай ҙа ҡалаға китә. Унда ул: «Был Кеше Мәсих түгелме икән?» – тип, үҙенә осраған әлеге Кеше тураһында һөйләп бирә. Ҡатындың был һүҙҙәренән һуң, шул ҡалала йәшәгән күп кенә Самария кешеләре Ғайсаға инана. Шуға күрә улар Ғайсаға килеп, бында ҡалыуын үтенә. Ул тағы ла ике көнгә тотҡарлана. Уның һөйләгәндәрен тыңлап, Уға тағы ла күптәр инана.

*ЯХЪЯ 4:1–42*



## Мул табыш

Ғайса Геннисарет күле буйында халыҡҡа йыш ҡына өгөт-нәсихәт биргән. Бер ваҡыт Алла һүҙен тыңларға тип килгән кешеләр шул тиклем күп булып сыға, Уға хатта һөйләүе ауырлаша. Ул яр буйында торған ике буш кәмәнең береһенә, Шимғондыҡы булғанына инеп баҫа. Ярҙан бер аҙ алыҫҡараҡ китеп, күл буйында торған халыҡҡа өгөт-нәсихәт уҡый башлай.

Һүҙҙәрен тамамлағас, Шимғонға: «Тәрәнгәрәк барып, иптәштәрең менән ау һалығыҙ!» – ти. «Остаз! Беҙ төнө буйы йөрөнөк, бер нәмә лә тота алманыҡ. Шулай ҙа, Һин ҡушаһың икән, ау һалам», – тип яуаплай Шимғон. Шулай эшләйҙәр ҙә. Уларға бик күп балыҡ эләгә, хатта ауҙары бүҫелә башлай. Яҡында балыҡ тотоп йөрөгән дуҫтары Яҡуп менән Яхъяны ла саҡырып, ике кәмәне лә балыҡ менән тултыралар, әммә шул тиклем ауырлыҡтан уларҙың кәмәләре саҡ батмай. Был хәлде күреп ҡалып, Шимғон Петрус Ғайса алдына тубыҡлана. «Хакимым, – ти ул, – кит минең янымдан! Мин – гонаһлы!» Был һүҙҙәрҙе, Хаким янында торорға лайыҡ түгеллеген тойоп, ҡурҡышынан әйтә ул. Ғайса иһә Шимғонға: «Ҡурҡма, ошо ваҡыттан башлап кешеләр ауларһың», – ти.

Күпмелер ваҡыттан һуң Петрус ысынлап та вәғәз һөйләй һәм кешеләрҙе Ғайса Мәсихкә иманға килтерә башлай. Бының менән ул әҙәм балаларын ҡотолоу юлына баҫтыра.

*ЛУКАС 5:1–10*



## Фалиж һуҡҡан кешенең һауығыуы

Ғайса Капернаум ҡалаһында булғанда, Унын янына төрлө ерҙәрҙән ябай халыҡ та, юғары ҡатлам кешеләре лә килә. Ул вәғәз һөйләгәндә Раббының ҡөҙрәте Унын менән була һәм ауырыуҙарҙы һауыҡтырған сағында ярҙамға килә. Ғайса кешеләрҙе өйрәтеп өгөт-нәсихәт биргән өйгә, ятҡан түшәге менән күтәреп, фалиж һуҡҡан берәүҙе килтерәләр, Ғайсаның уны һауыҡтырыуын үтенәләр. Ләкин, өй эсе халыҡ менән шығырым тулы булғанлыҡтан, ишектән индерә алмайҙар. Шуға, өйҙөң түбәһен һүтеп, ауырыуҙы түшәге менән бергә бүлмәнең ҡап уртаһына төшөрөп, Ғайсаның алдына һалалар. Ғайса, уларҙың ышаныстарын күреп, ауырыуға: «Дуҫым, һинең гонаһтарың ғәфү ителде!» – ти.

Ҡанун белгестәре һәм фарисейҙар, быны ишетеп, үҙ-ара фекер алыша башлай: «Көфөр һүҙ һөйләүсе был Кеше кем һуң? Гонаһтарҙы бер Алланан башҡа кем ярлыҡай ала?» Ғайса, уларҙың уй-фекерҙәрен белеп: «Ни өсөн һеҙ шулай уйлайһығыҙ? – тип һорай. – Нимә тип әйтеү еңелерәк: „Гонаһтарың ғәфү ителде“ типме, әллә: „Тор ҙа атлап кит“ типме? Ләкин шуны белегеҙ: Әҙәм Улының ерҙә гонаһтарҙы ярлыҡарға хакимлығы бар...» – ти ҙә фалиж һуҡҡан кешегә өндәшә: «Һиңә бойорам: тор ҙа, түшәгеңде алып, өйөңә ҡайт!»

Теге кеше тора ла ятҡан түшәген алып, Алланы иҫ китмәле һауыҡтырыу өсөн данлап, ҡайтып китә. Унда торғандар ҙа: «Беҙ бөгөн иҫ киткес нәмәләр күрҙек», – тип Алланы данлай.

*ЛУКАС 5:17–26*



## Тауҙағы вәғәз: бәхет ҡанундары

Бер ваҡыт Ғайса, йыйылып торған халыҡты күреп, тауға күтәрелә. Уның ошо тауҙан тороп кешеләргә биргән нәсихәтен Тауҙағы вәғәз тип атайҙар. Иҫке Ғәһед замандарында Алла Үҙенең халҡына биргән Ун бойороҡ кеүек, Тауҙағы вәғәз дә кеше йәшәйешенең әхлаҡи нигеҙҙәрен үҙ эсенә ала һәм Алла Батшалығына юл күрһәтеп тора. Шәкерттәре һәм килгән халыҡ Ғайса янына ултырғас, Ул уларҙы аң-белемгә өйрәтә башлай:

Рухи яҡтан ярлылар бәхетле, сөнки Күктәр Батшалығы уларҙыҡы.

Хәсрәтлеләр бәхетле, сөнки улар йыуаныс табыр.

Баҫалҡылар бәхетле, сөнки улар ерҙе мираҫ итеп алыр.

Дөрөҫлөккә сарсағандар һәм асыҡҡандар бәхетле, сөнки улар туйыныр.

Шәфҡәтлеләр бәхетле, сөнки уларға шәфҡәт күрһәтелер.

Саф күңеллеләр бәхетле, сөнки улар Алланы күрер.

Татыулыҡ урынлаштырыусылар бәхетле, сөнки улар Алла балалары тип аталыр.

Дөрөҫлөк хаҡына эҙәрләнеүселәр бәхетле, сөнки Күктәр Батшалығы уларҙыҡы.

Минең арҡала кешеләр һеҙҙе хурлағанда, эҙәрләгәндә һәм һеҙгә ҡаршы төрлө ялған һүҙ һөйләгәндә, һеҙ бәхетле. Шатланығыҙ һәм ҡыуанығыҙ, сөнки күктәрҙә әжерегеҙ ҙур буласаҡ. Һеҙгә тиклем йәшәгән пәйғәмбәрҙәрҙе лә шулай эҙәрләнеләр.

Һеҙ – ерҙең тоҙо. Әгәр тоҙ үҙенең тәмен юғалтһа, уны ҡабат нисек тоҙло итерһегеҙ? Ул инде аяҡ аҫтына сығарып ташлауҙан башҡаға ярамаҫ.

Һеҙ – донъя өсөн яҡтылыҡ. Тау башында төҙөлгән ҡаланы йәшереп булмай. Шулай уҡ, шәмде тоҡандырғас, бер кем дә уны һауыт аҫтына ҡуймай, киреһенсә, уны шәмдәлгә ултырталар һәм ул өйҙәгеләрҙең бөтәһе өсөн дә яҡтырта. Һеҙҙең яҡтылығығыҙ ҙа кешеләр алдында шулай балҡыһын, һәм шул мәлдә улар яҡшы ғәмәлдәрегеҙҙе күрер ҙә күктәге Атағыҙҙы данлар.

*МАҪҪАЙОС 5:3–16*



## Тауҙағы вәғәз: Муса ҡануны тураһында

Минең хаҡта, ҡанунда һәм пәйғәмбәрҙәрҙең китаптарында яҙылғандарҙы юҡҡа сығарырға килгән, тип уйламағыҙ. Мин юҡҡа сығарырға түгел, ғәмәлгә ашырырға килдем. Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: күк менән ер юҡҡа сыҡһа ла, яҙылғандың барыһы ла ғәмәлгә ашмайынса, ҡанундың бәләкәй генә хәрефе лә, хәрефтең бер генә һыҙығы ла юҡҡа сыҡмаҫ. Шулай итеп, кем дә кем был бойороҡтарҙың бәләкәй генәһен дә боҙа һәм башҡаларҙы шуға өйрәтә, ул Күктәр Батшалығында иң түбән кеше тип аталыр. Ә уларҙы үтәп, башҡаларҙы ла үтәргә өйрәтеүсе иһә Күктәр Батшалығында бөйөк булып һаналыр. Һеҙгә шуны әйтәм: әгәр ҙә Аллаға тоғролоҡло булыуығыҙ ҡанун белгестәренең һәм фарисейҙарҙың тоғролоғонан артығыраҡ булмаһа, Күктәр Батшалығына инмәйәсәкһегеҙ.

Ата-бабаларығыҙға: «Кеше үлтермә! Кеше үлтереүсене хөкөм көтә», – тип әйтелгәнде ишеткәнегеҙ бар. Ә мин һеҙгә әйтәм: туғанына асыу тотҡан кешене лә хөкөм көтә. Туғанына: «Мәғәнәһеҙ», – тип әйтеүсе Юғары кәңәшмә алдында яуап тоторға, ә «Ахмаҡ», – тиеүсе йәһәннәм утына тарттырылырға тейеш. Шуға күрә, әгәр Аллаға бүләккә үҙ ҡорбаныңды алып килһәң һәм ҡорбан усағы алдында туғаныңдың һиңә ҡарата ниндәйҙер дәғүәһе барлығы иҫеңә төшһә, бүләгеңде шунда ҡалдыр ҙа тәүҙә ҡайтып туғаның менән яраш, унан һуң ғына кире килеп бүләгеңде бир.

«Зина ҡылма», – тип әйтелгәнде ишеткәнегеҙ бар. Ә Мин һеҙгә әйтәм: ҡатын-ҡыҙға енси теләк менән ҡараған кеше күңелендә уның менән инде зина ҡылған була. Шулай уҡ: «Берәйһе ҡатынын айыра икән, уға айырылышыу ҡағыҙы бирһен», – тип әйтелгәйне. Ә Мин һеҙгә әйтәм: әгәр ир зина ҡылмаған ҡатыны менән айырылышһа, ул уны зина ҡылыуға этәрә. Айырылған ҡатынға өйләнгән кеше лә зина ҡыла.

Ата-бабаларға: «Ялған ант бирмә! Раббы алдында биргән антыңды үтә», – тип әйтелгәнде лә ишеткәнегеҙ бар. Ә Мин һеҙгә әйтәм: бөтөнләй ант итмә! Күк менән дә ант итмә, сөнки ул – Алланың тәхете, ер менән дә ант итмә, сөнки ул – Алла аяҡ терәгән баҫҡыс, Йәрүсәлим менән дә ант итмә, сөнки ул – бөйөк Батшаның ҡалаһы. Башың менән дә ант итмә, сөнки сәсеңдең



бер бөртөгөн генә лә үҙең ағарта йәки ҡарайта алмайһың. Һеҙҙең «эйе» тигән һүҙегеҙ – «эйе», «юҡ» тигәнегеҙ «юҡ» булһын. Шунан артығы – Иблистән.

*МАҪҪАЙОС 5:17–37*

## Тауҙағы вәғәз: мөхәббәт һәм доға

«Күҙ өсөн – күҙ, теш өсөн – теш» тиелгәнде ишеткәнегеҙ бар. Ә Мин һеҙгә әйтәм: үҙеңә яуызлыҡ ҡылған кешегә ҡаршылыҡ күрһәтмә. Әгәр кемдер уң яңағыңа һуҡһа, һул яңағыңды ла ҡуй. Берәйһе һине хөкөмгә тарттырып, күлдәгеңде алырға теләһә, уға өҫ кейемеңде лә бир. Берәйһе һине бер ара ер үтергә мәжбүр итһә, унын менән ике ара үт. Һинән нимәлер һорайҙар икән, бир, бурысҡа алырға теләүсене лә буш итмә.

«Яҡыныңды ярат, дошманыңа нәфрәтле бул!» – тип әйтелгәнде ишеткәнегеҙ бар. Ә Мин һеҙгә әйтәм: дошмандарығыҙҙы яратығыҙ һәм үҙегеҙҙе эҙәрләгән кешеләр өсөн доға ҡылығыҙ. Шулай эшләп, һеҙ күктәге Атағыҙҙың балалары булыуығыҙҙы күрһәтерһегеҙ, сөнки Алла Үҙенең ҡояшын яуыздар өсөн дә, яҡшылар өсөн дә ҡалҡыта һәм ямғырын Аллаға тоғролоҡло кешеләргә лә, гонаһлы булғандарына ла яуҙыра. Әгәр үҙегеҙҙе яратҡандарҙы ғына ратһағыҙ, ул саҡта Алла һеҙгә ни өсөн әжер бирер? Һалым йыйыусылар ҙа шулай эшләмәйме ни? Әгәр һеҙ дуҫтарығыҙҙы ғына сәләмләһәгеҙ, бының иҫ китерлек нимәһе бар? Мәжүсиҙәр ҙә шулай эшләмәйме ни? Шуға күрә, күктәге Атағыҙ камил булған кеүек, һеҙ ҙә камил булығыҙ.
Хаҡ эштәрегеҙҙе кешеләргә күрһәтеү маҡсатында башҡарыуҙан һаҡланығыҙ. Юғиһә күктәге Атағыҙҙан һеҙгә әжер булмаҫ. Шуға күрә, саҙаҡа биргәндә, ул хаҡта шаулап йөрөмә. Кешеләр маҡтау яуҙырһын тип, ғибәҙәтханаларҙа һәм урамдарҙа ике йөҙлөләр шулай итә. Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: улар үҙҙәренең әжерен алды инде. Әгәр ҙә хәйер бирәһең икән, уң ҡулыңдың нимә эшләгәнен һул ҡулың белмәһен. Хәйерең йәшерен бирелһен. Шул мәлдә йәшерен ҡылынған барлыҡ эште күреп торған Атаң һиңә әжереңде бирер.
Доға ҡылғанда ике йөҙлөләр һымаҡ булмағыҙ. Улар, кешеләр күрһен тип, ғибәҙәтханаларҙа һәм урам саттарында баҫып доға ҡылырға ярата. Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: улар үҙҙәренең әжерен алды инде. Ә һин, доға ҡылғанда, бүлмәңә инеп ишегеңде яп та күҙгә күренмәҫ Атаңа доға ҡыл. Шул мәлдә йәшерен ҡылынған бөтә эште күреп торған Атаң һиңә әжереңде бирер.
Доға ҡылғанда мәжүсиҙәр кеүек буш һүҙ һөйләмәгеҙ. Улар, күберәк һөйләһәк, илаһтарыбыҙ беҙҙе ишетер, тип уйлай. Улар һымаҡ булмағыҙ. Һеҙ һорамаҫ борон уҡ Атағыҙ һеҙҙең нимәгә мохтаж икәнлегегеҙҙе белә. Һеҙ ошолай тип доға ҡылығыҙ:

*МАҪҪАЙОС 5:38–48; 6:1–9*

**Күктәге Атабыҙ!**
**Исемең мөҡәддәс булып танылһын.**
**Һинең Батшалығың килһен.**
**Күктәге кеүек, ерҙә лә**
**Һинең ихтыярың үтәлһен.**
**Көндәлек икмәгебеҙҙе**
**беҙгә бөгөн бир.**
**Беҙ үҙебеҙгә яҙыҡ эш ҡылғандарҙы**
**ғәфү иткән кеүек,**
**Һин дә беҙҙең яҙыҡ эштәребеҙҙе ярлыҡа.**
**Беҙҙе һынауға дусар итмә,**
**ә Иблистән һаҡла.**
**Сөнки Батшалыҡ, ҡөҙрәт һәм дан**
**мәңгелеккә Һинекелер.**
**Амин.**

## Тауҙағы вәғәз: Аллаға мөнәсәбәт тураһында

Ураҙа тотҡанда ике йөҙлөләр кеүек ҡараңғы сырайлы булмағыҙ. Ураҙа тотҡандарын кешеләр күрһен тип, улар шулай моңһоу йөҙ менән йөрөй. Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: улар үҙҙәренең әжерен алды инде. Ә һин ураҙа тотҡанда сәсеңде майла һәм битеңде йыу. Шунда һинең ураҙа тотоуыңды кешеләр түгел, ә күҙгә күренмәҫ Атаң күрер. Йәшерен булғанды ла күргән Атаң һиңә әжереңде бирер.

Был донъяла үҙегеҙгә байлыҡ йыймағыҙ. Бында уны көйә ҡырҡа, тут баҫа, ҡараҡтар инеп урлай. Һеҙ хазинаны күктә йыйығыҙ: унда көйә лә ҡырҡмай, тут та баҫмай, ҡараҡтар ҙа төшөп урламай. Хазинаң ҡайҙа була, күңелең дә шунда була бит.

Тәндең яҡтыртҡысы – күҙ. Күҙҙәрең һау булһа, бөтә тәнең нурлы булыр. Ә инде күҙең зәғиф булһа, бөтә тәнең ҡараңғыла булыр. Әгәр һиндәге яҡтылыҡ – ҡараңғылыҡ икән, ул ҡараңғылыҡ ни тиклем ҡуйы!

Бер кем дә ике хужаға хеҙмәт итә алмай: ул йә береһенә нәфрәт тотор, икенсеһен яратыр; йә береһенә тоғро булыр, икенсеһен һанға һуҡмаҫ. Аллаға ла, байлыҡҡа ла бер юлы хеҙмәт итә алмаҫһығыҙ.

Шуға күрә, Мин һеҙгә әйтәм: нимә ашарбыҙ, нимә эсербеҙ, тип – йәнегеҙ; нимә кейербеҙ, тип тәнегеҙ өсөн борсолмағыҙ. Йән – ризыҡтан, тән кейемдән мөһимерәк түгелме ни? Ҡоштарға ҡарағыҙ: улар сәсмәй ҙә, урмай ҙа, бураларға ашлыҡ та һалмай, шулай ҙа уларҙы күктәге Атағыҙ туйындыра. Һеҙ ҡоштарҙан ҡәҙерлерәк түгелме ни? Арағыҙҙан кем, борсолоп, үҙ ғүмерен бер сәғәткә булһа ла оҙонайта ала? Ниңә кейем өсөн ҡайғыраһығыҙ? Яландағы ләләләрҙең нисек үҫкәнен ҡарағыҙ: улар эшләмәй ҙә, еп тә иләмәй. Әммә һеҙгә шуны әйтәм: хатта ни тиклем мөһабәт Сөләймән батша ла ул дәрәжәлә затлы кейенмәгән. Әгәр Алла бөгөн яланда үҫеп ултырған, ә иртәгә мейескә ташланасаҡ үләнде шулай кейендерә икән, һеҙҙе нисек кейендермәһен ти инде, эй иманы аҙҙар? Шулай булғас, нимә ашарбыҙ, нимә эсербеҙ, нимә кейербеҙ, тип хафаланмағыҙ. Был хаҡта мәжүсиҙәр ҡайғырта. Ә күктәге Атағыҙ һеҙҙең быларҙың барыһына ла мохтаж икәнегеҙҙе белә. Иң тәүҙә Алла Батшалығын һәм Уның хаҡ ихтыяры үтәлеүенә ынтылығыҙ, шул саҡта быларҙың барыһы ла



һеҙгә бирелер. Шулай булғас, иртәгә өсөн борсолмағыҙ. Иртәгәһе көн үҙе хаҡында үҙе ҡайғыртыр. Һәр көндөң үҙ мәшәҡәте үҙенә етерлек.

*МАҪҪАЙОС 6:16–34*

## Тауҙағы вәғәз: кешеләргә мөнәсәбәт тураһында

Хөкөм итмәгеҙ, үҙегеҙ ҙә хөкөм ителмәҫһегеҙ, сөнки хөкөм итһәгеҙ, һеҙҙе лә шулай хөкөм итерҙәр; ниндәй үлсәм менән үлсәһәгеҙ, һеҙгә лә шундай үлсәм менән үлсәп бирелер. Нисек һин туғаныңдың күҙендәге сүпте күрәһең, ә үҙ күҙеңдәге бүрәнәне тоймайһың? Үҙ күҙеңдә бүрәнә булғанда, туғаныңа: «Күҙеңдәге сүпте алайым әле», – тип нисек әйтә алаһың? Эй, ике йөҙлө! Тәүҙә үҙ күҙеңдәге бүрәнәне сығар, унан һуң асыҡ күрерһең һәм туғаныңдың күҙендәге сүпте ала алырһың. Изге нәмәне эттәргә бирмәгеҙ: улар боролоп үҙегеҙҙе ботарлар. Ынйыларығыҙҙы сусҡалар алдына һипмәгеҙ: уларҙы аяҡтары менән тапап бөтөрҙәр.

Һорағыҙ – һеҙгә бирелер; эҙләгеҙ – табырһығыҙ; шаҡығыҙ – һеҙгә асырҙар. Сөнки һәр һораған кеше ала, эҙләгән таба һәм шаҡығанға асалар. Арағыҙҙан кемегеҙ икмәк һораған улына таш тоттороp? Йәки ул балыҡ һорағанда, ҡайһығыҙ йылан бирер? Шулай булғас, һеҙ үҙегеҙ яман була тороп та, балаларығыҙға яҡшылыҡ өләшә беләһегеҙ икән, күктәге Атағыҙ Үҙенән һораусыларға яҡшы нәмәләрҙе һис шикһеҙ бирәсәк.

Бүтәндәрҙең һеҙгә нимә эшләүен теләһәгеҙ, үҙегеҙ ҙә уларға шуны эшләгеҙ. Ҡанундың һәм пәйғәмбәрҙәр яҙмаларының асылы шул.

Тар ҡапҡанан инегеҙ!
Һәләкәткә алып барған ҡапҡа
киң һәм юлы иркен.
Күптәр шул ҡапҡанан инә лә инде.
Ә тормош ҡапҡаһы
тар һәм унда илтеүсе юл ҡыҫынҡы.
Уны аҙҙар ғына таба.

*МАҪҪАЙОС 7:1–14*

**Алтын ҡағиҙә**

**«Бүтәндәрҙең һеҙгә
нимә эшләүен
теләһәгеҙ,
үҙегеҙ ҙә
уларға
шуны эшләгеҙ».**

***Мәҫҫайос 7:12***

## Тауҙағы вәғәз: хәҡиҡәт һәм ялған

Ялған пәйғәмбәрҙәрҙән һаҡланығыҙ: янығыҙға улар һарыҡ тиреһе ябынып килер, ә асылда йыртҡыс бүреләр улар. Һеҙ уларҙы ҡылған ғәмәлдәренә ҡарап танырһығыҙ. Сәнскәктән — йөҙөм, билсәндән инжир йыялармы ни? Бына шулай, яҡшы ағас яҡшы емеш бирә, ә насар ағас насар емеш бирә. Яҡшы ағас насар емеш бирмәй һәм насар ағас яҡшы емеш бирмәй. Яҡшы емеш бирмәй торған һәр ағасты ҡырҡып утҡа ташлайҙар. Шулай итеп, ялған пәйғәмбәрҙәрҙе ҡылған ғәмәлдәренә ҡарап танырһығыҙ.

Күктәр Батшалығына Миңә: «Хакимым! Раббым!» – тип әйткән һәр кем түгел, ә күктәге Атамдың ихтыярын үтәгән кеше генә инәсәк.

Ҡиәмәт көнөндә Миңә күптәр: «Хакимым! Раббым! Беҙ Һинең исемеңдән пәйғәмбәрлек итмәнекме ни? Һинең исемеңде әйтеп ендәрҙе ҡыуып сығарманыҡмы ни? Һинең исемең менән ҡөҙрәтле күп эштәр ҡылманыҡмы ни?» – тип әйтерҙәр. Ана шул ваҡытта Мин уларға: «Мин һеҙҙе бер ҡасан да белмәнем, китегеҙ янымдан, яуызлыҡ ҡылыусылар!» – тиермен.

Шуға күрә был һүҙҙәремде ишетеп, уларҙы үтәгән һәр кем йортон таш өҫтөндә төҙөгән аҡыллы кешегә оҡшар. Ямғыр яуып, йылғалар ташып, көслө елдәр иҫеп, шул йортҡа ябырылған, әммә ул емерелмәгән. Сөнки ул йорт таш нигеҙ өҫтөнә һалынған булған. Ә инде был һүҙҙәремде ишетеп тә, уларҙы үтәмәгән һәр кем үҙенең йортон ҡом өҫтөнә төҙөгән аҡылһыҙ кешегә оҡшар. Ямғыр яуып, йылғалар ташып, көслө елдәр иҫеп, шул йортҡа ябырылған. Ул йорт ауған һәм тулыһынса емерелгән.

Ғайса һүҙен тамамлағас, халыҡ Уның өйрәткәндәренә хайран ҡала. Ул бит ҡанун белгестәре кеүек түгел, ә хакимлыҡҡа эйә булған кеше кеүек өйрәтә уларҙы.

*МАҪҪАЙОС 7:15–29*



## Тол ҡатындың үлгән улын терелтеү

Күп тә үтмәҫтән Ғайса Наин ҡалаһына китә. Шәкерттәре һәм халыҡ төркөмө Уға эйәреп бара. Ғайса ҡала ҡапҡаһына етеп килгәндә, ҡаланан мәйет күтәреп сығып килгән булалар. Тол ҡатындың берҙән-бер улы үлгән икән. Уны бик күп кеше оҙатып килә. Раббы Ғайса, ҡатынды күргәс, уны йәлләп: «Илама», – ти. Шунан, эргәләренә барып, табутҡа ҡулы менән ҡағыла. Табутты күтәреп барыусылар туҡтай. «Егет! Һиңә әйтәм, тор!» – тип бойора Ғайса. Үлгән егет тороп ултыра һәм һөйләшә башлай. Шулай Ғайса әсәһенә улын ҡайтарып бирә. Бөтәһе лә ҡурҡып ҡала һәм: «Арабыҙҙан бөйөк пәйғәмбәр сыҡты. Алла үҙ халҡына ярҙамға килде», – тип Алланы данлай.

*ЛУКАС 7:11–16*



## Сәсеүсе хаҡында ҡисса

Ғайса халыҡҡа сәсеүсе хаҡында ҡисса һөйләй:

Бына бер кеше сәсеүгә сыҡҡан. Сәскән сағында орлоҡтарҙың бер өлөшө юл буйына төшкән һәм, ҡоштар осоп килеп, уларҙы сүпләп бөтөргән. Башҡа бер өлөшө тупрағы аҙ булған ташлы урынға төшкән. Орлоҡ ерҙә тәрән ятмағанлыҡтан, тиҙ арала шытып сыҡҡан. Әммә ҡояш сығып ҡыҙҙыра башлағас, тамыры тәрәнгә китеп өлгөрмәгәнлектән, үҫентеләр ҡороған. Орлоҡтарҙың башҡалары сәнскәк араһына төшкән. Сәнскәк үҫеп, үҫентеләрҙе баҫып киткән. Ә бәғзеләре иһә уңдырышлы ергә төшкән һәм йөҙләтә, алтмышлата йә утыҙлата күберәк уңыш биргән. Ҡолаҡтары барҙар ишетһен!

Шунан Ғайса шәкерттәренә был ҡиссаның мәғәнәһен аңлатып бирә:

Батшалыҡ хаҡындағы һүҙҙе ишетеп тә, уны аңламаған һәр кемдең йөрәгенә сәселгәнде мәкерле Иблис килеп алып китә. Был – юл буйына сәселгән орлоҡ.

Ташлы урынға сәселгәне шуны аңлата: һүҙҙе ишетеү менән, кеше уны шунда уҡ шатланып ҡабул итә, әммә, үҙендә тамыры булмағанлыҡтан, ваҡытлыса ғына тота. Һүҙ арҡаһында бәләгә тарыһа йәки эҙәрләүгә юлыҡһа, ул тиҙ үк сигенә.

Сәнскәк араһына сәселгәне шуны аңлата: кеше һүҙҙе ишетә, әммә донъя мәшәҡәттәре, байлыҡҡа ҡыҙығыу һүҙҙе баҫып ала һәм ул уңыш бирмәй.

Ә уңдырышлы тупраҡҡа сәселгәне шуны аңлата: кеше һүҙҙе ишетеп, уны аңлай; тап ана шул емеш бирә лә инде. Уның уңышы йөҙләтә, алтмышлата йә утыҙлата була.

*МАҪҪАЙОС 13:3–9, 18–23*



## Күктәр Батшалығы хаҡында алты ҡисса

Бер ваҡыт Ғайса өйҙән сыға ла күл буйына барып ултыра. Уның янына күп халыҡ йыйылып китә, шунлыҡтан Ул кәмәгә инеп урын ала һәм ярҙа торған халыҡты өйрәтә башлай. Ғайса уларға ҡиссалар менән һөйләй:

Күктәр Батшалығы үҙ баҫыуына яҡшы орлоҡ сәскән кешегә оҡшаған. Әммә төндә, барыһы ла йоҡлаған саҡта, уның дошманы килеп, иген араһына ҡый үләне сәсеп киткән. Үҫентеләр күтәрелеп баш ебәргән ваҡытта, ҡый үләне лә күренә башлаған. Хеҙмәтселәре ҡайтып йорт хужаһынан: «Әфәндем, һин баҫыуыңа яҡшы орлоҡ сәскәйнең түгелме һуң? Унда ҡый үләне ҡайҙан килеп сыҡҡан икән?» – тип һораған. «Был – дошман эше», – тип яуап биргән йорт хужаһы. «Теләһәң, беҙ хәҙер барып уларҙы утайбыҙ», – тигән хеҙмәтселәр. Ләкин ул былай тигән: «Кәрәкмәй, юғиһә утаған ваҡытта ҡый үләне менән бергә игенде лә йолҡоп ҡуйыуығыҙ бар. Уныһы ла, быныһы ла ураҡҡа тиклем бергә үҫһен. Уңыш йыйғанда инде мин ураҡсыларға: „Иң элек ҡый үләнен йыйып, яндырыу өсөн бәйләмдәргә бәйләгеҙ, унан һуң бойҙайҙы келәтемә илтеп һалығыҙ“, – тип әйтермен».

Ғайса уларға тағы бер ҡисса һөйләй:

Күктәр Батшалығы берәүҙең үҙ баҫыуына сәскән гәрсис орлоғона оҡшаған. Ул бөтә орлоҡтарҙан да ваҡыраҡ, әммә үҫкәс, баҡсалағы барлыҡ үҫемлектәрҙән дә бейегерәк ағасҡа әүерелә. Ҡоштар, осоп килеп, уның ботаҡтарында оя ҡора.

Башҡа ҡиссалар ҙа һөйләй Ғайса:

Күктәр Батшалығы әсеткегә оҡшаған: ҡатын кеше әҙ генә әсетке менән бер тоҡ ондан ҡамыр баҫып ҡуя, ахырҙа бөтә ҡамыр әсеп ҡабара.

Күктәр Батшалығы йәнә яланда күмелгән хазинаға оҡшаш. Берәү уны тапҡан да ҡабат күмеп ҡуйған һәм, шатлығынан бар мөлкәтен һатып, шул яланды һатып алған.

Күктәр Батшалығы йәнә яҡшы ынйылар эҙләгән сауҙагәргә оҡшаған. Ул, иң затлы ынйы тапҡас, ҡайтып бар мөлкәтен һатҡан да шул ынйыны алған.

Күктәр Батшалығы балыҡсылар диңгеҙгә ырғытҡан һәм күп төрлө балыҡ тулып сыҡҡан йылымға оҡшаған. Йылым балыҡ



менән тулғас, уны ярға тартып сығарғандар ҙа ултырып балыҡтарҙы айырғандар. Яҡшыларын кәрзингә һалғандар, ашарға яраҡһыҙҙарын иһә ситкә ырғытҡандар. Донъя бөткәндә лә шулай буласаҡ: фәрештәләр килеп Аллаға тоғролоҡло кешеләрҙән ямандарҙы айырыр ҙа янып ятҡан мейескә ташлар. Унда илау һәм теш шығырҙатыу булыр.

*МАҪҪАЙОС 13:24–33, 44–50*

## Ғайсаның күлдәге дауылды тынысландырыуы

Бер көндө Ғайса шәкерттәре менән кәмәлә Геннисарет күлен йөҙөп сығып барған. Бара торғас, Ғайса йоҡлап китә. Ҡапыл күл өҫтөндә көслө дауыл күтәрелә һәм кәмәгә һыу тула башлай. Шәкерттәре Ғайсаны уятып: «Остаз! Ҡотҡар, батабыҙ бит!» – тип ҡысҡыра. Ғайса: «Ышаныусығыҙ ҡайҙа һуң һеҙҙең? Ниңә улай ҡотоғоҙ осто?» – ти һәм тороп: «Шаулама, баҫыл!» – тип елде лә, ҡоторонған тулҡындарҙы ла тыя. Ел шунда уҡ туҡтай, күл тынысланa, тирә-яҡ һил булып ҡала.

Шәкерттәр ҡурҡып һәм шул уҡ ваҡытта таң ҡалып бер-береһенән: «Кем һуң Ул? Елгә лә, һыуға ла бойора, ә улары буйһона», – тип һораша.

*МАҪҪАЙОС 8:23–27; МАРКУС 4:37–41; ЛУКАС 8:22–25*



# Яйрос ҡыҙының терелеүе

Бер ваҡыт, Галилея күле буйында Ғайса төрлө ерҙән килгән халыҡты аң-белемгә өйрәткән мәлдә, Уның янына ғибәҙәтхана башлыҡтарының Яйрос исемлеһе килә һәм аяҡтарына йығылып: «Минең бәләкәс ҡыҙым үлем хәлендә ята. Килеп, уға ҡулдарыңды ғына ҡуйһаң, ул һауығыр ҙа иҫән ҡалыр ине!» – тип ялбара. Ғайса уның менән китә. Һәр яҡтан ҡыҫырыҡлап, Уға күп халыҡ эйәреп бара.

Ун ике йыл буйы ҡан китеүҙән яфаланған, мең ғазап сигеп, күп табиптарҙа дауаланып та, бер файҙаһын күрмәгән бер ҡатын Ғайса тураһында ишетеп ҡала. Ул, халыҡ араһынан үтеп, арттан ғына килеп, Уның кейеменә ҡағыла. Ҡатын: «Кейеменә бер ҡағылһам, һауығырмын», – тип уйлаған була. Ул шунда уҡ һауыҡҡанын тоя.

Үҙенән көс сыҡҡанын һиҙеп, Ғайса халыҡҡа борола: «Минең кейемемә кем ҡағылды?» – тип һорай. Шәкерттәре, уның ни өсөн шулай һорағанын аңламайынса, кешеләрҙең Һине нисек ҡыҫырыҡлағанын күреп тораһың бит, тип яуаплай. Әммә Ғайса Үҙенә ҡағылған кешене һаман күҙҙәре менән эҙләй. Ҡурҡышынан ҡалтырап төшкән ҡатын, үҙе менән ни булғанын аңлап, Ғайсаға яҡын килә, аяғына йығылып, Уға дөрөҫөн һөйләп бирә. «Һине ышаныуың һауыҡтырҙы. Бар, имен йөрө, сиреңдән ҡотолдоң», – ти уға Ғайса.

Ул быларҙы һөйләгән мәлдә ғибәҙәтхана башлығына килеп: «Ҡыҙың үлде. Ниңә Остазды мәшәҡәтләп торорға?» – тиҙәр. Ғайса был һүҙҙәрҙе ишетеп Яйросҡа: «Ҡурҡма, бары ышан ғына!» – ти. Ғибәҙәтхана башлығының өйөнә килгәс, Ғайса ығы-зығы килгән, сеңләп-сеңләп илашҡан кешеләрҙе күрә. «Һеҙ ниңә ығы-зығы киләһегеҙ, ниңә илашаһығыҙ? – тип һорай Ғайса уларҙан. – Бала үлмәгән, йоҡлай ғына». Унан көлә башлайҙар. Ғайса Үҙе менән Петрусты, Яҡупты, Яхъяны һәм ҡыҙҙың ата-әсәһен алып, ҡыҙ ятҡан бүлмәгә инә. Янына килеп, уның ҡулынан тота ла: «Һеңлем, һиңә әйтәм, тор!» – ти. Ҡыҙ шунда уҡ урынынан тора ла йөрөй башлай. Был мөғжизәнең шаһиты булған барыһы ла хайран ҡала.

*МАРКУС 5:21–42*



## Ғайсаның биш мең кешене туйҙырыуы

Бер ваҡыт Ғайса Үҙенең шәкерттәре менән Галилея күле аръяғына, Тибериас ҡалаһы яғына китә. Ғайсаның ауырыуҙарҙы һауыҡтырғанын, бының өсөн төрлө мөғжизәләр ҡылғанын күреп, Уның артынан бик күп халыҡ эйәрә.

Ғайса шәкерттәре менән бергә тауға менеп ултыра. Йәһүдтәрҙең Ҡотҡарылыу байрамы яҡынлашып килгән була. Ғайса, Үҙенә табан ҙур халыҡ төркөмө килеүен күреп, Филиппусҡа: «Уларҙы ашатырға ҡайҙан икмәк һатып алырбыҙ икән?» – ти. Был һүҙҙәрҙе уны һынар өсөн генә әйтә, сөнки нимә эшләрен белә инде Ул.

«Һәр береһенә аҙлап ҡына бүлеп бирергә лә ике йөҙ көмөш тәңкәлек икмәк етмәҫ», – тип яуаплай Филиппус.

Шәкерттәрҙең береһе, Шимғон Петрустың ҡустыһы Әндриас: «Бында бер малайҙың биш арпа икмәге һәм ике балығы бар, әммә был тиклем күп халыҡҡа ул нимә генә инде?» – ти. «Кешеләргә ултырырға ҡушығыҙ», – ти Ғайса. Был ерҙә үлән ҡуйы үҫкән була. Шулай итеп, барыһы ла үләнгә ултыра. Унда ирҙәр генә биш мең самаһы була.

Ғайса, икмәкте алып, Аллаға рәхмәт уҡығандан һуң, ултырған кешеләргә өләшә; балыҡтарҙы ла һәр кемгә теләгән тиклем бирә. Барыһы ла туйғас, Ул шәкерттәренә: «Ҡалған һыныҡтарҙы йыйып алығыҙ, бер нәмә лә әрәм булмаһын», – тип әйтә. Улар, биш арпа икмәгенән ҡалған һыныҡтарҙы йыйып, ун ике кәрзингә тултырып ҡуя.

Ғайса ҡылған мөғжизәне күреп, кешеләр: «Донъяға килергә тейеш булған Пәйғәмбәр ысынлап та Ул икән!» – тиешә.

*ЯХЪЯ 6:3–14*



## Ғайсаның һыу өҫтөнән атлап килеүе

Икмәк һәм балыҡ менән булған мөғжизәнән һуң Ғайса шәкерттәренә кәмәгә ултырып аръяҡҡа сыға торорға, Уның халыҡ менән аралашып бөткәнен көтмәҫкә ҡуша. Халыҡты оҙатҡандан һуң, Ул доға ҡылырға тип тауға менә һәм кисен шунда ҡала. Ә был мәлдә шәкерттәр ултырған кәмә күлдең уртаһына етә. Көслө ел сыға, тулҡындар кәмәне сайҡата. Таң атып килгән мәлдә шәкерттәр Ғайсаның күл өҫтөнән үҙҙәренә табан атлап килгәнен күрәләр. Улар, күл өҫтөнән килгән Ғайсаны күреп: «Был өрәк!» – тип ҡоттары осоп ҡысҡырыша. Әммә Ғайса шунда уҡ уларға: «Тынысланығыҙ, был – Мин, ҡурҡмағыҙ!» – тип өндәшә.

Шунан Петрус Уға: «Хакимым! Әгәр был Һин булһаң, миңә һыу өҫтөнән яныңа атлап барырға бойорсо», – ти. «Кил», – ти уға Ғайса. Петрус кәмәнән төшә лә һыу өҫтөнән Ғайсаға табан атлап китә. Ләкин елдең көслө булыуынан ҡапыл ҡото оса һәм бата башлай. «Хакимым, ҡотҡар мине!» – тип ҡысҡырып ебәрә. Ғайса шунда уҡ ҡулын һуҙып, уны эләктереп ала: «Эй, иманы аҙ! Ниңә икеләнеп ҡалдың?» Улар кәмәгә ултырғас, ел баҫыла.

Кәмәләгеләр Уның янына илеп: «Һин ысынлап та Алла Улы!» – тигән һүҙҙәр менән Уға баш эйә.

*МАҪҪАЙОС 14:22–33*



## Ғайса Мәсихтең йөҙ-ҡиәфәте үҙгәреүе

Бер ваҡыт Ғайса Петрусты, Яҡупты һәм уның ҡустыһы Яхъяны Үҙе менән алып, бейек тауға менә. Доға ҡылғанда Ғайсаның ҡиәфәте шәкерттәрҙең күҙ алдарында үҙгәрә: йөҙө ҡояштай балҡып китә, ә кейеме күҙҙе ҡамаштырырлыҡ төҫкә инә. Көтмәгәндә Муса менән Ильяс пәйғәмбәрҙәр пәйҙә була һәм улар Ғайса менән һөйләшә башлай. Быға иҫе киткән Петрус Ғайсаға: «Хакимыбыҙ, беҙҙең бында булғаныбыҙ ҡайһылай яҡшы! Әгәр теләһәң, өс сатыр ҡорам: береһен – Һиңә, береһен – Мусаға, береһен – Ильясҡа», – ти. Петрус был һүҙҙәрҙе әйтеп тә бөтмәй, балҡып торған болот килеп сыға ла уларҙы күләгәһе менән ҡаплай. Болот эсенән: «Был – Минең һөйөклө Улым, Ул Минең ҡыуанысым. Уны тыңлағыҙ!» – тигән тауыш ишетелә.

Был тауышты ишетеп, шәкерттәр йөҙтүбән ҡаплана, улар бик ныҡ ҡурҡа. Әммә Ғайса: «Тороғоҙ, ҡурҡмағыҙ!» – тип килеп уларға ҡағыла. Шәкерттәр, күтәрелеп ҡарағас, Ғайсанан башҡа бер кемде лә күрмәйҙәр.

Тауҙан төшкәндә Ғайса уларҙы: «Әҙәм Улы үлеп терелгәнгә тиклем, күргәнегеҙ хаҡында бер кемгә лә һөйләмәгеҙ», – тип киҫәтә.

*МАҪҪАЙОС 17:1–9; ЛУКАС 9:28–36*



## Бар нәмәне кисерә торған мөхәббәт

Бер ваҡыт Петрус Ғайсаға килеп: «Хакимым, туғанымды, әгәр ул миңә ҡаршы гонаһ ҡылһа, нисә тапҡыр ғәфү итергә тейешмен? Етегә тиклемме?» – тип һорай. Быға Ғайса: «Юҡ, етегә түгел, ә етмеш тапҡыр етегә тиклем», – тип яуап бирә һәм бер ҡисса һөйләй.

Күктәр Батшалығы бына нимәгә оҡшаш: бер батша хеҙмәтселәре менән хисаплашып ҡуйырға ниәтләгән. Аҡса хисабын асыҡлай башлағас, уның янына ун мең талант* бурысы булған бер кешене алып килгәндәр. Уның түләрлек аҡсаһы булмағас, бурысын ҡайтартыр өсөн батша уның үҙен дә, ҡатынын да, балаларын да, бөтә мөлкәтен дә һатырға әмер биргән. Был хеҙмәтсе батша алдында йөҙтүбән ҡапланып: «Аҙ ғына сабыр итеп тор инде, мин уны тулыһынса ҡайтарып бирермен», – тип ялбарған. Батша, хеҙмәтсене йәлләп, бурысын бәхилләгән һәм уны ебәргән. Хеҙмәтсе иһә, киткәс, үҙенә йөҙ тәңкә генә көмөш бурысы булған бер хеҙмәттәшен осратҡан. Ул уны боғаҙынан алып быуа башлаған. «Бурысыңды түлә!» – тип талап иткән. Тегеһе уның аяғына йығылып: «Аҙ ғына сабыр итеп тор инде, мин уны ҡайтарып бирермен!» – тигән. Әммә тегеһе, риза булмайынса, бурысын түләгәнгә тиклем уны төрмәгә ултыртҡан. Батшаның бүтән хеҙмәтселәре быны күреп бик ҡайғырған һәм хәлде хужаларына барып һөйләп биргәндәр. Шунан һуң батша теге хеҙмәтсеһен саҡыртып алып: «Яуыз хеҙмәтсе! Һин ялбарып һорағас, бөтә бурысыңды бәхилләнем. Мин шәфҡәт күрһәткән кеүек, һин дә хеҙмәттәшеңә шәфҡәт күрһәтергә тейеш инең түгелме ни?» – тигән. Асыуланған батша хеҙмәтсене, бөтә бурысын түләп бөткәнгә тиклем, язалаусылар ҡулына тапшырған. Әгәр туғанығыҙҙы ихлас күңелдән ғәфү итмәһәгеҙ, Күктәге Атам да һеҙгә ҡарата шулай эшләйәсәк.

«Күктәге Атабыҙ» тигән доғала Ғайса беҙҙе ғәфү итергә өйрәтә: «Беҙ үҙебеҙгә яҙыҡ эш ҡылғандарҙы ғәфү иткән кеүек, Һин дә беҙҙең яҙыҡ эштәребеҙҙе ярлыҡа».

*МАҪҪАЙОС 6:12; 18:21–35*

* Талант – иң ҙур аҡса берәмеге, 30 килограмм самаһы көмөшкә тиң булған.



# Изге күңелле Самария кешеһе тураһында ҡисса

Бер ҡанун белгесе Ғайсаны һынарға теләп: «Остаз, мәңгелек тормошто мираҫ итеп алыр өсөн миңә нимә эшләргә?» – тип һорай. «Ҡанунда нимә тип яҙылған?» – ти Ғайса. «Аллаң Раббыны бөтә йөрәгең, бөтә йәнең, бөтә көсөң һәм бөтә аҡылың менән ярат» һәм «Яҡыныңды үҙеңде ятраҡан кеүек ярат», – тип яуаплай ҡанун белгесе. «Дөрөҫ яуап бирҙең, шулай эшлә һәм йәшәрһең», – ти Ғайса. Ҡанун белгесе үҙен аҡларға теләп: «Ә минең яҡыным кем?» – тип һорай. Ғайса уға ҡисса менән яуап бирә:

Берәү Йәрүсәлимдән Йерихоға китеп барғанда юлбаҫарҙар ҡулына эләккән. Юлбаҫарҙар уның кейемен систереп алған һәм, туҡмап, үлем хәлендә ҡалдырып киткән. Шулай тура килгән: шул уҡ юлдан бер ҡаһин китеп барған, тик, әлеге кешене күргәс, уны урап үткән. Шулай уҡ бер леви ҙа, Алла йорто хеҙмәтсеһе, ошо ерҙән үтеп барышлай был кешене күргән, әммә ул да урап үткән. Бер Самария кешеһе лә уҙып барышлай был әҙәмгә тап булған; уны күреп, йәлләгән. Эргәһенә килеп, яраһын шарап менән йыуған, май һөртөп бәйләгән. Шунан һуң ишәгенә ултыртып, ҡунаҡханаға алып килгән, тәрбиәләгән. Ә икенсе көнөнә, юлға сығырға йыйынғанда, ҡунаҡхана хужаһына ике динар аҡса сығарып биргән дә: «Был кеше тураһында хәстәрлек күр, аҡсаны күберәк тотонорға тура килһә, ҡайтҡанда түләрмен», – тигән.

Хикәйәтен һөйләп бөткәс, Ғайса ҡанун белгесенән: «Был өсәүҙең ҡайһыныһы юлбаҫарҙар ҡулына эләккән әҙәмдең яҡыны була тип уйлайһың?» – тип һорай. «Уға шәфҡәт күрһәткәне», – тип яуаплай ҡанун белгесе. «Бар, һин дә шулай эшлә», – ти уға Ғайса.

*ЛУКАС 10:25–37*



## Ғайса – яҡшы Көтөүсе

Ғайса Атаһы Алла тарафынан Үҙ халҡы өсөн көтөүсе итеп ебәрелгән. Көтөүсе үҙенең һарыҡтарын ҡайғыртҡан кеүек, донъяны Ҡотҡарыусы Ғайса ла Үҙен бөтә йөрәге менән ҡабул иткән һәм Унының өйрәтеүҙәре буйынса йәшәгән кешеләрҙе ҡайғырта. Был хаҡта Ғайса бына нимә ти:

Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: кем һарыҡ аҙбарына ҡапҡа аша түгел, ә башҡа юл менән инә, ул – караҡ һәм юлбаҫар. Ә ҡапҡанан ингән кеше һарыҡтарға көтөүсе була. Һаҡсы уға ҡапҡа аса, һарыҡтар унының тауышын таный һәм ул, һарыҡтарын исемдәре менән саҡырып, уларҙы алып сыға. Үҙенең бөтә һарыҡтарын алып сыҡҡас, ул алдан атлай, һарыҡтары артынан эйәреп бара, сөнки унының тауышын танырйҙар. Ә ят кешегә улар эйәрмәй, тауышы таныш булмағас, унан ҡасып китәләр.

Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: Мин – һарыҡтар өсөн ҡапҡамын. Минән алда килгәндәрҙең бөтәһе лә ҡараҡ һәм юлбаҫар ине, һарыҡтар уларҙы тыңламаны. Мин – ҡапҡамын. Кем Минең аша инә, шул ҡотолор. Инер, сығыр һәм үҙенә көтөүлек табыр. Ҡараҡ ул урлау, үлтереү һәм һәләк итеү өсөн генә килә. Мин иһә уларға тормош, тулы мәғәнәһендә тормош бирергә килдем.

Мин – яҡшы көтөүсемен: яҡшы көтөүсе һарыҡтары өсөн йәнен фиҙа ҡыла. Ә ялланғаны – ысын көтөүсе түгел. Ул, һарыҡтар үҙенеке булмағанлыҡтан, уларҙы ҡайғыртмай: бүре килгәнен күреп, һарыҡтарҙы ташлап ҡаса; бүре, һөжүм итеп, һарыҡтарҙы тамаҡлап китә.

Мин – яҡшы көтөүсемен. Ата – Мине, Мин Атаны таныған кеүек, Мин Үҙемдең һарыҡтарымды танайым, улар Мине таный. Мин һарыҡтарым өсөн йәнемде фиҙа ҡылам. Минең был аҙбарҙа булмаған бүтән һарыҡтарым да бар. Уларҙы ла алып килергә тейешмен. Улар Минең тауышымды тыңлаясаҡ, һәм бер көтөү, бер көтөүсе булыр.

Атам Мине шуның өсөн ярата: Мин Үҙемдең йәнемде ҡабаттан алыу өсөн бирәм. Йәнемде Минән бер кем дә тартып алмай,



Мин уны Үҙем бирәм. Йәнемде бирергә лә, кире алырға ла хакимлығым бар. Был бойороҡто Мин Атамдан алдым.

*ЯХЪЯ 10:1–5, 7–18*

## Апалы-һеңлеле Марта менән Мәрйәм

Йәрүсәлимдән алыҫ түгел Бейт-Әниә тигән ауыл булған. Унда апалы-һеңлеле Марта менән Мәрйәм һәм уларҙың ҡустылары Әлғазар йәшәгән. Улар өсөһө лә Ғайсаны бик яратҡан һәм йыш ҡына Уны үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырып алыр булған.

Ғайса уларға бер килгәндә, Мәрйәм Уның аяҡ осона килеп ултыра ла әйткән һүҙҙәрен тыңлай башлай. Ә Марта табын әҙерләргә тотона. Уға Мәрйәмдең үҙенә ярҙам итмәүе һис оҡшамай, шуға Ғайса янына килеп: «Хакимым! Һеңлемдең миңә һалышҡанын күрмәйһеңме ни? Әйт әле уға, миңә ярҙам итһен», – тип үтенә. «Эй Марта, Марта! Һин күп нәмә тураһында хәстәрләп, ығы-зығы килеп йөрөйһөң, – ти уға Ғайса, – ә бит бары бер генә нәмә кәрәк. Мәрйәм һәйбәт өлөштө һайлаған һәм ул унан тартып алынмаҫ».

*ЛУКАС 10:38–42*



## Аҡылһыҙ бай хаҡында ҡисса

Ғайса халыҡҡа өгөт-нәсихәт биргән сағында: «Ҡомһоҙлоҡтан һаҡланығыҙ, кеше нисек кенә бай булмаһын, ғүмере байлыҡҡа бәйле түгел», – ти һәм шундай ҡисса һөйләй:

Бер байҙың баҫыуҙа игене бик уңған. Бай эстән генә: «Нимә эшләйем икән? Ашлығымды ҡайҙа һаҡларға?» – тип уйлаған. Ул шундай ҡарарға килгән: «Келәттәрҙе һүтеп, ҙурырағын һалайым да бөтә ашлығымды, бөтә байлығымды шунда йыяйым. Шунан инде үҙемә: „Минең күп йылдарға етерлек байлығым бар, йәнем ял итһен, ашаһын, эсһен, күңел асһын“, – тип әйтермен». Әммә Алла уға: «Аҡылһыҙ! Ошо төндә һинең йәнеңде аласаҡтар, йыйған байлығың кемгә ҡалыр һуң?» – тигән. Үҙе өсөн генә байлыҡ йыйған, әммә Алла алдында бай булмаған һәр кем менән шулай булыр.

Раббы йәнә ошоларҙы һөйләй: «Шулай булғас, нимә ашарбыҙ, нимә эсербеҙ тип ҡайғырмағыҙ. Ул турала был донъя кешеләре баш ҡатыра. Ә Атағыҙ һеҙҙең был нәмәләргә мохтаж икәнегеҙҙе белә. Һеҙ, киреһенсә, Алла Батшалығын эҙләгеҙ, шунда ҡалғаны ла бирелер. Эй бәләкәй көтөү, ҡурҡма! Батшалыҡты һеҙгә биреүҙе Атағыҙ яҡшы тип тапты. Мөлкәтегеҙҙе һатығыҙ ҙа ярлыларға өләшегеҙ. Үҙегеҙгә мәңге туҙмай торған янсыҡтар әҙерләгеҙ, күктәрҙә һис кәмемәҫ хазина туплағыҙ: унда ҡараҡ та теймәҫ, көйә лә төшмәҫ. Хазинағыҙ ҡайҙа булһа, күңелегеҙ ҙә шунда булыр».

*ЛУКАС 12:15–21, 29–34*



## Бай һәм Әлғазар хаҡында ҡисса

Ғайса ошондай бер ҡисса һөйләй:
Бик бай бер кеше йәшәгән. Ул зиннәтле туҡымаларҙан тегелгән кейемдәр кейгән, көн һайын ҙур-ҙур мәжлестәр үткәргән. Ә унының ҡапҡаһы төбөндә бөтә тәне һыҙлауыҡтар менән ҡапланған Әлғазар исемле фәҡир ятҡан. Ул байҙың табынынан төшкән һыныҡ-мыныҡ менән булһа ла туҡланырға ымһынған. Эттәр килеп, унының яраларын ялап киткән.

Бер көн Әлғазар үлгән һәм фәрештәләр уны Ибраһим янындағы түрҙәге урынға алып барған. Бай ҙа үлгән. Уны ерләгәндәр. Бай үлеләр донъяһында ғазап сиккән ваҡытта башын күтәреп өҫкә ҡараған һәм алыҫта ғына Ибраһимды, ә унының эргәһендә Әлғазарҙы күргән. Шул саҡта бай: «Эй атабыҙ Ибраһим! Миңә мәрхәмәтле булып, Әлғазарҙы яныма ебәр әле, ул бармаҡ осон һалҡын һыуға манып, телемде сылатып һалҡынайтһын. Мин был ялҡында шул тиклем ғазапланам», – тип ҡысҡырған. Әммә Ибраһим уға: «Улым! Иҫеңә төшөр, һин үҙ ғүмереңдә бар рәхәтлекте татының, ә Әлғазар михнәт сикте. Хәҙер инде ул бында йыуаныс күрә, ә һин ғазап сигәһең, – тигән. – Өҫтәүенә, беҙҙең менән һеҙҙең арала ҙур упҡын ята, шунлыҡтан бынан һеҙҙең яҡҡа сығырға теләүсе лә, ул яҡтан был яҡҡа сығырға теләүсе лә үтә алмаҫ». Шул саҡ бай: «Эй ата, улай булғас, зинһар өсөн, Әлғазарҙы атайымдың өйөнә ебәр. Минең биш туғаным бар, был ғазап сигеү урынына эләкмәһендәр өсөн, уларҙы иҫкәртһен», – тигән. Ибраһим уға: «Уларҙа Муса һәм башҡа пәйғәмбәрҙәрҙең яҙмалары бар. Унда яҙылғандарға ҡолаҡ һалһындар», – тип әйткән. Бай иһә: «Юҡ, Ибраһим атам. Үлгәндәрҙең береһе терелеп улар янына барһа, шул мәлдә тәүбәгә килерҙәр ине», – тигән. Ибраһим байға: «Улар Мусаны һәм башҡа пәйғәмбәрҙәрҙе тыңламайҙар икән, үлектәрҙең береһе терелеп барһа ла, ышанмаясаҡтар», – тип яуап биргән.

*ЛУКАС 16:19–31*



## Юғалған һарыҡ хаҡында ҡисса

Ғайсаны тыңларға тип барлыҡ һалым йыйыусылар һәм башҡа гонаһлы әҙәмдәр йыйыла. Фарисейҙар менән ҡанун белгестәре: «Был Кеше гонаһлыларҙы ҡабул итә, хатта улар менән бер табындан ашай», – тип һуҡрана. Ғайса уларға ошо ҡиссаны һөйләй:

Берәүҙең йөҙ һарығы булып, шуларҙың береһе юғалды, ти. Ул, туҡһан туғыҙын көтөүлектә ҡалдырып, юғалтҡан бер һарығын тапҡансы эҙләмәҫме ни? Ә инде тапҡас, ҡыуанып, уны елкәһенә һалып алып ҡайтыр. Ҡайтҡас, дуҫтары менән күршеләрен саҡырып: «Шатлығымды уртаҡлашығыҙ, мин юғалған һарығымды таптым», – тиер. Һеҙгә шуны әйтәм: шул рәүешле, тәүбә итеүгә мохтаж булмаған туҡһан туғыҙ тоғролоҡло кеше өсөн шатланыуға ҡарағанда, тәүбә иткән гонаһлы бер кеше өсөн күктә шатлыҡ ҙурыраҡ булыр.

*ЛУКАС 15:1–7*



## Юлдан яҙған ул тураһында ҡисса

Йәнә бер ҡисса һөйләй Ғайса:
Бер кешенең ике улы булған. Кинйәһе: «Атай, мөлкәттең миңә тейешле өлөшөн бүлеп бир», – тигән. Атаһы мөлкәтен улдарына бүлеп биргән.
Бер нисә көн үткәс, кинйә улы үҙ өлөшөн һатып, бөтә аҡсаһын алып, алыҫ юлға сығып киткән һәм, унда аҙып-туҙып йөрөп, булған байлығын бөтөргән. Ул бер нәмәһеҙ ҡалған, шунда был илгә ҡаты аслыҡ килгән һәм егет мохтажлыҡ кисерә башлаған. Ул ошо илдең бер кешеһенә эшкә ялланған, был кеше уны яланға сусҡа көтөргә ебәргән. Егет шул тиклем асыҡҡан, хатта сусҡаларҙың аҙығын ашарға ла риза булыр кимәлгә еткән, әммә уға уныһын да бирмәгәндәр.
Ниһайәт, ул аҡылына килеп: «Атайымдың нисәмә ялсыһы бар һәм уларҙың бөтәһе лә туйғансы ашай, ә мин бында астан үлеп барам. Хәҙер үк ҡайтайым да: „Атай, мин күктәге Алла ҡаршыһында һәм һинең алдыңда гонаһ ҡылдым. Инде һинең улың тип аталырға лайыҡ түгелмен, мине ялсы итеп эшкә ал“, – тип әйтәйем», – тип уйлаған. Шунан һуң атаһы янына ҡайтып киткән. Алыҫта килә ятҡанында уҡ атаһы уны күреп ҡалған, бик йәлләгән, ҡаршыһына йүгереп барып, ҡосаҡлап үбеп алған. Улы уға: «Атай, мин күктәге Алла ҡаршыһында һәм һинең алдыңда гонаһ ҡылдым: инде һинең улың тип аталырға лайыҡ түгелмен», – тигән. Ә атаһы үҙенең хеҙмәтселәренә: «Иң һәйбәт кейемдәр алып килеп, уны кейендерегеҙ, бармағына йөҙөк кейҙерегеҙ, аяғына ҡата бирегеҙ, һимертелгән берәй быҙауҙы салығыҙ, ашап-эсеп, күңел асайыҡ! Минең улым үлгәйне – хәҙер терелде, юғалғайны – табылды», – тигән.
Атаның өлкән улы иһә был мәлдә ҡырҙа булған. Өйөнә ҡайтып етеп килгәндә йыр һәм бейеү тауыштары ишеткән. Хеҙмәтселәрҙең береһен саҡырып: «Бында нимә бара?» – тип һораған. «Һинең ҡустың ҡайтты, һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуына ҡыуанып, атайың һимертелгән быҙау салдырҙы», – тигән уға хеҙмәтсе. Өлкән улдың быға асыуы килгән һәм өйгә инергә теләмәгән. Атаһы сығып саҡырғас: «Бына мин һиңә нисә йылдар инде хеҙмәт итәм. Бойороғоңдо бер тапҡыр ҙа үтәмәй ҡалғаным юҡ. Шулай булһа ла, дуҫтарым менән күңел асыр өсөн һин миңә



берәй тапҡыр кәзә бәрәсе лә биргәнең юҡ. Ә мал-мөлкәтеңде аҙғын ҡатындар менән туҙҙырған был улың ҡайтҡас, уның өсөн хатта һимертелгән быҙау салғанһың!» – тигән.
Атаһы уға: «Улым, һин һәр ваҡыт янымдаһың, минең булған бөтә нәмәм – һинеке. Әммә бөгөн ҡыуаныстан нисек күңел асмайһың инде: ҡустың үлгәйне – терелде, юғалғайны – табылды», – тигән.

*ЛУКАС 15:11–32*

## Махау сирле ун кеше

Йәрүсәлимгә барышлай, Ғайса Самария һәм Галилея өлкәләре араһындағы ерҙәр аша үтә. Бер ауылға ингәндә, Уға махау тигән тире ауырыуы булған ун кеше осрай. Улар, алыҫта уҡ туҡтап, көслө тауыш менән: «Ғайса, Остаз! Беҙгә мәрхәмәтле булсы!» – тип ҡысҡыра. Ғайса уларҙы күргәс: «Барығыҙ, ҡаһиндарға күренегеҙ», – ти, сөнки кешелә махау сире бармы-юҡмы икәнен тикшереү ҡаһиндарҙың вазифаһына ингән. Әлеге ун кеше китеп барғанда уҡ был ҡот осҡос сирҙән һауыға.

Махауҙан ҡотолғас, уларҙың береһе генә Ғайса янына әйләнеп килә. Ҡысҡырып Алланы данлай, рәхмәтен белдереп, Ғайсаның аяҡтарына йығыла. Ул – Самария кешеһе, ә ҡалғандары йәһүд була.

«Ун кеше таҙарынғайнығыҙ түгелме һуң? Туғыҙығыҙ ҡайҙа? Аллаға рәхмәт белдереү өсөн сит ер кешеһенән башҡалары кире килмәнеме ни?» – тип һорай Ғайса. Унан теге әҙәмгә: «Тор, юлыңда бул, һине ышаныуың һауыҡтырҙы», – ти.

*ЛУКАС 17:11–19*



## Фарисей һәм һалым йыйыусы тураһында ҡисса

Үҙенең Аллаға тоғролоҡло булыуына ихлас ышанып, башҡаларға түбәнһетеп ҡараған әҙәмдәргә Ғайса ошондай ҡисса һөйләй:

Ике кеше доға ҡылыр өсөн Алла йортона ингән: береһе – дини ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгән, хөрмәт ҡаҙанған фарисей, икенсеһе ябай халыҡты талап, Рим баҫҡынсылары файҙаһына һалым йыйыусы булған. Фарисей, тороп, былай тип доға ҡылған: «Аллам! Мин Һиңә башҡалар кеүек талаусы ла, алдаҡсы ла, зина ҡылыусы ла, йәки бына ошо һалым йыйыусы кеүек тә булмағаным өсөн рәхмәтлемен. Аҙнаһына ике тапҡыр ураҙа тотам, табышымдың ундан бер өлөшөн Һиңә бирәм».

Һалым йыйыусы иһә ситтәрәк баҫып торған һәм күккә күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймаған, ә күкрәген төйә-төйә: «Аллам, миңә, гонаһлыға, мәрхәмәтле булһаңсы!» – тип үтенгән.

Һеҙгә әйтәм, тәүгеһе түгел, ә быныһы Алла алдында аҡланып, үҙ өйөнә ҡайтып киткән; сөнки үҙен-үҙе күтәргән әҙәм – түбәнһетелер, үҙен түбәнһеткән – күтәрелер.

*ЛУКАС 18:10–14*



## Ғайсаның балаларға фатиха биреүе

Бер ваҡыт шәкерттәре Ғайсанан: «Күктәр Батшалығында иң бөйөгө кем?» – тип һорай. Ғайса, бер баланы саҡырып алып, уларҙың уртаһына баҫтыра ла: «Әгәр һеҙ, үҙгәреп, балалар кеүек булмаһағыҙ, Күктәр Батшалығына бер ҡасан да инмәйәсәкһегеҙ, – тип әйтә. – Шулай итеп, кем ошо бала кеүек үҙен түбәнселек менән тота, шул Күктәр Батшалығында иң бөйөгө булыр. Кем Минең хаҡыма ошондай бер баланы ҡабул итә, шул Мине лә ҡабул итә».

Бер мәл Ғайса янына, баштарына ҡулын ҡуйып доға ҡылһын өсөн, балаларын алып киләләр. Әммә шәкерттәр уларҙы үткәрмәй. Ғайса уларға: «Үткәрегеҙ балаларҙы, уларға Минең яныма килергә ҡамасауламағыҙ! Күктәр Батшалығы — ошондайҙарҙыҡы», – ти һәм, балаларға ҡулдарын ҡуйып, фатихаһын бирә.

*МАҪҪАЙОС 18:1–5; 19:13–15*



## Һуҡыр әҙәмдең һауығыуы

Ғайса Йерихо ҡалаһына килә. Һәр ваҡыттағыса, Уның артынан күп халыҡ эйәреп бара. Ҡаланан сыҡҡан ерҙә Бартимай исемле бер һуҡыр хәйер һорап ултыра. Һуҡырға Уның ҡылған мөғжизәләре хаҡында күп тапҡырҙар һөйләгән булалар, шуға ул, Ғайсаның үтеп барыуын ишетеп, ҡысҡыра башлай: «Дауыт улы Ғайса, мине йәлләә инде!» Күптәр Бартимайҙы тыя, өндәшмәҫкә ҡуша, әммә ул тағы ла нығыраҡ ҡысҡыра: «Дауыт Улы, мине йәлләә инде!»

Ғайса, туҡтап, уны Үҙ янына килтерергә ҡуша. Бер нисә кеше һуҡыр әҙәмгә килеп: «Ҡурҡма, һине Ғайса саҡыра», – тигәс, Бартимай тора, өҫ кейемен сисеп ташлай һәм Ғайса янына килә. «Һинең өсөн нимә эшләүемде теләйһең?» – тип һорай унан Ғайса. Һуҡыр: «Әфәндем! Күҙҙәрем күрһен ине», – тип яуаплай. Ғайса уға: «Бар! Һине ышаныуың һауыҡтырҙы», – ти. Бартимай шунда уҡ күрә башлай һәм, Алланы данлап, Ғайсаға эйәреп китә.

*МАРКУС 10:46–52; ЛУКАС 18:35-43*



## Зәкхәйостың тура юлға баҫыуы

Ғайса Йерихо ҡалаһына йәнә килә. Уны һалым йыйыусыларҙың башлығы, Зәкхәйос исемле бай бер кеше бик ныҡ күрергә теләй, ләкин, буйға тәпәш булғанлыҡтан, халыҡ араһынан бер ҙә Уны күрә алмай. Шуға, Уны күрер өсөн, алғараҡ йүгереп бара ла ҡырағай инжир ағасына менеп ултыра. Ғайса ошо урындан үтергә тейеш була. Ғайса, килеп еткәс, Зәкхәйосты күреп ҡалып: «Зәкхәйос ! Төш тиҙерәк, – ти. – Мин бөгөн һиндә ҡунаҡ булырға тейешмен». Зәкхәйос тиҙ генә ағастан төшә, Ғайсаны шатланып өйөнә алып ҡайта.

Был хәлде күреп торған барыһы ла: «Был тиклем дә гонаһлы кешегә нисек итеп ҡунаҡҡа бармаҡ кәрәк!» – тип һуҡрана башлай. Зәкхәйос Ғайсаға: «Хужам! Мөлкәтемдең яртыһын фәҡирҙәргә өләшермен, әгәр ҙә берәйһен алдаған булһам, дүртләтә ҡайтарып бирермен», – ти. «Бөгөн был өйгә ҡотолоу килде, – ти Ғайса, – был кеше лә Ибраһим нәҫеленән бит. Әҙәм Улы юғалғанды эҙләп табырға һәм ҡотҡарырға тип килде».

*ЛУКАС 19:1–10*



## Ғайсаның Әлғазарҙы терелтеүе

Йәрүсәлим янындағы Бейт-Әниә ауылында Әлғазар һәм уның Марта менән Мәрйәм исемле бер туған ҡыҙ туғандары йәшәй. Улар өсөһө лә Ғайсаның дуҫтары була. Бер ваҡыт, шәкерттәре менән генә булғанда, Ғайса апай менән һеңленән күңелһеҙ хәбәр ала: «Хакимым, Һин яратҡан Әлғазар ауырып китте». Ғайса быны ишеткәс: «Был үлемесле ауырыу түгел. Ул Алланың шөһрәтен күтәреү өсөн, Алла Улы шул сир аша шөһрәт алһын өсөн бирелгән», – тип әйтә. Ул шәкерттәре менән туҡталған ерҙә тағы ике көнгә тотҡарлана. Аҙаҡ, Әлғазарҙың үлгәнен белгәс, Бейт-Әниәгә юллана.

Ҡан туғандарын юғалтып ҡайғырған Марта менән Мәрйәмде йыуатырға тип байтаҡ йәһүд килә. Ғайсаны күргәс, Марта: «Хакимым, Һин бында булһаң, Әлғазар үлмәгән булыр ине, – тип өндәшә. – Әммә мин беләм: Алланан нимә генә һораһаң да, Ул Һиңә бирәсәк». «Әлғазар терелер, – тип яуаплай уға Ғайса һәм: – Мин – терелеү һәм тормош. Миңә ышанған кеше үлһә лә, йәшәйәсәк. Ә йәшәгән һәм Миңә ышанған һәр кем бер ҡасан да үлмәйәсәк. Һин быға ышанаһыңмы?» – тип һорай. Марта: «Эйе, Хакимым! – тип яуаплай. – Мин Һинең донъяға килергә тейеш булған Мәсих, Алла Улы икәнлегеңә ышанам».

Шунан Марта Мәрйәмде саҡыра. Ғайса, Мәрйәмдең дә, уға эйәреп килгән йәһүдтәрҙең дә илағанын күреп, Үҙе лә көйөнә. «Һеҙ уны ҡайҙа ерләнегеҙ?» – тип һорай. «Әфәндем! Әйҙә, барайыҡ, Үҙең күрерһең», – тиҙәр Уға. Ғайса Әлғазар ерләнгән мәмерйәгә килә һәм унда ингән юлға терәтеп ҡуйылған ташты алып ташларға ҡуша. Марта Уға Әлғазарҙың инде дүрт көн ҡәберҙә ятыуын иҫкәртә. Ғайса уға: «Мин һиңә: „Әгәр ҙә ышанһаң, Алланың шөһрәтен күрерһең“, – тимәгәйнемме ни?» – тип яуаплай. Мәмерйә ауыҙынан ташты ауҙарғас, Ғайса юғарыға ҡарап: «Атам! Мине ишеткәнең өсөн рәхмәт! – ти. – Мине һәр ваҡыт ишеткәнеңде беләм, ә был һүҙҙәремде бында баҫып торған кешеләр өсөн, Мине Һинең ебәргәнеңә ышанһындар өсөн әйтәм!» Шулай тигәндән һуң Ул көслө тауыш менән: «Әлғазар, тышҡа сыҡ!» – тип ҡысҡыра. Бына үлгән кеше килеп сыға. Уның аяҡ-ҡулы кәфенгә уралған, йөҙөнә битлек ябылған була.



Был мөғжизәле хәлдең шаһиты булғандан һуң, йәһүдтәрҙең күптәре Ғайсаға инана. Фарисейҙар менән ҡаһиндар иһә ошо мәлдән алып Уны үлтерергә ниәт итәләр.

*ЯХЪЯ 11:1–50, 53*

## Гонаһтары күп кисерелгән кеше нығыраҡ ярата

Шимғон исемле бер фарисей Ғайсаны ашҡа саҡыра. Ғайса уның саҡырыуын ҡабул итә һәм Шимғондоң өйөнә килә.

Ғайсаның фарисей өйөндә ашта ултырғанын белеп ҡалып, хуш еҫле май һалынған һауыт тотҡан гонаһлы бер ҡатын килеп инә. Ул ҡырын ятып ашаған Ғайсаның артында илай-илай баҫып тора, күҙ йәштәре Уның аяҡтарына тама. Ҡатын Ғайсаның аяҡтарына тамған күҙ йәштәрен сәстәре менән һөртөп, аяҡтарын үбә-үбә майлай.

Йорт хужаһы быны күреп: «Әгәр Ул пәйғәмбәр булһа, Үҙенә ҡағылған ҡатындың гонаһлы икәнен белер ине», – тип уйлай. Шул саҡ Ғайса уға: «Шимғон, Минең һиңә әйтергә теләгән һүҙем бар», – ти. «Әйт, Остаз», – ти фарисей. «Ике кешенең бер әҙәмгә бурысы булған: береһенең бирәсәге биш йөҙ динар, ә икенсеһенеке – илле. Тегеләр түләй алмағас, ул икеһен дә ғәфү итә. Нисек уйлайһың, был икәүҙең ҡайһыныһы уны нығыраҡ яратыр?» Шимғон: «Күберәк бурысы ғәфү ителгәнелер, тип фараз итәм», – тип яуаплай. «Һин дөрөҫ уйлайһың», – ти уға Ғайса.

Унан ҡатынға табан борола биреп һүҙен дауам итә: «Был ҡатынды күрәһеңме? Мин һинең өйөңә килдем, ә һин аяҡ йыуырға һыу ҙа бирмәнең. Ә ул аяҡтарымды күҙ йәштәре менән сылатты, сәстәре менән һөртөп алды. Һин Мине үбеп сәләмләмәнең, ә ул Мин бында килгәндән бирле аяҡтарымды үбеүҙән туҡтамай. Һин Минең башыма ябай май ҙа һөртмәнең, ә ул Минең аяҡтарымды хуш еҫле май менән майланы. Һиңә ни өсөн икәнлеген әйтәм: уның күп гонаһтары ғәфү ителде, шуның өсөн Миңә ҡарата мөхәббәте ҙур. Аҙ ғәфү ителгән кешенең мөхәббәте лә аҙ».

Ә ҡатынға Ғайса: «Гонаһтарың ғәфү ителде», – тип әйтә. Табын артындағылар бер-береһенә: «Кем Ул? Ул хатта гонаһтарҙы ғәфү итә», – тиешә. «Һине ышаныуың ҡотҡарҙы, имен йөрө», – ти ҡатынға Ғайса.

*ЛУКАС 7:37–50*



## Ғайсаның Йәрүсәлимгә инеүе

Йәрүсәлимгә китеп барғанда Ғайса Үҙенең шәкерттәре менән Зәйтүн тауы янында урынлашҡан Бейт-Фаге һәм Бейт-Әниә ауылдарына килеп етә. Ул ике шәкертен алдан ебәрә. «Ҡаршылағы ауылға барығыҙ, – ти уларға. – Барып ингәс тә бәйле торған инә ишәк менән йәш ишәкте күрерһегеҙ. Уларҙы ысҡындырып, Миңә алып килегеҙ. Әгәр берәйһе ни ҙә булһа әйтһә, уға: „Улар Хужаға кәрәк“, – тип яуап бирегеҙ. Ул ишәктәрҙе шунда уҡ биреп ебәрер».

Шәкерттәре барыһын да Ғайса ҡушҡанса эшләй. Йәш ишәкте алып килеп, өҫ кейемдәрен уның өҫтөнә һалғас, Ғайса уға менеп ултыра. Йәрүсәлимгә етеп килгәндә уны әллә күпме халыҡ ҡаршы алырға сыға. Юлға өҫ кейемдәрен сисеп түшәйҙәр, хөрмә ботаҡтарын һындырып һалалар. «Дауыт Улына һосанна*! Раббы исеме менән Килеүсе мөбәрәк булһын! Бейек күктәрҙә һосанна!» – тип ҡысҡыралар.

Ғайса Йәрүсәлимгә ингәс, бөтә ҡала хәрәкәткә килә, бер-береһенән: «Кем был?» – тип һораша башлайҙар. Уға дан йырлаусылар: «Был Ғайса, Галилеялағы Назаранан килгән пәйғәмбәр», – тип яуаплай. Күптәр Уның Әлғазарҙы терелтеүе һәм башҡа бик күп мөғжизәләр ҡылыуы тураһында һөйләп бирә. Шунда фарисейҙар үҙ-ара: «Күрәһегеҙме, ҡулыбыҙҙан бер нәмә лә килмәй. Бөтә кеше Уға эйәрә», – тиешә. Шунан улар Ғайсаға: «Шәкерттәреңде тый, Һине данлауҙан туҡтаһындар!» – тиҙәр. Ғайса иһә: «Һеҙгә шуны әйтәм: улар тымһа, таштар ҡысҡыра башлаясаҡ», – тип яуаплай.

*МАҪҪАЙОС 21:6–11; МАРКУС 11:1-10; ЛУКАС 19:39–40; ЯХЪЯ12:14-19*

* Һосанна – «Ҡотҡар беҙҙе!» тигәнде аңлата.



## Ғайсаның Йәрүсәлим өсөн илауы

Ғайса Үҙен ҡабул итмәгән Йәрүсәлим өсөн ҡайғырған. Бындағы һәр таш аҡыл эйәләре һәм пәйғәмбәрҙәр, булып уҙған һуғыштар һәм кисерелгән бәхетһеҙлектәр, уҡылған доғалар һәм бағланған өмөттәр тураһында әллә күпме нәмә һөйләй алыр ине. Йәрүсәлим бик оҙаҡ Ҡотҡарыусыһын көтә. Тик, ниһайәт, көтөп алғас, Уны танымай:

Эй Йәрүсәлим! Пәйғәмбәрҙәрҙе үлтереүсе, Алла тарафынан үҙенә ебәрелгәндәрҙе таш бәреп һәләк итеүсе Йәрүсәлим! Ҡош үҙенең ҡошсоҡтарын ҡанат аҫтына йыйған кеүек, Мин дә һинең балаларыңды нисәмә тапҡыр бергә йыйырға теләнем, ләкин һеҙ килергә теләмәнегеҙ! Хәҙер һеҙҙең Изге йортоғоҙ буш ҡаласаҡ. Һеҙгә әйтәм: «Раббы исеме менән Килеүсе мөбәрәк!» – тип әйтер ваҡытығыҙ етмәй тороп, Мине күрмәйәсәкһегеҙ!

Һәм бына, Ғайса Йәрүсәлимгә яҡынлаша, уға ҡарап, уның яҙмышы өсөн йәне һыҡтай:

Исмаһам бөгөн үҙ именлегең өсөн нимә кәрәклеген белһәң ине! Әммә был әлегә һинең күҙҙәреңдән йәшерелгән. Шундай көндәр килер: дошмандарың тирә-яғыңа тупраҡ өйөп, һине ҡамап алыр һәм һәр яҡлап ҡыҫырыҡлар. Һине емерерҙәр, һиндә йәшәгән кешеләрҙе ҡырырҙар, таш өҫтөндә таш ҡалдырмаҫтар, сөнки һин яныңа Алла килеп ҡотҡарған ваҡытты белмәнең.

*ЛУКАС 13:34–35; 19:41–44*



## Йөҙөм үҫтереүселәр хаҡында ҡисса

Ғайса баш ҡаһиндарға һәм фарисейҙарға ҡисса һөйләй: «Ер биләүсе бер кеше булған. Ул йөҙөм баҡсаһы ултыртҡан, ҡойма менән уратып алған, йөҙөм иҙеү өсөн һыҡҡыс ҡаҙыған, ҡарауыл манараһы төҙөп ҡуйған һәм, баҡсаны йөҙөм үҫтереүселәргә ҡалдырып, ситкә сығып киткән.

Емеш йыйыр ваҡыт еткәс, уңышынан үҙ өлөшөн алырға тип, хеҙмәтселәрен ебәргән. Йөҙөм үҫтереүселәр хеҙмәтселәрен тотоп, ҡайһыһын туҡмап, ҡайһыһын үлтереп, ҡайһыларын таш менән бәргесләгән. Хужа тағы ла күберәк хеҙмәтселәрен ебәргән, әммә улар менән дә шундай уҡ хәл ҡабатланған.

Ахырҙа: „Улыма хөрмәт күрһәтерҙәр“, – тип уйлап, улын ебәргән. Әммә йөҙөм үҫтереүселәр, уның улын күргәс, бер-береһенә: „Был – вариҫ бит. Әйҙәгеҙ, уны үлтерәйек, уға ҡала торған мираҫ беҙҙеке булыр“, – тип һөйләшкәндәр. Уны тотоп, йөҙөм баҡсаһынан тышҡа сығарып үлтергәндәр. Әйләнеп ҡайтҡас, баҡса хужаһы был йөҙөм үҫтереүселәрҙе нимә эшләтер?» Баш ҡаһиндар һәм фарисейҙар: «Уларҙы яуызлыҡтары өсөн ҡот осҡос үлемгә дусар итер һәм баҡсаны башҡа йөҙөм үҫтереүселәргә бирер. Улары хужаға тейешле өлөштө ваҡытында биреп барыр», – тип яуап ҡайтара.

«Ә һеҙ Изге Яҙмала: „Төҙөүселәр яраҡһыҙ тип ташлаған таш иң мөһим мөйөш ташы булды. Был Раббы тарафынан эшләнде – күҙ алдыбыҙҙағы ғәжәйеп хәл“, – тигәнде бер ваҡытта ла уҡыманығыҙмы ни? – ти Ғайса. – Шуға күрә һеҙгә әйтәм: Алла Батшалығы, һеҙҙән тартып алынып, уның емешен килтергән халыҡҡа биреләсәк. Был таш өҫтөнә йығылған һәр кем селпәрәмә киләсәк, ә инде таш кемдең өҫтөнә төшә, шуны иҙәсәк».

Баш ҡаһиндар һәм фарисейҙар, Ғайсаның ҡиссаларын тыңлап, Уның үҙҙәре тураһында һөйләгәнен аңлай. Улар Ғайсаны ҡулға алырға теләй, әммә халыҡтан ҡурҡа, сөнки халыҡ Ғайсаны пәйғәмбәр тип һанай.

*МАҪҪАЙОС 21:33-46*



## «Саҡырылғандар күп, ләкин һайлап алырлыҡтары аҙ»

Бер ваҡыт Ғайса бер фарисейҙың өйөнә килә. Ундағы ҡунаҡтарҙың күплеген күреп, хужаға: «Төшкө йәки киске ашҡа ҡунаҡ саҡыраһың икән, дуҫтарыңды ла, ағай-энеңде лә, туғандарыңды ла, бай күршеләреңде лә йыйма. Юҡһа улар ҙа һине үҙҙәренә ашҡа саҡырыр һәм шуның менән яҡшылығың кире ҡайтарылыр. Табын йыяһың икән, фәҡирҙәрҙе, ғәриптәрҙе, аҡһаҡтарҙы, һуҡырҙарҙы саҡыр, ул саҡта инде һин бәхетле булырһың, сөнки улар һиңә ҡайтарып түләй алмай, ә тәҡүә кешеләр үленән тереләсәк көндө һиңә әжере ҡайтарылыр», – тип әйтә.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, ундағы кешеләрҙең береһе Уға: «Алла Батшалығындағы табындан ашаясаҡ кеше бәхетле!» – ти. Ғайса уға ҡисса менән яуап бирә:

Бер кеше, мул табын әҙерләп, күп ҡунаҡ саҡырған. Ашар мәл еткәс, ҡунаҡтарға: «Килегеҙ, табын әҙер инде», – тип әйтергә үҙенең хеҙмәтсеһен ебәргән. Бөтәһе лә, һүҙ ҡуйышҡан кеүек, ғәфү үтенә башлаған. Беренсеһе: «Ер һатып алғайным, шуны барып ҡарарға кәрәк, зинһар, мине ғәфү ит», – тигән. Икенсеһе: «Биш пар эш үгеҙе һатып алғайным, уларҙы һынап ҡарарға барам, зинһар, мине ғәфү ит», – тигән. Өсөнсөһө: «Мин өйләндем, шуның өсөн бара алмайым», – тигән.

Хеҙмәтсе, ҡайтҡас, был хаҡта хужаһына һөйләп биргән. Хужа асыуланған да: «Бар, йәһәт кенә ҡала майҙандарынан һәм тыҡрыҡтарҙан фәҡирҙәрҙе, ғәриптәрҙе, һуҡырҙарҙы һәм аҡһаҡтарҙы йыйып алып ҡайт», – тип хеҙмәтсеһен сығарып ебәргән. Хеҙмәтсе әйләнеп ҡайтҡас: «Хужам, һинең әмерең үтәлде, әммә буш урындар ҡалды әле», – тигән. Хужа хеҙмәтсеһенә: «Бар, ҡала ситендәге юлдарға сығып, кешеләрҙе бында килергә күндер, өйөм тулы ҡунаҡ булһын, – тип бойорған. – Һеҙгә шуны әйтәм: тәүге саҡырылғандарҙың береһе лә минең табынымдағы ризыҡты ауыҙ итә алмаҫ. Сөнки саҡырылғандар күп, ләкин һайлап алырлыҡтары аҙ».

*ЛУКАС 14:12–24; МАҪҪАЙОС 22:14*



## Ҡайсарҙыҡын – ҡайсарға, Алланыҡын – Аллаға

Ҡанун белгестәре менән фарисейҙар, Ғайсаны бәхәскә ылыҡтырып, Уны ғәйепләрлек сәбәп табырға тырышҡан. Ошо ниәт менән үҙҙәренең шәкерттәрен ебәрәләр. «Остаз, – ти улар, – беҙ Һинең ғәҙел булыуыңды һәм ысындан да Алла юлына өйрәтеүеңде беләбеҙ. Һин кешеләрҙең кемлегенә ҡарамайһың һәм бер кемгә лә ярарға тырышмайһың. Шулай булғас, әйт әле беҙгә: нисек уйлайһың, ҡайсарға һалым түләү дөрөҫмө, әллә юҡмы?»

Фарисейҙар Ғайсаға бына шундай хәйләле һорау бирә. Әгәр Ул, ҡайсарға һалым түләргә кәрәк, тип яуап бирһә, Уны Исраил мәнфәғәттәренә хыянат итеүҙә һәм Рим хөкүмәтенә булышлыҡ итеүҙә ғәйепләрҙәр ине. Әгәр, һалым түләргә ярамай, тиһә, Уны Римға ҡаршы фетнә күтәреүҙә ғәйепләрҙәр ине.

Ғайса, уларҙың мәкерле ниәтен аңлап: «Ниңә һеҙ Миңә тоҙаҡ ҡораһығыҙ, ике йөҙлөләр? Һалымды ниндәй аҡса менән түләйһегеҙ, шуны Миңә күрһәтегеҙ әле», – ти. Уға көмөш тәңкә алып килеп бирәләр. Ғайса уларҙан: «Бында кемдең һүрәте төшөрөлгән һәм исеме яҙылған?» тип һорай. «Ҡайсарҙыҡы», – тип яуап бирә фарисейҙар. Шунан һуң Ғайса: «Улайһа, ҡайсарҙыҡын – ҡайсарға, ә Алланыҡын Аллаға бирегеҙ», – тип ҡуша. Уның яуабын ишеткәс, хайран ҡалалар һәм китеп баралар.

Шунан һуң Ғайса халыҡҡа һәм Үҙенең шәкерттәренә былай ти: «Муса урынын фарисейҙар һәм ҡанун белгестәре биләп алды. Шуға күрә уларҙы тыңлағыҙ һәм ҡушҡандарын үтәгеҙ, ләкин ҡылғандарын ҡабатламағыҙ, сөнки улар бер төрлө һөйләй, икенсе төрлө эшләй. Улар күтәргеһеҙ ауыр йөктәрҙе кешеләрҙең иңенә һала, ә үҙҙәре уны ҡуҙғатып ебәрер өсөн бармаҡ та ҡыбырлатмай. Нимә генә башҡарһалар ҙа, кешеләр күрһен, тип эшләйҙәр».

*МАҪҪАЙОС 22:15–22; 23:1–5*



## «Беренсе һәм иң мөһим бойороҡ»

Бер ваҡыт Ғайса янына ҡанун уҡытыусыларының береһе килә. «Остаз, – ти ул, – ҡанундағы бойороҡтарҙың ҡайһыһы иң мөһиме?» Ғайса уға: «„Аллаң Раббыны бөтә йөрәгең, бөтә йәнең һәм бөтә аҡылың менән ярат“, – тип яуап бирә. – Был беренсе һәм иң мөһим бойороҡ. Икенсеһе лә шундай уҡ: „Яҡыныңды үҙеңде яратҡан кеүек ярат“. Бөтә ҡанун һәм пәйғәмбәрҙәрҙең һүҙҙәре ошо ике бойороҡҡа нигеҙләнгән».

*МАҪҪАЙОС 22:36–40*



## Ярлы тол ҡатын һалған ике баҡыр тин

Бер ваҡыт Ғайса Алла йортонда: «Ҡанун белгестәренән һаҡ булығыҙ. Улар халыҡтан сәләмләү ҡабул итергә, ғибәҙәтханаларҙа һәм мәжлестәрҙә иң түрге урындарҙа ултырырға ярата. Тол ҡатындарҙың йорттарын үҙҙәренә ала, кешеләр күрһен тип, оҙаҡ итеп доға ҡыла. Ундайҙарҙы айырыуса ҡаты хөкөм көтә», – тип өйрәтә.

Шунан һуң Ғайса, саҙаҡа һандығы ҡаршыһына ултырып, килгән кешеләрҙең унда аҡса төшөргәнен күҙәтә. Улар араһында аҡсаһын йәлләмәгән байҙар күп кенә була. Ярлы ғына бер ҡатын да ике ваҡ баҡыр аҡса һалып китә.

Ғайса, шәкерттәрен саҡырып, уларға: «Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: был ярлы тол ҡатын саҙаҡа һандығына бөтәһенән дә күберәк һалды. Тегеләрҙең барыһы ла үҙҙәренән артҡанды һалды, ә ул, ярлы булыуына ҡарамаҫтан, үҙендә булғандың бөтәһен – йәшәү өсөн кәрәк булғанын һалды», – ти.

*МАРКУС 12:38–44*



## Ғайсаның киләсәк тураһында әйткән һүҙҙәре

Изге Яҙманың күп урындарында Мәсихтең килеүе һәм бөтә донъяла Алла Батшалығының урынлашыуы тураһында бәйән ителә. Мәсих дан һәм шөһрәткә күмелеп килергә тейеш, әммә был донъялағы яуызлыҡ Уға алышһыҙ ғына юл бирмәйәсәк. Шуға күрә, яуызлыҡ тулыһынса еңелгәнгә тиклем, байтаҡ бәлә-ҡаза буласаҡ әле. Был турала Ғайса Үҙенең шәкерттәрен бер нисә тапҡыр иҫкәртә:

Һаҡ булығыҙ, берәйһе һеҙҙе алдап ҡуймаһын! Күптәр: «Мин – Мәсих», – тип Минең исемем менән килеп, бик күптәрҙе юлдан яҙҙырыр. Һеҙ яҡындағы һуғыш тауыштарын һәм алыҫтағы яу хәбәрҙәрен ишетерһегеҙ. Ҡарағыҙ уны, ҡурҡмағыҙ! Шулай булырға тейеш, ләкин был ахыры түгел әле. Халыҡ – халыҡҡа һәм батшалыҡ батшалыҡҡа ҡаршы күтәрелер, урыны-урыны менән аслыҡ һәм ер тетрәүҙәр булыр, әммә быларҙың барыһы ла тулғаҡ тотоу ғазаптарының башы ғына. Ул ваҡытта һеҙҙе яфаларҙар, үлтерерҙәр, бөтә халыҡтар ҙа Минең арҡала һеҙгә нәфрәт менән ҡарар. Шул саҡта күптәр имандан ваз кисер, бер-береһенә хыянат итер һәм бер-береһен дошман күрер. Күп ялған пәйғәмбәрҙәр баш ҡалҡытып, күптәрҙе юлдан яҙҙырыр. Яуызлыҡ артыу арҡаһында, байтаҡтарҙың мөхәббәте һыуыныр. Ләкин ахырғаса сыҙаған кеше ҡотоласаҡ. Барса халыҡтар Алла Батшалығы тураһындағы ошо Һөйөнөслө Хәбәрҙе ишетһен өсөн, ул бөтә донъяла иғлан ителер. Ана шунан һуң аҙағы килер.

Ялған мәсихтәр һәм ялған пәйғәмбәрҙәр баш ҡалҡытыр. Улар, әгәр булдыра алһалар, хатта һайлап алынғандарҙы юлдан яҙҙырыу өсөн иҫ киткес хикмәттәр һәм мөғжизәләр күрһәтер. Һәм ул көндәрҙәге афәттән һуң ҡояш ҡарайыр, ай нурын сәсмәҫ, күктән йондоҙҙар ҡойолор һәм күк көстәре тетрәр. Шул мәлдә күктә Әҙәм Улының билдәһе күренер һәм ерҙәге бөтә халыҡтар ҡайғырып илар. Улар Әҙәм Улының болоттар өҫтөндә ҡөҙрәт һәм бөйөк балҡыш менән килгәнен күрер. Күк менән ер юҡҡа сығыр, әммә Минең һүҙҙәрем юҡҡа сыҡмаясаҡ. Ул көндөң һәм ул сәғәттең ҡасан килерен хатта күктәге фәрештәләр ҙә белмәй. Был хаҡта бары тик Ата ғына белә. Шуға күрә уяу булығыҙ! Хакимығыҙҙың ҡайһы көндә ҡайтыры һеҙгә билдәһеҙ бит.

*МАҪҪАЙОС 24:3–14, 24–31, 35-36, 42*



## Ун ҡыҙ тураһында ҡисса

Ғайса Үҙенең хикәйәттәрендә һәр ваҡыт уяу булыуҙы һәм Әҙәм Улы ҡаршыһына баҫырға әҙер тороуҙы тасуирлаған. Уларҙы заман ахыры тураһында пәйғәмбәрлек иткәндән һуң һөйләгән. Үҙенең шундай хикәйәттәренең береһендә аңғармаҫтан киләсәк Күктәр Батшалығын Ғайса кейәү егетенә оҡшата. Кейәү егетен, йола буйынса, кәләштең әхирәттәре яҡтыртҡыстар тотоп ҡаршы алырға тейеш була.

Күктәр Батшалығы ул ваҡытта ҡулдарына яҡтыртҡыс тотоп кейәү ҡаршыларға сыҡҡан ун ҡыҙға оҡшаш булыр. Ҡыҙҙарҙың бишеһе – алйот, бишеһе иһә аҡыллы булған. Алйоттары яҡтыртҡыстар алған, ә улар өсөн май алмаған. Аҡыллылары иһә яҡтыртҡыстар менән бергә һауыттарҙа май ҙа алған. Кейәү тотҡарланыу арҡаһында ҡыҙҙар ойоп киткән һәм йоҡоға талған.

Төн уртаһында: «Кейәү килә, ҡаршы алырға сығығыҙ!» – тип ҡысҡырған тауыш ишетелгән. Шунда бөтә ҡыҙҙар уянып, яҡтыртҡыстарын рәтләргә тотонған. Алйоттары аҡыллы ҡыҙҙарға: «Беҙҙең яҡтыртҡыстарыбыҙ һүнә, әҙерәк май бирегеҙ әле», – тип үтенгән. Ә аҡыллылары: «Юҡ, беҙҙең май бөтәбеҙгә лә етмәҫ. Иң яҡшыһы, һатыусыларға барып, үҙегеҙгә май һатып алығыҙ», – тип яуап биргән. Әммә, тегеләр май артынан барып йөрөгән арала, кейәү килеп еткән. Уны ҡаршыларға әҙер торған ҡыҙҙар кейәү менән бергә туй мәжлесенә инеп киткән һәм арттарынан ишек ябылған.

Май алырға киткән ҡыҙҙар килеп етеп: «Әфәндем, әфәндем, беҙгә ишек ас!» – тип үтенгән. Ләкин ул: «Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: мин һеҙҙе белмәйем», – тип яуап ҡайтарған.

Шуға күрә уяу булығыҙ: һеҙ бит Әҙәм Улының килер көнөн дә, сәғәтен дә белмәйһегеҙ.

*МАҪҪАЙОС 25:1–13*



# Ғайса – ысын йөҙөм ағасы

Ғайса Үҙенең шәкерттәренә былай тип һөйләй:

Мин – ысын йөҙөм ағасы, Атам – йөҙөм үҫтереүсе. Ул Миндәге емеш бирмәй торған һәр ботаҡты киҫеп ташлай, ә емеш бирерҙәйҙәрен, уңыш мулыраҡ булһын тип, таҙарта. Минең еткергән һүҙем аша һеҙ инде таҙарындығыҙ. Мин һеҙҙә йәшәгән кеүек, һеҙ ҙә Миндә йәшәгеҙ. Йөҙөм ағасында булмаған ботаҡ үҙенәнүҙе емеш бирә алмаған кеүек, Миндә булмаһағыҙ, һеҙ ҙә бирә алмаҫһығыҙ. Мин – йөҙөм ағасы, ә һеҙ – ботаҡтар. Кем Миндә йәшәй һәм Мин унда йәшәйем – шул ғына күп емеш бирер. Минән башҡа бер нәмә лә эшләй алмаҫһығыҙ. Кемдәр Миндә йәшәмәй, уларҙы ағас ботағы кеүек ҡырҡып ырғыталар һәм улар ҡорой. Ундай ботаҡтарҙы йыйып, утҡа ташлап яндыралар. Ә инде Миндә йәшәһәгеҙ һәм Минең һүҙҙәрем һеҙҙә йәшәһә, ул саҡта теләгәнегеҙҙе һорағыҙ, һәм һеҙгә бөтәһе лә бирелер.

Атам Мине яратҡан кеүек, Мин дә һеҙҙе яраттым. Минең мөхәббәтемдә йәшәгеҙ. Мин Атамдың ҡушҡандарын үтәп, Уның мөхәббәтендә йәшәйем, һәм һеҙ ҙә, ҡушҡандарымды үтәһәгеҙ, Минең мөхәббәтемдә йәшәрһегеҙ. Һеҙгә бойороғом шул: берберегеҙҙе яратығыҙ!

Әгәр ҙә донъя һеҙгә нәфрәтләнә икән, иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ул, һеҙҙән элек, Миңә нәфрәтле. Был донъяныҡы булһағыҙ, ул һеҙҙе үҙенекеләре кеүек итеп яратыр ине. Ләкин һеҙ был донъяныҡы түгел, Мин һеҙҙе, һайлап алып, был донъянан айырҙым, шунлыҡтан донъя һеҙгә нәфрәтләнде. Мине эҙәрләгәндәр икән, һеҙҙе лә эҙәрләрҙәр. Минең һүҙемде тотһалар, һеҙҙекен дә тоторҙар. Улар быларҙың барыһын да Минең исемем хаҡына эшләр, сөнки Мине Ебәргәнде белмәйҙәр. Мин, донъяға килеп, уларға һөйләмәгән булһам, ғәйепле булмаҫтар ине, ә хәҙер ғәйептән аҡланыр саралары юҡ. Миңә нәфрәтле кеше Минең Атама ла нәфрәтле.

*ЯХЪЯ 15:1–7, 9–10, 17–23*



## Ҡотҡарылыу байрамы ашы

Ҡотҡарылыу байрамы килеп еткәс, Ғайса: «Барығыҙ, беҙгә Ҡотҡарылыу байрамы ашын әҙерләгеҙ», – тип, Петрус менән Яхъяны ҡалаға ебәрә. Тегеләр: «Ашты ҡайҙа әҙерләйек?» – тип һорағас: «Ҡалаға ингән саҡта һеҙгә һыулы көршәк күтәргән кеше осрар. Уның артынан эйәреп барып, ул ингән өйгә инегеҙ. Өй хужаһына: „Остазыбыҙ, шәкерттәрем менән Ҡотҡарылыу байрамы ашын Мин ҡайһы бүлмәлә ашармын икән, тип һорай", – тип әйтегеҙ. Ул һеҙгә өҫкө ҡатта әҙерләнгән ҙур бүлмәне күрһәтер, ашты шунда яраштырығыҙ», – тигән. Шәкерттәр, барыһын да Ғайса әйткәнсә табып, байрам ашын әҙерләй.

Ваҡыт килеп еткәс, Ғайса ун ике шәкерте менән ашарға ултыра. Ғайса уларға: «Ғазап сиккәнгә тиклем ошо Ҡотҡарылыу байрамы табынында һеҙҙең менән бергә ашарға теләгем бик ҙур ине, – ти. – Һеҙгә әйтәм: был байрам ашы Алла батшалығында тулы мәғәнәгә эйә булғанға тиклем, Мин уны ашамаясаҡмын». Шунан ҡулына кәсә алып шөкөр итә лә һүҙен дауам итә: «Быны алығыҙ ҙа үҙ-ара бүлешеп эсегеҙ. Һеҙгә әйтәм: Алла батшалығы килгәнгә тиклем, Мин йөҙөм шарабы эсмәйәсәкмен».

Ғайса ҡулына икмәк алып шөкөр итә лә уны һындырып: «Был – Минең һеҙҙең өсөн ҡорбанға бирелә торған тәнем. Минең иҫтәлегемә шулай эшләгеҙ», – тип шәкерттәренә өләшеп бирә. Киске аштан һуң да Ғайса кәсә ала ла былай ти: «Был кәсә – Минең һеҙҙең өсөн түгелә торған ҡаным менән раҫланған яңы килешеү».

*ЛУКАС 22:8–20*



## Киске аш ваҡытындағы әңгәмә

Киске аш ваҡытында Ғайса урынынан тора ла биленә таҫтамал урай, тасҡа һыу ҡойоп, шәкерттәренең аяғын йыуа, таҫтамал менән һөртә башлай. Сират Шимғон Петрусҡа еткәс, Петрус: «Хакимым! Һинме минең аяҡтарымды йыуаһың?» – тип хайран ҡала. «Һин Минең нимә эшләүемде әлегә аңламайһың, әммә аҙағыраҡ төшөнөрһөң», – тип яуап бирә уға Ғайса.

Шәкерттәренең аяҡтарын йыуып бөткәс, Ғайса уларҙан: «Һеҙҙең өсөн нимә эшләгәнемде аңлайһығыҙмы? – тип һорай. – Һеҙ Мине Остаз һәм Хаким тип атайһығыҙ – һеҙ дөрөҫ әйтәһегеҙ. Әгәр ҙә Мин, һеҙҙең Хакимығыҙ һәм Остазығыҙ, аяҡтарығыҙҙы йыуғанмын икән, һеҙ ҙә бер-берегеҙҙең аяҡтарын йыуырға тейешһегеҙ. Мин һеҙгә үрнәк күрһәттем. Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: хеҙмәтсе үҙенең хужаһынан ҙурыраҡ түгел, ебәрелгән кеше лә үҙен ебәреүсенән ҙур түгел. Һеҙ хәҙер быны беләһегеҙ һәм, белгәнегеҙҙе үтәһәгеҙ, бәхетле булырһығыҙ. Мин бөтәгеҙ тураһында ла әйтмәйем. Кемдәрҙе һайлап алғанымды беләм, ләкин Изге Яҙмала: „Минең менән бергә икмәк ашаған кеше Миңә ҡаршы баш күтәрҙе“, – тип яҙылған һүҙҙәр тормошҡа ашырға тейеш».

Был һүҙҙәрҙән һуң Ғайса эске бер тулҡынланыу менән: «Һеҙгә хаҡ һүҙ әйтәм: арағыҙҙан берегеҙ Миңә хыянат итәсәк», – ти. Шәкерттәре, Уның кем хаҡында һөйләүен аңламайынса, бер-береһенә ҡарашып ала. Уларҙың береһе: «Хакимым! Ул кем?» – ти, Ғайсаға нығыраҡ яҡынайып. «Мин бер һыныҡ икмәкте манып кемгә бирәм, шул», – тип яуаплай Ғайса һәм, бер һыныҡ икмәкте ашына манып, Шимғон Искариот улы Йәһүҙәгә һона. Йәһүҙә икмәкте ала ла шунда уҡ тышҡа сығып китә; ә тышта төн була инде.

Ул сыҡҡандан һуң Ғайса: «Балаларым! Һеҙгә яңы бойороҡ бирәм: бер-берегеҙҙе яратығыҙ. Мин һеҙҙе нисек яратҡан булһам, һеҙ ҙә бер-берегеҙҙе шулай яратығыҙ. Бер-берегеҙҙе яратһағыҙ, һеҙҙең Минең шәкерттәрем икәнегеҙҙе барыһы ла белер», – ти.

Шунан һуң Ғайса ошо төндә уларҙың барыһының да Унан ситләшәсәге тураһында әйтә. Әммә Петрус: «Бөтәһе лә Һине ташлап киткән хәлдә лә, мин бер ҡасан да ташламам!» – тип ҡаршы



төшә. Ләкин Ғайса: «Һиңә хаҡ һүҙ әйтәм: ошо төндә, таң әтәсе ҡысҡырғанға тиклем, һин Мине өс тапҡыр инҡар итәсәкһең», – тип яуаплай.

*МАҪҪАЙОС 26:33–34; ЯХЪЯ 13:4–35*

## Геҫшемани баҡсаһында ҡылынған доға

Шул уҡ төндә, киске ашты ашап алғандан һуң, Ғайса Үҙенең ун бер шәкерте менән Геҫшемани тип аталған урынға килә. Баҡсаға ингәс, Ғайса шәкерттәренә: «Һеҙ ошонда тороп тороғоҙ, ә Мин арыраҡ барып доға ҡылайым», – ти. Үҙе менән Петрусты, Яҡупты һәм Яхъяны ла эйәртә. Ғайсаның күңелен хәүеф һәм тәрән һағыш солғап ала. «Күңелемде үлемесле ҡайғы баҫты. Һеҙ ошонда тороп тороғоҙ, Минең менән бергә уяу булығыҙ», – ти Ул шәкерттәренә.

Уларҙан әҙ генә ситкәрәк китеп тубыҡлана ла доға ҡыла башлай: «Атам! Мөмкин булһа, был ғазап туҫтағы Мине урап үтһен ине! Шулай ҙа Мин түгел, Һин теләгәнсә булһын». Шунда күктән бер фәрештә төшөп, Ғайсаға ҡеүәт өҫтәй. Ғазап эсендә тартҡылашып, Ул айырыуса тырышыбыраҡ доға ҡыла. Унан аҡҡан тир ҡан тамсылары кеүек ергә тама.

Әйләнеп килгәндә, шәкерттәре йоҡлап ятҡан була. Уларҙы уятып: «Минең менән бергә бер генә сәғәт тә уяу ултыра алманығыҙмы ни? – ти. – Уяу булығыҙ, һынауға дусар булмаҫ өсөн, доға ҡылығыҙ. Рух ҡеүәтле, ә тән көсһөҙ».

Ситкәрәк китеп, Ул йәнә доға ҡыла: «Атам! Әгәр Миңә был туҫтаҡты эсмәйенсә үткәреү мөмкин түгел икән, Һинең ихтыярыңса булһын». Был – Ғайсаның беҙҙең гонаһтарыбыҙ өсөн кисерергә тейеш булған ғазаптары тураһында әйтеүе була.

*МАҪҪАЙОС 26:36–44; ЛУКАС 22:39–46*



## Ғайсаны ҡулға алыу

Ғайса шәкерттәре янына өс тапҡыр килеп китә, өсөһөндә лә улар йоҡлап ятҡан була. Һуңғы тапҡырында уларға: «Һеҙ һаман йоҡлайһығыҙмы ни? Бына, ваҡыт килде. Әҙәм Улы гонаһлылар ҡулына тотоп биреләсәк! Ана, Миңә хыянат итеүсе килә», – ти.

Быларҙы әйткән саҡта, ҡапыл ун ике шәкерттең береһе – Ғайсаны утыҙ көмөш тәңкәгә баш ҡаһиндар ҡулына тапшырырға ризалашҡан Йәһүҙә күренә. Уның менән бергә, ҡылыстар һәм суҡмарҙар күтәреп, баш ҡаһиндар һәм халыҡ аҡһаҡалдары ебәргән күп һанлы кешеләр төркөмө килеп етә. Хыянатсы Йәһүҙә: «Мин кемде үбәм, шул Ғайса булыр. Уны тотоғоҙ», – тип улар менән алдан уҡ һүҙ беркетеп ҡуйған була. Шуға Ғайса янына килеп: «Һаумы, Остаз!» – тип Уны үбеп ала. Ғайса унан: «Ниндәй ниәт менән килгән булһаң, шуны ҡыл, дуҫым! Һин үбеп Әҙәм Улына хыянат итәһеңме ни?» – тип һорай. Шунан Ғайса Йәһүҙә менән килгән ғәскәриҙәргә өндәшә: «Кемде эҙләйһегеҙ?» Тегеләр: «Назаралы Ғайсаны», – тип яуаплай. «Ул – Мин», – ти Ғайса. Быны ишеткәс, ғәскәриҙәр артҡа сигенеп, ергә йығылып китә. Ғайса уларға былай ти: «Һеҙ ни өсөн Мине торорға ҡылыс һәм суҡмарҙар күтәреп киләһегеҙ? Юлбаҫармы ни Мин? Көн һайын Алла йортонда һеҙҙе өйрәтеп ултырҙым. Һеҙ шунда Мине тотмағайнығыҙ. Ә хәҙер – һеҙҙең ваҡыт, ҡараңғылыҡ хакимлыҡ итә».

Ғәскәриҙәр, Ғайсаны ҡулға алып, иң баш ҡаһиндың өйөнә алып килә, ә шәкерттәре Уны ташлап ҡасып китә.

*МАҪҪАЙОС 26:45–57; ЛУКАС 22:45–53; ЯХЪЯ 18:1–12*



## Ғайсаны хөкөм итеү. Петрустың ваз кисеүе

Петрус һәм тағы бер шәкерт, аҙағы нимә менән барып бөтөр икән тип, Ғайса артынан иң баш ҡаһиндың ихатаһына тиклем эйәреп бара. Баш ҡаһиндар, аҡһаҡалдар һәм бөтә Юғары кәңәшмә, Ғайсаны үлемгә хөкөм итер өсөн, Уға ҡаршы ялған шаһитлыҡ эҙләй, ләкин таба алмай. Ялған шаһиттар күп булһа ла, Уны ғәйепләргә бер сәбәп тә табылмай.

Ниһайәт, шаһитлыҡ күрһәтергә ике кеше сыға. Улар: «Был кеше: „Мин Алла йортон емереп, уны өс көн эсендә яңынан төҙөй алам“, – тип әйтте», – тиҙәр. Иң баш ҡаһин, урынынан тороп, Ғайсаға: «Һин быларҙың ғәйепләүенә бер нисек тә яуап ҡайтармайһыңмы ни?» – ти. Ғайса бер нәмә лә өндәшмәй. Иң баш ҡаһин Унан: «Тере Алла алдында ант итеп әйтеүеңде талап итәм: Һин Алла Улы Мәсихме?» – тип һорай.

Ғайса уға: «Быны һин үҙең әйттең, – тип яуап бирә. – Ә Мин һеҙгә шуны әйтәм: ошо мәлдән башлап Әҙәм Улының ҡөҙрәт Эйәһенең уң яғында ултырғанын һәм күктәге болоттар өҫтөндә килгәнен күрерһегеҙ».

Шунда иң баш ҡаһин, үҙенең өҫ кейемен йыртып ебәреп: «Ул көфөр һүҙ һөйләне! Беҙгә башҡа шаһиттарҙың нимәгә кәрәге бар? Уның Алланы хурлаған һүҙҙәрен әле генә үҙегеҙ ишеттегеҙ! Ниндәй ҡарар сығараһығыҙ?» – тип һорай. «Ул ғәйепле һәм үлергә тейеш», – ти улар. Шунда Ғайсаның йөҙөнә төкөрөргә, Үҙен туҡмарға тотоналар; ҡайһылары иһә мәсхәрәләп: «Эй, Мәсих, пәйғәмбәрлек итеп әйт беҙгә: Һиңә кем һуҡты?» – тип Уның яңағына һуғалар.

Был ваҡытта Петрус иң баш ҡаһиндың ихатаһында хеҙмәтселәр менән усаҡ янында йылынып ултыра. Тышта һыуыҡ була. Уның эргәһенә хеҙмәтсе ҡыҙҙарҙың береһе килә. «Һин дә галилеялы Ғайса менән булдың бит», – ти ул. Әммә Петрус бөтәһе алдында инҡар итә: «Мин һинең нимә һөйләгәнеңде аңламайым». Ҡапҡанан сығып барғанында уны икенсе хеҙмәтсе ҡыҙ күреп ҡала һәм унда тороусыларға: «Бына был да назаралы Ғайса менән булды», – ти. Петрус, мин ҡыҙ һөйләгән Кешене белмәйем тип, йәнә ант итеп инҡар итә. Бер аҙҙан һуң шунда торған кешеләр, уның янына килеп: «Һин ысынлап та уларҙың береһе. Һөйләшеүеңдән үк күренеп тора», – тиҙәр. Әммә Петрус, мин был Кешене белмәйем, тип ант итә башлай. Тап шул ваҡыт әтәс ҡысҡырып ебәрә.



Шунда Петрус Ғайсаның: «Әтәс ҡысҡырғансы, һин Мине өс тапҡыр инҡар итәсәкһең», – тигән һүҙҙәрен иҫенә төшөрә. Ул, урам яҡҡа сығып, әрнеп илап ебәрә.

*МАҪҪАЙОС 26:58–75*

## Ғайса Пилатос алдында

Таң атҡас, бөтә баш ҡаһиндар һәм халыҡ аҡһаҡалдары кәңәшкә йыйыла, Ғайсаны үлемгә тапшырырға ҡарар сығара. Уны бәйләп, Йәһүҙиәләге Рим идарасаһы Понтиос Пилатҡа алып баралар. Ғайсаға хыянат иткән Йәһүҙә, Уның үлемгә хөкөм ителеүен күргәс, ҡылғанына үкенеп: «Ғәйепһеҙ кешегә хыянат итеп, гонаһ ҡылдым», – тигән һүҙҙәр менән баш ҡаһиндар һәм аҡһаҡалдарға утыҙ көмөш тәңкәне ҡайтарып бирә. Ул, тәңкәләрҙе Алла йортонда атып бәргәс, сығып китеп аҫылына.

Ғайсаны алып килгән йәһүдтәр, таҙарыныуҙары боҙолоуҙан ҡурҡып, мәжүси Пилатостың һарайына инмәй. Пилатос үҙе улар яғына сығып: «Был Кешене нимәлә ғәйепләйһегеҙ?» – тип һорай. Тегеләр уға: «Әгәр ҙә Ул енәйәтсе булмаһа, беҙ Уны һинең хөкөмөңә тотоп килтермәгән булыр инек, – тип яуаплап, Ғайсаны ғәйепләй башлайҙар. – Беҙ был кешене халҡыбыҙҙы аҙҙырыусы тип иҫәпләйбеҙ. Ул Үҙен Мәсих, батша тип атай һәм ҡайсарға һалым түләүҙе тыя».

Пилатос, һарайына ҡабат инеп, Ғайсаны саҡырып ала: «Һин йәһүдтәр Батшаһымы?» – тип һорай. Ғайса: «Минең Батшалығым был донъянығы түгел. Әгәр был донъяныҡы булһа, Минең кешеләрем Мине йәһүдтәргә бирмәҫ өсөн көрәшерҙәр ине», – тип яуаплай. «Шулай итеп, Һин Батшамы?» – тип һорай Пилатос. Ғайса уға: «Мин хәҡиҡәт тураһында шаһитлыҡ ҡылыу өсөн тыуҙым, донъяға ла шуның өсөн килдем. Хәҡиҡәт яҡлы һәр кем Мине тыңлай», – тип яуаплай. Пилатос Унан: «Нимә ул – хәҡиҡәт?» – тип һорай.

Ғайсаның Һируд батша идара иткән Галилеянан икәнен белгәс, Пилатос уны Һируд янына ебәрә. Был көндәрҙә Һируд Йәрүсәлимдә була. Ул Ғайсаға әллә күпме һорауҙар бирә, әммә Ғайса бер нәмә тип тә яуап ҡайтармай. Баш ҡаһиндар менән ҡанун белгестәре Уға әллә күпме ғәйеп таға. Һируд үҙенең ғәскәриҙәре менән Ғайсаны кәмһетеп һәм мыҫҡыл итеп, ҡупшы кейемдәр кейҙереп, Пилатос янына кире ебәрә. Быға тиклем бер-береһенә дошман булған Пилатос менән Һируд шул көндө дуҫтар булып китә.

Пилатос баш ҡаһиндарҙы, башлыҡтарҙы һәм халыҡты йыйып: «Һеҙ миңә был Кешене халыҡты ҡоторта тип алып килдегеҙ. Алдығыҙҙа Унан һорау алдым, ләкин һеҙ таҡҡан ғәйептәрҙең береһен дә тапманым» – ти. Пилатос, йола буйынса, байрам уңайынан



бер тотҡондо ирекkә сығарырға тейеш булған. Ул Ғайсаны ирекkә сығарырға теләй, әммә халыҡ төркөмө: «Быныһына – үлем! Беҙгә Вараввасты азат ит!» – тип ҡысҡыра башлай. Варавва иһә ҡалалағы фетнәлә ҡатнашҡаны һәм кеше үлтергәне өсөн төрмәгә ултыртылған була. Пилатос, Ғайсаны ирекkә ебәрергә теләп, көслө тауыш менән йәнә халыҡҡа мөрәжәғәт итә, әммә улар: «Арҡысаҡҡа, Уны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлат!» – тип ҡысҡыра. Уларҙың тауышы Пилатостыҡынан көслөрәк булып сыға.

*МАҪҪАЙОС 27:1–4; ЛУКАС 23:2, 7–23; ЯХЪЯ 18:28–30, 33–38*

## «Үҙенең арҡысағын күтәреп...»

Шунан һуң Пилатос Ғайсаны ҡулға алырға һәм ҡамсы менән һуҡтырырға ҡуша. Ғәскәриҙәр, сәнскәктән таж үреп, Уның башына һала, өҫтөнә ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге кейем кейҙерә һәм: «Йәшәһен йәһүдтәр Батшаһы!» – тип яңаҡтарына һуға. Пилатос, йәнә сығып, йәһүдтәргә: «Ҡарағыҙ, хәҙер ул Кешене һеҙгә алып киләм. Белеп тороғоҙ, мин Унда бер ниндәй ҙә ғәйеп тапманым», – ти.

Башына сәнскеле таж, өҫтөнә ҡыҙыл кейем кейгән Ғайса сығып баҫа. «Бына ул Кеше!» – ти уларға Пилатос. Баш ҡаһиндар һәм һаҡсылар Уны күреп ҡалғас: «Уны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлат, арҡысаҡҡа!» – тип ҡысҡырып ебәрә. Пилатос уларға: «Мин Уның бер ғәйебен дә күрмәйем», – ти. Йәһүдтәр: «Беҙҙең ҡанун буйынса Ул үлергә тейеш, сөнки Үҙен Алла Улы тип атаны», – тип яуаплай. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Пилатос тағы ла нығыраҡ ҡурҡып китә. Ул яңынан һарайға инә лә Ғайсанан: «Һин ҡайҙан булаһың?» – тип һорай. Әммә Ғайса өндәшмәй. «Һөйләшергә теләмәйһеңме? – ти Пилатос. – Һине азат итергә лә, арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлатырға хакимлығым барлығын белмәйһеңме ни?» Ғайса яуап итеп: «Әгәр һиңә юғарынан бирелмәһә, Минең өҫтән бер ниндәй хакимлығың булмаҫ ине. Шунлыҡтан Мине һиңә тапшырған кешенең гонаһы һинекенән ҙурыраҡ», – ти. Ошонан һуң Пилатос Уны азат итергә мөмкинлек эҙләй.

Пилатос Ғайсаны һарайҙан алып сыға ла хөкөм итеү урынына барып ултыра. Йәһүдтәргә: «Бына һеҙҙең Батшағыҙ!» – ти. Әммә улар: «Ал да арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлат Үҙен!» – тип ҡысҡыра. Пилатос уларҙан: «Мәсих тип аталған был Ғайсаны нимә эшләтәйем?» – тип һорай. «Уны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлат!» – тип яуап бирә бөтәһе лә. «Ул ниндәй яуызлыҡ ҡылды һуң?» – тип һорай Пилатос. Әммә тағы ла нығыраҡ ҡысҡыра башлайҙар: «Уны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлат!» Пилатос, бер нисек тә ярҙам итә алмауын, киреһенсә, сыуалыш ҡына башланғанын күреп, халыҡ алдында ҡулдарын йыуа һәм: «Был Кешенең түгелгән ҡаны өсөн мин ғәйепле түгелмен, быға һеҙ яуаплы», – ти. Быға яуап итеп халыҡ төркөмө: «Уның ҡаны беҙҙең һәм беҙҙең балаларыбыҙҙың өҫтөндә булһын!» – тип ҡысҡыра. Пилатос шунда уларға Вараввасты азат итә, ә Ғайсаны, ҡамсыларға ҡушып, арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлатырға тапшыра.



Ғәскәриҙәр Ғайсаны язаларға алып китә. Ул, Үҙенең арҡысағын күтәреп, «Баш һөйәге», йәғни йәһүдсә «Голгоҫа» тип аталған урынға атлай. Артынан иҫ китмәле күп халыҡ эйәрә, араларында Уны йәлләп үкһеп илаған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа була. Ғайса уларға өндәшә: «Эй Йәрүсәлим ҡыҙҙары! Минең өсөн иламағыҙ, ә үҙегеҙ һәм балаларығыҙ өсөн илағыҙ, сөнки: „Түлһеҙ ҡатындар, бала тапмаған, бала имеҙмәгән ҡатындар бәхетле“, – тип әйтер көндәр етеп килә».

*МАҪҪАЙОС 27:20–26; ЛУКАС 23:27–29; ЯХЪЯ 19:1–17*

## Ғайсаны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлау

Ғайса менән шулай уҡ ике енәйәтсене лә үлем язаһына алып баралар. «Баш һөйәге» тип аталған урынға килеп еткәс, Ғайсаны ла, ике енәйәтсене лә – береһен Уның уң яғына, икенсеһен һул яғына – арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлайҙар. Ғайса: «Атам! Уларҙы ярлыҡа! Улар ни эшләгәндәрен үҙҙәре лә аңламай», – ти. Пилатостың бойороғо буйынса, арҡысаҡҡа яҙыу элеп ҡуялар. Унда йәһүд, грек һәм латин телдәрендә «Назаралы Ғайса – йәһүдтәр Батшаһы» тип яҙылған була.

Ғәскәриҙәр Ғайсаны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлағандан һуң, йәрәбә һалып, Уның кейемдәрен үҙ-ара бүлешеп ала. Ә халыҡ ҡарап тора. Башлыҡтар ҙа мыҫҡыл итеп: «Башҡаларҙы ҡотҡара ине бит. Әгәр Ул Алла тарафынан һайланған Мәсих икән, Үҙен дә ҡотҡарһын», – тиҙәр. Ғайсаны ғәскәриҙәр ҙә мыҫҡыллай. Уға әсе шарап биреп: «Әгәр Һин йәһүдтәр Батшаһы булһаң, Үҙеңде ҡотҡар!» – тиҙәр. Арҡысаҡта эленеп торған енәйәтселәрҙең береһе: «Һин Мәсих түгелме ни? Үҙеңде лә, беҙҙе лә ҡотҡар», – ти, яман телләнеп. Икенсеһе киреһенсә: «Һин үҙең дә Уның кеүек үк язаға тарттырылғанһың бит, Алланан ҡурҡмайһыңмы ни? Беҙҙе ғәҙел хөкөм иттеләр, ҡылған эштәребеҙгә ҡарата тейешлеһен алдыҡ. Ә Ул бер насарлыҡ та ҡылмаған, – тип уны тыйып, Ғайсаға: – Үҙ Батшалығыңа ингәс, мине иҫкә ал», – тип өндәшә. Ғайса уға: «Хаҡ һүҙ әйтәм: һин бөгөн үк Минең менән бергә ожмахта булырһың», – тип яуаплай. Көн үҙәгендә бөтә ер йөҙөн ҡараңғылыҡ ҡаплап ала һәм ул көндөҙгө сәғәт өскә тиклем дауам итә. Ә өстәр тирәһендә Ғайса көслө тауыш менән: «Эли, Эли, лема сабахҫани?» йәғни «Аллам, Аллам! Ниңә Һин Мине ташланың?» – тип ҡысҡырып ебәрә. Шул саҡ унда торған ғәскәриҙәрҙең береһе йүгереп килә, һыу һеңдергесте әсе шарапҡа манып ала ла, таяҡҡа элеп, Ғайсаға эсергә бирә. Ғайса шарапты татып ҡарағас: «Ғәмәлгә ашты! – ти һәм көслө тауыш менән: – Атам! Рухымды Һинең ҡулыңа тапшырам!» – тип ҡысҡырып йән бирә.

Шул саҡ Алла йортондағы пәрҙә өҫтән аҫҡа тиклем урталай йыртылып китә, ер тетрәп, таш ҡаялар ярыла, ҡәберҙәр асылып, үлгән изгеләрҙең күбеһе терелеп тора. Ә Ғайса үленән терелеп торғас, улар ҡәберҙәренән сыға, изге Йәрүсәлим ҡалаһына инәләр, һәм унда уларҙы күптәр күрә. Йөҙ башы һәм уның менән бергә Ғайсаны



һаҡлаған ғәскәриҙәр, ер тетрәгәнен һәм башҡа хәлдәрҙе күреп, ҡоттары оса. «Ул ысынлап та Алла Улы булған икән», – тиешәләр. Был күренеште ҡарарға тип килгән халыҡ, тәүбәгә килеүҙәрен белдереп, күкрәктәренә һуға-һуға ҡайтып китә.

*МАҪҪАЙОС 27:45–49, 51–54; ЛУКАС 23:32–43, 46, 48;*
*ЯХЪЯ 19:19–23, 30*

# Ғайсаны ҡәбергә һалыу

Ғайса үлгән көн йома була. Йәһүдтәр, язалап үлтерелгәндәрҙе арҡысаҡтан төшөрөргә рөхсәт һорап, Пилатосҡа килә. Шәмбе бөйөк байрам көнө булғанлыҡтан, ҡаҙаҡтағыларҙың шәмбегә тиклем арҡысаҡта ҡалыуын теләмәйҙәр. Пилатостың рөхсәте менән ғәскәриҙәр ике юлбаҫарҙың да аяҡтарын һуғып һындыра. Ғайса янына килгәс, Уның инде үлгән булыуын күреп, аяҡтарына теймәйҙәр. Шулай ҙа бер ғәскәри Уның ҡабырғаларына һөңгө менән сәнсә, яранан ҡан һәм һыу ағып сыға. Был хәлдәр нәҡ Изге Яҙмала яҙылғанса була: «Уның һис бер һөйәге һындырылмаҫ» *(Сығыу 12:46)* һәм «Улар үҙҙәре сәнскән Затҡа ҡарар» *(Зәкәрьяһ 12:10)*.

Шунан һуң Пилатос янына Юғары кәңәшмәнең билдәле һәм бай бер ағзаһы, Аримаҫаянан булған Йософ килә. Ул Ғайсаның шәкерте булыуын, йәһүд башлыҡтарынан ҡурҡып, йәшерә. Йософ Пилатостан Ғайсаның кәүҙәһен арҡысаҡтан төшөрөп алырға рөхсәт һорай, Пилатос ҡаршы килмәй.

Шулай уҡ Юғары кәңәшмәнең йәнә бер ағзаһы, Ғайсаға төндә йәшерен рәүештә генә килеп киткән Никодемус та килә. Ул үҙе менән хуш еҫле май һалынған ҙур һауыттар килтерә. Йософ менән Никодемус, йәһүдтәрҙең үлгәндәрҙе ерләү йолаһы буйынса, Ғайсаның кәүҙәһен хушбуй һеңдерелгән кәфенгә урай. Ғайса арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланған ер эргәһендәге баҡсала ҡаяны өңөп яһалған ҡәбер була. Йософ менән Никодемус Ғайсаның кәүҙәһен шунда һала ла ҡәбер ауыҙын ҙур таш менән ҡаплап ҡуя.

Шәмбе көнө баш ҡаһиндар һәм фарисейҙар Пилатос янына килеп, уға Ғайса тураһында әйтәләр: «Әфәндем! Теге ялғансының: „Мин өс көндән һуң терелеп торасаҡмын“, – тигән һүҙҙәре иҫебеҙгә төштө. Өсөнсө көнгәсә ҡәберҙе һаҡларға әмер бир, юғиһә, шәкерттәре килеп, Уның кәүҙәһен урлап алып китеүҙәре һәм халыҡҡа: „Ул үленән терелеп торҙо“, – тип әйтеүҙәре мөмкин. Был һуңғы ялған беренсеһенән дә яманыраҡ булыр».

Ризалыҡ алғас, улар ҡәбер эргәһенә һаҡсы ҡуя, ә мәмерйә ауыҙына терәтеп ҡуйылған ташҡа мисәт баҫалар.

*МАҪҪАЙОС 27:57–66; ЯХЪЯ 19:31–42*



## Ғайсаның терелеп тороуы

Шәмбе уҙған көндө бик ныҡ ер тетрәй, сөнки күктән Раббы фәрештәһе төшөп, ҡәбер ауыҙындағы ташты ситкә ауҙара. Ул йәшен утылай ялтырай, ә кейеме ҡарҙай ап-аҡ. Мәмерйә һағында тороусылар ҡурҡыштан ергә ауа, үлек кеүек ҡатып ҡалалар. Иҫтәренә килгәс, улар ҡалаға китә, бөтә булған хәлде баш ҡаһиндарға һөйләп бирә. Баш ҡаһиндар, аҡһаҡалдар менән йыйылып кәңәшләшкәс, ғәскәриҙәргә күп итеп аҡса биреп: «„Төндә, беҙ йоҡлаған саҡта, шәкерттәре килеп Ғайсаның кәүҙәһен урлап алып киткән“, – тип әйтегеҙ. Был хәбәр идарасыға мәғлүм була ҡалһа инде, беҙ уны һеҙҙең ғәйебегеҙ юҡлыҡҡа күндерербеҙ», – тип әйтергә ҡуша. Һаҡсылар аҡсаны ала ла баш ҡаһиндар өйрәткәнсә эшләй.

Шул уҡ көндө таң менән магдалалы Мәрйәм, Яҡуп менән Йософтоң әсәһе Мәрйәм һәм Саломе, хуш еҫле майҙар менән Ғайсаның кәүҙәһен майларға тип, ҡәбер урынлашҡан баҡсаға китә. Улар юлда үҙ-ара: «Ҡәбер ауыҙына терәп ҡуйылған ташты беҙгә кем шылдырып бирер икән?» – тип һөйләшә. Килеп еткәс, ҡараһалар – таш ситкә ауҙарылған. Ә ул таш бик ҙур була. Мәмерйәгә ингәс, аҡ кейемгә уранған фәрештәне күреп, ҡоттары оса. Әммә фәрештә уларға: «Ҡурҡмағыҙ! Мин һеҙҙең арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланған Ғайсаны эҙләгәнегеҙҙе беләм. Ул бында юҡ – Ул терелде. Бына Уның ятҡан урыны. Ул һеҙҙән алда Галилеяға бара. Үҙе әйткәнсә, Уны шунда күрерһегеҙ», – ти.

Ҡатындар, ҡәбер эсенән сыҡҡас, ҡурҡа-ҡурҡа, шул уҡ ваҡытта оло ҡыуаныс менән Ғайсаның терелеп тороуы тураһында шәкерттәренә хәбәр итергә йүгерә.

*МАҪҪАЙОС 28:1–8, 11–15; МАРКУС 16:1–7.*



## Ғайса тере!

Шәкерттәргә Ғайсаның терелеп тороуы тураһында хәбәр итергә китеп барғанда, ҡатындарҙың алдына Ғайса Үҙе килеп сыға һәм: «Именлек һеҙгә!» – ти. Уны күргәс, ҡатындар ҡыуанып китә, янына килеп, Уға баш эйәләр. Шунан Ғайса уларға: «Ҡурҡмағыҙ! – ти. – Барығыҙ, шәкерттәремә әйтегеҙ, Галилеяға барһындар. Улар Мине шунда күрер».

Ҡатындар, ун бер шәкерт янына килеп, терелеп торған Ғайсаны күреүҙәре тураһында һөйләп бирә. Әммә шәкерттәр уларҙың һүҙҙәренә ышанмай.

Шулай ҙа Петрус менән Яхъя ҡәбергә табан йүгерә. Яхъя шәберәк йүгереп, Петрустан алдараҡ килеп етә. Эскә күҙ һалғас, ул унда ятҡан кәфенде күрә, әммә ҡәбер эсенә инеп тормай. Уның артынса Петрус та йүгереп килеп етә. Мәмерйәгә ингәс, Ғайсаның кәүҙәһе төрөп һалынған кәфенде һәм Уның башына уралған яулыҡты күрә. Шул саҡ Яхъя ла ҡәберлеккә инә һәм, барыһын да күргәс, Ғайсаның терелеп тороуына ышана.

*МАҪҪАЙОС 28:8–10; ЛУКАС 24:9–12; ЯХЪЯ 20:3–8*



## Ғайсаның Эммаусҡа китеп барған шәкерттәренә күренеүе

Шул уҡ көндө Ғайсаның ике шәкерте Йәрүсәлим эргәһендәге Эммаус тигән ауылға юл ала. Улар булып уҙған ваҡиғалар тураһында һөйләшеп барған була. Фекер алышып барған саҡтарында Ғайса Үҙе лә уларға ҡушылып китә, әммә шәкерттәре Уны танымай.

Ғайса шәкерттәренән: «Һеҙ нимә тураһында һөйләшәһегеҙ һәм нимәгә шулай бошонҡоһоғоҙ?» – тип һорай. Клеопас исемлеһе: «Ошо көндәрҙә Йәрүсәлимдә булып уҙған хәл тураһында бер Һин генә белмәйһеңдер», – тип яуаплай. Ғайса: «Ниндәй хәл тураһында?» – тип һорай. Шәкерттәр былай тип яуаплай: «Назаралы Ғайса менән булған хәл тураһында. Ул Алла алдында ла, бөтә халыҡ алдында ла һүҙе менән дә, эше менән дә ҡөҙрәтле пәйғәмбәр ине. Баш ҡаһиндарыбыҙ менән башлыҡтарыбыҙ Уны үлем язаһына тарттырырға Пилатҡа тотоп бирҙе һәм арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланы. Ә беҙ Уны, Израилды азат итергә тейешле Кеше, тип өмөтләнгәйнек. Әммә был хәлдәр булып уҙғанға бөгөн өсөнсө көн инде. Шуның өҫтәүенә, арабыҙҙағы ҡатындар беҙҙе таң ҡалдырҙы. Улар иртә менән ҡәбер янына барған, әммә Уның кәүҙәһен тапмаған. Ҡайтҡас, фәрештәләрҙең пәйҙә булыуы һәм уларҙың: „Ғайса – тере“, тип әйтеүҙәре тураһында һөйләнеләр. Унан һуң беҙҙекеләрҙең ҡайһы берҙәре ҡәбер янына барған һәм улар хәлдең тап ҡатынҡыҙҙар һөйләгәнсә икәнен күргән, Ғайса унда булмаған». Шунан һуң Ғайса уларға: «Ниңә шулай аңһыҙһығыҙ? Пәйғәмбәрҙәр әйткәндәргә ышаныуы ҡайһылай ҡыйын һеҙгә! Мәсих Үҙенең шөһрәтенә өлгәшер алдынан ошондай ғазаптар аша үтергә тейеш булмағанмы ни?» – ти һәм Изге Яҙмала Үҙе тураһында әйтелгән урындарҙы Мусанан башлап бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең һүҙе менән аңлатып бирә.

Улар шулай үҙҙәре бара торған ауылға яҡынлаша. Шәкерттәре: «Кис етеп килә, тиҙҙән ҡараңғы төшә, беҙҙең менән ҡал», – тип үтенә. Ғайса улар менән өйгә инә. Ашап ултырғанда Ул икмәк алып шөкөрана ҡыла ла шәкерттәренә бүлеп бирә. Шул мәл шәкерттәрҙең күҙҙәре асылып киткәндәй була һәм улар Ғайсаны таный, әммә Ғайса уларҙың күҙенә күренмәҫ була. Шәкерттәр бер-береһенә: «Ул



юл буйлап беҙҙең менән һөйләшеп барғанында һәм Изге Яҙманың мәғәнәһен аңлатҡанында йөрәктәребеҙ янманымы ни?» – тиешә.

*ЛУКАС 24:13–32*

## Ғайсаның бүтән шәкерттәргә лә күренеүе

Эммаус юлында Ғайсаны күргән шәкерттәр шунда уҡ Йәрүсәлимгә әйләнеп ҡайта. Улар, ун бер илсе һәм башҡа шәкерттәр йыйылып торған ергә килеп, юлда үҙҙәре менән булған хәлде, шулай уҡ икмәк бүлеп биргән сағында нисек итеп Ғайсаны таныуҙарын һөйләп бирә.

Шәкерттәр был турала бәйән иткән мәлдә: «Именлек һеҙгә!» – тип, Ғайса Үҙе улар араһына килеп баҫа. Шәкерттәрҙең ҡоттары алынып, ҡурҡыштан, өрәк күрәбеҙ икән, тип уйлайҙар. Әммә Ғайса уларға: «Ни эшләп ҡурҡып ҡалдығыҙ? Ни өсөн күңелегеҙҙә шундай шик тыуҙы? Ҡулдарыма һәм аяҡтарыма ҡарағыҙ, был – Мин Үҙем! Ҡулдарығыҙ менән Мине тотоп ҡарағыҙ! Өрәктең тәне лә, һөйәге лә булмай, ә Миндә, күреп тораһығыҙ, бар», – ти. Быны әйткәс, Ул яра эҙҙәре һалынған аяҡ-ҡулдарын күрһәтә. Тегеләр ышана алмайынса таң ҡалып торған арала Ғайса уларҙан: «Ашарға берәй нәмәгеҙ бармы?» – тип һорай. Уға бешкән балыҡ киҫәге бирәләр. Ғайса уны күҙ алдарында ашап ҡуя.

Унан Ғайса уларға былай ти: «Һеҙҙең менән бергә булған саҡта Мин былар тураһында һөйләгәйнем инде. Муса ҡанунында, пәйғәмбәрҙәрҙең китаптарында һәм Зәбүрҙә Минең хаҡта яҙылғандарҙың барыһы ла тормошҡа ашырға тейеш, тип әйткәйнем. Изге Яҙмала былай тиелгән: Мәсих ғазап сигергә, өсөнсө көндә үленән терелергә, шулай уҡ Йәрүсәлимдән башлап, барлыҡ халыҡтарға тәүбәгә килеү һәм гонаһтары ярлыҡаныу хәбәре Уның исеменән вәғәзләнергә тейеш. Һеҙ – быларҙың шаһиты. Мин Атам вәғәҙә иткәнде һеҙгә ебәрермен. Һеҙ иһә, күктәрҙән үҙегеҙгә ҡөҙрәт бирелгәнгә тиклем, Йәрүсәлимдә ҡалығыҙ».

*ЛУКАС 24:33–49*



## «Мине яратаһыңмы?»

Бынан һуң Ғайса шәкерттәргә Галилеяла, Тибериас күле буйында күренә. Унда Шимғон Петрус, Игеҙәк ҡушаматлы Томас, Галилеяның Кана ҡалаһынан Наҫанаил, Зәбәҙәйостың улдары һәм йәнә ике шәкерт бергә йыйылған була. Шимғон Петрус балыҡ тоторға теләүен әйткәс, бүтән шәкерттәр ҙә уның менән барырға була. Улар кәмәгә ултырып йөҙөп китә, әммә ул төндә бер нәмә лә эләкмәй.

Таң атҡанда Ғайса яр буйында баҫып торған була, әммә шәкерттәре Уны танымай. Ғайса уларҙан: «Дуҫтар, ашарлыҡ берәй нәмә тота алдығыҙмы?» – тип һорай. «Юҡ», – тип яуаплай шәкерттәр. «Ауҙы кәмәнең уң яғына һалығыҙ, тоторһоғоҙ», – ти Ғайса. Ул әйткәнсә эшләйҙәр. Шунан һуң балыҡ шул тиклем күп эләгә, хатта ауҙы тартып сығарырға көстәре етмәй. Шунда Ғайсаның яратҡан бер шәкерте Петрусҡа: «Был – беҙҙең Раббыбыҙ!», – ти. Был турала ишеткәс, Петрус һыуға һикерә һәм ярға йөҙөп сыға. Ҡалған шәкерттәр, балыҡ тулы ауҙы һөйрәп, кәмә менән килеп етә – улар балыҡты ярҙан алыҫ китмәй генә тотҡан була. Ярға сыҡҡас, улар усаҡтағы ҡуҙ өҫтөндә ятҡан балыҡты күрә. Усаҡ янында икмәк тә була.

Был инде Ғайсаның үлеп терелгәндән һуң шәкерттәренә өсөнсө тапҡыр күренеүе була.

Ашап туйғас, Ғайса Шимғон Петрустан: «Яхъя улы Шимғон, һин Мине башҡа шәкерттәремә ҡарағанда нығыраҡ яратаһыңмы?» – тип һорай. Петрус Уға: «Эйе, Раббым! Һин миңә ни тиклем яҡын икәнлегеңде беләһең» – тип яуаплай. Ғайса уға: «Минең бәрәстәремде ашатып тор», – ти. Ғайса унан икенсе тапҡыр һорай: «Яхъя улы Шимғон, Һин Мине яратаһыңмы?» Петрус Уға: «Эйе, Раббым! Һин миңә ни тиклем яҡын икәнлегеңде беләһең», – ти, яуап итеп. «Минең һарыҡтарымды көт», – ти уға Ғайса. Һәм өсөнсө тапҡыр унан: «Яхъя улы Шимғон, һин Мине ныҡ яҡын күрәһеңме?» – тип һорай. Петрус Уның: «Һин Мине ныҡ яҡын күрәһеңме?» – тип өсөнсө тапҡыр һорағанына йәне көйөп: «Раббым! Һиңә бөтәһе лә билдәле. Һин миңә ни тиклем яҡын икәнлегеңде лә беләһең», – тип яуаплай. Ғайса уға: «Минең һарыҡтарымды ашатып тор», – ти.



Ғайсанан өс тапҡыр ваз кискән кеүек, был юлы Петрус Уға ҡарата булған һөйөүе тураһында өс тапҡыр әйтеп бирә. «Минең һарыҡтарымды көт» тигән һүҙҙәр менән Ғайса Мәсих Үҙенә инанған кешеләр тураһында ҡайғыртыуҙы Петрусҡа һәм башҡа шәкерттәренә йөкмәтә.

*ЯХЪЯ 21:1–17*

## Ғайса Мәсихтең күккә ашыуы

Терелеп торғандан һуң, Ғайса ҡырҡ көн буйына Үҙенең шәкерттәренә күренә, уларға Алла Батшалығы тураһында бәйән итә. Ниһайәт, барыһын бергә йыйып, уларға бойороҡтарын бирә:

Йәрүсәлимдән китмәгеҙ, Ата вәғәҙә иткәнде көтөгөҙ. Мин һеҙгә ул хаҡта һөйләгәйнем. Яхъя кешеләрҙе һыуға сумдырғайны, ә бер нисә көндән һеҙ Изге Рухҡа сумдырылырһығыҙ.

Изге Рух иңгәндән һуң һеҙ ҡөҙрәт алырһығыҙ, Йәрүсәлимдә, бөтә Йәһүҙиәлә, Самарияла һәм, хатта донъяның сигенә үк барып етеп, һәр ерҙә Минең хаҡта шаһитлыҡ ҡылырһығыҙ.

Ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, Ғайса Мәсих уларҙың күҙ алдында күккә аша башлай һәм болот Уны уларҙың ҡарашынан йәшерә. Ғайсаның күтәрелеүен күҙәтеп, күккә текәлеп ҡарап торғанда, ҡапыл илселәр янында аҡ кейемле ике ир заты пәйҙә була. Улар: «Галилея ир-уҙамандары! Ниңә һауаға теклəп тораһығыҙ? Янығыҙҙан күктәргә алынған Ғайса нисек күккә олғашҡан булһа, шул рәүешле үк яңынан киләсәк», – тиҙәр.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 1:3–5, 8–11*



## «Юл, хәҡиҡәт һәм тормош»

Хакимыбыҙ Ғайса Мәсихтең ерҙәге хеҙмәте арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланғанға тиклем яҡынса өс йыл дауам итә. Ғайса ҡотҡарылыу һәм Алла Батшалығы тураһындағы Һөйөнөслө Хәбәрҙе, йәғни Инжилде вәғәзләп йөрөй. Бына Уның ҡайһы бер иң мөһим, тәрән мәғәнәле һүҙҙәре:

Мин – юл, хәҡиҡәт һәм тормош. Минең аша ғына Атам янына барып була *(Яхъя 14:6)*.

Мин – терелеү һәм тормош. Миңә ышанған кеше үлһә лә йәшәйәсәк *(Яхъя 11:25)*.

Донъяла булған ваҡытымда Мин – донъяға яҡтылыҡмын *(Яхъя 9:5)*.

Мин – тормош икмәгемен. Миңә килгән кеше бер ҡасан да асыҡмаҫ. Миңә инанған бер ҡасан да һыуһамаҫ *(Яхъя 6:35)*.

Әҙәм Улы юғалғанды эҙләп табырға һәм ҡотҡарырға тип килде *(Лукас 19:10)*.

Иң тәүҙә Алла Батшалығын эҙләгеҙ һәм Уның хаҡ ихтыяры үтәлеүенә ынтылығыҙ *(Маҫҫайос 6:33)*.

Мин һеҙгә тыныслыҡ ҡалдырам. Үҙемдең тыныслығымды һеҙгә бирәм, әммә Мин биргән тыныслыҡ донъя биргән кеүек түгел. Күңелегеҙҙе хәүеф биләмәһен! Ҡурҡмағыҙ! *(Яхъя 14:27)*.

Эй хәлдән тайғандар, ауыр йөктән интеккәндәр, барығыҙ ҙа Миңә килегеҙ. Мин һеҙҙе тынысландырырмын. Ҡамытымды үҙегеҙгә кейегеҙ ҙә Минән өйрәнегеҙ, сөнки Мин – йыуаш һәм баҫалҡымын. Шул мәлдә йәнегеҙ тыныслыҡ табыр. Минең ҡамытым уңайлы, йөгөм еңел! *(Маҫҫайос 11:28–30)*.

Һүҙемде тыңлап, Мине Ебәреүсегә инанған кеше мәңгелек тормошҡа эйә була. Ул хөкөм ҡаршыһына баҫмаясаҡ, сөнки ул инде үлемдән тормошҡа күсте *(Яхъя 5:24)*.

Улына инанған кешенең мәңгелек тормошо бар, ә Уға буйһонмаусы инде тормош күрмәйәсәк: уның өҫтөндә Алланың асыуы тора *(Яхъя 3:36)*.

Кем Минең артымдан барырға теләй, шул үҙ-үҙенән ваз кисһен һәм, арҡысағын йөкмәп, көн һайын Миңә эйәрһен *(Лукас 9:23)*.

Әгәр кеше бөтөн донъяны ҡаҙанып та, үҙен юғалтһа йәки үҙен һәләк итһә, бынан уға ни файҙа? *(Лукас 9:25)*.



Мине кешеләр алдында ҡабул иткән һәр кемде Мин дә күктәге Атам алдында ҡабул итермен. Ә инде кем кешеләр алдында Минән ваз кисә, Мин дә күктәге Атам алдында унан ваз кисермен *(Матфей 10:32–33)*.

Күк менән ер юҡҡа сығыр, әммә Минең һүҙҙәрем бер ваҡытта ла юҡҡа сыҡмаясаҡ *(Лукас 21:33)*.

## Илселәрҙең ғәмәлдәре

Ошоғаса һүҙ Ғайса күккә ашҡанға тиклем булып уҙған хәл-ваҡиғалар тураһында барҙы. Улар Маҫҫайос, Маркус, Лукас һәм Яхъя тарафынан яҙылған дүрт Һөйөнөслө Хәбәрҙә бәйән ителде.

Яңы Ғәһедтең, йәғни Инжилдең бишенсе китабы Илселәрҙең ғәмәлдәре тип атала. Унда шул замандағы Рим империяһының төрлө төбәктәрендә мәсихселектең таралыуы тарихы һүрәтләнә. Илселәрҙең ғәмәлдәре китабында илсе Петрус менән Паулустың хеҙмәте, бигерәк тә илсе Паулустың мәжүсиҙәр донъяһында Һөйөнөслө Хәбәрҙе таратыу эше үҙәк урынды алып тора.

Илселәрҙең ғәмәлдәре китабынан беҙ шуны беләбеҙ: Ғайса Мәсихтең Голгоҫа арҡысағында йән биреүе һәм терелеп тороуы аша Алла кешеләргә ҡотҡарылыу бүләк итә, һәм был хәбәр мәжүсиҙәр донъяһында ла тарала башлай.

Лукас бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәрҙе лә, Илселәрҙең ғәмәлдәрен дә бер автор – Лукас яҙған тип иҫәпләнә. Уларҙың яҙылыу ваҡыты Ғайса Мәсих тыуғандан һуң 60-сы йылдарҙың урталарына тура килә. Илселәрҙең ғәмәлдәре, Мәсихтең терелеп торған ваҡытынан 60-сы йылдар башына тиклемге арауыҡты үҙ эсенә алып, дүрт Һөйөнөслө Хәбәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың дауамы булып тора. Был мәсихселектең тарала башлау тарихы.



## Изге Рухтың иңеүе

Шәкерттәр, Ғайса күккә ашҡан Зәйтүн тауынан Йәрүсәлимгә әйләнеп ҡайтҡас, ғәҙәттә йыйыла торған йорттоң өҫкө ҡатындағы бүлмәһенә инеп доға ҡыла. Улар менән бер нисә ҡатын да була. Ғайсаның әсәһе Мәрйәм дә улар араһында. Йәһүҙә урынына ун икенсе илсе итеп Маҫҫиас исемле кешене һайлайҙар.

Ҡотҡарылыу байрамынан һуң илле көн үткәс билдәләнгән Илленсе көн байрамында иманлыларҙың барыһы ла бергә йыйыла. Күктән ҡапыл көслө ел ҡупҡандағы кеүек тауыш сыға һәм ул йорт эсенә инеп тула. Шунан һуң ялҡын телдәре килеп сыға һәм һәр береһе иманлыларҙың иңенә берәмләп төшөп ята. Барыһы ла Изге Рух менән һуғарылып, быға тиклем үҙҙәре лә белмәгән телдәрҙә һөйләшә башлайҙар.

Ә был мәлдә Йәрүсәлимдәге байрамға тип төрлө илдәрҙән диндар йәһүдтәр килгән була. Шау-шыуҙы ишетеп, улар тауыш килгән яҡҡа ашыға. Килгәс, аптыраашта ҡалалар, сөнки иманлылар уларҙың туған телдәрендә һөйләшә. Иҫтәре китеп, бер-береһенән: «Быларҙың барыһы ла Галилеянан түгелме һуң? Һәр кемебеҙ уларҙың һөйләгәнен үҙ туған телендә ишетә, быны нисек аңларға? – тип һораша. – Алланың ҡөҙрәтле эштәре тураһында улар беҙҙең туған телебеҙҙә һөйләй!»

Күптәр: «Был нимә аңлата икән?» – тип хайран ҡала. Ҡайһы берҙәре иһә: «Улар шарап эсеп иҫергән», – тип көлә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 1:12–26; 2:1–13*



## Петрус һөйләгән вәғәз

Петрус ун бер илсе менән йыйылған халыҡ алдына сығып баҫа һәм барыһына ла ишетелерлек тауыш менән һөйләй башлай: «Йәһүд халҡы һәм дә Йәрүсәлимдә йәшәгән барлыҡ кешеләр, һүҙемде иғтибар менән тыңлағыҙ! Улар, һеҙ уйлағанса, иҫерек түгел, сөнки әле көн тыуып ҡына тора. Был хәлдәр хаҡында Алла Йоил пәйғәмбәр аша алдан әйткән: „Ахырызаман килгәндә барлыҡ кешеләр өҫтөнә Үҙ Рухымды яуҙырырмын. Улдарығыҙ, ҡыҙҙарығыҙ пәйғәмбәрлек ҡылыр. Йәштәрегеҙгә илаһи күренмештәр иңер, ҡарттарығыҙ әүлиә төштәр күрер. Ул көндәрҙә Үҙ Рухымды хатта ир һәм ҡатын ҡолдарға ла яуҙырырмын. Улар ҙа пәйғәмбәрлек ҡылырҙар... Раббыны исеме менән саҡырғандар барыһы ла ҡотолор“.

Исраилдар! Тыңлағыҙ: белеүегеҙсә, Алла һеҙҙең күҙ алдығыҙҙа Ғайса арҡылы ҡөҙрәтле эштәр, мөғжизәләр, хикмәттәр ҡылды һәм шул эштәре менән назаралы Ғайсаның һеҙҙең өсөн билдәләнгән Зат икәнен иҫбат итте. Был Кеше Алланың ниәте һәм алдан белеп тороуы менән һеҙҙең ҡарамаҡҡа тапшырылғайны. Һеҙ Уны Алла ҡанунын белмәүселәр ҡулы менән арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлатып үлтерҙегеҙ. Әммә Алла, үлем бығауҙарын өҙөп, Ғайсаны терелтте, сөнки үлем Уның алдында көсһөҙ ине.

Алла Ғайсаны үленән терелтте, беҙ бөтәбеҙ ҙә быны шаһиттары. Шулай итеп, Ул Алланың уң яғына күккә күтәрелде һәм, Атаһы вәғәҙә иткән Изге Рухты ҡабул итеп, Уны беҙгә яуҙырҙы. Һеҙ әле тап шуны күрҙегеҙ һәм ишеттегеҙ. Шулай итеп, бөтә Исраил халҡы аныҡ белһен: Алла һеҙ арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлаған Ғайсаны Хаким һәм Мәсих итте».

Был вәғәздe хәсрәткә төшөп тыңлаған кешеләр Петрустан һәм ҡалған илселәрҙән: «Туғандар, беҙгә ни эшләргә һуң?» – тип һорайҙар. Петрус уларға: «Гонаһтарығыҙ ғәфү ителһен өсөн һәр берегеҙ тәүбәгә килегеҙ һәм Ғайса Мәсих исеме менән һыуға сумдырылыу йолаһын үтегеҙ һәм шул саҡ Алланың бүләген – Изге Рухты ҡабул итерһегеҙ. Был вәғәҙә – Аллабыҙ Раббы Үҙенә саҡырған һәр кемгә: һеҙгә, һеҙҙең балаларығыҙға һәм алыҫта йәшәгән барыһына ла ҡағыла», – тип яуаплай.

Петрустың һүҙҙәрен күптәр ихлас ҡабул итә һәм шул көндө өс мең тирәһе кеше һыуға сумдырылыу йолаһын үтәй. Шунан



башлап Раббы көн һайын ҡотҡарылыусыларҙың һанын – Үҙенең Берҙәмлеген, йәғни Ғайса Мәсихкә инанған кешеләрҙең йыйынын, арттыра бара.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 2:14–47*

# Аҡһаҡ әҙәмде һауыҡтырыу

Бер ваҡыт, доға ҡылыу мәлендә, Петрус менән Яхъя Алла йортона килә. Алла йортоноң Матур тип аталған ҡапҡаһы төбөндә аҡһаҡ бер әҙәм ултырған була. Уны бында көн дә алып килеп, саҙаҡа һорарға тип ҡалдырып китәләр. Алла йортона инеп барған Петрус менән Яхъяны күреп, аҡһаҡ уларҙан да хәйер һорай.

Петрус менән Яхъя уға иғтибар менән текләп: «Беҙгә ҡара», – тиҙәр. Фәҡир, нимә лә булһа алырға өмөтләнеп, уларға баға. Әммә Петрус: «Минең алтын-көмөшөм юҡ, әммә нимәм бар, шуны һиңә бирәм. Назаралы Ғайса исеменән бойорам: тор ҙа атлап кит!» – ти һәм аҡһаҡ әҙәмде уң ҡулынан тотоп торғоҙа. Ғәриптең аяҡтары, тубыҡтары нығына, ул һикереп тороп атлай башлай. Алланы маҡтай-маҡтай, ырғый-һикерә илселәр менән бергә Алла йортона инә. Кешеләр уның Матур ҡапҡа төбөндә хәйер һорашып ултырған әҙәм икәнен таныйҙар. Уның аяҡҡа баҫҡанын һәм Алланы данлағанын күреп, барыһының да иҫе китә, уларҙы ҡурҡыу биләп ала.

Аяғына баҫҡан әлеге аҡһаҡ Петрус менән Яхъянан бер аҙым да ҡалмағас, барса халыҡ улар янына, Алла йортоноң бағаналы залына йүгереп инә. Быларҙы күреп торған Петрус халыҡтан: «Исраил халҡы! Ниңә аптырап ҡалдығыҙ? Нилектән беҙгә текләп тораһығыҙ? Әллә уны беҙ үҙ ҡөҙрәтебеҙ йәки диндарлығыбыҙ менән һауыҡтырған тип уйлайһығыҙмы? – тип һорай. – Ата-бабаларыбыҙҙың Аллаһы Үҙенең Улы Ғайсаның данын шулай күтәрҙе, ә һеҙ Уны тотоп бирҙегеҙ. Пилатос азат итергә ҡарар ҡылғанда, һеҙ Пилатос алдында Унан баш тарттығыҙ. Һеҙ тормошто Булдырыусыны үлтерҙегеҙ, әммә Алла Уны терелтте. Беҙ – бының шаһиттары. Ғайса һеҙ күреп белгән был кешегә ҡеүәт бирҙе, сөнки ул Ғайса исеменең ҡөҙрәтенә ышанды. Ғайса арҡылы килгән иман күҙ алдығыҙҙа уны тулыһынса һауыҡтырҙы. Хәҙер, туғандар, аңлайым: һеҙ был гонаһты, башлыҡтарығыҙ кеүек үк, белмәйенсә ҡылдығыҙ; Алла иһә Үҙенең Мәсихенең ғазап сигәсәге хаҡында барлыҡ пәйғәмбәрҙәр аша алдан әйткән хәбәрен шулай тормошҡа ашырҙы. Ә һеҙ, гонаһтарығыҙ юйылһын өсөн, тәүбә итегеҙ һәм Аллаға табан боролоғоҙ. Шулай итһәгеҙ, Раббынан яңырыу осоро килер, Ул һеҙгә алдан билдәләнгән Мәсихте – Ғайсаны ебәрер. Алла күптән үк Үҙенең изге пәйғәмбәрҙәре аша әйткән барлыҡ



һүҙҙәр ғәмәлгә ашҡансы, Ғайса күктә ҡалырға тейеш. Алла Үҙенең Хеҙмәтсеһен терелткәс, фатихаһын биреү һәм һәр ҡайһығыҙҙы яҙыҡ эштәренән аралау өсөн, Уны иң тәүҙә һеҙгә ебәрҙе».

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 3:1–26*

## Петрус менән Яхъяның ҡулға алыныуы

Петрустың һөйләгән вәғәзенән һәм аҡһаҡ әҙәм һауыҡҡандан һуң, биш меңләгән кеше Ғайса Мәсихкә инана. Әммә Петрустың әйткән һүҙҙәре ҡаһиндарҙың һәм башлыҡтарҙың асыуын ҡабарта, шуға улар, Петрус менән Яхъяны ҡулға алып, һаҡсылар ҡулына тапшырырға бойора. Икенсе көндө башлыҡтар, аҡһаҡалдар, ҡанун белгестәре һәм баш ҡаһиндар Йәрүсәлимдә йыйыла. Улар илселәрҙе алып килергә ҡуша, тотҡондарҙы Кәңәшмә алдына уртаға баҫтырып, нисек аҡһаҡты һауыҡтырыуҙары тураһында һорашалар: «Һеҙ быларҙың барыһын да ниндәй ҡөҙрәт менән һәм кем исеменән эшләнегеҙ?» Шул ваҡыт Петрус, Изге Рух менән һуғарылып, уларға былай ти: «Халыҡ башлыҡтары, аҡһаҡалдар! Ауырыу кешегә ниңә ярҙам итеүебеҙ тураһында беҙҙән яуап көтәләр. Шулай булғас, барыһына ла мәғлүм булһын: ҡаршығыҙҙа баҫып торған кеше һеҙ арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлатҡан, әммә Алла тарафынан үленән терелтелгән Ғайса Мәсих исеме менән һауыҡтырылды. Ғайса – ул һеҙ, төҙөүселәр, кире ҡаҡҡан һәм иң мөһим мөйөш ташына әйләнгән таш. Башҡа бер кемдән дә ҡотолоу килмәҫ. Ер йөҙөндә кешеләргә бирелгән исемдәр араһында беҙҙе ҡотҡара алған башҡа исем юҡ».

Петрус менән Яхъяның ҡыйыулығын күреп һәм уларҙың икеһенең дә уҡымаған, ябай кешеләр икәнлеген аңғарып, уларҙы тыңлаған башлыҡтар һәм аҡһаҡалдар аптырап китә. Әммә улар тиҙҙән был икәүҙең Ғайса менән йөрөгән кешеләр икәнен танып ҡала; тик, һауыҡҡан кешенең Петрус һәм Яхъя янында тороуын күреп, уларға ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтә алмайҙар. Илселәргә сығып торорға ҡушып, баш ҡаһиндар һәм аҡһаҡалдар үҙ-ара кәңәш ҡора: «Был кешеләр менән нимә эшләргә? Улар асыҡтан-асыҡ ҡылған мөғжизә Йәрүсәлимдә йәшәгән кешеләрҙең һәммәһенә билдәле, һәм беҙ быны инҡар итә алмайбыҙ. Әммә ошо хаҡта халыҡ араһында артыҡ һүҙ таралмаһын өсөн, әйҙәгеҙ, бынан ары был Кеше исеменән бер кемгә лә һөйләнеп йөрөмәһендәр, тип ҡурҡытып ҡуяйыҡ».

Илселәрҙе саҡырып индереп, баш ҡаһиндар уларға Ғайса исеменән бер нәмә лә һөйләмәҫкә һәм өйрәтмәҫкә ҡуша. Ләкин Петрус менән Яхъя: «Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, Алла һүҙен түгел, һеҙҙең һүҙҙе тыңлаһаҡ, был Алла ҡаршыһында дөрөҫ булырмы һуң? Беҙ



күргәндәребеҙ һәм ишеткәндәребеҙ тураһында һөйләмәй булдыра алмайбыҙ», – тип яуаплай. Кәңәшмәгә йыйылыусыларҙың барыһы ла, яза бирерлек сәбәп таба алмайынса һәм әлеге мөғжизә өсөн Алланы данлаған халыҡтан шөрләп, илселәргә тағы бер тапҡыр янап, ҡайтарып ебәрәләр.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 4:1–21*

## Иман хаҡына беренселәрҙән булып ғазап сигеүсе Стефанустың үлеүе

Илселәрҙең кәңәше буйынса, имандаштар берҙәмлеге, ете хеҙмәтсене һайлап алып, уларға фәҡирҙәр һәм мохтаждар хаҡында айырыуса хәстәрлек күреү бурысын йөкмәтә. Беренсе хеҙмәтсе итеп Изге Рух, иман һәм ҡөҙрәт тулы Стефанусты һайлайҙар. Ул халыҡ араһында бөйөк мөғжизәләр һәм хикмәттәр ҡылған. Мәсихкә инаныусыларҙың дошмандары шуның өсөн Стефанусты күрә алмай һәм уның менән йыш ҡына бәхәскә инә, әммә уның һүҙҙәрендәге аҡылға ҡаршы тора алмайҙар, сөнки нимә һөйләргә уға Изге Рух Үҙе өйрәтә. Шунан улар ҡайһы берәүҙәрҙе, Стефанус Аллаға һәм Мусаға ҡаршы көфөр һүҙ һөйләй, тип, Стефанусты ғәйепләр өсөн ҡотортоп ҡуя. Халыҡты шулай Стефанусҡа ҡаршы ҡуйып, уны ҡулға алалар һәм Юғары кәңәшмәгә алып киләләр. Ғәйепләүселәр уға ҡарата ялған шаһитлыҡ ҡыла башлағас, Кәңәшмәлә ултырыусылар Стефанустың йөҙө фәрештәнеке кеүек булыуын күрә.

Иң баш ҡаһин бөтә ғәйепләүҙәрҙе тыңлап бөткәндән һуң Стефанустан: «Ысынлап та шулай булдымы?» – тип һорай. Стефанус Изге Яҙма һүҙҙәре менән яуап бирә. Уның фаш итеп һөйләгән телмәрен тыңлап, Кәңәшмәлә ултырыусылар үҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, асыуҙан тештәрен шығырлата.

Изге Рух менән һуғарылған Стефанус, күҙҙәрен күккә төбәп, Алланың шөһрәтен һәм Уның уң яғындағы Ғайсаны күреп: «Мин асылған күктәрҙе һәм Алланың уң яғында торған Әҙәм Улын күрәм», – ти. Был һүҙҙәрҙән һуң ярһып ҡысҡырышырға тотоналар, Стефанустың һүҙҙәрен ишетмәҫ өсөн ҡолаҡтарын ҡаплап, уға ташланалар. Ҡала ситенә алып сығып, таш менән бәргесләй башлайҙар. Стефанус: «Раббым Ғайса, минең рухымды ҡабул ит! – тип доға ҡыла ла, тубыҡланып баҫып, көслө тауыш менән: – Раббым! Ҡылған был гонаһтары өсөн уларҙы яуапҡа тарттырма!» – тип ҡысҡырып йән бирә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 6:2–15; 7:1–60*



## Филиппус һәм хәбәши түрәһе

Стефанустың ғазаплы үлеменән һуң Йәрүсәлимдәге имандаштар берҙәмлектәрен ныҡ эҙәрлекләй башлайҙар. Берҙәмлек ағзалары Йәһүҙиә менән Самарияның төрлө ҡалаларына таралып урынлаша. Илселәр Раббы һүҙен вәғәзләүҙе дауам итә.

Бер ваҡыт Раббы фәрештәһе Филиппусҡа: «Йыйын да көньяҡҡа, Йәрүсәлимдән Газаға бара торған юлға сыҡ» – ти. Филиппус йыйына ла сығып китә. Был ваҡытта Аллаға табынырға тип Йәрүсәлимгә килгән бер хәбәши – Хәбәшстан батшабикәһе кәндәкиҙең хазина һаҡсыһы – үҙ иленә кире ҡайтып бара һәм арбаһында Ишағыяһ пәйғәмбәрҙең яҙмаларын уҡып ултырған була.

Рух Филиппусҡа: «Арбаға яҡыныраҡ барып, эргәһенән атла», – ти. Филиппус арба янына йүгереп килә һәм хәбәшиҙең Ишағыяһ пәйғәмбәрҙең яҙмаһын уҡып ултырыуын ишетеп: «Нимә уҡығаныңды аңлайһыңмы һуң?» – тип һорай. «Берәйһе төшөндөрөп бирмәһә, нисек аңлайым инде?» – тип, Филиппусҡа үҙ янынан урын бирә. Хәбәши Изге Яҙманың ошо урынын уҡып барған була: «Салырға килтерелгән һарыҡ шикелле, йөнөн ҡырҡыусы алдында өнһөҙ торған бәрәс һымаҡ, Ул ауыҙын асманы. Ул кәмһетелде, ғәҙел хөкөмдән мәхрүм ителде. Уның нәҫеле хаҡында кем һөйләр? Тормошо ерҙән алынды бит».

Хәбәши Филиппустан: «Әйт әле, бында пәйғәмбәр кем хаҡында һөйләй? Үҙе хаҡындамы, әллә бүтән берәү тураһындамы?» – тип һорай. Филиппус уға ошо урындан башлап аңлатып бирә һәм Ғайса хаҡындағы Һөйөнөслө Хәбәрҙе һөйләй.

Ошолай бара торғас, улар һыу буйына килеп етә. «Бына бит һыу, сумдырылыу йолаһын үтергә миңә нимә ҡамасаулай?» – тип һорай хәбәши. «Ысын күңелдән иманға килһәң, мөмкин», – ти уға Филиппус. «Ғайса Мәсихтең Алла Улы икәнлегенә ышанам», – тип яуаплай хәбәши. Ул арбаны туҡтатырға ҡуша. Икеһе лә һыуға инеп баҫа һәм Филиппус уны һыуға сумдырып ала. Улар һыуҙан сыҡҡас, хәбәшигә Изге Рух иңә; Филиппусты иһә Раббының фәрештәһе алып китә һәм хәбәши уны бүтәнсә күрмәй. Хәбәши ҡыуанысынан артабан үҙ юлы менән китә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 8:26–39*



## Мәсихселәрҙе эҙәрлекләүсе Шаул

Йәрүсәлимдәге имандаштар берҙәмлектәрен эҙәрләүселәр араһында Шаул исемле йәш фарисей ҙа була. Ул бик яҡшы дини белем алған, Изге Яҙманы һәйбәт белгән. Ата-бабаларҙан килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тотҡан, бөтә йолаларҙы һәм ҡанун ҡушҡанды теүәл үтәп килгән. Әммә, хаҡ дөрөҫөн белмәй тороп, Ғайсаның Мәсих булыуына ышанмай һәм мәсихселәрҙе динде боҙоусылар тип һанай. Шаул Ғайса Мәсих шәкерттәренең өйҙәренә баҫып инә, уларҙы тотоп бәйләп, ғазаптарға һәм үлемгә дусар итә, зindандарға оҙата.

Стефанусты таш менән бәргесләгән саҡта Шаул йәлләттәрҙең кейемдәрен һаҡлап тора, бының менән ул был язаға үҙенең ҡарашын күрһәтә. Шаул улай уҡ миһырбанһыҙ ҙа булмай, әммә, ғәҙел хөкөм ҡылына, тигәнгә ныҡ ышана.

Динде боҙоусы был ҡурҡыныс тәғлимәттең йәйелә барыуын һәм Дамасктың уның үҙәк ҡалаларының береһе булып китеүен белеп, Шаул шунда юлланырға була. Раббының шәкерттәренә ҡарата нәфрәт утында янып, ул иң баш ҡаһинға килә, унан Дамасктағы ғибәҙәтханаларға хат яҙҙырып ала. Был хат Мәсих яҡлыларҙы тотоп, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, Йәрүсәлимгә язаларға алып ҡайтырға ярҙам итергә тейеш була.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 7:58; 8:1, 3; 9:1–2*



## Раббының Шаулға күренеүе

Шаул Дамаскка етеп килгәндә, ҡапыл уны күктән төшкән яҡтылыҡ солғап ала. Ул ергә йығыла һәм: «Шаул, Шаул! Ниңә Мине эҙәрлекләйһең?» – тигән тауыш ишетә. «Һин кем, Әфәндем?» – тип һорай Шаул. «Мин – һин эҙәрләгән Ғайса», – тип яуап бирә Рабби. Ҡото осҡан Шаул: «Әфәндем! Миңә нимә эшләргә?» – тип һорай. «Тор ҙа ҡалаға бар. Нимә эшләргә икәнен һиңә унда әйтерҙәр», – ти уға Рабби.

Шаул менән бергә йөрөгән кешеләр өнһөҙ ҡатып ҡала, сөнки улар тауышты ишетһәләр ҙә, бер кемде лә күрмәйҙәр. Шаул ерҙән тора; күҙҙәре асыҡ булһа ла, ул бер нәмә лә күрмәй: күктән төшкән яҡтылыҡ уны һуҡырайтҡан була. Юлдаштары уны Дамаскка етәкләп алып бара.

Дамаск ҡалаһында Мәсихтең Һананиас исемле тоғро бер шәкерте йәшәй. Ул күргән илаһи күренмештә Рабби уға былай ти: «Һананиас! Тор ҙа Тура тип аталған урамға бар. Йәһүҙә йәшәгән өйгә инеп, Шаул исемле Тарсос кешеһен һора. Ул әлеге мәлдә доға ҡыла, уға илаһи күренмеш килде. Унда Һананиас исемле берәү уның янына килеп, Шаулдың күҙҙәре йәнә күрә башлаһын өсөн, уға ҡулдарын ҡуйҙы». Һананиас: «Раббым! Мин ул кешенең Йәрүсәлимдә Һинең изге халҡыңа ҡаршы ни тиклем яуызлыҡтар ҡылыуы тураһында күптәрҙән ишеттем. Бында ла ул баш ҡаһиндарҙан исемеңде телгә алған һәр кемде ҡулға алырға вәкәләт алып килде», – тип яуаплай. Әммә Рабби уға: «Бар, кит, сөнки Мин был кешене башҡа халыҡтарға, батшаларға, Исраил халҡына исемемде танытһын өсөн һайлап алдым», – ти.

Һананиас Рабби әйткән ергә китә. Өйгә ингәс, ул Шаулға ҡулдарын ҡуйып: «Шаул туған! Мине һиңә, күҙҙәрең күрә башлаһын өсөн һәм Изге Рух менән һуғарырға тип, юлыңда осраған Рабби Ғайса ебәрҙе», – тиеүгә Шаулдың күҙҙәрен томалап торған ҡау ҡойолоп төшкәндәй була һәм ул тағы күрә башлай. Шул көндө үк ул Ғайса хаҡына һыуға сумдырылыу йолаһын үтә һәм, Ғайса – Алланың Улы, тип ғибәҙәтханаларҙа вәғәз һөйләй башлай.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 9:3–20*



## Шаулдың Дамасктан ҡасыуы

Шаулдың вәғәздәрен тыңлаған кешеләр аптырап: «Йәрүсәлимдә Ғайса Мәсихкә табыныусыларҙы эҙәрләгән әҙәм түгелме һуң был? Бында ла, уларҙы бығаулап, баш ҡаһиндарға тапшырырға тип килмәнеме икән ул?» – тиешәләр. Ә Шаулдың иманы нығынғандан-нығына ғына бара, һәм ул Ғайсаның Ҡотҡарыусы Мәсих икәнен иҫбатлаған вәғәздәре менән Дамаскта йәшәгән йәһүдтәрҙе аптыраушта ҡалдыра.

Күпмелер ваҡыт уҙғас, йәһүдтәр Шаулды үлтерергә һүҙ беркетә. Бының өсөн, ул Дамасктан китергә уйлай ҡалһа, эләктереп алырға, тип бөтә ҡала ҡапҡалары төбөнә һаҡсылар ҡуялар. Шаул уларҙың был ниәтен белеп ҡала ла бер ҡайҙа ла китмәй. Төндә шәкерттәр уны, ҙур бер кәрзингә ултыртып, ҡала диуары буйлап тышҡа төшөрә.

Дамасктан киткәс, Шаул Йәрүсәлимгә килә. Унда ул Ғайсаның шәкерттәренә ҡушылырға тырыша, әммә уның ысынлап та Мәсих шәкерте булыуына ышанмайҙар, унан барыһы ла ҡурҡа. Шунан ул Барнабас исемле бер илсе менән килә. Барнабас юлда Шаулдың Раббыны күреүен, Раббының уға нимәләр әйтеүен, шулай уҡ Шаулдың Дамаскта Ғайса хаҡында ҡыйыу рәүештә вәғәзләүен һөйләп бирә. Ошонан һуң илселәр һәм имандаштар берҙәмлеге Шаулды үҙҙәренең араһына туғандай ҡабул итә. Аҙағыраҡ уны илсе Паулус тип йөрөтә башлайҙар. Мәсих хаҡындағы вәғәзде мәжүсиҙәргә еткереү уның тормош маҡсатына әүерелә.

Илсе Паулус төрлө ҡалаларҙағы берҙәмлектәргә бик күп хаттар яҙа. Уларҙың береһендә былай тиелә: «Элек үҙем өсөн табыш тип һанаған нәмәләрҙең Мәсих хаҡына юғалтыу икәнлеген әле килеп аңланым. Улай ғына ла түгел, Раббым Ғайса Мәсихте танып белеүҙе мин берҙән-бер табыш тип һанайым, һәм башҡа бөтә нәмәләрҙе лә юғалтыу тип уйлайым. Мәсихкә эйә булыу һәм Унда үҙемде табыу өсөн мин, бар нәмәне сүп-сарға иҫәпләп, Мәсих хаҡына уларҙан баш тарттым. Минең аҡланыуым ҡанунды үтәүгә түгел, ә Мәсихкә булған иманыма нигеҙләнгән, тимәк, был – иман аша Алланан килгән аҡланыу».

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 9:21–28;*
*ФИЛИППОЙҘАРҒА ХАТ 3:7–9*



## Яфо ҡалаһында Табиҫаның үленән терелеүе

Урта диңгеҙ буйында урынлашҡан, үҙ порты булған Яфо ҡалаһында Ғайса Мәсихкә инанған Табиҫа исемле бер шәкерт ҡатын йәшәй. Уның исеме «ҡыр кәзәһе» тигәнде аңлата. Ул үҙ ғүмерендә бик күп яҡшылыҡтар ҡыла һәм фәҡирҙәргә ярҙам итә. Бер ваҡыт ул ауырып китә һәм тиҙҙән вафат була. Уны йыуып, өҫкө ҡаттағы бер бүлмәгә һалалар.

Илсе Петрус был мәлдә Лудда ҡалаһында була. Лудда Яфоға яҡын булғанлыҡтан, үҙҙәре янына тиҙерәк килеп етеүен үтенеп, артынан ике кеше ебәрәләр.

Петрус килеп еткәс, уны өҫкө ҡаттағы бүлмәгә алып инәләр. Бөтә тол ҡатындар илай-илай Табиҫа тере сағында уларға тип теккән күлдәктәрҙе, кейемдәрҙе күрһәтә башлайҙар. Петрус бөтәһен дә бүлмәнән сығарып ебәрә, тубыҡланып доға ҡыла һәм мәйеткә табан боролоп: «Табиҫа! Тор!» – тип бойора. Ҡатын күҙҙәрен аса ла, Петрусты күреп, тороп ултыра. Петрус уны ҡулынан тотоп торғоҙа, шәкерттәрҙе, тол ҡатындарҙы саҡырып, уларҙың ҡаршыһына тере Табиҫаны баҫтырып ҡуя.

Был хәл бөтә Яфоға билдәле була һәм күптәр Ғайсаға инана. Ә Петрус тағы байтаҡ ваҡыт Яфола Шимғон исемле күн оҫтаһының өйөндә йәшәй.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 9:36–43*



# Йөҙ башы Корнелиус

Ғайса Мәсих һәм Уның илселәре йәшәгән замандарҙа Исраил ерҙәре генә түгел, Урта диңгеҙ илдәре лә Рим империяһының хакимлығы аҫтында була. Был төбәктәрҙә Рим ғәскәрҙәре урынлашҡан була. Бер полк Урта диңгеҙҙең Ҡайсарея портында тора. Йөҙ башы Корнелиус был полктың хәрби етәкселәренең береһе була. Корнелиус һәм уның ғаиләһе дин тота, Алланы ололап йәшәй. Ул ярлы-ябағаға күпләп хәйер-саҙаҡа өләшә һәм һәр ваҡыт Аллаға доға ҡылыр була. Бер ваҡыт уға Алланың фәрештәһе күренә. Күренмеш мәлендә янына килеп: «Корнелиус! Доғаларың һәм хәйерҙәрең ҡорбанға һаналып, Алла хозурында ҡабул ҡылынды; хәҙер Петрус тип тә йөрөтөлгән Шимғонды алып килергә Яфоға кешеләр ебәр. Ул һиңә үҙеңде лә, ғаиләңде лә ҡотҡара торған һүҙҙәрҙе әйтер», – ти. Фәрештә киткәс, Корнелиус ике хеҙмәтсеһен һәм тоғро ғәскәриҙәре араһынан диндар берәүһен саҡырып ала. Барыһын да һөйләп биргәс, уларҙы Ҡайсареянан көньяҡта урынлашҡан Яфоға ебәрә.

Ғәскәриҙәр Яфола Петрусты эҙләп таба. Петрус был кешеләрҙе ҡабул итә, үҙендә йоҡларға ҡалдыра, ә икенсе көнө улар менән бергә Ҡайсареяға китә. Корнелиус, үҙенең туғандарын һәм яҡын дуҫтарын йыйып, уларҙы көтөп тора инде. Йыйылған кешеләргә мөрәжәғәт итеп, Петрус былай ти: «Алланың ысынлап та барыһына ла тигеҙ ҡарағанын мин хәҙер аңлайым. Һәр халыҡ араһында Уның күңеленә Алланы ололап һәм хаҡ эштәр ҡылып йәшәгәндәр яҡын. Алла, Ғайса Мәсих аша килгән тыныслыҡ хаҡындағы Һөйөнөслө Хәбәрҙе бәйән итеп, Исраил халҡына Үҙенең һүҙен ебәрҙе. Ғайса – бөтәһенең Хакимы. Беҙ йәһүдтәр илендә һәм Йәрүсәлимдә Ул ҡылған бөтә эштәрҙең, шулай уҡ Уны ағас бағанаға аҫып үлтереүҙәренең шаһиты. Әммә өсөнсө көндә Алла Уны терелтеп торғоҙҙо. Ғайса – тереләргә һәм үлеләргә Алла тарафынан билдәләп ҡуйылған Хөкөмдар. Ул беҙгә ошо хаҡта халыҡҡа вәғәз әйтергә һәм шаһитлыҡ ҡылырға бойорҙо. Уға инанған һәр кемдең гонаһтары ғәфү ителәсәк, тип барса пәйғәмбәрҙәр Уның тураһында һөйләне». Петрустың һөйләгән вәғәзенән һуң Корнелиус үҙе лә,



ғаиләһе лә, бөтә дуҫтары ла Алла Улы Ғайса Мәсихкә инана, Уның хаҡына һыуға сумдырылыу йолаһын үтә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 10*

## Фәрештәнең Петрусты төрмәнән азат итеүе

Был мәлдә Һируд батша имандаштар берҙәмлегендәге кешеләрҙе эҙәрлекләй башлай. Уның бойороғо буйынса Яхъяның туғаны Яҡупты үлтерәләр. Бының йәһүдтәргә оҡшауын күреп, Петрусты ла төрмәгә яба. Ҡотҡарылыу байрамынан һуң халыҡ алдына сығарырға һәм шунда хөкөм итергә уйлай. Төрмәлә Петрусты ун алты һаҡсы һаҡлай. Ә был мәлдә имандаштар берҙәмлегендә уның өсөн Аллаға бик тырышып доға ҡылалар.

Һируд Петрусты хөкөм алдына сығарырға теләгән көндөң төнөндә Петрус ике сылбыр менән бығауланған хәлдә йоҡлап ята. Уны ике ғәскәри һаҡлай, ишек янында ла ҡарауылсылар тора. Төн уртаһында ҡапыл Раббының бер фәрештәһе пәйҙә була һәм төрмә эсе яҡтырып китә. Фәрештә Петрусты төртөп уята: «Тиҙерәк тор!» Петрустың ҡулындағы сылбыры ысҡынып төшә. «Кейен дә минең арттан эйәр», – тип ҡуша уға фәрештә. Петрус быларҙың барыһы ла өндә булыуын аңламайынса, илаһи күренмеш кенәлер был, тип уйлап, фәрештә артынан атлай. Ике һаҡсы эргәһенән үтеп, ҡалаға сыға торған тимер ҡапҡа янына килеп еткәс, ҡапҡа үҙенән-үҙе асылып китә. Улар урамға сыға. Бер урамды үтеүгә, фәрештә ҡапыл ғына юғала.

Шунда Петрус иҫенә килеп: «Хәҙер мин ысынлап та беләм: Раббы Үҙенең фәрештәһен ебәргән. Ул мине Һируд ҡулынан һәм йәһүд халҡы күрергә теләгән язанан ҡотҡарҙы», – ти. Тирә-яғына ҡаранып алғандан һуң, Яхъяның әсәһе Мәрйәм йәшәгән өйгә китә. Унда иман юлындағы кешеләр йыйылып доға ҡылған була. Улар янына ингәс, Петрус Раббының нисек итеп уны төрмәнән сығарғанын һөйләп бирә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 12:1–17*



## Илсе Паулустың беренсе эш сәфәре

Илсе Паулус үҙенең вазифаһына тоғро ҡала – мәжүсиҙәр араһында Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләүен дауам итә. Ул Ғайса Мәсихтең иманлылар араһында бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған: «Шуға күрә барса халыҡтарға барығыҙ һәм уларҙы Минең шәкерттәрем итегеҙ, уларҙы Ата, Улы һәм Изге Рух исеме менән һыуға сумдырығыҙ, һеҙгә ҡушҡандарымдың барыһын да үтәргә өйрәтегеҙ», – тигән бойороғон ҙур ихласлыҡ менән үтәй. Ул ваҡыттарҙағы Рим империяһының төрлө ҡалалары һәм өлкәләре буйлап оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған эш сәфәрҙәренең өсөһөн дә Паулус Антиохия ҡалаһынан башлай.

Беренсе сәфәргә Паулус менән илсе Барнабас та юллана. Карап уларҙы Антиохиянан Кипрға алып килә. Илселәрҙең ғәмәлдәре китабынан белеүебеҙсә, бында, Кипрҙа, Алланың бөйөк хеҙмәтсеһе Шаулды латин исеме менән Паулус тип йөрөтә башлайҙар. Кипрҙан улар яңынан Кесе Азияға ҡайта, аҙаҡ әле йәйәү, әле ишәктәргә атланып, Галатия төбәгенә килеп етәләр. Шунда, Иконион ҡалаһында, үҙҙәренең вәғәзен башлайҙар һәм әллә күпме халыҡ Ғайсаға инана. Икониондан улар Лустра ҡалаһына китә. Унда Раббы Паулус аша тыумыштан аҡһаҡ бер әҙәмде һауыҡтыра. Халыҡ, Паулус менән Барнабас илаһтыр, тигән фекергә килә. Гректар аллаһы Зевс ҡорамының ҡаһины уларға ҡорбан килтерергә теләй. Әммә, был хаҡта белеп ҡалғас, илселәр өҫтәрендәге кейемдәрен йыртып ташлап: «Һеҙ нимә эшләйһегеҙ? – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра халыҡ араһына ташлана. – Беҙ ҙә һеҙҙең кеүек үк кешеләр! Һеҙҙе был файҙаһыҙ илаһтарығыҙҙан арындырыу, күкте, ерҙе, диңгеҙҙе һәм ундағы һәр нәмәне бар иткән тере Аллаға табан бороу өсөн Һөйөнөслө Хәбәр тураһында һөйләйбеҙ. Элек Ул бөтә халыҡтарға үҙ юлдарынан барырға ихтыяр бирә ине, әммә, яҡшылыҡтар ҡылып, Үҙен күрһәтеп торҙо: ваҡытында күктән ямғыр яуҙырып, мул уңыш биреп, һеҙҙе ризыҡ менән тәьмин итте һәм йөрәктәрегеҙҙе ҡыуаныс менән тултырҙы».

Илселәр ҡыйыу рәүештә Лустрала вәғәзләй. Әммә Лустраға килгән бер нисә йәһүд: «Улар бер генә хаҡ һүҙ ҙә һөйләмәй, барыһы ла ялған», – тип халыҡты ҡоторта. Паулусты таштар менән туҡмаһалар ҙа, Алла уны һаҡлап алып ҡала, ғүмере ҡыйылмай һәм ул юлын дауам итә. Лустранан Паулус Дербе ҡалаһына килә. Бында ул Һөйөнөслө Хәбәрҙе лә вәғәзләй һәм байтаҡ халыҡ



Раббыға инана. Дербенан Паулус менән Барнабас Антиохияға әйләнеп ҡайта. Әле башҡарған эштәрен атҡарыу өсөн, улар ошо ҡаланан Алла мәрхәмәтен алып сығып киткән була. Антиохияға килеп еткәс, имандаштар берҙәмлеген йыйып, Алланың уларҙың вәғәздәре аша мәжүсиҙәргә иман ишектәрен асыуы тураһында һөйләп бирәләр.

Илсе Паулустың Һөйөнөслө Хәбәрҙе таратыу маҡсаты менән башҡарылған беренсе эш сәфәре өс йыл самаһы дауам итә.

*МАҪҪАЙОС 28:19–20; ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 13; 14*

## Паулустың икенсе эш сәфәре

Икенсе сәфәрендә илсе Паулусты Ғайса Мәсихкә инанған йәһүд Силас оҙатып йөрөй. Антиохиянан улар яңынан Дербе һәм Лустра ҡалаларына китә (Лустрала бынан бер нисә йыл элек Паулусты саҡ таш менән бәргесләп үлтермәйҙәр). Бында Паулус аҙаҡ тоғро ярҙамсыһы булып киткән Тимоҫеус исемле йәш егетте осрата.

Улар Асияла ятҡан Эгей диңгеҙенең яр буйындағы Троас ҡалаһына килеп етә. Төндә Паулусҡа күренмеш килә: уның алдына килеп баҫҡан ниндәйҙер бер македон: «Македонияға килеп, беҙгә ярҙам ит әле», – ти. «Ошо күренмештән һуң, Алла беҙҙе шунда Һөйөнөслө Хәбәрҙе һөйләргә саҡыра, тигән фекергә килеп, шунда уҡ Македонияға китергә булдыҡ», – тип яҙа инжилсе Лукас, Илселәрҙең ғәмәлдәре китабының авторы (Лукас үҙе, күрәһең, Паулусҡа Троаста килеп ҡушыла). Македония Грецияның төньяҡ-көнсығышындағы Рим өлкәһе була. Эгей диңгеҙен карап менән йөҙөп сыҡҡас, Филиппой ҡалаһына килеп етәләр. Нәҡ Филиппойҙа Европалағы беренсе имандаштар берҙәмлегенә нигеҙ һалынған булыуы ихтимал. Филиппойҙа Паулус менән Силасты төрмәгә бикләйҙәр, әммә был турала киләһе хикәйәлә бәйән ителәсәк. Филиппойҙан Паулус Эгей диңгеҙ яры буйындағы ҙур портлы Тессалонике ҡалаһына килә. Бында ғәйәт күп гректар, шулай уҡ ҡайһы бер йәһүдтәр Ғайсаға инана. Шулай ҙа йәһүдтәр араһында Паулус менән Силасҡа дошман ҡараған кешеләр ҙә табыла. Улар халыҡты был икәүгә ҡаршы күтәреп сыға. Паулус менән Силас Бероя ҡалаһына китергә мәжбүр була. Бероянан Паулус Грецияның баш ҡалаһы Афинаға килә. Греция ул ваҡытта Рим хакимлығына буйһонған була. Уны Ахая тип йөрөткән булалар. Афинала Паулус Алла һүҙен фәлсәфәселәр һәм ябай кешеләр алдында вәғәзләй. Был турала шулай уҡ беҙ киләһе хикәйәләрҙә уҡырбыҙ. Афинанан ул Рим империяһындағы иң әһәмиәтле ҡалаларҙың береһе булған Коринҫосҡа килә. Коринҫоста Паулус йыл ярым йәшәп ташлай. Был арауыҡта ҙур имандаштар берҙәмлеге ҡалҡып сыға. Коринҫостан Паулус диңгеҙ буйлап Кесе Азияға ҡайта һәм шаҡтай ҙур Эфес ҡалаһына килә. Артабан ул, юлын дауам итеп, Йәрүсәлимгә килә һәм Антиохияға әйләнеп ҡайта.



Паулустың был икенсе эш сәфәре шулай уҡ өс йыл самаһы дауам итә. Ошо арауыҡта Паулус бер нисә мең саҡрым юл үтә.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 15:36 – 18:22*

## Паулус менән Силастың төрмәлә ултырыуы

Бер ваҡыт илсе Паулус үҙенең юлдашы Силас менән римдарҙың ҡала-колонияһы Филиппойға килә. Унда улар күрәҙәселек ене эйәләшкән бер хеҙмәтсе ҡыҙҙы Ғайса исеме менән һауыҡтыра. Ул үҙенең күрәҙәлек ҡылыуы менән хужаларына ҙур табыш килтергән була. Табыш сығанағының юҡҡа сығыуын күреп, ҡыҙҙың хужалары Паулус менән Силасты тотоп алып: «Был кешеләр – йәһүдтәр. Улар беҙгә, римдарға, ҡабул итергә лә, башҡарырға ла ярамаған йолаларҙы вәғәзләп, ҡалала тыныслыҡты тыуҙыра», – тип ҡала майҙанына башлыҡтарға алып киләләр. Халыҡ та Паулус менән Силасҡа ҡаршы сыға. Шунан ҡала идарасылары, илселәрҙең өҫтөнән кейемдәрен йолҡҡослап систереп, уларҙы таяҡ менән туҡмарға бойора. Ныҡ ҡына туҡмағандан һуң, уларҙы төрмәгә ташлайҙар һәм төрмә ҡарауылсыһына тотҡондарҙан күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа бойоралар. Шундай әмер алғас, ҡарауылсы уларҙы төрмәнең эске бүлмәһенә яба ла аяҡтарын ағас ҡалыпҡа һуғып ҡуя. Шулай ҙа Паулус менән Силас бошонмай. Төн уртаһы еткәс, улар доға ҡыла, Алланы данлап мәҙхиәләр йырлай, ә ҡалған тотҡондар тыңлап ултыра.

Ҡапыл бик ныҡ итеп ер тетрәй, хатта төрмә нигеҙенә тиклем һелкенеп ҡуя. Бөтә ишектәр асылып, тотҡондарҙың аяҡтарындағы бығауҙары таралып төшә. Төрмә һаҡсыһы уянғас, асыҡ ишектәрҙе күреп, бөтә тотҡондар ҙа ҡасҡан, тип уйлай. Ҡылысын сығарып, үҙен үлтерергә уйлай. Әммә Паулус уға: «Үҙеңә яуызлыҡ ҡылма, беҙ барыбыҙ ҙа бында», – тип ҡысҡыра. Ҡарауылсы, ҡото осоп, Паулус менән Силастың аяғына йығыла: «Әфәнделәрем! Ҡотолор өсөн миңә нимә эшләргә кәрәк?» – тип һорай. «Раббы Ғайсаға инан. Шулай эшләһәң, үҙең дә, өйөңдәгеләрҙең дә барыһы ҡотолор», – тип яуап бирә тегеләр. Шунда ҡарауылсы уларҙы төрмәнән сығара, йәрәхәттәрен йыуа һәм тиҙ арала яҡындары менән һыуға сумдырылыу йолаһын үтә.

Икенсе көнөнә Паулус менән Силасты төрмәгә ултыртҡан ҡала идарасылары, Паулус менән Силасты азат итергә ҡушып, хеҙмәткәрҙәрен төрмә һаҡсыһына ебәрә. Әммә Паулус уларға: «Беҙҙе, Рим граждандарын, халыҡ алдында хөкөм итмәйенсә туҡманылар, төрмәгә яптылар, ә хәҙер йәшерен рәүештә сығарырға



теләйҙәрме? Юҡ! Килһендәр ҙә беҙҙе үҙҙәре сығарһындар» – ти. Хеҙмәткәрҙәр был һүҙҙәрҙе ҡала идарасыларына еткерә. Илселәрҙең Рим граждандары икәнен ишетеп, ҡурҡып китәләр һәм уларҙан ғәфү үтенәләр. Төрмәнән сығарғас, Паулус менән Силасҡа был ҡаланан китергә ҡушалар.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 16:16–39*

# Паулус Афинала

Паулус үҙенең икенсе эш сәфәрендә Афинала булған, тип һөйләгәйнек инде. Афина ҡалаһы үҙ заманының мәҙәниәт үҙәге һәм Сократ, Платон кеүек бөйөк фәлсәфәселәрҙең тыуған ере була. Паулус бында һындарҙың шул тиклем дә күплеген күреп йәне көйә. Ул ғибәҙәтханала йәһүдтәр һәм Алланы ололаусы бүтән кешеләр менән әңгәмәләр ҡороп ултыра, шулай уҡ көн һайын баҙар майҙанында осраған кешеләр менән һөйләшә. Ҡайһы бер фәлсәфә әһелдәре уның менән бәхәскә инә. Берәүҙәре: «Был бушҡыуыҡ ни әйтергә теләй?» – тип һораша, икенселәре иһә: «Ул сит илаһтар тураһында вәғәз һөйләй булһа кәрәк», – ти, сөнки Паулус уларға Ғайса тураһында һәм үленән терелеү хаҡында бәйән итә.

Улар Паулусты Ареопаг* ҡалҡыулығына алып килә. «Вәғәзләгән был яңы тәғлимәтең тураһында яҡшылабыраҡ һөйлә әле беҙгә, – тип һорайҙар унан. – Юҡһа һин сәйер нәмәләр хаҡында әйтәһең, уларҙың ни аңлатҡанын белгебеҙ килә». Паулус Ареопаг уртаһына тороп баҫа. «Афина халҡы! Һеҙҙең бик тә диндар булыуығыҙҙы бөтә яҡлап күреп торам, – ти ул. – Изге ҡоролмаларығыҙҙы ҡарап йөрөгәндә „Билдәһеҙ аллаға“ тип яҙылған ҡорбан усағын да күрҙем. Мин ошо үҙегеҙ ҙә белмәгән, ләкин табынған Алла тураһында һеҙгә вәғәзләйем дә инде. Донъяны һәм унда булған һәммә нәмәне бар иткән Алла – Ул күктәрҙең һәм ерҙең Хужаһы. Ул кеше ҡулы менән төҙөлгән ҡорамдарҙа йәшәмәй, кешеләрҙең Уға ҡул хеҙмәте күрһәтеүенә лә мохтаж түгел. Ул Үҙе һәр кемгә ғүмер, һулыш һәм башҡа бөтә нәмәне бирә. Бөтөн ер йөҙө буйлап йәшәһендәр тип, Ул бер әҙәмдән тотош кешелекте барлыҡҡа килтерҙе, барыһына ла ваҡыт һәм йәшәү урындарының сиктәрен билдәләне. Ул быны кешеләр Алланы эҙләһендәр, бәлки, Уны тойомлап табырҙар, тип эшләне. Ә бит Ул беҙҙең беребеҙҙән дә алыҫ түгел. Һеҙҙең ҡайһы бер шағирҙарығыҙ: „Беҙ ҙә Уның нәҫеленән“, – тип әйткән кеүек, „беҙ Уның арҡылы йәшәйбеҙ, хәрәкәт итәбеҙ һәм көн күрәбеҙ“. Шуға күрә беҙ, Алла нәҫеленәнбеҙ икән, Алланы кеше ниәте һәм оҫталығы менән яһалған алтын, көмөш йәки таш һынға оҡшаш тип уйларға тейеш түгелбеҙ. Шулай итеп, хәҡиҡәтте белмәйенсә йәшәгән замандарҙы Алла ғәйеп итмәне, ләкин хәҙер Ул бөтә ерҙәге барлыҡ кешеләргә тәүбә итергә бойора. Алла бар ғаләмдәге ғәҙел

* Ареопаг – ҡала аҡһаҡалдары йыйылған урын.



хөкөм итеү көнөн билдәләне бит. Хөкөм итәсәк Затты ла һайлап ҡуйҙы инде. Алла, ул Затты үленән терелтеп, бының ысынлығын һәр кемгә иҫбат итте».

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 17:16–31*

## Паулустың өсөнсө эш сәфәре

Күпмелер ваҡыттан һуң Паулус үҙенең өсөнсө эш сәфәренә ҡуҙғала. Антиохиянан ул йәнә төньяҡҡа китә. Фругия төбәге аша үтеп, Эгей диңгеҙенең Асия яры буйындағы Эфес ҡалаһына килеп етә. Эфес үҙ порты булған, сирек миллион халыҡ йәшәгән ҙур ҡала була. Бында Паулус ике йыл тирәһе йәшәй. Шуға Асия өлкәһенең (ул ваҡытта Асия тип бөгөнгө Кесе Азияның бер өлөшөн генә атағандар) бөтә төбәктәрендә лә йәһүдтәр ҙә, гректар ҙа Ғайса Мәсих тураһындағы вәғәзде тыңлай. Алла иһә Паулустың ҡулдары менән байтаҡ мөғжизәләр ҡыла.

Эфес ҡалаһында алиһә Артемиданың мәрмәрҙән һалынған иҫ киткес гүзәл ҡорамы була. Уны 220 йыл дауамында төҙөйҙәр һәм ул ер йөҙөндәге ете мөғжизәнең береһе һанала. Аҫыл таш оҫталары һәм рәссамдар, көмөштән Артемида ҡорамының кесерәйтелгән күсермәһен эшләп, уларҙы сувенир урынына һата. Улар ҡала эсендә Паулусҡа һәм мәсихселәрҙең етәкселәренә ҡаршы ҙур фетнә ойоштора, сөнки Артемидаға табынғандарҙың күбеһе тере Аллаға инана башлай. Паулусҡа Эфестан китергә тура килә. Эгей диңгеҙен карап менән йөҙөп үтеп, Македония һәм Грецияның быға тиклем вәғәзләргә өлгөргән төбәктәрендә, шул иҫәптән Филиппойҙа һәм Коринҫоста була. Аҙаҡ ул яңынан Асияға әйләнеп ҡайта. Троаста икенсе тапҡыр вәғәз һөйләй. Юлын дауам итеп, Паулус Троастан Ассаға тиклем килеп етә, унан карап менән Самос утрауында, Митулене, Милетос ҡалаларында туҡталып уҙа. Паулус Милетосҡа күп һанлы Эфес берҙәмлегенең өлкәндәрен саҡыра. Бүтәнсә уларҙы бер ҡасан да күрә алмаясағын белеп, хушлашырға уйлай ул. Кос менән Родос утрауҙарындағы порттар, Кесе Азиялағы Патара һәм Тир порттары аша үтеп, Паулус Птолемаисҡа килеп етә. Сәфәрен Птолемаистан йәйәү дауам итеп, Ҡайсарея аша Йәрүсәлимгә тиклем бара. Йәрүсәлимдә Паулусты ҡулға алалар. Паулустың был өсөнсө эш сәфәре өс йыл арауығын – Ғайса тыуғандан һуң 54-се йылдан алып 57-се йылға тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала.

Илсе Паулустың сәфәрҙәре ябай ғына сәфәр булмай. Ғайса Мәсих тураһындағы Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләп йөрөп, ул күп ғазаптар аша үтә. Үҙе был турала былай тип яҙа: «Мин күпкә ауырыраҡ эштәр башҡарҙым, төрмәләргә лә йыш ябылдым, туҡмалыуҙарымдың иҫәбе юҡ һәм үлем хәлендә лә күп мәртәбәләр булдым. Йәһүдтәрҙән



биш тапҡыр утыҙ туғыҙар мәртәбә ҡамсы менән һуғылдым. Өс тапҡыр таяҡ менән туҡмалдым, бер тапҡыр таш менән бәргеслә-неләр, өс тапҡыр карап һәләкәтенә осраным, бер тәүлекте асыҡ диңгеҙ уртаһында үткәрҙем. Күп тапҡырҙар сәйәхәттәрҙә йөрөп, йылғаларҙа ҡурҡыныстарға дусар булдым, юлбаҫарҙар һөжүменә юлыҡтым, ырыуҙаштарымдан, бүтән халыҡ кешеләренән дә ҡур-ҡыныс янаны, ҡалаларҙа, сүллектә, диңгеҙҙә лә, ялған имандаштар араһында ла хәүеф һағаланы...»

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 18:23 – 21:34;*
*2 КОРИНҪОСТАРҒА 11:23–26*

## Сихырсылыҡ гонаһы

Иҫке Ғәһедтән беҙ, Алла Үҙенең халҡын ниндәй ҙә булһа сихырсылыҡ, күрәҙәлек, арбау менән шөғөлләнеүҙән тыя, хатта: «Күрәҙәлек итмәгеҙ, сихыр менән булышмағыҙ» *(Левиҙәр 19:26)* тигән тыйыуҙы боҙған кешеләрҙе үлтерергә ҡушҡан, тип уҡып беләбеҙ. «Арағыҙҙа улын йәки ҡыҙын утта яндырып ҡорбан итеүсе, сихырсы, күрәҙәсе, тылсымсы, фал асыусы, рухтарҙы саҡырыусы һәм әруахтарҙан һораусылар булмаһын. Сөнки улай эш итеүселәр Раббы өсөн ерәнгес. Аллағыҙ Раббы ошо әшәке эштәре өсөн уларҙы һеҙҙең алдығыҙҙан ҡыуасаҡ» *(Ҡабатлап әйтелгән ҡанун 18:10–12)*. «Әруахтарҙың рухын саҡырыусы, сихырсылыҡ менән булашыусы йәки күрәҙәлек итеүсе, ирме ул, ҡатынмы, мотлаҡ үлтерелергә тейеш. Таштар менән бәреп үлтерелер улар, һәм үлемдәре өсөн үҙҙәре ғәйепле» *(Левиҙәр 20:27)*.

Илсе Паулустың өсөнсө сәфәрендә Эфес ҡалаһында шундай хәл булып уҙа. Унда Алла Паулус ҡулы менән байтаҡ мөғжизәләр ҡыла, шуға хатта Паулус ҡағылған ҡулъяулыҡтарҙы, билбауҙарҙы алып ҡайтып, ауырыуҙарҙың өҫтөнә һалғандар. Шунан һуң ауырыуҙар һауыҡҡан, эстәренән яуыз рухтар сыҡҡан. Ҡайһы бер бағымсы илгиҙәр йәһүдтәр ҙә ен эйәләшкән кешеләргә: «Мин һеҙгә Паулус вәғәзләгән Ғайса вәкәләте менән бойорам», – тип Раббы Ғайса исемен ҡуллана башлай. Мәҫәлән, йәһүд кешеһе Скеуас исемле баш ҡаһиндың ете улы ла шулай эшләгән. Әммә бер ваҡыт яуыз рух уларҙан: «Ғайсаны беләм, Паулус та миңә таныш, ә һеҙ кем?» – тип һорай. Эсендә яуыз рух булған кеше бағымсыларға ташлана һәм, уларҙы бик ныҡ итеп туҡмағас, тегеләр ул йорттан яраланған хәлдә, йыртыҡ кейемдәр менән сығып ҡаса. Был ваҡиға Эфеста йәшәгән бөтә йәһүдтәргә һәм башҡа милләт кешеләренә мәғлүм була. Барыһы ла ҡурҡыуға төшә, Раббы Ғайсаның исемен тағы ла нығыраҡ ихтирам итә башлайҙар. Иманға килгән күптәр ҡылған насар эштәрен таный. Ә сихырсылыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең күбеһе, үҙҙәренең китаптарын алып килеп, бөтәһенең күҙ алдында яндыра. Яндырылған китаптарҙың хаҡын иҫәпләйҙәр: барлығы илле мең көмөш тәңкә булып сыға. Раббы һүҙе бына шундай көс менән тарала һәм нығына.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 19:11–20*



## Илсе Паулустың Эфестағы берҙәмлек өлкәндәре менән хушлашыуы

Паулус үҙе менән хушлашырға тип Милетосҡа килгән Эфес берҙәмлеге өлкәндәренә былай ти: «Асия өлкәһенә килгәндең тәүге көндәренән һеҙҙең менән булып, нисек йәшәгәнемде үҙегеҙ беләһегеҙ. Йәһүдтәрҙең яуыз ниәттәре арҡаһында килеп тыуған һынауҙарға ҡарамай, күндәмлек менән һәм күҙ йәштәремде түгеп Раббыға хеҙмәт иттем. Һеҙгә файҙалы булырҙай бер нәмәне лә бәйән итмәй ҡалдырманым, һеҙҙе халыҡ алдында ла, өйҙән-өйгә йөрөп тә өйрәттем. Тәүбә итеп Аллаға табан боролоуҙың һәм Раббыбыҙ Ғайсаға инаныуҙың зарурлығы тураһында йәһүдтәргә лә, йәһүд булмағандарға ла иғлан иттем. Ә хәҙер, Рух ихтыярына буйһоноп, Йәрүсәлимгә барам. Унда мине нимә көткәнен дә белмәйем. Фәҡәт шуны беләм: ниндәй генә ҡалаға барһам да, Изге Рух мине бығауҙар һәм хәсрәт көтөүе тураһында иҫкәртә. Ләкин мин үҙ тормошомдоң ҡәҙере өсөн ҡайғырмайым, тик хеҙмәтемде һәм Раббы Ғайсанан ҡабул итеп алған эште – Алланың мәрхәмәте тураһындағы Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәз итеү вазифаһын теүәлләп ҡуйырға теләйем. Хәҙер беләм: һеҙҙең арағыҙҙа йөрөп, Алла Батшалығын вәғәзләүемде ишеткән берегеҙ ҙә мине бүтәнсә күрмәҫ. Мин киткәндән һуң арағыҙға аяуһыҙ бүреләр киләсәген беләм, улар көтөүҙе йәлләп тормаясаҡ. Хатта һеҙҙең арағыҙҙан да хәҡиҡәтте боҙоп күрһәтеүселәр сығасаҡ. Улар шәкерттәрҙе үҙҙәренең артынан эйәртеп алып китергә теләйәсәк. Хәҙер һеҙҙе Алла ҡулына һәм Уның мәрхәмәте тураһындағы һүҙгә тапшырам. Уның һүҙе һеҙҙе тағы ла нығытырға һәм Үҙенең изге халҡы араһында өлөш бирергә һәләтле. Мин һис кемдең алтын-көмөшөнә лә, кейеменә лә ҡыҙыҡманым. Һеҙ беләһегеҙ, үҙемдең һәм янымда булғандарҙың ихтыяждарын бына ошо ҡулдарым ҡәнәғәтләндерҙе. Раббы Ғайсаның: „Алыуға ҡарағанда биреүҙә бәхет күберәк“, – тигән һүҙҙәрен иҫтә тотоп, хәлһеҙҙәргә тырышып ярҙам итеү фарыз. Шулай эшләргә кәрәклекте һәр эшем менән күрһәттем». Һөйләп бөткәс, тубыҡланып, Паулус улар менән бергә доға ҡыла. Барыһы ла ҡысҡырып илап ебәрә, Паулусты ҡосаҡлап үбә башлайҙар. Бигерәк тә уның, мине ҡабат күрмәҫһегеҙ инде, тигән һүҙҙәренә ҡайғыралар. Аҙаҡ уны карапҡаса оҙата баралар.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 20:17–38*



## Паулус идарасы Фестус алдында

Йәрүсәлимдә Паулусты ҡулға алғандың икенсе көнөнә уны Юғары кәңәшмә алдына килтереп баҫтыралар. Хөкөм барышында илсе әйткән һүҙҙән һуң йәһүдтәр үҙ-ара ыҙғышып китә. Талаш шул тиклемгә барып етә: Паулусты өҙгөләп ташларҙай хәлгә етәләр. Шунан ҡурҡып, Рим ғәскәриҙәр башлығы үҙенең хәрбиҙәренә уны нығытмаға алып китергә ҡуша.

Шул уҡ төндә Паулус янына Раббы килеп: «Ҡыйыу бул! Йәрүсәлимдә Минең хаҡта нисек шаһитлыҡ ҡылған булһаң, Римда ла шулай шаһитлыҡ бирергә тейешһең», – ти. Икенсе көн тыуғас, ҡырҡтан ашыу йәһүд Паулусты үлтергәнгә тиклем ашамаҫҡа-эсмәҫкә ант итә. Паулусты ҡотҡарып алып ҡалған ғәскәриҙәр башлығы, был турала белеп ҡалғас, ике йөҙ йәйәүле, етмеш һыбайлы һәм ике йөҙ уҡсы ғәскәриҙән торған һаҡ аҫтында уны Ҡайсареяға оҙата. Ҡайсарея ул ваҡытта Йәһүҙиәләге Рим идарасыларының эш алып барған урыны була. Ҡайсареяла Паулус Рим идарасыһы Феликс алдында яуап тота. Паулусҡа ҡаршы әйтелгән бөтә ғәйепләүҙәрҙе тыңлағандан һуң, ул уның бер ғәйебен дә тапмай, шулай ҙа ике йыл һаҡ аҫтында тоторға бойороҡ бирә.

Ике йылдан Феликс урынына идарасы итеп Поркиос Фестусты билдәләйҙәр. Бер нисә көндән йәһүд батшаһы Агриппас апаһы Берника менән Фестустың хәлен белергә тип Ҡайсареяға килә. Фестус барыһын да улар Паулустың телмәрен тыңларлыҡ итеп ойоштора. Агриппас менән Берника ултырыштар залына ҙур тантана менән, үҙҙәренең ғәскәр етәкселәре һәм күренекле шәхестәрен эйәртеп килеп инә. Паулусты ла алып киләләр. Ул үҙенең тормошо, нисек итеп Раббы Ғайсаға килеүе, Мәсих тураһында шаһитлыҡ ҡылып йөрөүҙәре тураһында һөйләй: «Алланың ярҙамы менән мин бөгөнгө көнгәсә ныҡ торам, олоһонан кеseһенәсә шаһитлыҡ бирәм. Мин пәйғәмбәрҙәр һәм Муса, киләсәктә буласаҡ, тип алдан әйткән хәлдәрҙән тыш бер нәмә лә һөйләмәнем. Ә улар Мәсихтең ғазап сигергә тейешлеген һәм үленән беренсе булып тереләсәген, йәһүдтәрҙе һәм башҡа халыҡтарҙы яҡтыртыр тигән хәбәрҙе иғлан итәсәген әйткәйнеләр».

Паулус һөйләп торғанда Фестус: «Һин, Паулус, аҡылдан шашҡанһың! Күп белеүең һине аҡылдан яҙҙыра», – тип ҡысҡырып ебәрә. «Юҡ, мөхтәрәм Фестус, – тип яуаплай ул. – Мин аҡылдан шашманым, мин айыҡ аҡыл менән хәҡиҡәт һүҙҙәре һөйләйем.



Һинең генә түгел, ә бөгөн мине тыңлаған кешеләрҙең бөтәһенең дә минең кеүек булыуҙарын Алланан үтенеп һорар инем».

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 23 – 26*

## Паулустың Римға ебәрелеүе

Илсе Паулусты тере Алла һәм Ҡотҡарыусы Ғайса Мәсих тураһында шаһитлыҡ биргәне өсөн төрмәгә ябалар. Әммә ул, ғәйепкә тарттырырлыҡ бер нәмә лә эшләмәүен белгәнгә күрә, ҡайсарҙың хөкөм итеүен талап итә: Рим кешеһе булараҡ, Паулустың быйдай талапты ҡуйырға хаҡы була. Шуға күрә уны башҡа тотҡондар менән бергә һыу юлы менән Римға оҙаталар, йөҙ башы Йүлиосҡа Паулусты һаҡлап барырға ҡушалар.

Китеп барғанда диңгеҙҙә көслө ел сыға, карапты тулҡындар алып китә. Өсөнсө көнөнә кешеләр караптағы булған йөктө диңгеҙгә ташлай. Дауыл әллә нисә көнгә һуҙыла, караптағыларҙың тере ҡалырға бар өмөтө һүнә. Әллә ҡасандан алып тәғәм ризыҡ ҡапҡандары булмай. Шунда Паулус: «Зинһар, күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ! Берегеҙ ҙә һәләк булмаясаҡ, карапты ғына юғалтасаҡһығыҙ, – ти, барыһына ла мөрәжәт итеп. – Уҙған төндә миңә үҙем инанып хеҙмәт иткән Алланың бер фәрештәһе күренде. Ул: „Ҡурҡма, Паулус! Һин ҡайсар алдына баҫырға тейешһең. Һинең менән булған кешеләрҙең бөтәһенә лә Алла тормош бүләк итә“, – тине. Бына шуға ла, дуҫтар, күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ: мин Аллаға инанам, барыһы ла миңә әйткәнсә буласаҡ. Беҙ мотлаҡ ниндәй ҙә булһа утрауға барып сығасаҡбыҙ».

Ун дүртенсе көнгә караптағылар һөҙәк ярлы бер ҡултыҡты күреп ҡала һәм, әгәр мөмкин булһа, карапты тап шул яр буйына йүнәлтергә ниәтләйҙәр. Якорҙарҙы сабып өҙөп, алғы елкәнде ел ыңғайына көйләп, улар ярға табан юл ала, әммә һис көтмәгәндә карап мороно ҡуҙғатылмаҫлыҡ булып ҡомға инеп ултыра, ҡойроҡ өлөшө тулҡын көсөнә емерелә башлай. Йөҙ башы йөҙә белгәндәргә ярға табан йөҙөргә, ә ҡалғандарға таҡталарға йә карап киҫәктәренә тотоноп ҡотолорға ҡуша. Шул рәүешле бөтә ике йөҙ етмеш алты кеше лә тере ҡала. Утрауҙағы халыҡ уларҙы ихлас ҡабул итә, Раббы унда илсе Паулус аша байтаҡ мөғжизәләр ҡыла. Өс айҙан һуң икенсе бер карапта Римға юлдарын дауам итәләр. Юлға сығыр алдынан, ауырыуҙарҙы һауыҡтырған илсе Паулус хаҡына уларҙы хәстәрләп, бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итәләр.

Илсе Паулус Раббыға хеҙмәт итеүен дауам итә һәм әллә күпме һынауҙарға дусар була. Уның һәр аҙымы менән ҡеүәтле һәм шәфҡәтле Алла етәкселек иткәненә ихлас ышана. Римдарға яҙған



хатында ул былай ти: «Алланы яратыусыларға, Уның ниәте буйынса саҡырып алынғандарға бөтә нәмә яҡшыға ғына».

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 25:1–12; 27:14–44; 28:1–11; РИМДАРҒА 8:28*

## Паулус Рим ҡалаһында

Илселәрҙең ғәмәлдәре китабының авторы инжилсе Лукас былай тип яҙа:

Беҙ Римға килеп еткәс, йөҙ башы тотҡондарҙы ғәскәр башлығына тапшырҙы, ә Паулусҡа үҙен һаҡлаған ғәскәри менән айырым йәшәргә рөхсәт бирелде. Римға килеп өс көн уҙыуға, Паулус йәһүд башлыҡтарын янына саҡырып алды. Билдәләнгән көндә улар Паулус туҡталған өйгә килде. Паулус иртәнән кискә тиклем Алла Батшалығы хаҡында аңлатты, Ғайса тураһында Муса ҡанунынан һәм пәйғәмбәрҙәрҙең яҙмаларынан дәлилдәр килтереп, уларҙы ышандырырға тырышты. Берәүҙәре уның һүҙҙәренә ышанды, икенселәре ышанманы. Үҙ-ара килешә алмайынса таралыша башлағас, Паулус уларға былай тине: «Изге Рух һеҙҙең аталарығыҙға Ишағыяһ пәйғәмбәр аша бына ниндәй дөрөҫ һүҙҙәр әйткән: „Был халыҡ янына бар ҙа әйт: тыңлап-тыңлап та аңламаҫһығыҙ, ҡарап-ҡарап та күрмәҫһегеҙ. Сөнки был халыҡтың йөрәген май баҫҡан. Ҡолаҡтары көскә ишетә, күҙҙәрен дә йомғандар. Күҙҙәре менән бер ни ҙә күрергә, ҡолаҡтары менән бер ни ҙә ишетергә, йөрәктәре менән бер ни ҙә аңларға теләмәйҙәр. Шулай булмаһа, Миңә табан боролорҙар һәм Мин уларҙы һауыҡтырыр инем“. Шуға күрә һеҙгә мәғлүм булһын: йәһүд булмаған халыҡтарға Алланың ҡотҡарыуы тураһындағы хәбәр ебәрелгән һәм улар уны тыңлай». Ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, йәһүдтәр, үҙ-ара бәхәсләшеп, таралыша.

Паулус Римда үҙе түләп торған өйҙә ике йыл буйы йәшәй һәм янына килеүселәрҙең барыһын да ҡабул итә. Бер ҡаршылыҡһыҙ Алла Батшалығы тураһында һөйләй һәм асыҡтан-асыҡ Раббы Ғайса Мәсих хаҡында өйрәтә.

Ошо һүҙҙәр менән Илселәрҙең ғәмәлдәре китабы тамамлана.

Уҡыусыларҙы, моғайын, илсе Паулустың артабанғы яҙмышы ҡыҙыҡһындыралыр. Изге Яҙмала был турала бер нәмә лә әйтелмәй. Уның имандаштар берҙәмлектәренә һәм айырым кешеләргә яҙған хаттарына ҡарағанда, шулай уҡ бүтән сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Паулус ике йылдан һуң һаҡ аҫтынан азат ителә һәм Италия, Греция, Кесе Азияла Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләп йөрөй.



Риүәйәттәргә ярашлы, рәхимһеҙ Рим ҡайсары Нерон идара иткән заманда, мәсихселәрҙе эҙәрләгән мәлдә, ул ғазаплы үлем менән үлеп ҡала.

*ИЛСЕЛӘРҘЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ 28:16–31*

## Илселәрҙең хаттары

Ғайса Мәсих терелеп торғандан һуң, Уның тәғлимәте – Һөйөнөслө Хәбәр – Фәләстиндә, бөтә Рим империяһында һәм Яҡын Көнсығыш илдәрендә, аҙаҡ инде бөтә донъя буйынса бик тиҙ тарала башлай. Илселәр, йәғни Ғайса Мәсих Үҙе һайлап алған шәкерттәр, шулай уҡ Уның ҡайһы бер башҡа шәкерттәре, төрлө ҡалалар буйлап таралып, унда Алла һүҙен вәғәзләй. Раббы уларҙың һүҙҙәрен төрлө мөғжизәләр менән нығытып тора: әйтәйек, Ғайса Мәсих хаҡына Аллаға доға ҡылған ваҡытта ауырыуҙар һауыға, ғәриптәр сәләмәтләнә, хатта үлеләр терелеп тора, ә барыһын да күреп торған кешеләр Алла һүҙен йөрәгенә ала һәм гонаһ юлынан барыуҙан туҡтай. Мәсихселәрҙе эҙәрлекләйҙәр, әммә Алла Улы Ғайса Мәсихкә булған ышаныс эҙәрлекләүҙәрҙән ҡурҡыуға ҡарағанда көслөрәк булып сыға.

Яңы иманға килгәндәрҙең Мәсихкә булған ышанысын нығытыр өсөн, илселәр имандаштар берҙәмлектәренә хаттар яҙа. Уларҙың ҡайһылары ҡыҫҡа, бер биткә генә һыйышлы булһа, икенселәре, мәҫәлән, Римдағы имандаштар берҙәмлегенә яҙылған хат, бик оҙон. Яҡуптың, Петрус, Яхъя һәм Йәһүҙәнең хаттары бөтә мәсихселәргә тәғәйенләнә. Паулус иһә үҙенең хаттары менән айырым кешеләргә йәки берҙәмлектәргә мөрәжәғәт итә.

Паулус үҙенең ҡайһы бер хаттарын төрмәлә сағында яҙа. «Ошо вәғәздәрем өсөн мин ғазап сигәм, мине хатта енәйәтсе һымаҡ бығаулап ҡуйҙылар. Ләкин Алла һүҙен бығаулап булмай», – тип яҙа ул дуҫы Тимоҫеусҡа *(Тимоҫеусҡа икенсе хат 2:9)*.

Илселәрҙең бөтә хаттары ла Изге Рух етәкселегендә яҙыла, шуға күрә хаттар, Изге Яҙманың башҡа өлөштәре кеүек үк, Алланың халыҡҡа мөрәжәғәт һүҙе булып тора. Беренсе мәсихселәр уларҙы тырышлыҡ менән ҡулдан күсереп яҙа, берҙәмлектәрҙә һәм өйҙәрҙә уҡыйҙар, дуҫтарына күрһәтәләр, бүләк итәләр – бының менән Алла һүҙенең кешеләр араһында таралыуына булышлыҡ итәләр. Ул замандарҙа үҫемлектән эшләнгән папирусҡа йә иһә махсус рәүештә эшкәртелгән тирегә – пергаментҡа яҙғандар.



## Илселәрҙең хаттары (дауамы)

Хаттарҙың йөкмәткеһен ҡыҫҡаса ғына һөйләп биреү ауыр. Уларҙың һәр береһендә, хатты яҙған илселәр аша, Алла бөйөк хәҡиҡәт тураһында асып бирә. Бына илселәрҙең хаттары бағышланған ҡайһы бер темалар:

Иман һәм ҡылған ғәмәлдәр *(Яҡуп)*.

Беҙ ғазаптарҙы сабыр ғына кисерә белергә тейешбеҙ *(1 Петрус)*.

Тарҡалыу һәм мөртәтлек ваҡытында нисек итеп паклыҡты һәм тоғролоҡто һаҡлап ҡалырға *(2 Петрус)*.

Һөйөнөс һәм еңеү *(1 Яхъя)*.

Мөхәббәт *(2 Яхъя)*.

Ҡунаҡсыллыҡ *(3 Яхъя)*.

Нисек иманыңды һаҡлап ҡалырға һәм үҙеңде тура юлдан тайпылыуҙан ҡурсаларға *(Йәһүҙә)*.

Иман аша аҡланыу *(Римдарға)*.

Мәсих ул – Раббыбыҙ *(1 Коринҫостарға)*.

Йыуатыу, хеҙмәт итеү *(2 Коринҫостарға)*.

Ҡанун талаптарын үтәү менән генә ҡотолоу юлы юҡ, Ҡотолоу Мәсих аша килә *(Галаттарға)*.

Берҙәмлек ул Мәсихтең тәне кеүек *(Эфестарға)*.

Мәсихселәрҙең берҙәмлеге *(Филиппойҙарға)*.

Мәсихтең даны һәм бөйөклөгө *(Колоссайҙарға)*.

Ғайса Мәсих ергә ҡабат киләсәк *(1 һәм 2 Тессалоникеларға)*.

Ғайса Мәсихкә тоғро хеҙмәт итеү һәм Уға бирелгәнлек *(1 һәм 2 Тимоҫеусҡа)*.

Берҙәмлек өлкәндәре изгеләр тормошонда өлгө булырға тейеш *(Титусҡа)*.

Бер-береңде кисерергә кәрәк *(Филемонға)*.

Имандаштар берҙәмлеге – ул яңы Исраил кеүек; Мәсих ҡорбанының камиллығы *(Ғивриҙәргә)*.

Хаттар Изге Яҙманың мөһим өлөшө булып тора. Уларҙың күптәрен тиҙ генә аңлауы ҡыйын, шуға күрә ҡабаланмай һәм төптән уйлап уҡырға кәрәк.



## Яҡуптың хаты

Яҡуптың хатында беҙ ҡыҫҡа, әммә тәрән мәғәнәле һүҙҙәр һәм өгөт-нәсихәттәр осратабыҙ, мәҫәлән, **донъя малы тураһында ул былай ти**: «Ҡояш ҡалҡып, эҫеһе менән үҫемлекте киптерә, уның сәскәһе ҡойола һәм матурлығы юғала. Байҙар ҙа шулай эш ығы-зығыһында һүнеп ҡала». **Һынау тураһында былай ти**: «Һынауҙарға аҙағынаса түҙгән кеше бәхетле, сөнки ул, һыналғандан һуң, Алла Үҙен яратҡандарға вәғәҙә иткән тормош тажын аласаҡ». **Асыуланыу тураһында былай ти**: «Ҡәҙерле имандаштарым, шуны белегеҙ: һәр берегеҙ тыңлауға өлгөр, һөйләүгә яй һәм асыуланыуға аҡрын булһын, сөнки кеше асыулы сағында Алла хуш килмәҫтәйҙе эшләмәй». **Алланың әмерҙәрен үтәү тураһында былай ти**: «Һүҙҙе тыңлап ҡына ҡалмағыҙ, уны үтәгеҙ ҙә, шунһыҙ үҙ-үҙегеҙҙе алдайһығыҙ ғына». **Иман тураһында былай ти**: «Иман менән дә шулай, ғәмәле булмаһа, ул үҙенән-үҙе үле. Шулай уҡ, рухһыҙ тән үле булған кеүек, ғәмәлһеҙ иман да үле». **Телдең гонаһтары тураһында былай ти**: «Тел дә, кескәй генә ағза булһа ла, ныҡ маҡтана. Ана, бәләкәй генә ут та ҙур урманды яндырып ебәрә... Бер үк шишмәнән сөсө лә, тоҙло ла һыу сығамы ни?» **Ант итеү тураһында былай ти**: «Бөтәһенән элек, имандаштарым, күк менән дә, ер менән дә, бүтән берәй нәмә менән дә ант итмәгеҙ. Алла хөкөмөнә юлыҡмаҫ өсөн, һеҙҙең „Эйе“ тигәнегеҙ „Эйе“, „Юҡ“ тигәнегеҙ „Юҡ“ булһын». **Ауырыуҙар тураһында былай ти**: «Арағыҙҙа кемдер ауырыһа, шул имандаштар берҙәмлеге өлкәндәрен саҡырһын һәм улар, Раббы исеме менән уға зәйтүн майы һөртөп, уның өсөн доға ҡылһын. Иман менән ҡылынған доға ауырыуҙы һауыҡтырыр, һәм Раббы уны аяҡҡа баҫтырыр. Әгәр ҙә ул гонаһ ҡылған булһа, Алла уны ярлыҡар». **Тәүбәгә килеү һәм доға ҡылыу тураһында былай ти**: «Һауығыу өсөн бер-берегеҙ алдында гонаһтарығыҙҙы танығыҙ һәм бер-берегеҙ өсөн доға ҡылығыҙ. Тәҡүә кешенең доғаһы көслө, ул күпте эшләргә һәләтле». **Юлдан яҙғандарға мөхәббәт күрһәтеү тураһында былай ти**: «Имандаштарым! Әгәр арағыҙҙан берегеҙ хәҡиҡәттән тайпылып, икенсегеҙ уны хәҡиҡәткә кире ҡайтарһа, ул шуны белһен: гонаһлы-



ны ялған юлдан кире ҡайтарыусы был гонаһлының йәнен үлемдән ҡотҡарыр һәм уның күп гонаһтарын ҡаплар».

*ЯҠУПТЫҢ ХАТЫ 1:11–12, 19–20, 22; 2:17, 26; 3:5, 11–12; 5:12, 14–16, 19–20*

# Илсе Петрустың ике хаты

Ғайса Мәсихтең ун ике илсеһенең береһе булған Петрус Кесе Азиялағы имандаштар берҙәмлектәренә төбәп ике хат яҙа. Петрус үҙенең беренсе хатын ҡаты эҙәрлекләүҙәр ваҡытында яҙған, тигән ҡараш йәшәй. Ул мәлдә, Рим империяһында мәсихселекте юҡ итергә теләгән ҡайсар Нерон идара иткән осорҙа, Мәсих иманындағыларҙы ыҙалатҡандар һәм үлтергәндәр. Илсе Петрус, имандаш туғандарының күңелен күтәрергә теләп, былай тип яҙа:

Ата-бабаларҙан мираҫ итеп бирелгән мәғәнәһеҙ тормоштан алтын-көмөш кеүек фани нәмәләр менән түгел, ә кәмселекһеҙ һәм пак бәрәс кеүек булған Мәсихтең ғәзиз ҡаны менән йолоп алынғанлығығыҙҙы беләһегеҙ... Һәр тере йән – үлән кеүек, уның бөтә даны – ялан сәскәһеләй. Үлән ҡорой, сәскә ҡойола, ә Раббы һүҙе мәңгегә ҡала. Был һүҙ – һеҙгә иғлан ителгән Һөйөнөслө Хәбәрҙең үҙе.

Һөйөклөләрем! Һеҙҙе йәнгә ҡаршы көрәшкән гонаһлы теләктәрҙән йыраҡ торорға саҡырам. Һәм мәжүсиҙәр араһында ҡылығығыҙға һүҙ тейҙермәҫлек булһын... Беҙ гонаһтар өсөн үлһен һәм хаҡлыҡ өсөн йәшәһен тип, Ғайса Үҙе беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы Үҙ тәнендә арҡысаҡҡа күтәрҙе. Уның яралары һеҙгә сихәт бирҙе. Һеҙ һарыҡ һымаҡ аҙашып йөрөнөгөҙ, хәҙер Көтөүсегеҙ һәм йәндәрегеҙҙе Һаҡлаусы янына әйләнеп ҡайттығыҙ.

Яманлыҡҡа яманлыҡ менән йәки мыҫҡыллауға мыҫҡыллау менән яуап ҡайтармағыҙ. Киреһенсә, фатиха менән яуап ҡайтарығыҙ, сөнки һеҙ шуның өсөн саҡырылғанһығыҙ һәм фатиха алырһығыҙ... Йөрәктәрегеҙҙә Мәсихте Хаким итеп изгеләп ололағыҙ.

Мәсих, беҙҙе Алла янына алып барыу өсөн, ғәҙелһеҙ кешеләр урынына ғәҙел Кеше булараҡ, гонаһтарыбыҙ өсөн бер тапҡыр һәм мәңгегә ғазап сикте. Шулай итеп, Уның тәне үлтерелде, әммә Рух ярҙамында Ул терелтелде... Әгәр ҙә һеҙҙе Мәсих исеме өсөн мыҫҡыллайҙар икән, һеҙ бәхетле, сөнки шөһрәт Рухы, Алла Рухы – һеҙҙә... Арағыҙҙан һис кем кеше үлтереүсе йәки ҡараҡ, яуызлыҡ ҡылыусы йәки башҡалар эшенә ҡыҫылыусы булараҡ ғазап сикмәһен. Әгәр ҙә инде ул мәсихсе булараҡ ғазап сигә икән, оялмаһын, ә был исемде йөрөтөүе өсөн Алланы данлаһын.



Риүәйәткә ярашлы, Петрус үлем язаһына хөкөм ителә һәм уны, үҙе һорағанса, арҡысаҡҡа баш түбән ҡаҙаҡлайҙар. Ул үҙен арҡысаҡҡа Ғайса Мәсих ҡаҙаҡланған кеүек үк ҡаҙаҡланырға лайыҡ түгел тип һанай.

*1 ПЕТРУС 1:18–19, 24–25; 2:11–12, 24–25; 3:9, 15, 18; 4:15–16*

## Илсе Яхъяның өс хаты

Боронғоларҙың раҫлауынса һәм дин белгестәренең фекеренсә, был өс хатты илсе һәм инжилсе Яхъя яҙған. Яхъя бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәрҙә лә, өс хатында ла иң мөһим һүҙҙәрҙең береһе – мөхәббәт.

Яхъяның беренсе хатының темаһы: һөйөү, Аллаға инанып йәшәү, һөйөнөс, имандың еңелмәҫ көсө, тормош мәғәнәһе. Был хаттан бер нисә өгөт-нәсихәт: **яҡтылыҡта йәшәү тураһында**: «Алла яҡтылыҡта булған кеүек, беҙ ҙә яҡтылыҡта йәшәһәк, тимәк, берберебеҙ менән аралашып йәшәйбеҙ һәм Уның Улы Ғайсаның түккән ҡаны беҙҙе һәр төрлө гонаһтарыбыҙҙан таҙарындыра... Кем дә кем үҙен яҡтылыҡтамын ти, әммә имандашын күрә алмай, ул әле лә ҡараңғылыҡта». **Донъяға булған ҡараш тураһында**: «Донъяға һәм унда булған нәмәләргә күңел бирмәгеҙ. Донъяны яратҡан кешенең күңелендә Атаны яратыу юҡ. Сөнки донъялағы бөтә нәмә: тән нәфсеһе, күҙ нәфсеһе һәм байлыҡ арҡаһындағы тәкәбберлек – улар Атанан түгел, фәҡәт донъянан. Донъя ла, уның нәфселәре лә үтеп китә, ә Алла ихтыярын үтәгән кеше мәңге йәшәй». **Мәсихтең дошманы тураһында**: «Кем ялғансы? Ул – Ғайсаның Мәсих икәнен инҡар итеүсе. Ундай кеше Мәсихтең дошманы һәм ул Атаны ла, Улы Ғайсаны ла инҡар итә. Алла Улын инҡар итеүсенең Атаһы ла юҡ. Алла Улын таныусының иһә Атаһы ла бар». **Ҡотҡарыусы Ғайса тураһында**: «Мәсихтең кеше гонаһтарын Үҙенә алыр өсөн килгәнен һеҙ беләһегеҙ. Ә Ул Үҙе гонаһһыҙ. Мәсихтә йәшәгән бер кем дә гонаһ ҡылмай». **Мөхәббәт тураһында**: «Алла беҙгә Үҙенең һөйөүен бына нисек күрһәтте: Ул Үҙенең берҙән-бер Улын, Уның аша беҙгә йәшәү бирер өсөн, донъяға ебәрҙе. Алла – мөхәббәт. Мөхәббәттә йәшәүсе – Аллала, һәм Алла унда булыр. Беҙ яратабыҙ, сөнки беренсе булып беҙҙе Алла яратты. Ғайсаның Мәсих булыуына инанған һәр кем Алланан тыуған. Алланы яратыуыбыҙ – Уның бойороҡтарын үтәүебеҙ ул. Ә Уның бойороҡтары ауыр түгел». **Ялған пәйғәмбәрҙәр тураһында**: «Алла Рухын һеҙ былай танырһығыҙ: Ғайса Мәсихтең донъяға кеше тәнендә килгәнен ҡабул иткән һәр рух Алланан була. Ғайсаны танып белмәгән бер рух та Алланан түгел, ул – Мәсих дошманының рухы, һеҙ уның килере тураһында ишеткәйнегеҙ, һәм ул хәҙер донъяла инде». **Мәңгелек**



**тормош тураһында**: «Мин быны һеҙгә, Алла Улына инаныусыларға, үҙегеҙҙең мәңгелек тормошоғоҙ барлығын белегеҙ, тип яҙҙым».

*1 ЯХЪЯ 1:7; 2:9, 15–17, 22–23; 3:5–6; 4:2–3, 9, 16, 19; 5:1–3, 13*

# Йәһүҙәнең хаты

Ҡайһы бер дин белгестәре билдәләүенсә, был хатты Маҫсайос бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәрҙә *(13:55)* телгә алынған Йәһүҙә яҙған булырға тейеш.

Йәһүҙә мәсихселәрҙе «Алланың изге халҡына бер тапҡыр һәм ғүмерлеккә бирелгән иманды яҡлап алып ҡалырға» өндәй. Иҫке Ғәһедтән миҫалдар килтереп, иманлыларҙы гонаһлыларҙың эштәрен ҡабатлауҙан һаҡ булырға ҡуша: «Раббы халыҡты Мысырҙан алып сығып ҡотҡарһа ла, araларындағы Уға ышанмаған кешеләрҙе аҙаҡ һәләк иткән. Үҙенә бирелгән хакимлыҡты һаҡламаған һәм торлаҡтарын ташлап киткән фәрештәләрҙе иһә Ул, бөйөк көндә хөкөм итеү өсөн, мәңгелек бығауҙарға быуып, дөм ҡараңғыла һаҡ аҫтында тота. Ошо фәрештәләр кеүек үк фәхешлеккә, енси аҙғынлыҡҡа бирелгән Содом, Ғамора һәм улар тирәһендәге бөтән ҡалалар халҡы ла, ғибрәтле миҫал булараҡ, мәңгелек ут язаһын алған. Шуның һымаҡ был кешеләр, күргән күренмештәренә таянып, тәндәрен таплай, ә Раббы хакимлығын инҡар итә һәм күктәге көстәргә яла яға. Былар иһә үҙҙәре лә белмәгән нәмәләргә яла яға. Бына шулай аңһыҙ хайуандар кеүек тәбиғи тойғоға ғына эйәреп эш итеүҙәре уларҙы һәләк итә».

Бына ошо дәһрилек юлына ҡапма-ҡаршы булараҡ, илсе Йәһүҙә нисек иман менән йәшәргә өгөт-нәсихәт бирә: «Ә һеҙ, һөйөклөләрем, үҙ тормошоғоҙҙо изгеләрҙән-изге иманығыҙ нигеҙендә ҡороп йәшәүегеҙҙе дауам итегеҙ, Изге Рух көсө менән доға ҡылығыҙ. Үҙенең мәрхәмәте менән һеҙгә мәңгелек тормош бирәсәк Раббыбыҙ Ғайса Мәсихте көтөп, Алла һөйөүендә ҡалығыҙ. Икеләнгәндәргә мәрхәмәтле булығыҙ. Башҡаларын уттан тартып алғандай ҡотҡарығыҙ. Ҡалғандарына мәрхәмәт күрһәтегеҙ, әммә һаҡ булығыҙ. Уларҙың хатта тәне нәжесләгән кейемдәре лә һеҙҙең өсөн харам һәм ерәнгес булһын».

Хат Аллаға маҡтау яуҙырған һүҙҙәр менән тамамлана: «Һеҙҙе тура юлдан тайпылыуҙан һаҡлай алған һәм Үҙенең шөһрәте алдына кәмселекһеҙ килеш һәм ҙур ҡыуаныс менән килтерә алған Раббыбыҙ Ғайса Мәсих аша беҙҙе ҡотҡарыусы берҙән-бер Аллаға дан, мөһабәтлек, ҡөҙрәт һәм хакимлыҡ донъя яратылғансы уҡ та, хәҙер ҙә мәңге булһын. Амин».



## Илсе Паулустың хаттары

Инжилгә илсе Паулустың Рим, Коринçос, Эфес, Филиппой, Колоссай, Тессалонике ҡалаларында һәм Галатия өлкәһендә йәшәгән мәсихселәргә, шулай уҡ үҙенең шәкерттәре Тимоçеус, Титус һәм Филемонға төбәп яҙған 13 хаты ингән. (Ғивриҙәргә хат та Паулус тарафынан яҙылған тип иçәпләнә.)

Паулустың хаттары Инжилдең дүрттән бер өлөшөн тәшкил итә. Илсенең хаттары һыйҙырған асылыштың байлығын бер нисә биттә генә һүрәтләү мөмкин түгел. Был китапта беҙ илсе Паулустың ҡайһы бер хаттарына ғына туҡталып үтәбеҙ.

## Мөхәббәт

«Алла ул – мөхәббәт», – тип өйрәтә Изге Яҙма.

Коринçостарға беренсе хатында *(13:1-8)* илсе Паулус мөхәббәт тураһында былай тип яҙа:

Кешеләрҙең һәм фәрештәләрҙең телдәрендә һөйләшеп тә, мөхәббәтем юҡ икән, ул саҡта мин – ни бары баҡыр һауыт зыңлауы йәки яңғырап торған тәрилкәләр сыңы.

Пәйғәмбәрлек һәләтем булһа ла, барлыҡ серҙәрҙе һәм һәр төрлө ғилемде белһәм дә, тауҙар күсерерлек иманым булһа ла, мөхәббәтем юҡ икән, мин бер ни ҙә түгел.

Бар мөлкәтемде ярлыларға өләшеп, маҡтаныу өсөн тәнемде үлемгә тапшырһам да, мөхәббәтем юҡ икән, миңә бынан бер ниндәй ҙә файҙа булмаç.

Мөхәббәт түҙемле, шәфҡәтле, мөхәббәт көнләшмәй, маһаймай, һауаланмай.

Мөхәббәт әҙәпһеҙ ҡыланмай, үҙенә файҙа эҙләмәй, ярһымай, кенә тотмай.

Мөхәббәт ғәҙелһеҙлеккә һөйөнмәй, хәҡиҡәткә шатлана.

Ул бөтәһенә лә түҙә, бөтә нәмәгә ышана, һәр саҡ өмөтләнә һәм сабыр итә.

Мөхәббәт бер ваҡытта ла һүрелмәç...

Мөхәббәт – Ғайса Мәсихтең өйрәтеүҙәренең асылы. Ғайса былай тигән: «„Аллаң Раббыны бөтә йөрәгең, бөтә йәнең һәм бөтә аҡылың менән ярат“. Был беренсе һәм иң мөһим бойороҡ. Икенсеһе лә шундай уҡ: „Яҡыныңды үҙеңде яратҡан кеүек ярат“. Бөтә ҡанун

## МӨХӘББӘТ

**«Мөхәббәт түҙемле,**
**шәфҡәтле,**
**мөхәббәт көнләшмәй,**
**маһаймай, һауаланмай.**
**Мөхәббәт әҙәпһеҙ ҡыланмай,**
**үҙенә файҙа эҙләмәй,**
**ярһымай, яуыҙлыҡ тотмай.**
**Мөхәббәт ғәҙелһеҙлеккә һөйөнмәй,**
**хәҡиҡәткә шатлана.**
**Ул бөтәһенә лә түҙә, бөтөн нәмәгә ышана,**
**һәр саҡ өмөтләнә һәм сабыр итә.**
**Мөхәббәт бер ваҡытта ла һүрелмәҫ...**
**Бына һәр ваҡыт буласаҡ өс нәмә:**
**иман, өмөт һәм мөхәббәт.**
**Улар араһында мөхәббәт – иң бөйөгө».**

***1 Коринҫостарға 13:4–13***

һәм пәйғәмбәрҙәрҙең һүҙҙәре ошо ике бойороҡҡа нигеҙләнгән» *(Маҫҫайос 22:37–40)*.

Алла һөйөүе тураһында Ғайса былай ти: «Алла донъяны шул тиклем яратты, хатта Улына инанған бер кем дә һәләк булмаһын, ә мәңгелек тормошҡа эйә булһын өсөн, Ул Үҙенең берҙән-бер Улын бирҙе» *(Яхъя 3:16)*.

## «Гонаһлы тәбиғәттең ғәмәлдәре» һәм «Рух емеше»

Ғайса Мәсих Үҙенең шәкерттәренә: «Мин – йөҙөм ағасы, ә һеҙ – ботаҡтар. Кем Миндә йәшәй һәм Мин унда йәшәйем – шул ғына күп емеш бирер. Минән башҡа бер ни ҙә эшләй алмаҫһығыҙ», – ти. Тауҙа уҡылған вәғәзендә Ғайса ошондай миҫал килтерә: «Ялған пәйғәмбәрҙәрҙән һаҡланығыҙ: янығыҙға улар һарыҡ тиреһе ябынып килә, ә асылда йыртҡыс бүреләр улар. Һеҙ уларҙы ҡылған ғәмәлдәренә ҡарап танырһығыҙ. Сәнскәктән – йөҙөм, билсәндән инжир йыялармы ни? Бына шулай, яҡшы ағас яҡшы емеш бирә, ә насар ағас насар емеш бирә».

Галаттарға яҙған хатында Паулус «гонаһлы тәбиғәттең ғәмәлдәре» һәм «Рух емеше» тураһында яҙа: «Гонаһлы тәбиғәттең ҡылған эштәре билдәле, был – фәхешлек, шаҡшылыҡ, аҙғынлыҡ, ялған илаһтарға табыныу, сихырсылыҡ, дошманлашыу, ыҙғыш, көнсөллөк, ярһыу, мин-минлек, талаш, ялған тәғлимәттәр таратыу, хөсөтлөк, эскеселек, ҡоторонҡо мәжлестәр һәм башҡа шундай яманлыҡтар. Быға тиклем дә иҫкәртә килдем, йәнә иҫкәртәм: бындай юлға баҫыусылар Алла батшалығын мираҫ итеп алмаясаҡ. Алла Рухының емештәре иһә – мөхәббәт, шатлыҡ, именлек, сабырлыҡ, игелеклелек, изгелек, тоғролоҡ, баҫалҡылыҡ, тотанаҡлылыҡ».

*ГАЛАТТАРҒА 5:19–23; МАҪҪАЙОС 7:15–17; ЯХЪЯ 15:5–6*



# Тимоҫеус исемле егет

Паулус үҙенең икенсе сәфәрендә, Дербеға һәм Лустраға барып еткәс, унда Тимоҫеус исемле йәш бер иманлы егетте осрата. Уның әсәһе Әүникә лә – Мәсихкә инанған йәһүд ҡатыны, ә атаһы грек була. Өләсәһе Лоис та Мәсихкә инана. Инжилсе Лукас кеүек, Тимоҫеус та илсе Паулустың тоғро юлдашына әйләнә, уның менән Македонияла, Грецияла, Кесе Азияла, хатта Рим ҡалаһында була. Риүәйәттәр буйынса, Паулус Рим ҡалаһында язаға тарттырылғандан һуң, Тимоҫеус Эфестағы ҙур имандаштар берҙәмлеген етәкләй. Рим ҡайсарҙарының береһе идара иткән заманда мәсихселәрҙе эҙәрлекләүҙәр барышында уны ғазаплап үлтерәләр.

Илсе Паулус Тимоҫеусҡа ике хат яҙа. Был хаттарҙан мөһим фекерҙәрҙе генә килтерәбеҙ. **Бөтә кешеләр өсөн доға ҡылыу тураһында**: «Иң элек шуны үтенеп һорайым: барлыҡ кешеләр, шулай уҡ батшалар һәм барлыҡ хакимиәт кешеләре өсөн дә Алла алдында доға ҡылығыҙ, һорағыҙ, ялбарығыҙ һәм рәхмәт белдерегеҙ. Беҙҙең һәр яҡлап Аллаға ихтирамлы һәм кешеләргә тейешенсә мөнәсәбәттә булып, имен һәм тыныс ғүмер итеүебеҙ өсөн шулай итегеҙ. Был яҡшы ла, Ҡотҡарыусы Аллабыҙ ҙа уны хушһынып ҡабул итә». **Ендәрҙең өйрәтеүҙәре тураһында**: «Ахыры заманда ҡайһы берәүҙәр, алдаҡсы рухтарға һәм ен өйрәтеүҙәренә ҡолаҡ һалып, имандан кире сигенәсәктәр, Изге Рух быны асыҡ әйтә». **Байлыҡ тураһында**: «Бөтә яуызлыҡтың башы – аҡсаға табыныу. Ҡайһы берәүҙәр, ҡомһоҙланып, имандан ситләшкән һәм үҙҙәрен күп михнәттәргә дусар иткән. Һин иһә, Алла кешеһе, быларҙан ситтә тор, ә тәҡүә булыуҙа, ихлас табыныуҙа, иманда, мөхәббәттә, сабырлыҡта, баҫалҡылыҡта уңыштарға өлгәш». **Иман батырлығы тураһында**: «Иман өсөн изге көрәш алып бар, мәңгелек тормошҡа эйә булыуға өлгәш. Алла һине ошоға саҡырҙы, һәм һин күп шаһиттар алдында үҙеңдең тоғро иманыңды раҫланың». **Аллаға ихлас хеҙмәт итеү тураһында**: «Үҙеңде Аллаға ихлас табыныуҙа күнектер. Һөйләгән һүҙҙәреңдә лә, йәшәйешеңдә лә, мөхәббәттә лә, иманда ла, сафлыҡта ла иман тотоусылар өсөн өлгө бул. Изге Яҙмаларҙы уҡып ишеттер, нәсихәт бир, өйрәт».

Паулус Тимоҫеусҡа икенсе хатын үлем язаһы көтөп төрмәлә ултырған сағында яҙған, тип фаразлайҙар: «Мин яҡшы көрәш алып барҙым, аҙағына тиклем был юлды үтеп, иманымды һаҡланым; ә



хәҙер мине хаҡлыҡ тажы көтә. Уны, көнө еткәс, ғәҙел Хөкөмдар Раббы тапшырасаҡ, миңә генә түгел, Унының килеүен һағынып көткәндәрҙең бөтәһенә лә бирер».

*1 ТИМОҪЕУСҠА 2:1–3; 4:1, 7, 12–13; 6:10–12;*
*2 ТИМОҪЕУСҠА 4:7–8*

## «Раббы – бер, иман – бер, һыуға сумдырылыу – бер...» Хаттарҙан юлдар

Бөтәһе лә, гонаһ ҡылып, Алла шөһрәтенән мәхрүм ҡалды *(Римдарға 3:23)*.

Гонаһтың әжере – үлем, ә Алланың бүләге – Раббыбыҙ Ғайса Мәсихтә мәңгелек тормош *(Римдарға 6:23)*.

Алла бер, Алла менән кешеләр араһында бәйләнеш булдырыусы ла бер. Ул Кеше – Ғайса Мәсих *(1 Тимоҫеусҡа 2:5)*.

Мәсих беҙҙең гонаһтарыбыҙ өсөн үлде *(1 Коринҫостарға 15:3)*.

Әгәр Ғайсаны Раббы тип таныһаң һәм Алланың Уны үленән терелтеүенә ихлас ышанһаң, ҡотоласаҡһың *(Римдарға 10:9)*.

Арҡысаҡ тураһындағы хәбәр – һәләкәт юлынан барыусылар өсөн ахмаҡлыҡ, ә беҙгә – ҡотолоу юлынан барыусыларға – Алла ҡөҙрәте *(1 Коринҫостарға 1:18)*.

Уяу булығыҙ, иманда ныҡ тороғоҙ, ҡыйыу һәм ныҡ булығыҙ *(1 Коринҫостарға 16:13)*.

Һөйөнөслө Хәбәрҙән оялмайым, сөнки ул – уға ышанғандарҙың барыһына ла ҡотҡарыу алып килгән Алла ҡөҙрәте *(Римдарға 1:16)*.

Алданмағыҙ: Алланы алдаштырыу мөмкин түгел – кеше ни сәсһә, шуны ура *(Галаттарға 6:7)*.

Тәндә саҡта ҡылған яҡшы йә яман эштәребеҙгә ҡарата һәр кем үҙенә тейеште алыу өсөн, бөтәбеҙ ҙә Мәсихтең хөкөмө алдына килергә тейеш буласаҡбыҙ *(2 Коринҫостарға 5:10)*.

Шулай итеп, һәр беребеҙ үҙе тураһында Алла алдында хисап тотасаҡ *(Римдарға 14:12)*.

Бөгөн Алла тауышын ишетәһегеҙ икән, ҡаршылыҡ күрһәткән саҡтағылай йөрәгегеҙ тиҫкәре булмаһын *(Ғивриҙәргә 3:15)*.

Раббы – бер, иман – бер, һыуға сумдырылыу – бер *(Эфестарға 4:5)*.



## Яхъяға килгән асылыш

Беҙ йәшәгән ер йөҙө мәңгелек түгел. Изге Яҙманың күп урындарында алдан күреп ахыры заман тураһында әйтелгән һүҙҙәрҙе уҡырға мөмкин. Быға бигерәк тә Изге Яҙманың һуңғы киҫәгендә – Яхъяға килгән асылыш китабында ҙур әһәмиәт бирелә.

Яхъя – Ғайса Мәсихтең ун ике шәкертенең береһе. Риүәйәттәргә ярашлы, Яхъянан тыш бөтә илселәр ҙә ғазаплы үлем ҡабул итә. Яхъя ла Мәсих өсөн ғазап сигә – уны Грециялағы Патмос утрауына һөргөнгә ебәрәләр. Уға унда Раббы күренеп: «Мин – Альфа һәм Омега, Тәүге һәм Һуңғы; күргәндәреңдең барыһын да китап итеп яҙып, имандаштар берҙәмлектәренә ебәр», – ти *(Асылыш 1:8–10)*.

Асылыш китабында һуңғы көндәрҙә буласаҡ ваҡиғалар тураһында төрлө билдәләр ярҙамында һөйләнелә: ете берҙәмлеккә төбәп яҙылған хаттар, ете мисәт, дүрт һыбайлы, ете борғо, Алланың ете нәфрәт туҫтағы, Һармагеддон, тормош китабы, януар һаны – 666, Бабил – бөйөк фәхишә, ете башлы, ун мөгөҙлө януар, ун батша, мең йыллыҡ батшалыҡ, Яңы Йәрүсәлим, аҫылташтар, тормош ағасы...

Асылыш китабында аңлатып булмаҫтай серҙәр бик күп. Бер нәмә асыҡ аңлашыла: Ғайса Мәсих яңынан ергә киләсәк һәм ер йөҙөн хөкөм итәсәк. Уның икенсе тапҡыр килеүен беренсе мәсихселәр көткән, хәҙер беҙ көтәбеҙ.

Ете берҙәмлектең береһенә яҙылған хатты уҡыйыҡ. Был ете берҙәмлек Асылыш китабы яҙылған замандарҙа булған, әммә хаттар берҙәмлектәрҙең киләсәгенә лә ҡағыла. Бәлки, был хаттың ҡайһы бер һүҙҙәре һеҙҙең менән беҙгә лә ҡағылалыр.



## «Ишек шаҡып торам»

Асылыш китабында Яхъя былай тип яҙа:
Амин тип аталған Зат, тоғро һәм хаҡ Шаһит, Алла булдырған нәмәләрҙең Сығанағы, былай ти: «Эштәреңде беләм, һин һалҡын да, ҡайнар ҙа түгел, их, әгәр һин һалҡын йәки ҡайнар булһаң! Һин ҡайнар ҙа, һалҡын да түгел, ә йылымыс ҡына булғанлыҡтан, һине ауыҙымдан төкөрөп сығарам. Һин: „Мин – бай, күп байлыҡ тупланым, бер нәмәгә лә мохтажлығым юҡ", – тиһең. Әммә үҙеңдең ни тиклем бәхетһеҙ, меҫкен, фәҡир, һуҡыр һәм яланғас булыуыңды аңламайһың. Һиңә Минән байыр өсөн утта таҙартылған алтын, яланғаслығыңдың мәсхәрәһе асылмаһын өсөн кейергә аҡ кейем һәм күҙҙәрең күрһен өсөн һөртөргә күҙ майы һатып алырға кәңәш итәм. Мин Үҙем яратҡан һәр кемгә үпкә белдерәм һәм тәртипкә өйрәтәм. Шуға күрә сәмсел бул һәм тәүбә ит.
Бына Мин ишек төбөндә ишек шаҡып торам. Берәйһе тауышымды ишетеп ишек асһа, уның янына инермен, һәм беҙ бергә ашарбыҙ: Мин – уның менән, ә ул – Минең менән.
Мин еңеп Атам менән бергә Уның тәхетенә ултырған кеүек, еңгән кешегә Үҙемдең янымда тәхеттән урын бирермен. Рухтың берҙәмлектәргә әйткән һүҙҙәрен ҡолаҡтары барҙар ишетһен».

*АСЫЛЫШ 3:14–22*



## «Яңы күк һәм яңы ер»

Яхъя яҙған Асылыштың аҙаҡҡы бер нисә бүлегендә һуңғы хөкөм көнө, яңы күк һәм яңы ер шартлы рәүештә һүрәтләнә. Унан һуң мин ҙур аҡ тәхетте һәм унда Ултырыусыны күрҙем. Уның ҡарашынан ер менән күк ҡасты, уларға урын табылманы. Мин тәхет ҡаршыһында торған үлгәндәрҙе, бөйөк һәм ябай кешеләрҙе күрҙем. Китаптарҙы астылар. Тағы бер китап – тормош китабы – асылды. Китаптарҙа яҙылғанса, үлгәндәр үҙ эштәренә ҡарап хөкөм ителде. Диңгеҙ үҙендә булған үлгәндәрҙе бирҙе. Үлем һәм үлеләр донъяһы ла үҙендә булған үлгәндәрҙе бирҙе. Был үлгән кешеләрҙең һәр береһе үҙ эштәренә ҡарата хөкөм ителде.

Шунан һуң мин яңы күкте һәм яңы ерҙе күрҙем, элекке күк һәм элекке ер юҡҡа сыҡҡайны, дингеҙ ҙә бүтәнсә юҡ ине. Мин, кейәүгә өсөн әҙерләнеп биҙәнгән кәләштәй, күктән, Алланан төшөүсе изге ҡала – яңы Йәрүсәлимде күрҙем. Шул саҡ тәхеттән килгән көслө тауышты ишеттем. Ул былай тине: «Бына, Алланың кешеләр менән бергә йәшәү урыны. Ул кешеләр менән бергә йәшәйәсәк. Кешеләр Уның халҡы булыр һәм Алла Үҙе улар менән буласаҡ. Алла уларҙың күҙҙәрендәге һәр йәш бөртөгөн һөртәсәк. Үлем дә, ҡайғы-хәсрәт тә, һыҡтау ҙа, ауырыу ҙа башҡаса булмаясаҡ, сөнки элеккеләр үтте инде».

Тәхеттә Ултырыусы былай тине: «Бына, Мин бөтә нәмәне лә яңы итеп яһайым». Шунан миңә өндәште: «Яҙып ҡуй, сөнки был һүҙҙәр ышанысды һәм хаҡ». Ул миңә тағы былай тине: «Ғәмәлгә ашты! Мин – Альфа һәм Омега, Башы һәм Аҙағы. Мин һыуһағанға тере һыу шишмәһенән бушлай һыу эсерәм. Еңеүсе бының барыһына ла эйә буласаҡ һәм Мин уның Аллаһы буласаҡмын, ә ул Минең балам буласаҡ. Әммә ҡурҡаҡтарҙың да, имандан баш тартҡандарҙың да, әшәкеләрҙең дә, кеше үлтереүселәрҙең дә, фәхешлек ҡылыусыларҙың да, сихырсыларҙың да, ялған илаһтарға табыныусыларҙың да, бөтә ялғансыларҙың да өлөшө ут һәм көкөрт ялҡынланып торған күлдә булыр. Был – икенсе үлем».

Ҡала ҡояштың һәм айҙың яҡтыртыуына мохтаж түгел, сөнки Алланың шөһрәте уны яҡтырта һәм уның яҡтыртҡысы – Бәрәс.



Ҡалаға һис бер бысраҡлыҡ та, әшәкелек эшләүсе лә, ялғансы ла инмәҫ, унда исемдәре Бәрәстең тормош китабында яҙылғандар ғына инер.

*АСЫЛЫШ 20:11–13; 21:1–8, 23, 27*

## Изге Яҙманың һуңғы бите

Изге Яҙма, йәғни Библия, Алла Улы Ғайса Мәсихтең яңынан килеүе тураһында алдан күреп әйткән һүҙҙәр менән тамамлана. Яхъя яҙған Асылыш китабының йомғаҡлау өлөшөн – Изге Яҙманың һуңғы битен уҡыйыҡ:

Шунан фәрештә миңә былай тине: «Был китаптың пәйғәмбәрлек һүҙҙәрен мисәт аҫтына йәшермә, сөнки ваҡыт яҡын. Яманлыҡ ҡылыусы үҙ ҡылығын дауам итһен. Боҙоҡ кеше боҙоҡлоҡтар атҡарһын. Тәҡүә кешеләр хаҡ эштәрен, изгеләр изгелек эшләүен дауам итһен.

«Тиҙҙән Мин киләсәкмен. Һәр кемгә үҙ эштәренә ҡарап бирер өсөн әжерҙе Үҙем менән алып килермен.

Мин – Альфа һәм Омега, Тәүге һәм Һуңғы, Башы һәм Аҙағы. Үҙенең кейемен йыуғандар бәхетле. Уларҙың тормош ағасынан туҡланырға һәм ҡапҡалар аша ҡалаға инергә хоҡуҡтары булыр. Ә эттәр ҙә, сихырсылар ҙа, фәхешлек ҡылыусылар ҙа, кеше үлтереүселәр ҙә, ялған илаһтарға табыныусылар ҙа, барлыҡ ялғанлыҡ яратыусылар һәм уны ҡылыусылар ҙа тыш яҡта ҡаласаҡ.

Мин, Ғайса, былар хаҡында Алла берҙәмлектәренә шаһитлыҡ итер өсөн һеҙгә Үҙемдең фәрештәмде ебәрҙем. Мин – Дауыт тамырынан һәм нәҫеленән үҫеп сыҡҡан Һабаҡ, яҡты таң йондоҙомон».

Рух та, кәләш тә: «Кил!» – тиҙәр. Быларҙы ишетеүсе лә: «Кил!» – тип әйтһен. Һыуһаған да килһен, теләгән кеше тере һыуҙы бушлай алһын.

Был пәйғәмбәрлек китабының һүҙҙәрен ишетеүсегә шаһитлыҡ ҡылам: әгәр уларға берәйһе берәй нәмә өҫтәһә, Алла ул кешегә был китапта яҙылған бәлә-ҡазаларҙы өҫтәр. Әгәр берәйһе был пәйғәмбәрлек китабы һүҙҙәренең берәйһен төшөрөп ҡалдырһа, Алла был китапта яҙылған тормош ағасынан һәм изге ҡаланан ул кешенең өлөшөн төшөрөп ҡалдырыр.

Быларҙың барыһы тураһында шаһитлыҡ Биреүсе былай ти: «Эйе, тиҙҙән киләм!»

Амин.



Καὶ λέγει μοι, Μὴ σφραγίσῃς τοὺς λόγους τῆς προφητείας τοῦ βιβλίου τούτου, ὁ καιρὸς γὰρ ἐγγύς ἐστιν. ὁ ἀδικῶν ἀδικησάτω ἔτι καὶ ὁ ῥυπαρὸς ῥυπανθήτω ἔτι καὶ ὁ δίκαιος δικαιοσύνην ποιησάτω ἔτι, καὶ ὁ ἅγιος ἁγιασθήτω ἔτι.

Ἰδοὺ ἔρχομαι ταχύ, καὶ ὁ μισθός μου μετ' ἐμοῦ ἀποδοῦναι ἑκάστῳ ὡς τὸ ἔργον ἐστὶν αὐτοῦ. ἐγὼ τὸ Ἄλφα καὶ τὸ Ὦ, ὁ πρῶτος καὶ ὁ ἔσχατος, ἡ ἀρχὴ καὶ τὸ τέλος.

Μακάριοι οἱ πλύνοντες τὰς στολὰς αὐτῶν, ἵνα ἔσται ἡ ἐξουσία αὐτῶν ἐπὶ τὸ ξύλον τῆς ζωῆς καὶ τοῖς πυλῶσιν εἰσέλθωσιν εἰς τὴν πόλιν. ἔξω οἱ κύνες καὶ οἱ φάρμακοι καὶ οἱ πόρνοι καὶ οἱ φονεῖς καὶ οἱ εἰδωλολάτραι καὶ πᾶς φιλῶν καὶ ποιῶν ψεῦδος.

Ἐγὼ Ἰησοῦς ἔπεμψα τὸν ἄγγελόν μου μαρτυρῆσαι ὑμῖν ταῦτα ἐπὶ ταῖς ἐκκλησίαις. ἐγώ εἰμι ἡ ῥίζα καὶ τὸ γένος Δαυίδ, ὁ ἀστὴρ ὁ λαμπρὸς ὁ πρωϊνός.

Καὶ τὸ πνεῦμα καὶ ἡ νύμφη λέγουσιν, Ἔρχου. καὶ ὁ ἀκούων εἰπάτω, Ἔρχου. καὶ ὁ διψῶν ἐρχέσθω, ὁ θέλων λαβέτω ὕδωρ ζωῆς δωρεάν.

Μαρτυρῶ ἐγὼ παντὶ τῷ ἀκούοντι τοὺς λόγους τῆς προφητείας τοῦ βιβλίου τούτου· ἐάν τις ἐπιθῇ ἐπ' αὐτά, ἐπιθήσει ὁ θεὸς ἐπ' αὐτὸν τὰς πληγὰς τὰς γεγραμμένας ἐν τῷ βιβλίῳ τούτῳ,

καὶ ἐάν τις ἀφέλῃ ἀπὸ τῶν λόγων τοῦ βιβλίου τῆς προφητείας ταύτης, ἀφελεῖ ὁ θεὸς τὸ μέρος αὐτοῦ ἀπὸ τοῦ ξύλου τῆς ζωῆς καὶ ἐκ τῆς πόλεως τῆς ἁγίας τῶν γεγραμμένων ἐν τῷ βιβλίῳ τούτῳ.

Λέγει ὁ μαρτυρῶν ταῦτα, Ναί, ἔρχομαι ταχύ. Ἀμήν, ἔρχου κύριε Ἰησοῦ.

Ἡ χάρις τοῦ κυρίου Ἰησοῦ μετὰ πάντων.

Эйе, Раббы Ғайса, кил! Раббыбыҙ Ғайсаның мәрхәмәте барыһы менән булһын.

*АСЫЛЫШ 22:10–21*

# Географик карталар һәм Изге Яҙмала бирелгән урындарҙан фотоһүрәттәр


Боронғо донъя
Кара диңгеҙ
Каспий диңгеҙе
Эгей диңгеҙе
Урта диңгеҙ
ХИТТИҘӘР
АШШУР
КИТТИМ
(КИПР)
Харан
Алеппо
Угарит
Хамаҫ
Библос
Сидон
Тир
Дор
СҮРИӘ
Дамаск
Хасор
Шәхәм
Йәрүсәлим
Хеврон
Газа
Беер-Шәвәғ
Ҡәнғән
Үле диңгеҙ
Ниневе
Тигр йылғаһы
Евфрат йылғаһы
МЕСОПОТАМИЯ (АРАМ-НАҺАРАИМ)
Экбатана
Ашшур
Мари
БАБИЛ ЕРЕ
Бабил
Шушан
ШУМЕР
Ур
Фарсы култығы
ҒӘРӘП СҮЛЛЕГЕ
МИДЙӘН
МЫСЫР
ПУТ
Нил йылғаһы
Ҡамышлы диңгеҙ
Ибраһимдың сәйәхәте
Ҡайһы бер боронғо дәүләттәр йөгөнтө
яһаған даирәләр (б.э.т. 1350 йыл)
Мысыр
Хитти империяһы
Бабил империяһы
0
125
250
500
Километрҙар


Ғайса Мәсих
дәүерендә Фәләстин
Дамаск
Сидон
ФОЙНИКӘ
Сарефаҫ
Хермон тауы
Тир
Филиппус Ҡайсареяһы
ГАУЛАНИТИС
ГАЛИЛЕЯ
Хоразин
Капернаум
Бейт-Сайда
ТРАХОНИТИС
Кана
Галилея
күле
Кармәл тауы
Тибериас
Назара
Гадара
Бөйөк (Урта) диңгеҙ
Скифополис
УН ҠАЛА
Ҡайсарея
САМАРИЯ
Геризим
тауы
Сүхәр
Гераса
Иордан йылғаһы
Яфо
Аримаҫая
Эммаус
Йерихо
ПЕРЕЯ
Явне
Ашдод
Йәрүсәлим
Бейт-Ләхәм
Ҡумран
Медева
Ашҡылон
ЙӘҺҮҘИӘ
Махайрус
Хеврон
Газа
Тоҙло
(Үле)
диңгеҙ
Масада
Рафия
Беер-Шәвәғ
Ун ҡала
Филиппус идараһындағы өлкә
Һируд Антипас
идараһындағы өлкә
Понтиос Пилатос
идараһындағы өлкә
НАБАТЕЯ
0
20
40
60
80
100
Километрҙар

# Ғайса Мәсих дәүерендә Йәрүсәлим



# Ғайса Мәсих дәүерендә Йәрүсәлимдәге Алла йортоноң планы





Ғайса Мәсих
ГАЛЛИЯ
ИСПАНИЯ
ИТАЛИЯ
Рим
М
СИЦИЛИЯ
Карфаген
МАУРИТАНИЯ
Урта диңгеҙ
АФРИКА
0
200
400
800
Километрҙар


дәүерендә Рим империяһы
Рим империяһы
Каспий диңгеҙе
Ҡара диңгеҙ
ФРАКИЯ
ГАЛАТИЯ
АКЕДОНИЯ
Византия
КЕСЕ АЗИЯ
Тарсос
Антиохия
ГРЕЦИЯ
Эфес
КИПР
Дамаск
Тир
ЙӘҺҮҘИӘ
КРИТ
Йәрүсәлим
Курене
Искәндәриә
Нил йылғаһы


ГАЛАТИЯ
Писидиә Антиохияһы
Иконион
КАППАДОКИЯ
Лустра
Перге
Дербе
АНТИОХИЯ
Тарсос
КРИТ
Антиохия
Илсе Паулустың беренсе эш сәфәре
КИПР
Саламис
Паф
Урта диңгез
0
125
250
500
км
Йәрүсәлим


МАКЕДОНИЯ
Филиппой
Берояр
Тессалонике
Амфиполис
Троас
Коринфос
Афина
Эфес
Писидиә Антиохияһы
Иконион
КАППАДОКИЯ
Лустра
АНТИОХИЯ
Перге
Дербе
Тарсос
КРИТ
Антиохия
Илсе Паулустың икенсе эш сәфәре
КИПР
Паф
Саламис
Урта диңгез
0
125
250
500
км
Кайсарея
Самария
Йәрүсәлим



МАКЕДОНИЯ
Амфиполис
Филиппой
Бероя
Неаполис
Тессалонике
Аполлония
Троас
Ассос
АСИЯ
АХАЯ
Митулене
Пергам
Смурна
Коринҫос
Писидиә
Антиохияһы
Эфес
Иконион
Милетос
Лустра
Дербе
Родос
Патара
Тарсос
СҮРИӘ
Антиохия
Илсе Паулустың
өсөнсө эш сәфәре
Урта диңгеҙ
Тир
0
125
250
500
км
Птолемаис
Ҡайсарея
Йәрүсәлим




Рим
Өс ҡунаҡхана
Потиолой
ИТАЛИЯ
ЛУКИЯ
СҮРИӘ
Книдос
Мура
Регион
СИЦИЛИЯ
РОДОС
КИПР
Сүрәкүсәй
Сидон
КРИТ
МАЛЬТА
Ҡайсарея
Яҡшы гавандәр
Йәрүсәлим
Илсе Паулустың дүртенсе
эш сәфәре (Римға сәйәхәт)
Урта диңгеҙ
0
125
250
500
км



ЙӘРҮСӘЛИМ. ЗӘЙТҮН ТАУЫНАН КҮРЕНЕШ (Көнсығыштан)
*Сөләймән төҙөткән Алла йорто торған урын. Хәҙер бында Омар мәсете урынлашҡан.*



ЙӘРҮСӘЛИМ ҺӘМ ЗӘЙТҮН ТАУЫ
*Ғайса, Йәрүсәлимгә яҡынайғас, ҡаланы күреп, уның яҙмышы өсөн иланы (Лукас 19:41).*



СИНАЙ ТАУЫ

*Раббы Синай тауының түбәһенә төштө лә Мусаны Үҙенә, тау башына, саҡырҙы. Муса тауға артылды (Сығыу 19:20).*



ТОҘЛО (ҮЛЕ) ДИҢГЕҘ

*Һуңғы биш батша әле Тоҙло диңгеҙ булған Сиддим үҙәнендә көс тупланы (Башланмыш 14:3).*



ТАВОР ТАУЫ

*Һин бар ҡылдың төньяҡ менән көньяҡты; Тавор менән Хермон тауҙары Һинең исемеңә рәхмәт уҡый (Зәбүр 88:13).*



НАЗАРА

*Әлисабеттың ауырға ҡалыуына алтынсы ай киткәс, Алла Ябраил фәрештәне Галилея өлкәһендәге Назара ҡалаһына, Мәрйәм исемле ҡыҙ янына ебәрҙе. Мәрйәм Дауыт нәҫеленән булған Йософ атлы ир менән йәрәшелгәйне (Лукас 1:26-27).*



БЕЙТ-ЛӘХӘМ
*«Эй Йәһүҙәләге Бейт-Ләхәм, һин Йәһүҙә хакимдары араһында һис тә иң бәләкәсе түгел, сөнки һинән Юлбашсы сығасаҡ. Ул Минең халҡым Исраилдың Көтөүсеһе буласаҡ» (Маҫҫайос 2:6).*



ИОРДАН
*Шул мәлдә, Яхъя тарафынан һыуға сумдырылырға тип, Ғайса Галилеянан Иордан йылғаһына килде (Маҫҫайос 3:13).*



КАПЕРНАУМ

*Назаранан китеп, Ул Галилея күле буйындағы Зевулун һәм Нафтали ерҙәренә ҡараған Капернаум ҡалаһына барып урынлашты (Матфей 4:13).*



ГАЛИЛЕЯЛАҒЫ КАНА ҠАЛАҺЫ

*Ике көндән һуң Галилея өлкәһенең Кана ҡалаһында туй булды. Унда Ғайсаның әсәһе лә ҡатнашты (Яхъя 2:1).*



ЙӘҺҮҘИӘНӘН САМАРИЯҒА ЮЛ
*Ғайса... Йәһүҙиәне ҡалдырып, ҡабат Галилеяға китте. Уға Самария өлкәһе аша уҙырға тура килде (Яхъя 4:3-4).*



ГЕННИСАРЕТ КҮЛЕ (ГАЛИЛЕЯ КҮЛЕ)
*Бер ваҡыт, Геннисарет күле буйында, Алла һүҙен тыңларға тип йыйылған халыҡ Ғайсаны төрлө яҡлап ҡыҫырыҡлай башланы (Лукас 5:1).*



БЕЙТ-ӘНИӘ

*Ҡотҡарылыу байрамына алты көн ҡалғас, Ғайса Бейт-Әниәгә килде. Был Ғайса үлемдән терелткән Әлғазар йәшәгән ауыл ине (Яхъя 12:1).*



РИМ КОЛИЗЕЯҺЫ. КҮП МӘСИХСЕЛӘР ҒАЗАПЛЫ ҮЛЕМ ҠАБУЛ ИТКӘН УРЫН

*«Унан һуң мин... Ғайса хаҡында шаһитлыҡ иткәндәре һәм Алла һүҙе өсөн баштары киҫелгән, януарға һәм уның һынына табынмаған, маңлайҙарына һәм ҡулдарына уның тамғаһын һалдырмаған кешеләрҙең йәндәрен күрҙем. Улар үленән терелеп торҙолар ҙа мең йыл буйы Мәсих менән бергә батшалыҡ иттеләр» (Асылыш 20:4).*

# Китаптарҙың тулы һәм ҡыҫҡартылған исемдәре

| ИҪКЕ ҒӘҺЕД | |
|---|---|
| Башланмыш | Башланмыш |
| Сығыу | Сығыу |
| Левиҙәр | Левиҙәр |
| Иҫәп алыу | Иҫәп |
| Ҡабатлап әйтелгән ҡанун | Ҡанун |
| Нун улы Йушағ китабы | Йушағ |
| Хакимдар | Хакимдар |
| Рут китабы | Рут |
| Батшалар. Беренсе китап | I Батшалар |
| Батшалар. Икенсе китап | II Батшалар |
| Батшалар. Өсөнсө китап | III Батшалар |
| Батшалар. Дүртенсе китап | IV Батшалар |
| Йылъяҙмалар. Беренсе китап | I Йылъяҙма |
| Йылъяҙмалар. Икенсе китап | II Йылъяҙма |
| Ғөзәйер китабы | Ғөзәйер |
| Нөхәмияһ китабы | Нөхәмияһ |
| Эстер китабы | Эстер |
| Әйүп китабы | Әйүп |
| Зәбүр | Зәбүр |
| Сөләймәндең хикмәттәре | Хикмәттәр |
| Вәғәзсе | Вәғәзсе |
| Йырҙар йыры | Йырҙар йыры |
| Ишағыяһ пәйғәмбәр китабы | Ишағыяһ |
| Йермеяһ пәйғәмбәр китабы | Йермеяһ |
| Һыҡтау | Һыҡтау |
| Зөлкифел пәйғәмбәр китабы | Зөлкифел |
| Даниил пәйғәмбәр китабы | Даниил |
| Һошеяғ пәйғәмбәр китабы | Һошеяғ |
| Йоил пәйғәмбәр китабы | Йоил |
| Ғамос пәйғәмбәр китабы | Ғамос |
| Ғовадъяһ пәйғәмбәр китабы | Ғовадъяһ |
| Юныс пәйғәмбәр китабы | Юныс |
| Миха пәйғәмбәр китабы | Миха |
| Нахум пәйғәмбәр китабы | Нахум |
| Хаваҡкуҡ пәйғәмбәр китабы | Хаваҡкуҡ |

| | |
|---|---|
| Сефанъяһ пәйғәмбәр китабы | Сефанъяһ |
| Хаггай пәйғәмбәр китабы | Хаггай |
| Зәкәрьяһ пәйғәмбәр китабы | Зәкәрьяһ |
| Малахи пәйғәмбәр китабы | Малахи |
| **ЯҢЫ ҒӘҺЕД** | |
| Маҫҫайос бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәр | Маҫҫайос |
| Маркус бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәр | Маркус |
| Лукас бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәр | Лукас |
| Яхъя бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәр | Яхъя |
| Илселәрҙең ғәмәлдәре | Ғәмәлдәр |
| Яҡуптың хаты | Яҡуп |
| Петрустың беренсе хаты | I Петрус |
| Петрустың икенсе хаты | II Петрус |
| Яхъяның беренсе хаты | I Яхъя |
| Яхъяның икенсе хаты | II Яхъя |
| Яхъяның өсөнсө хаты | III Яхъя |
| Йәһүҙәнең хаты | Йәһүҙә |
| Паулустан римдарға хат | Римдарға |
| Паулустан коринҫостарға беренсе хат | I Коринҫостарға |
| Паулустан коринҫостарға икенсе хат | II Коринҫостарға |
| Паулустан галаттарға хат | Галаттарға |
| Паулустан эфестарға хат | Эфестарға |
| Паулустан филиппойҙарға хат | Филиппойҙарға |
| Паулустан колоссайҙарға хат | Колоссайҙарға |
| Паулустан тессалоникеларға беренсе хат | I Тессалоникеларға |
| Паулустан тессалоникеларға икенсе хат | II Тессалоникеларға |
| Паулустан Тимоҫеусҡа беренсе хат | I Тимоҫеусҡа |
| Паулустан Тимоҫеусҡа икенсе хат | II Тимоҫеусҡа |
| Паулустан Титусҡа хат | Титусҡа |
| Паулустан Филемонға хат | Филемонға |
| Ғивриҙәргә хат | Ғивриҙәргә |
| Яхъяға килгән асылыш | Асылыш |

# Йөкмәткеһе

Донъяның яратылыуы . . . 8
Беренсе кешеләрҙең яратылыуы . . . 12
Әҙәм менән Һауаның ожмахтан ҡыуылыуы . . . 14
Ҡабил менән Һабил . . . 16
Алланың Нухҡа көплө кәмә яһарға ҡушыуы . . . 18
Туфан ҡалҡыуы . . . 20
Туфандың баҫылыуы . . . 22
Йәйғор – төҙөлгән килешеү билдәһе . . . 24
Бабил манараһы . . . 26
Ибраһим . . . 28
Ибраһим менән Лут . . . 30
Алланың Ибраһимға вәғәҙә биреүе . . . 32
Алла фәрештәләренең Ибраһим янына килеүе . . . 34
Содом һәм Ғамора ҡалаларының һәләкәте . . . 36
Ибраһимдың Исхаҡты ҡорбанға килтереүе . . . 38
Рабиға . . . 40
Исхаҡ менән Рабиға . . . 42
Яҡуптың атай фатихаһын алыуы . . . 44
Яҡуптың төшө . . . 46
Яҡуптың Рәхиләне осратыуы . . . 48
Яҡуптың Алла менән көрәшеүе . . . 50
Яҡуп менән Ғаяздың ярашыуы . . . 52
Йософ – Яҡуптың яратҡан улы . . . 54
Йософтоң төштәре . . . 56
Ағаларының Йософто ҡоллоҡҡа һатыуы . . . 58
Йософ – һарай түрәһе йортонда идарасы . . . 60
Йософ зинданда . . . 62
Йософтоң фирғәүен төштәрен юрауы . . . 64
Йософ – Мысыр етәксеһе . . . 66
Ете йыл аслыҡ . . . 68
Йософтоң ағаларына үҙен белдереүе . . . 70
Йософтоң атаһы менән осрашыуы . . . 72
Исраил халҡының Мысырҙа ҡоллоҡ кисереүе . . . 74
Кәрзиндәге сабый . . . 76
Мусаны фирғәүендең ҡыҙы табып алыуы . . . 78
Янып торған сәнскәкле ҡыуаҡ . . . 80
Муса менән Һарун фирғәүен янында . . . 82
Ҡотҡарылыу байрамы бәрәсенең ҡаны . . . 84
Раббының исраилдарҙы Мысырҙан алып сығыуы . . . 86
Исраилдарҙың Ҡамышлы диңгеҙ аша сығыуы . . . 88
Мысыр ғәскәренең Ҡамышлы
диңгеҙҙә һәләк булыуы . . . 90
Күктән яуған икмәк . . . 92
Мусаның ҡаянан һыу сығарыуы . . . 94

Ун бойороҡ . . . 96
Алтын башмаҡ . . . 98
Осрашыу сатыры . . . 100
Изге сатыр төҙөр өсөн килтерелгән ҡорбандар . . . 102
Осрашыу сатырын изгеләндереү . . . 104
Күҙәтселәрҙең Ҡәнғәнгә килеүе . . . 106
Ҡорах, Даҫан һәм Авирамдың язаға тарттырылыуы . . . 108
Баҡыр йылан . . . 110
Билғам пәйғәмбәр һәм фәрештә . . . 112
Нун улы Йушағ – Мусаның алмашсыһы . . . 114
Раббыны хәтерҙән сығармаҫҡа тигән нәҙер . . . 116
Ҡорбан килтереү . . . 118
Мусаның вафаты . . . 120
Рахавтың шымсыларҙы ҡотҡарыуы . . . 122
Иордан аша сығыу . . . 124
Йерихоны яулау . . . 126
Әмөриҙәр менән алышыу . . . 128
Исраил хакимдары . . . 130
Гидғон . . . 132
Ҡеүәтле Шимшон . . . 134
Шимшондың һәләк булыуы . . . 136
Рут менән Ноғоми . . . 138
Рут – Боғаз баҫыуында . . . 140
Ханнаның доғаһы . . . 142
Ханна Шемуилды Аллаға бағышлай . . . 144
Шемуилды саҡырған тауыш . . . 146
Ғәли ҡаһиндың үлеме . . . 148
Шаул – Исраил батшаһы . . . 150
Көтөүсе Дауыт – буласаҡ батша . . . 152
Дауыт менән Голиаҫ . . . 154
Йонаҫан . . . 156
Дауыт йоҡлап ятҡан Шаул алдында . . . 158
Дауыттың Исраилда батшалыҡ итә башлауы . . . 160
Килешеү һандығы – Йәрүсәлимдә . . . 162
Дауыттың мәҙхиәһе . . . 164
Наҫан пәйғәмбәр Дауыт ҡаршыһында . . . 166
Авшаломдың үлеме . . . 168
Зирәк аҡыллы Сөләймән батша . . . 170
Алла ҡорамы . . . 172
Сөләймәндең Алла ҡорамында доға ҡылыуы . . . 174
Сөләймән менән Шева батшабикәһе . . . 176
Сөләймәндең Алланан ситләшеүе . . . 178
Батшалыҡтың бүленеүе . . . 180
Йәһүҙә – Көньяҡ батшалыҡ . . . 182
Исраил – Төньяҡ батшалыҡ . . . 184
Ильяс пәйғәмбәр . . . 186

Ильястың тол ҡатынға ярҙам итеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 188
Ильяс һәм Бәғел пәйғәмбәрҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
Һыу һәм май менән ҡылынған мөғжизә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 192
Сүриә ғәскәре башлығы Нағаман . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
Нағамандың һауығыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 196
Баҫҡынсыларҙың күҙҙән яҙыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 198
Йоаштың тәхеткә ултырыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 200
Ғуззияһ батшаның маһайып китеүе һәм язаға тарттырылыуы . . . . . . . 202
Исраилдың Алланан баш тартыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 204
Ашшурҙың Исраилды баҫып алыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 206
Самария халҡы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 208
Хизкияһ батшаның доғаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 210
Йошияһ батшаның анты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 212
Йермеяһ пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 214
Йермеяһтың пәйғәмбәрлек һүҙҙәрен Барухтың яҙып алыуы . . . . . . . . . 216
Йеһояҡим батшаның төргәк китапты яндырыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 218
Бабилдың Йәһүҙәне яулап алыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 220
Йәрүсәлимдең һәм Алла ҡорамының ҡыйратылыуы . . . . . . . . . . . . . . . 222
Даниил һәм уның өс дуҫы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 224
Алтын һәйкәл һәм өс ҡыйыу ир . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 226
Даниилдың аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыуы . . . . . . . . . 228
Даниилдың доғаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 230
Даниил арыҫландар соҡоронда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 232
Йәһүҙиҙәрҙең әсирлектән ҡайтыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 234
Эстер батшабикә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 236
Нөхәмияһтың Йәрүсәлим диуарын төҙөүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
Халыҡтың Аллаға мөрәжәғәт итеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 242
Әйүптең ғазап сигеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 244
Әйүп һынауҙарҙан һуң . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 246
Зәбүр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 248
Зәбүр шиғырҙарын иҫтә ҡалдырайыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 250
Хикмәттәр китабы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 252
Вәғәзсе китабы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 254
Пәйғәмбәрҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 256
Ишағыяһ пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 258
«Ҡылыстарын һуҡа итеп ҡойорҙар...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
«Яуызлыҡ ҡылмаясаҡтар...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 262
Һошеяғ пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 264
Йоил пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 266
Юныс пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 268
Миха пәйғәмбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 270
Мәсихтең килеүе тураһында пәйғәмбәрҙәрҙең һүҙҙәре . . . . . . . . . . . . . 272
Фәрештәнең Зәкәрьяһҡа һөйөнөслө хәбәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 276
Сумдырыусы Яхъяның тыуыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 278
Ғайсаның тыуыуы тураһында һөйөнөслө хәбәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 280
Ғайса Мәсихтең тыуыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 282

Фәрештәләрҙең көтөүселәргә Ғайса Мәсихтең тыуыуы
тураһындағы хәбәрҙе еткереүе ........ 284
Көтөүселәр Ғайса янында ........ 286
Аллаға тоғро Шимғон ........ 288
Аҡыл эйәләренең сәждә ҡылырға килеүе ........ 290
Аҡыл эйәләренең бүләге. Сабыйҙарҙы үлтереү ........ 292
Мысырға ҡасыу ........ 294
Ғайсаның Назарала үткән бала сағы ........ 296
Ғайса Алла йортонда ........ 298
Яхъяның вәғәз әйтеүе һәм һыуға сумдырыуы ........ 300
Ғайса Мәсихтең һыуға сумдырылыуы ........ 302
Ғайсаның сүллектә һынау үтеүе ........ 304
Ғайса Мәсихтең ун ике шәкерте ........ 306
Ғайса ҡылған беренсе мөғжизә ........ 308
Ғайсаның Алла йортонан һатыусыларҙы ҡыуып сығарыуы ........ 310
Ғайса менән Никодемустың әңгәмәһе ........ 312
Ғайса һәм Самария ҡатыны ........ 314
Мул табыш ........ 316
Фалиж һуҡҡан кешенең һауығыуы ........ 318
Тауҙағы вәғәз: бәхет ҡанундары ........ 320
Тауҙағы вәғәз: Муса ҡануны тураһында ........ 322
Тауҙағы вәғәз: мөхәббәт һәм доға ........ 324
Күктәге атабыҙ ........ 325
Тауҙағы вәғәз: Аллаға мөнәсәбәт тураһында ........ 326
Тауҙағы вәғәз: кешеләргә мөнәсәбәт тураһында ........ 328
Алтын ҡағиҙә ........ 329
Тауҙағы вәғәз: хәҡиҡәт һәм ялған ........ 330
Тол ҡатындың үлгән улын терелтеүе ........ 332
Сәсеүсе хаҡында ҡисса ........ 334
Күктәр Батшалығы хаҡында алты ҡисса ........ 336
Ғайсаның күлдәге дауылды тынысландырыуы ........ 338
Яйрос ҡыҙының терелеүе ........ 340
Ғайсаның биш мең кешене туйҙырыуы ........ 342
Ғайсаның һыу өҫтөнән атлап килеүе ........ 344
Ғайса Мәсихтең йөҙ-ҡиәфәте үҙгәреүе ........ 346
Бар нәмәне кисерә торған мөхәббәт ........ 348
Изге күңелле Самария кешеһе тураһында ҡисса ........ 350
Ғайса – яҡшы Көтөүсе ........ 352
Апалы-һеңлеле Марта менән Мәрйәм ........ 354
Аҡылһыҙ бай хаҡында ҡисса ........ 356
Бай һәм Әлғазар хаҡында ҡисса ........ 358
Юғалған һарыҡ хаҡында ҡисса ........ 360
Юлдан яҙған ул тураһында ҡисса ........ 362
Махау сирле ун кеше ........ 364
Фарисей һәм һалым йыйыусы тураһында ҡисса ........ 366
Ғайсаның балаларға фатиха биреүе ........ 368

Һуҡыр әҙәмдең һауығыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 370
Зәкхәйостың тура юлға баҫыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 372
Ғайсаның Әлғазарҙы терелтеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 374
Гонаһтары күп кисерелгән кеше ныҒыраҡ ярата . . . . . . . . . . . 376
Ғайсаның Йәрүсәлимгә инеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 378
Ғайсаның Йәрүсәлим өсөн илауы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 380
Йөҙөм үҫтереүселәр хаҡында ҡисса . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 382
«Саҡырылғандар күп, ләкин һайлап алырлыҡтары аҙ» . . . . . . . . 384
Ҡайсарҙыҡын – ҡайсарға, Алланыҡын – Аллаға . . . . . . . . . . . 386
«Беренсе һәм иң мөһим бойороҡ» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 388
Ярлы тол ҡатын һалған ике баҡыр тин . . . . . . . . . . . . . . . . . . 390
Ғайсаның киләсәк тураһында әйткән һүҙҙәре . . . . . . . . . . . . . 392
Ун ҡыҙ тураһында ҡисса . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 394
Ғайса – ысын йөҙөм ағасы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 396
Ҡотҡарылыу байрамы ашы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 398
Киске аш ваҡытындағы әңгәмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 400
Геҫшемани баҡсаһында ҡылынған доға . . . . . . . . . . . . . . . . . 402
Ғайсаны ҡулға алыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 404
Ғайсаны хөкөм итеү. Петрустың ваз кисеүе . . . . . . . . . . . . . . 406
Ғайса Пилатос алдында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 408
«Үҙенең арҡысағын күтәреп...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 410
Ғайсаны арҡысаҡҡа ҡаҙаҡлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 412
Ғайсаны ҡәбергә һалыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 414
Ғайсаның терелеп тороуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 416
Ғайса тере! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 418
Ғайсаның Эммаусҡа китеп барған
шәкерттәренә күренеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 420
Ғайсаның бүтән шәкерттәргә лә күренеүе . . . . . . . . . . . . . . . 422
«Мине яратаһыңмы?» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 424
Ғайса Мәсихтең күккә ашыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 426
«Юл, хәҡиҡәт һәм тормош» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 428
Илселәрҙең ғәмәлдәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 430
Изге Рухтың иңеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 432
Петрус һөйләгән вәғәз . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 434
Аҡһаҡ әҙәмде һауыҡтырыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 436
Петрус менән Яхъяның ҡулға алыныуы . . . . . . . . . . . . . . . . . 438
Иман хаҡына беренселәрҙән булып ғазап
сигеүсе Стефанустың үлеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 440
Филиппус һәм хәбәши түрәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 442
Мәсихселәрҙе эҙәрлекләүсе Шаул . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 444
Раббының Шаулға күренеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 446
Шаулдың Дамаскта ҡасыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 448
Яфо ҡалаһында Табиҫаның үленән терелеүе . . . . . . . . . . . . . . 450
Йөҙ башы Корнелиус . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 452
Фәрештәнең Петрусты төрмәнән азат итеүе . . . . . . . . . . . . . . 454
Илсе Паулустың беренсе эш сәфәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 456

Паулустың икенсе эш сәфәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 458
Паулус менән Силастың төрмәлә ултырыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 460
Паулус Афинала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 462
Паулустың өсөнсө эш сәфәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 464
Сихырсылыҡ гонаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 466
Илсе Паулустың Эфестағы берҙәмлек өлкәндәре менән хушлашыуы . . .468
Паулус идарасы Фестус алдында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 470
Паулустың Римға ебәрелеүе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 472
Паулус Рим ҡалаһында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 474
Илселәрҙең хаттары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 476
Илселәрҙең хаттары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 478
Яҡуптың хаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 480
Илсе Петрустың ике хаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 482
Илсе Яхъяның өс хаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 484
Йәһүҙәнең хаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 486
Илсе Паулустың хаттары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 488
Мөхәббәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 489
«Гонаһлы тәбиғәттең ғәмәлдәре» һәм «Рух емеше» . . . . . . . . . . . . . . 490
Тимоҫеус исемле егет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 492
«Раббы – бер, иман – бер, һыуға сумдырылыу – бер...»
Хаттарҙан юлдар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 494
Яхъяға килгән асылыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 496
«Ишек шаҡып торам» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 498
«Яңы күк һәм яңы ер» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 500
Изге Яҙманың һуңғы бите . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 502

*Изге Яҙма сәхифәләре*
*Библия для детей на башкирском языке*
*Children's Bible in the Bashkir language (ISO: bak)*

Институт перевода Библии
www.ibt.org.ru; ibt_inform@ibt.org.ru
101000 Россия, Москва,
Главпочтамт, а/я 360

Подписано в печать 20.08.2025
Формат 60×84 1/16. Печать офсетная. Усл. печ. л. 30,69.
Тираж 700 экз. Заказ № 11637

Отпечатано в ООО “Тверская фабрика печати”
170006 Тверь, Беляковский переулок, 46
т. (8482) 235-32-13